БАШ?ОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАЗЫ ДЫУАН РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ
МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТ Д)Й)М БЕЛЕМ БИРЕ! УЧРЕЖДЕНИЕЗЫ ӘБДРӘШИТ АУЫЛЫ
«БАШЛАН;ЫС М2КТ2БЕ-БАЛАЛАР БА?САN№Ы»

Ҡабул ителг2н:
педагогик Совет
протоколы № 1 30.08.21й.

Раçланған:
Бойоро7 № 40 31.08.21й

.

Килешелде:
ата-әсәләр йыйылышында
протоколы № 1 30.08.21й.

# Мәктәпкәсә дөйөм белем биреү буйынса программа

**2021 йыл**

## Йөкмәтке

Инеш һүҙ.....3
**Билдәләнгән маҡсаттар бүлеге.....5**
Программаның маҡсаттары һәм бурыстары.....5
Программаны үҙләштереүбуйынса көтөлгән һөҙөмтәләр.....6
Белем – тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған өлөш һәм милли – төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар.....8
**Ойоштороу бүлеге**.....12
Йәшәү һәм тәрбиәләү шарттарын ойоштороу.....12
Программаны тормошҡа ашырыу шарттары.....26
Психологик һәм педагогик эштең йөкмәткеһе.....33
Мәҙәни – күңел асыу эшмәккәрлеге.....33
Ғаилә һәм балалар баҡсаһы араһындағы үҙ – ара бәйләнеш.....36
Белем – тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған өлөш һәм милли – төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар.....39
**Йөкмәткеле бүлек. Сабый һәм иртә йәштәге балаларҙы аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиәләү.....43**
1 йәштән 2 йәшкә тиклемге балаларға белем биреү эшмәкәрлеге йөкмәткеһе (иртә йәштәге каскәйҙәрҙең беренсе төркөмө).....43
2 йәштән 3 йәшкә тиклемге балаларға белем биреү эшмәкәрлеге йөкмәткеһе (иртә йәштәге балалар төркөмө).....53
**Йөкмәткеле бүлек. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиәләү.....64**
3 йәштән 4 йәшкә тиклемге балаларға белем биреү эшмәкәрлеге йөкмәткеһе(кескәйҙәр төркөмө).....64
4 йәштән 5 йәшкә тиклемге балаларға белем биреү эшмәкәрлеге йөкмәткеһе(уртансылар төркөмө).....71
5 йәштән 6 йәшкә тиклемге балаларға белем биреү эшмәкәрлеге йөкмәткеһе(өлкәндәр төркөмө).....94
6 йәштән 7 йәшкә тиклемге балаларға белем биреү эшмәкәрлеге йөкмәткеһе(мәктәпкәсә йәштәге балалар төркөмө).....114

**Йөкмәткеле бүлек. Белем – тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған өлөш һәм милли – төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар..........................................................................................................133**
Ҡыҫҡаса презентациялау.......................................................................................139

## Инеш һүҙ

Тәҡдим ителгән өлгө программа мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларында Федераль дәүләт мәктәпкәсә белем биреү стандарты (артабан - ФДМББС) талаптарына ярашлы балаларҙы аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиәләү процесы башҡорт телендә ойошторолған балалар баҡсаһында Төп мәктәпкәсә белем биреү программаһын үҙ-аллы төҙөүҙә ярҙам итеү маҡсатында төҙөлдө.

В.В. Давыдовтың, В.А. Петровскийҙың һәм башҡаларҙың заман талаптарын сағылдырған «Мәктәпкәсә белем биреү фәнни концепцияһы»нда баласаҡ осор – кеше тормошонда үтә лә мөһим урын биләгән дәүер икәнлеге билдәләнә. Ошо концепцияға таянып, баланың шәхес булып формалашыуында аң-белемдең үҫтереүсе көс булыуы программала төп урын ала һәм педагог ошо йүнәлештә баланың шәхси һәм йәш үҙенсәлектәренән сығып тәрбиә һәм аң-белемгә өйрәтеү эшен ойоштора.

Программа төп дидактик принциптарҙың береһе булған үҫтереүсе уҡытыу принцибына һәм Л.С.Выготскийҙың «дөрөҫ ойошторолған аң-белем биреү - баланың үҫешен етәкләй» тигән фекеренә таянып ҡоролған. В.В.Давыдов фекеренсә, тәрбиә һәм психик яҡтан үҫеш бер-береһенән айырылғыһыҙ ике процесс, ләкин шулай ҙа “тәрбиә - бала үҫешенең бөтә яҡтан да кәрәкле булған формаһы” тип һанала. Шулай итеп, программала иң беренсе урында баланың шәхес булараҡ үҫеше күҙ уңында тора.

Программаның йөкмәткеһетәрбиә һәм аң-белемгә өйрәтеүҙе мәҙәнилек (культуросообразность) принцибына таяна: тәрбиә эше халыҡтың тарихы, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, традициялары нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Аң-белемгә өйрәтеү барышында баланы кешелектең донъяуи рухи һәм әхлаҡи үҙкиммәттәре менән таныштырыу, улар тураһында ябай ғына төшөнсәләр биреү, көндәлек йәшәйештә уларҙы күҙәтергә, яҡшыны насарҙан, матурлыҡты йәмһеҙлектән, дөрөҫлөктө алдаҡсылыҡтан һ.б. айырырға, уларға ҡарата үҙ фекерен билдәләп, асыҡлап, аңлата белергә күнектереү тора. Шулар нигеҙендә балала шәхси холоҡ-фиғел һыҙаттарын формалаштырыу ҡарала.

Программала баланың белем кимәленә аныҡ талаптар ҡуйылмай һәм шул уҡ ваҡытта айырым предметты өйрәтеүгә лә өҫтөнлөк бирелмәй. Ғалимдар А.Н.Леонтьев,А.В.Запорожец, Д.Б. Эльконин, һ.б. ғилми хеҙмәттәрендә иҫбат ителгән тәғлимәт - баласаҡта уйын баланың төп эшмәкәрлеге - программала төп урынды ала.

Баланы шәхес итеп үҫтереүгәпрограммала төп урын бирелә. Балала үҙ-үҙенә ышаныу, тормошҡа ҡарата әүҙем ҡарашлы булыу, тормош ҡыйынлыҡтарын еңел сисергә ынтылырға тырышыу, һәр нәмәгә ҡарата үҙ фекерле булыу һәм уны яҡлайбелеү һәләтен тәрбиәләү тора.

Программа йөкмәткеһендәтыуған илгә ҡарата һөйөү, уның үткәне, бөгөнгө ҡаҙаныштары менән ғорурланыу тойғолары тәрбиәләүгә, күп милләтле халыҡтар дуҫ булып йәшәгән, матур тәбиғәтле, донъяла танылған илдәр Рәсәй һәм Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәр ҙур урын бирелгән.

Программала кескәйҙәрҙе әхлаҡи һәм рухи яҡтан тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелә: ата-әсәләргә ҡарата һөйөү, яратыу тойғолары уятыу, өлкәндәрҙе хөрмәтләү, кескәйҙәргә ярҙамсыл булыу кеүек һыҙаттарҙы тәрбиәләү ҡарала.

Уҡыу, белем алыу – тормошта иң кәрәкле ҡиммәттәрҙең береһе икәнлеген төшөндөрөү аша программала балала аң-белемгә ҡарата ынтылыш тәрбиәләүгә, донъяны танып-белеүгә, йәшәү дәүерендә үҙенең шәхси үҫешен, профессионал камиллыҡҡа үҫтереүгә һәр саҡ теләк булыуына йүнәлеш бирелә.

Программаның төп йүнәлештәренең береһе булып баланың һаулығын һаҡлау һәм нығытыу эшен ойоштороу тора. Балаларға ябай ғына кимәлдә һаулыҡтың кеше өсөн ҙур байлыҡ булыуын, һаулыҡты һаҡлау өсөн дөрөҫ һәм хәүефһеҙ итеп йәшәргә өйрәнеү, файҙалы әҙәп ҡағиҙәләрен үҙләштереү, дөрөҫ туҡланыу, көн тәртибен тейешенсә ойоштороу һәм үтәү, физик яҡтан сыныҡыу, хәрәкәтләнеү кәрәклеген төшөндөрөү һәм программаға ярашлы уларҙы формалаштырыу күнекмәләренә өйрәтеү бурысы ҡуйыла.

Программа һәр бер баланың йәшәйеше психологик яҡтан уға ҡулайлы булған шарттарҙы үтеүен тәьмин итеү маҡсатында уның көн тәртибен һәм өлкәндәр менән аралашыу ысулдарын баланың шәхси үҙенсәлектәренә ҡулайлаштырып ойоштороуҙы күҙаллай.

Программа эстәлеге ике өлөштән тора: беренсе өлөшөндә балалар мотлаҡ үҙләштерергә тейешле булған (60%) федераль кимәлдә тәҡдим ителгән һәм федераль реестрға ингән Төп мәктәпкәсә белем биреү өлгө программаһы материалдарына ярашлы алынған (Н.Е.Веракса, Т.С.Комарова, Э.М. Дорофеева редакцияһындағы “Тыуғандан – мәктәпкә тиклем” программаһы, 2019й.) йөкмәтке бирелә. Икенсе өлөшөндә (40%) белем-тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли-төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар бирелә. Һәр ике өлөштә бирелгән материалдар бер-береһенең йөкмәткеһен тулыландырып, асыҡлап, балаларға тирә-йүнде танып-белергә, улар нигеҙендә үҙ-аллы төрлө һығымталар яһарға һәм шул рәүешле уларҙың аҡыл-зиһен камиллығын үҫтерергә ярҙам итеүҙе күҙаллай.

## Билдәләнгән маҡсаттар бүлеге.
## Программаның маҡсаттары һәм бурыстары

Программаның **төп маҡсаты** булып кескәйҙәргә бала саҡ дәүерен ошо осорға хас булған рәүештә йәшәп үткәреү өсөн тейешле шарттар тыуҙырыуҙыкүҙ уңында тота. Кешенең шәхес булараҡ формалашыуына бала саҡта нигеҙ һалына, ул балалыҡтан ҡыуаныс, шатлыҡ, илһам, дәрт алып, физик һәм психик яҡтан үҫергә, тирә-йүнде танып-белергә һәм аң-белем даирәһен үҫтерергә, кешеләр менән дөрөҫ мөнәсәбәттәр ҡорорға, йәшәйештә үҙ урынын таба белергә өйрәнә. Был маҡсаттар кескәйҙәр эшмәкәрлегенең төрлө төрҙәрендә: уйында, үҙ-ара аралашыуҙа һәм һөйләшеүҙә, хеҙмәттә, танып-белеүҙә-эҙләнеүҙә, эшмәкәрлектең продуктив төрҙәрендә (художество-эстетик үҫештә, ҡоролмалар төҙөүҙә һ.б.), музыкала, нәфис әҙәбиәт менән танышыуҙа тормошҡа ашырыла.

Программаның маҡсаттарына ирешеү өсөн түбәндәге бурыстарҙы хәл итеү кәрәк:

- баланың һаулығын һаҡлауҙы, кескәйҙәрҙең бер-береһе һәм ололар менәныңғай мөнәсәбәттә булыуҙы һәм уларҙың төрлө яҡлап үҫешкимәлентәьмин итеүҙе ойоштороу;
- балаларҙы асыҡ күңелле, алсаҡ, ҡыҙыҡһыныусан, әүҙем, тырыш, эскерһеҙ итеп тәрбиәләү өсөн төркөмдәрҙә уларҙың бер-береһенә һәм ололарға ҡарата ихтирамлы һәм мөләйем ҡарашлы мөнәсәбәттә булыуын ойоштороу;
- тәрбиә һәм аң-белемгә өйрәтеү эшенеңһөҙөмтәһе нәтижәле булһын өсөн балалар эшмәкәрлеген төрләндереү һәм уларҙы берләштереп үткәреү;
- балалар баҡсаһында тәрбиә һәм аң-белем биреү процесын ижади рәүештә ойоштороу;
- тәрбиә һәм аң-белем биреүҙә дидактик материалдарҙың төрлөлөгө һәм уларҙы ҡулланыу ысулдары балаларҙың шәхси һәләтен асырға һәм ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндерергә ярҙам итеүҙе ойоштороу;
- баланың ижад емешен хөрмәт менән ҡабул итеү;
- ғаилә менән балалар баҡсаһы тәрбиә һәм аң-белем биреү эшендә бер үк талаптар ҡуйып, бергә эш итеү;
- балалар баҡсаһы һәм башланғыс мәктәп эшендә күсәгилешлекте һаҡлап эш итеү;

Программала билдәләнгән бурыстарҙың һәм маҡсаттарҙың үтәлеше педагогтың бала һәм ата-әсәләр менән беренсе көндән үкәҙмә-эҙлекле һәм маҡсатлы рәүештәберҙәм эшләүенән тора. Баланың үҫеш кимәле, әхләҡи сифаттарының

ныҡлығы һәр тәрбиәсенең һөнәри оҫталығынан, уның мәҙәнилегенән, балаларҙы яратыуынан тора.

Мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының белгестәре ғаилә менән берлектә, баланың һаулығын ҡайғыртып, уның психик һәм физик яҡтан үҫешенә төрлө яҡтан заманса алымдар, ысулдар аша тәьҫир итеп, бала саҡтың бәхетле үтеүенә ынтылырға тейеш.Кескәйҙәргә аң-белем биреү – донъя мәҙәниәтен (белем, этика, мораль, мәҙәниәт, хеҙмәт) аңларға, һиҙемләргә төшөндөрөүҙе үҙ эсенә ала.

**Балар6ы8 й2ш 32м индивидуаль 16енс2лект2ре**

Балалар ба7са3ында бер т0рк0м эшл2й. Өс й2штән ете й2шк2 тиклемге балалар.

**Кадр6ар**

Белем бире1 процессында бер педагогик хеҙмәткәр 7атнаша.

## ПРОГРАММАНЫ ҮҘЛӘШТЕРЕҮ БУЙЫНСА КӨТӨЛГӘН ҺӨҘӨМТӘЛӘР

## Бала үҫеше йүнәлештәре буйынса ҡуйылған маҡсаттар ориентиры

Баласаҡтың үҙенсәлекле булыуы (нервы системаһының һығылмалылығы, зирәклеге; бала күңеленең эскерһеҙлеге, тәбиғилеге; холоҡ-фиғел сифаттарыныңформалашыу кимәленең төрлөсә булыуы) мәктәпкәсә йәштәге баланан конкрет белем һөҙөмтәләренә эйә булыуҙы талап итмәй, шунлыҡтанТөп белем биреү программаһынбаланың үҙләштереүе тикуныңпсихик һәм физик үҫешенә ҡарата ҡуйылған маҡсаттарҙың үтәлеүе, йә үтәлмәүе менән билдәләнә.

ФДМББС-да һәр бер йүнәлеш буйынса бирелгән маҡсаттар баланың йәш кимәленә ярашлы уның социаль-норматив үҫешенбилдәләй. Был маҡсаттар ата-әсәләр һәм педагогтар өсөн баланы аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиәләү эшмәкәрлегендә төп ориентирбулып торалар.

ФДМББС талаптары буйынса, бала үҫешенең йүнәлештәре буйынса ҡуйылған маҡсаттар Рәсәй Федерацияһындамәктәпкәсә аң-белем биреү даирәһе өсөн дөйөм тип һанала.Тик һәр бер өлгө программа үҙ үҙенсәлектәренән сығып, бала үҫешендәге ниндәйҙер өлкәгә, йәғни йүнәлешкә өҫтөнлөк бирә һәм үҙ маҡсаттарын ҡуя. Ләкин улар стандарт талаптарын инҡар итмәй, киреһенсә, ҡуйылған маҡсаттар нигеҙендә был йүнәлештәрҙең тәрәнерәк, киңерәк өйрәтелеүен күҙаллай.

**Иртә йәштәге кескәйҙәр төркөмө балаларын аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиәләү буйынса ҡуйылғанмаҡсаттар ориентиры:**

- бала үҙен уратып алған предметтар менән ҡыҙыҡһына һәм уларҙы көндәлек йәшәйештә әүҙем ҡуллана; уйынсыҡтар һәм предметтар менән бирелеп, күңелен һалып уйнай, үҙенең эш-хәрәкәтендә һөҙөмтәле уңыштарға ирешергә тырыша һәм ныҡышмалыҡ күрһәтә;

- көнкүреш кәрәк-яраҡтарының тәғәйенләнешен белә (ҡалаҡтар, тараҡтар, ҡәләмдәр һ.б.) һәм уларҙы йәшәйештә дөрөҫ ҡуллана. Үҙ-үҙен хеҙмәтләндереү буйынса ябай ғына күнекмәләргә эйә; көнкүреш һәм уйын эшмәкәрлегендә үҙ-аллылыҡ күрһәтергә ынтыла; бөхтәлек һәм йыйнаҡлыҡ һыҙаттары үҫешә башлай;

- тупаҫлыҡҡа, һаранлыҡҡа ҡарата үҙенең кире ҡарашын белдерә;

- ябай ғына булған әҙәп ҡағиҙәләрен үтәй (өйҙә, төркөмдә үҙ-аллы, йә булмаһа ололар ярҙамы менән «рәхмәт, һаумыһығыҙ, һау булығыҙ, тыныс йоҡо» һүҙҙәрен ҡуллана; балалар баҡсаһында, өйҙә, урамда үҙ-үҙендөрөς тотоу ҡағиҙәләрен белә һәм уларҙы үтәргә тырыша;

- аралашыуҙа әүҙем телмәргә эйә; ололарҙың телмәрен аңлай, уларға һорауҙар һәм үтенестәр менән мөрәжәғәт итә белә; тирә-яҡтағы предметтарҙың һәм уйынсыҡтарҙың атамаларын әйтә. Баланың телмәре башҡалар менән тулыһынса аралашыу сараһы булып китә.

- ололар менән аралашырға ынтыла һәм эш-хәрәкәттә уларға оҡшарға тырыша; ҡайһы бер уйындарҙа ололарҙың холоҡ-фиғелен һәм аралашыу ысулдарынҡабатлап күрһәтә; ололар тәҡдим иткән уйынға ыңғай ҡараштабула һәм уйындың маҡсатын дөрөς ҡабул итә;

- тиҫтерҙәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныуыбар; уларҙың эш-хәрәкәтен күҙәтә һәм уларға оҡшатып ҡабатлай;

- тиңдәштәренә ҡамасауламайынса бергәләп уйнай белә; бәләкәй генә төркөмдәргә бүленеп уйнауға ла ҡыҙыҡһыныуын күрһәтә;

- тирә-яҡ тәбиғәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныуы бар, миҙгел үҙгәрештәрен күҙәтеүҙә ҙур теләк менән ҡатнаша;

- шиғыр, йыр, әкиәттәрҙе тыңлауға, һүрәттәрҙе ҡарауға ҡыҙыҡһыныу күрһәтә; музыкаға ярашлы хәрәкәтләнергә тырыша, мәҙәниәт һәм сәнғәт әҫәрҙәренә ҡарата ыңғай ҡарашын белдерә;

- ҡурсаҡ театры геройҙарының уйнауын бирелеп ҡарай; театрлаштырылған һәм сюжетлы-ролле уйындарҙа теләп ҡатнаша;

- продуктив эшмәкәрлеккә (һүрәт төшөрөү, әүәләү, ҡоролмалар төҙөү, йәбештереү) ҡыҙыҡһыныу күрһәтә;

- баланың эре моторикаһы үҫешкән, ул төрлө төр хәрәкәттәрҙе үҙләштерергә ынтыла (йүгереү, шыуышыу, аша атлау һ.б.). Ябай йөкмәткеле булған төрлө хәрәкәтле уйындарҙа ҡыҙыҡһынып ҡатнаша.

**Мәктәпкәсә аң-белем алыуҙы тамамлаған балаларҙың үҫешен билдәләүгә ҡуйылғанмаҡсат ориентирҙары**:

- бала көнкүрештә ҡулланылған һәм үҙ-үҙен хеҙмәтләндереү буйынса йәмғиәттә ҡабул ителгән эш-хәрәкәттәргә эйә була, төрлө эшмәкәрлектең башҡарыу ысулдарын үтәгәндә булдыҡлылыҡ һәм үҙаллылыҡ күрһәтә.Төрлө эшмәкәрлектә-уйында, аралашыуҙа, танып-белеү-эҙләнеү эшмәкәрлегендә, ҡоролмалар төҙөүҙә һ.б., үҙенә оҡшаған эш төрөн башҡара һәм үҙенә бергәләп эшитеү өсөн иптәш һайлай белә;

- бала донъяны (төрлө эш төрҙәрен, кешеләрҙе, үҙен, һ.б.) ыңғай ҡараш менән ҡабул итә; ололар һәм тиңдәштәре менән яҡшы мөнәсәбәт тыуҙырып, әүҙем аралаша, шул уҡ ваҡытта үҙенең абруйын һаҡлай белә;

- башҡа балалар менән һөйләшеп, үҙ-ара килешә белә, башҡаларҙың теләген, күңел торошон һәм хис-тойғоларын иҫәпкә ала, ҡыйын саҡта бергә ҡайғыра, уңыштарға шатлана. Хис-тойғоларын, эске кисерештәрен холоҡ-киәфәте аша дөрөς сағылдыра, үҙ-үҙенә ышаныу тойғоһо нигеҙҙәре үҫешкән. Төрлө бәхәстәрҙе ыңғай сисергә ынтыла;

- берҙәм эшмәкәрлек барышында әйҙәүсе булараҡ та, башҡарыусы булараҡ та хеҙмәттәшлек итергә һәләтле;

- милли һәм социаль сығышына, матди яҡтан булған хәленә, ғаиләлә ҡабул ителгән дини айырмаға, физик һәм психик яҡтан үҫеш үҙенсәлектәренә ҡарамаҫтан бөтә кешеләрҙең дә бер тигеҙ икәнлеген аңлай;

- башҡа кешеләрҙе ишетергә һәм уларҙы аңларға тырышыу оҫталығын күрһәтә.

- төрлө эшмәкәрлектең һөҙөмтәһен алдан күҙаллауы үҫешкән, ул бигерәк тә уйын барышында асыҡ күренә; төрлө уйындарҙы уйнай, уларҙың үткәреү формаларын белә; шартлы һәм ысынбарлыҡта булған хәлдәрҙе айыра; төрлө социаль нормаларға һәм ҡағиҙәләргә буйһона, үтәй белә. Көнкүрештәге төрлө хәл-ваҡиғаларҙы таный һәм баһалай белә;

- баланың һөйләү телмәре бай, телмәр аша үҙенең фекерҙәрен, уйҙарын һәм теләктәрен аңлата белә. Һүҙҙәрҙә өндәрҙе айыра,уларҙан һүҙҙәр, һөйләмдәр төҙөй, грамоталыҡ нигеҙҙәре формалашҡан;

- баланың эре һәм ваҡ моторикаһы үҫешкән; ул хәрәкәтсән, сыҙамлы, төп хәрәкәттәргә эйә, үҙенең хәрәкәттәрен контролдә тота, үҙ теләгенә буйһондора белә;

- бала ихтыяр көсөнә эйә, төрлө эшмәкәрлектә йәшәйештә ҡабул ителгән әхлаҡи һәм әҙәп ҡағиҙәләрен үтәй, ололар һәм тиҫтерҙәре менән үҙ-ара ыңғай мөнәсәбәт булдыра ала, шәхси гигиена күнекмәләрен һәм хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәй;

- башлаған эшен аҙағына еткереп тамамларға тырыша, уның өсөн яуаплы икәнлекте аңлай;

- бала ҡыҙыҡһыныусанлығын күрһәтә, ололарға һәм тиңдәштәренә һорау бирә, кешенең холоҡ-ҡылыҡтарына һәм үҙен уратып алған тәбиғәт күренештәренә яуап бирергә тырыша; күҙәтергә, тәжрибәләр эшләргә ярата. Үҙе, тәбиғәт һәм үҙе йәшәгән социаль донъя тураһында башланғыс белемгә эйә; балалар әҙәбиәте ижады менән таныш, йәнле тәбиғәт, математика, тарих һ.б. фәндәр өлкәһендә башланғысбелемдәребар;

- киләсәктә мәктәптә, юғары уҡыу йортонда уҡырға тигән ниәт менән белем алырға ынтыла;

- ғөмүмән йәшәйешкә ҡарата ыңғай мөнәсәбәт, хөрмәт күрһәтә;

- профессиональ сәнғәт әҫәрҙәрен (музыка, бейеү, театр эшмәкәрлегенә, ижади эшмәкәрлеккә һ.б.), халыҡ ижадын, тирә-яҡ мөхиттең матурлығын шатланып ҡабул итә;

- илһөйәрлек тойғолары нигеҙе бар, иле һәм уның ҡаҙаныштары менән ғорурлана белә, уның географик төрлөлөгө, күп милләтлелеге, мөһим тарихи хәлдәре тураһындағы башланғыс күҙаллауға эйә;

- үҙе, ғаилә,уныңүҙкимәттәре, гендер үҙенсәлектәре тураһында ябай ғына төшөнсәләре бар; үҙенә һәм икенсе енескә ҡарата хөрмәт тойғоһо күрһәтә;

- йәшәйештә ҡабул ителгән ябай ғына ҡағиҙәләрҙе, әхлаҡи нормаларҙы үтәй, «нимә яҡшы һәм нимә насар» тигән тәғлимәтте үтәргә тырыша; ололарға ҡарата хөрмәт, ә кескәйҙәргә ҡарата хәстәрлек күрһәтә;

- һаулыҡты донъялағы иң ҙур байлыҡ итеп ҡабул итә һәм үҙ тормошонда хәүефһеҙ йәшәү ҡағиҙәләрен үтәргә тырыша.

## БЕЛЕМ-ТӘРБИӘ БИРЕ! ЭШЕНДӘ ?АТНАШЫУСЫЛАР ТАРАФЫНАН №АЙЛАП АЛЫН;АН )Л)Ш №ӘМ МИЛЛИ-Т)БӘК !:ЕНСӘЛЕКТӘРЕН СА;ЫЛДЫР;АН МАТЕРИАЛДАР.

“Баш7ортостан – тыу4ан илем”м2кт2пк2с2 й2шт2ге балалар 0с0н Баш7ортостан Республика3ын 0йр2не1 программа3ы.(Ф.№. А6набаева, Г.Ш. 2лб2кова, 2.Р. Буранбаева, К.Ф. Мортаева)

Ма7сатлы б1лек т27дим ителг2н программаны8 бурыстарын, ма7сат7а й1н2лтелг2н ориентир6ар6ы 16 эсен2 ал4ан.

Программаны8 й0км2ткеле б1легенд2

- биш белем бире1 0лк23ен 16 эсен2 ал4ан 3 й2шт2н 7 й2шк2 тиклемге балалар6ы8 белем бире1 эшм2к2рлегене8 й0км2ткe3е

- т0рл0 эшм2к2рлект2 вариатив формалар6ы, ысулдар6ы, методтар6ы тормош7а ашырыу6ы тасуирлау

- м2кт2пк2с2 белем бире16е8 32р биш белем бире1 0лк23енд2 т0б2кт2 7улланыл4ан 262би2т 32м Баш7ортостан тура3ында м24л1м2т.

Шулай у7 32р бер м2кт2пк2с2 белем бире1 ойошма3ы белем бире1 формаларын, методтарын, ысулдарын балалар6ы8 индивидуаль 16енс2лект2рен2н сы4ып, ирекле 3айлауын к16 у8ында тота.

Программаны8 ойоштороу б1легенд2 норматив документтар и92пк2 алынып, т1б2нд2гел2р тасуирлана

– 32р т0рк0мг2 белем бире1 программа3ыны8 я7ынса комплекслы-тематик перспектив планы

– м2кт2пк2с2 белем бире1 проессында 7атнашыусылар тарафынан ерлекле м262ни й1н2лешен тормош7а ашырыу шарттары

- М262ни ял эшм2к2рлегене8 й0км2тке3е, форма3ы, т0рл0 к18ел асыу саралары

– проектлы эшм2к2рлекте ойоштороу

– педагогик коллективты8 м2кт2пк2с2 й2шт2ге балалар6ы8 4аил23е мен2н 16-ара килешеп эш ите1е

- 19тере1се предметлы м0хит ойоштороу.

### 2.2.М2кт2пк2с2 й2шт2ге баланы8 программаны 16л2штере1е буйынса планлаштырыл4ан 3060мт2

Ете йәшлек бала:

- 16е, 16ене8 енесе, кешел2р ара3ында4ы гендер айырмалы7тарын айыра, 4аил2 а4заларына 32м 16ен2, милл2тен2 32м республикала й2ш2г2н баш7а милл2т кешел2рен2, улар6ы8 40р0ф-4262тт2рен2, йолаларына ихтирам мен2н 7арай

- Р2с2й, Башкортостан Республика3ы а4за3ы булыуын, у6ене8, бурыстарын 32м хо7у7тарын бел2.

- Баш7орт хал7ынын тарихы, м262ни2те, с2н42те, милли батыр6ары, к1ренекле кешел2ре мен2н 7ы6ы73ына.

- Башкорттар6ы8 32м баш7а халы7тар6ы8 би621-7улланма с2н42тен 32м м262ни2тен, р2ссамдар 32м улар6ы8 эшт2рен, улар6ы8, эшт2рен, балалар китаптарын би621се – иллюстратор6ар6ы таный. Т0рл0 милл2т халы7тарыны8 кейеменд2ге, к0нк1реш 2йбер62ренд2ге би62кт2р6е айыра, 2йбер62р6е д0р09 итеп атай.

- 16 теленд2 фекерен, тел2кт2рен а8лата, ти9тер62ре 32м 0лк2нд2р мен2н аралаша, 3ораy6ар4а тулы, аны7 яуап бир2, баш7орт хал7ыны8 ауы6-тел ижады, н2фис 262би2т т0р62рен айыра

- 16 3аулы4ын 3а7лау 32м ны4ытыу, с2л2м2т й2ш21 р21еше к1некм2л2рен, 262п-гигиена 7а4и62л2рен 1т2й

- уйында 16 ролен сюжет й1н2леше буфынса баш7ара, уйын 7а4и62л2рен 3а7лай, ти9тер62рене8 32м уйын 3060мт23ен2 ба3а бирерг2 ынтыла

- -баш7орт халы7 уйындарында, ярыш-б2йгел2р62 тел2к мен2н 7атнаша.

## Парциальная программа обучения русской разговорной речи в башкирских детских дошкольных образовательных учреждениях (Давлетбаева Р. Г., Азнабаева Ф. Г., Каримова Я. С., Кагарманова Ф.)

Обучение дошкольников башкирской национальности русскому языку - дело большой государственной важности. Дошкольную подготовку детей по русскому языку необходимо строить на основе четкой методической системы с учетом возрастных особенностей детей 4-6 лет и с опорой на родной язык.

Основной формой обучения являются занятия, которые проводятся 2 раза в неделю. Чтобы добиться более эффективного обучения русскому языку, возрастные группы не должны превышать 12- 15 человек. Продолжительность занятий в старшей группе - 20-25, в подготовительной -30-35 минут.

Цель обучения русскому языку в башкирских детских садах- развитие разговорной речи детей в единстве с развитием их мышления и формированием дошкольника как личности.

Задачи обучения дошкольников русскому языку:

- формирование правильного произношения всех звуков и звукосочетаний в составе слова, произносительных и интонационных навыков речи;

- обеспечение лексическим объемом через соответствующие игровые ситуации;

- ознакомление детей с грамматическими формами, предназначенными для данного этапа обучения русских слов;

- научение конструированию и употреблению определенных предложений - речевых образцов с соответствующей нормам устной русской речи интонацией, соблюдением пауз, логического ударения;

- привитие умения связно излагать свои мысли в диалогической и монологической форме на базе усвоенной лексики;

- воспитание коммуникативной и лингвокультурологической личности;

- воспитание гражданских качеств;

- развитие познавательных интересов и языковых способностей, внимания, воображения, речевой реакции, наблюдательности относительно языковых явлений.

В период обучения устной форме общения, дети получают первоначальное представление о различных формах реального и условного общения человека с миром природы и вещей, уясняют значение жестов, мимики, выразительных движений в общении, уместность их использования в процессе общения.

Указанные в программе задачи выполняются при следующем содержании обучения;

- овладение конкретным языковым материалом (словами, необходимыми для элементарного общения);

- произношение слов в соответствии со звуковой действительностью русского языка, обращая внимание на звуки, представляющие трудность для детей-башкир;

- усвоение необходимых форм категорий русского языка: род, число и падеж имен существительных и прилагательных, времени и лица глаголов, значение предлогов;

- активизация в речи слов, отражающих национальные особенности культуры и быта русского и башкирского народов.

Программа составлена с опорой на методические принципы:

- коммуникативная направленность: обучение аудированию и говорению;

- расположение лексического материала по тематическому принципу;

- системный подход к практическому овладению фонетическим, лексическим, семантическим, стилистическим уровнями языка;

- учет положительного и отрицательного влияния родного языка, последовательная отработка трудных для произношения звуков и звуковых различий в словах, которых нет в родном языке;

- соединение обучения, развития и воспитания в единый процесс.

«Мине8 мен2н т0ш0р» парциаль программа3ы Е.А.Дудко

Иртә йәштәге балалар (1 йылдан 3 йылға тиклем) 0с0н «художество-эстетик яҡтан үҫеше» белем бире1 0лк23е парциаль программа3ы.

Программаның маҡсаты — әҙәби-эстетик эшмәкәрлек һәм һынлы с2н42т яр6амында иртә йәштәге баланың һәр яҡлап үҫешен2 булышлы7 ите1 ярҙамында үҫешен тасуирлау.

Төп бурыс:

1. Рәсем төшөрөү һәм һынлы әүәләгәндә,предмет тураһында белемдәрен формалаштырыу6а, башланғыс форма һәм төҫтәр, буяуҙар үҙенсәлектәре,ҡәләм һәм пластик тура3ында т0тш0нс2 бире1.

2. Ябай художество образын булдарыу 0с0н, төрлө сәнғәт эксперименттар 0с0н шарттар булдырыу.

3. Балаларҙы төрлө художество саралары (таптар, һыҙаттар, нөктә)мен2н2 таныштырыу.

ФДМББС-ҡа ярашлы, программа йүнәлеше:

● балалар үҫеше өсөн шарттар булдырыуға, уның өсөн мөмкинлектәр асыуға,

позитив социализация, әхлаҡи үҫеш, йәштәштәре һәм ололар менән хеҙмәттәшлек башланғысы нигеҙенә һәм ижади һәләттәренүҫтереүг2 һәм эшмәкәрлек төрҙәре19ешен2;

● шәхестең үҫешен тәьмин итеүг2, мотивация һәм балала төрлө эшмәкәрлек төрө19ешен2;

● үҫеше өсөн тәүшарт ҡиммәт-мәғәнәһен аңлау һәм үҙләштереү сәнғәт әҫәрҙәре (был программа һынлы), тәбиғәт донъяһы;яҡты донъяға эстетик ҡараш формалаша; сәнғәт төрҙәре тураһында элементар күҙаллауҙар формалаштырыу; балалар үҙ аллы ижади эшмәкәрлеген тормошҡа ашырыу (һынлы);

● балалар 16енс2лект2рен һаҡлап ҡалыуға ярҙам итеү, һәр индивидуаль һәләттәрен һәм ижади потенциалын үҫтереү

Һәр этаптағы бурыстар

1-1,5 йыл:

● балаларҙың художество материалдары менән танышыу: бумала, буяуҙар, ҡәләм, төҫлө ҡом (кинетик); уларҙы8 үҙенсәлектәре, фактура3ы, ҡулланыу;

● ҡәләм32м бумала тота белеүен дөрөҫ формалаштырыу;

● тирә-яҡ донъя, донъяны һыу менән бәйләнешен к1р32те1;

● төп төҫтәр (ҡыҙыл, һары, йәшел, күк, аҡ, ҡара)беле1;

● ваҡ моторикаһын һәм ҡулдарҙың хәрәкәт үҫешен координациялау.

1,5-2 йыл:

● бумала эшләү күнекмәләрен үҫтереү һәм нығытыу;

● «нөктәләр», «буйтым», «т182р2к» төшөнсәһе менән танышыу;

● төрлө художество саралары менән танышыу: тычок, штамптар һәм фигуралывалик, жатый ҡағыҙы, губка;

● пластик массалар (пластилин,ҡамыр) семте1 күнекмәләрен үҫтереү.

● төп төҫтәрҙе нығытыу (ҡыҙыл, һары, йәшел, күк, аҡ, ҡара + зәңгәр, һоро, алһыу, һары);

● ваҡ моторикаһын һәм ҡулдарҙың хәрәкәт үҫешен координациялау.

3 йәшкә тиклемге 2:

● пластилин, бумала мен2н эшләү күнекмәләрен үҫтереү һәм нығытыу, улар6ы дөрөҫтотабелеү, дөрөҫкулланыу, теге йәки был эште ваҡытында үтә1;

● балаларҙың ижадын үҫтереү;

● ваҡ моторикаһын һәм ҡулдарҙың хәрәкәт үҫешен координациялау.

## Ойоштороу бүлеге.
## Йәшәү һәм тәрбиәләү шарттарын ойоштороу

БАШ?ОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАЗЫ ДЫУАН РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТ Д)Й)М БЕЛЕМ БИРЕ! УЧРЕЖДЕНИЕЗЫ ӘБДРӘШИТ АУЫЛЫ «БАШЛАН;ЫС М2КТ2БЕ-БАЛАЛАР БА?САN№Ы» д1ш2мбе - йома, с242т 8.00 - 17.00 тиклем эшләй.

### 4.1 Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең беренсе төркөмө өсөн яҡынса көн тәртибе
### (1 йәштән 2-се йәшкә тиклемге балалар)

Икенсе йәшкә сыҡкан балалар үҙҙәренең психик һәм физиологик яҡтан үҫеш үҙенсәлектәре һәм йәш мөмкинселектәре менән ике төркөмгә бүленәләр: беренсе төркөм – бер йәштән йәш ярымға тиклемге балалар; икенсе төркөм – йәш ярымдан ике йәшкә тиклемге балалар.

Һәр йәш төркөмөнә үҙенә генә хас булған көн тәртибе тәҡдим ителә. Беренсе төркөм балалары көндөҙ ике тапҡыр йоҡлайҙар, йәш ярымдан ике йәшкә тиклемге балалар – бер тапҡыр. Балаларҙың төнгө йоҡоһо 10-11 сәғәт тәшкил итә. Балалар баҡсаһына юғарыла әйтелгән ике төркөм балалары ла йөрөй икән, уларҙың йоҡлау һәм әүҙем уйнау ваҡытын сиратлап планлаштырыу уңайлы була (беренсе төркөм йоҡлай, был ваҡытта икенсе төркөм уйнай һәм киреһенсә). Эште былай ойоштороуҙың маҡсаты булып һәр бер бала менән айырым эш итергә ваҡыттың күберәк ҡалыуы тора.

Көн тәртибе һәр төркөм өсөн йылдың һалҡын һәм йылы ваҡытына төҙөлә. Һыуыҡ ваҡытта беренсе төркөм балалары төркөм бүлмәһендә уйнайҙар. Саф һауала йөрөү киске ваҡытта ата-әсәләр ярҙамында башҡарылыу ҡарала.

Икенсе төркөм балаларының саф һауала йөрөүе көнөнә ике тапҡыр үткәрелә.

Балаларҙың үҙ-аллы эшмәкәрлеге менән бер рәттән уларҙы сыныҡтырыу, һауыҡтырыу саралары, кескәйҙәр менән уйын-дәрестәр үткәреү планлаштырыла.

Йылдың йылы ваҡытында балаларҙың көн тәртибенә ярашлы уйындар, күҙәтеүҙәр тыштағы махсус йыһазландырылған уйын майҙансығында ойоштороla. Бүлмәлә ашатыу, йоҡлатыу һәм башҡа төрлө гигиена саралары үткәреү ҡарала.

**Һауыҡтырыу һәм сыныҡтырыу саралары**

Тәбиғи факторҙар (һауа, һыу, ҡояш) ҡулланып, һауыҡтырыу һәм сыныҡтырыу сараларын үткәреү.

Төркөм бүлмәһендә һауа температураһын 21-22 градус йылылыҡта тотоу, балаларға өҫ кейемде ике ҡатлы итеп кейҙереү. Йоҡлағанда йоҡо бүлмәһендә һауа температураһы 15-16 градус йылылыҡта.

Йоҡлап торғас һәм башҡа кейенеү-сисенеү ваҡытында балаларҙы һауа ярҙамында сыныҡтырыу.

Саф һауала йөрөгәндә 3-5 минутҡа балаларҙы ҡояш нурҙары аҫтында йөрөтөү.

Тышта йөрөүҙең аҙағында 2-3 минутлыҡ балаларҙы йылы ҡомда ялан аяҡ йөрөтөү (ҡом таҙа һәм эшкәртелгән булырға тейеш).

Йылы ваҡытта тыштан йөрөп ингәс, аяҡтар йыуғанда сыныҡтырыу саралары үткәреү. Балаларҙың шәхси яҡтан һаулыҡ торошон иҫәпкә алып эш итеү.

Махсус сыныҡтырыу сараларын үткәреүгә рөхсәт балалар баҡсаһы етәкселеге һәм медицина хеҙмәткәрҙәре тарафынан бирелә һәм ата-әсәләр менән кәңәшләшеп үткәрелә.

**2 ЙӘШТӘН АЛЫП МӘКТӘПКӘ ТИКЛЕМГЕ ЙӘШТӘГЕ БАЛАЛАРҘЫҢ ЯҠЫНСА КӨН ТӘРТИБЕ**

Дөрөҫ көн тәртибе — тәүлек дауамында балалар эшмәкәрлегенең төрлө төрҙәренең һәм ялының рациональ дауамлылығы һәм уйлап сиратлаштырылыуы. Көн тәртибе балаларҙың йәшенә, психо-физиологик үҙенсәлектәренә тура килеүе – уны төҙөүҙең төп принцибы булып тора. Көндәлек режимды баланың индивидуаль үҙенсәлектәренә ҡулайлаштырырға ынтылыу кәрәк.

Көндәлек режимда дәрестәрҙең, уларҙың төрлө төрҙәре араһындағы тәнәфестәрҙе лә индереп, дөйөм ваҡыты күрһәтелгән. Педагог белем биреү нагрузкаһының күләмен, санитар-эпидемиологик ҡағиҙәләр һәм нормативтар буйынса максималь рөхсәт ителгән эш күләмен арттырмайынса, үҙ-аллы билдәләй. Йылдың йылы осоронда дәрестәрҙең бер өлөшөн һауала йөрөү ваҡытында майҙансыҡта үткәрергә мөмкин.

## Көн тәртибе

**Һалҡын осор**

| Төркөмд2р | төрлөйәшт2гекеск2йбалалартөркөм 0 | | | төрлөйәшт2ге 0лкәнбалалартөркөмө | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1-1.5 йәш | 1.5-2 йәш | 2-3 йәш | 3-4 йәш | 4-5 йәш | 5-6 йәш | 6-7 йәш |
| Өйҙә | | | | | | | |
| Йоҡонан торғоҙоу, кейендереү, йыуындырыу | 7.00-8.00 | 7.00-8.00 | 7.00-8.00 | 7.00-8.00 | 7.00-8.00 | 7.00-8.00 | 7.00-8.00 |
| Балалар баҡсаһында | | | | | | | |
| Балалар6ы 7абул ите1. Уйын ойоштороу | 8.00 –8.40 | 8.00 –8.40 | 8.00 –8.40 | 8.00 –8.30 | 8.00 –8.30 | 8.00 -8.30 | 8.00 –8.30 |
| Ирт2нге гимнастика | | | | 8.30 –8.40 | 8.30 –8.40 | 8.30 8.40 | 8.30 –8.40 |
| Иртәнгеаш7а әҙерлек. Иртәнге аш. Дежур итеү | 8.40 –9.00 | 8.40 –9.00 | 8.55 –9.15 | 8.40 –9.00 | 8.40 –9.00 | 8.40 –9.00 | 8.40 –9.00 |
| Уйындар. Балаларҙың үҙ аллы | 9.15 –10.05 | 9.15 –9.35/ | 9.15 –9.55 | 9.00-9.25/ | 9.00-9.25/ | 9.00-9.25/ | 9.00-9.25/ |

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| эшмәкәрлеге | | 09.55-10.05 | | 10.20-10.35/<br>11.00-11.30 | 10.20-10.40/<br>11.00-11.30 | 9.40-10.20 | 9.40-10.20 |
| Иртәнге даирә | | | | 9.25-9.40 | 9.25-9.40 | 9.25-9.40 | 9.25-9.40 |
| дәрестәр | | 9.35-09.45 | 9.55-10.05 | 9.40-9.55 /<br>10.20-10.35/<br>11.00-11.15 | 9.40-10.00/<br>10.20-10.40/<br>11.00-11.20 | 9.40-10.05/<br>10.20-10.45/<br>11.00.11.25 | 9.40-10.10/<br>10.20-10.50/<br>11.00-11.30 |
| К0нд06г0 йо7о4а 26ерлек. К0нд06г0 йо7о. | 10.05-12.10 | | | | | | |
| Тыш7а сы4ыу4а 26ерлек. Саф 3ауала й0р01. Тыштан ине1. | | 10.05-12.10 | 10.05-12.10 | 11.30-12.30 | 11.30-12.30 | 11.30-12.30 | 11.30-12.30 |
| Т0шк0 аш7а 26ерлек. Т0шк0 аш. Дежур итеү | 12.10- 12.40 | 12.10- 12.40 | 12.10- 12.40 | 12.30-13.00 | 12.30-13.00 | 12.30-13.00 | 12.30-13.00 |
| Уйын-дәрестәр | 12.40-12.46/<br>12.56-13.02 | | | | | | |
| К0нд06г0 йо7о4а 26ерлек. Йоҡо алдынан уҡыу. К0нд06г0 йо7о. | 13.02- 15.00 | 12.40- 15.00 | 12.40- 15.00 | 13.00-15.00 | 13.00-15.00 | 13.00-15.00 | 13.00-15.00 |
| Йо7онан тороу. Физкультура һауыҡтырыу процедуралары. | 15.00-15.30 | 15.00-15.30 | 15.00-15.30 | 15.00-15.30 | 15.00-15.30 | 15.00-15.30 | 15.00-15.30 |
| Т0шт2н 3у8 7ап7ылап алыу4а 26ерлек. Т0шт2н 3у8 7ап7ылап алыу | 15.30-15.50 | 15.30-15.50 | 15.30-15.50 | 15.30-15.50 | 15.30-15.50 | 15.30-15.50 | 15.30-15.50 |
| дәрестәр | | 15.50-16.00 | 16.10-16.20 | | | 15.50-16.15 | 15.50-16.20 |
| Уйындар | 15.50-16.10 | 16.10-16.20 | 15.50-16.00 | 15.50-16.20 | 15.50-16.20 | | |
| Киске даирә | | | | 16.20-16.30 | 16.20-16.30 | 16.20-16.30 | 16.20-16.30 |
| Тыш7а сы4ыу4а 26ерлек. Саф | 16.10-16.45 | 16.20-16.45 | 16.20-16.45 | 16.30-16.45 | 16.30-16.45 | 16.30-16.45 | 16.30-16.45 |

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| **Зауала й0р01.** | | | | | | | |
| **)йг2 7айтыу** | 16.45-17.00 | 16.45-17.00 | 16.45-17.00 | 16.45-17.00 | 16.45-17.00 | 16.45-17.00 | 16.45-17.00 |
| Өйҙә | | | | | | | |
| **Саф Зауала й0р01.** | 17.00-19.00 | 17.00-19.00 | 17.00-19.00 | 17.00-19.00 | 17.00-19.00 | 17.00-19.00 | 17.00-19.00 |
| **Өйгә ҡайтыу, киске аш, тыныс уйындар, йыуындырыу** | 19.00-20.30 | 19.00-20.30 | 19.00-20.30 | 19.00-20.30 | 19.00-20.30 | 19.00-20.30 | 19.00-20.30 |
| **Төнгө йоҡо** | 20.30-7.00 | 20.30-7.00 | 20.30-7.00 | 20.30-7.00 | 20.30-7.00 | 20.30-7.00 | 20.30-7.00 |

**йәйге - һауыҡтырыу осор**

| **Төркөмд2р** | **Төрлө йәшт2гекеск2йбалалартөркөм0** | | | **Төрлө йәшт2ге 0лкән балалар төркөмө** | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | **1-1.5 йәш** | **1.5-2 йәш** | **2-3 йәш** | **3-4 йәш** | **4-5 йәш** | **5-6 йәш** | **6-7 йәш** |
| Өйҙә | | | | | | | |
| **Йоҡонан торғоҙоу, кейендереү, йыуындырыу** | 7.00-8.00 | 7.00-8.00 | 7.00-8.00 | 7.00-8.00 | 7.00-8.00 | 7.00-8.00 | 7.00-8.00 |
| Балалар баҡсаһында | | | | | | | |
| **Балалар6ы 7абул ите1. Уйын ойоштороу** | 8.00 –8.40 | 8.00 –8.40 | 8.00 –8.40 | 8.00 –8.30 | 8.00 –8.30 | 8.00 -8.30 | 8.00 –8.30 |
| **Ирт2нге гимнастика** | | | | 8.30 –8.40 | 8.30 –8.40 | 8.30 8.40 | 8.30 –8.40 |
| **Иртәнгеаш7а әҙерлек. Иртәнге аш. Дежур итеү** | 8.40 –9.00 | 8.40 –9.00 | 8.55 –9.15 | 8.40 –9.00 | 8.40 –9.00 | 8.40 –9.00 | 8.40 –9.00 |
| **Уйындар. Балаларҙың үҙ аллы эшмәкәрлеге** | 9.15 –10.05 | 9.15 –9.35/ 09.55-10.05 | 9.15 –9.55 | 9.00-9.25/ 10.20-10.50 | 9.00-9.25/ 10.20-10.50 | 9.00-9.25/ 9.40-10.20 | 9.00-9.25/ 9.40-10.20 |
| **Иртәнге даирә** | | | | 9.25-9.40 | 9.25-9.40 | 9.25-9.40 | 9.25-9.40 |
| **дәрестәр** | | 9.35-09.45 | 9.55-10.05 | 9.40-9.55 | 9.40-10.00 | 10.20-10.45 | 10.20-10.50 |
| **К0нд06г0 йо7о4а 26ерлек. К0нд06г0 йо7о.** | 10.05-12.10 | | | | | | |
| **Тыш7а сы4ыу4а 26ерлек. Саф Зауала й0р01. Тыштан ине1.** | | 10.05-12.10 | 10.05-12.10 | 10.50-12.30 | 10.50-12.30 | 10.50-12.30 | 10.50-12.30 |
| **Т0шк0 аш7а 26ерлек. Т0шк0 аш. Дежур итеү** | 12.10- 12.40 | 12.10- 12.40 | 12.10- 12.40 | 12.30-13.00 | 12.30-13.00 | 12.30-13.00 | 12.30-13.00 |

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| **Уйын-дәрестәр** | 12.40-12.46 | | | | | | |
| **К0нд06г0 йо7о4а 26ерлек. Йоҡо алдынан уҡыу. К0нд06г0 йо7о.** | 12.56-13.02 | 12.40- 15.00 | 12.40- 15.00 | 13.00-15.00 | 13.00-15.00 | 13.00-15.00 | 13.00-15.00 |
| **Йо7онан тороу. Физкультура һауыҡтырыу процедуралары.** | 15.00-15.30 | 15.00-15.30 | 15.00-15.30 | 15.00-15.30 | 15.00-15.30 | 15.00-15.30 | 15.00-15.30 |
| **Т0шт2н 3у8 7ап7ылап алыу4а 26ерлек. Т0шт2н 3у8 7ап7ылап алыу** | 15.30-15.50 | 15.30-15.50 | 15.30-15.50 | 15.30-15.50 | 15.30-15.50 | 15.30-15.50 | 15.30-15.50 |
| **дәрестәр** | | | | | | 15.50-16.15 | 15.50-16.20 |
| **Киске даирә** | | | | 16.20-16.30 | 16.20-16.30 | 16.20-16.30 | 16.20-16.30 |
| **Тыш7а сы4ыу4а 26ерлек. Саф 3уала й0р01.** | 16.10-16.45 | 15.50-16.45 | 15.50-16.45 | 16.30-16.45 | 16.30-16.45 | 16.30-16.45 | 16.30-16.45 |
| **)йг2 7айтыу** | 16.45-17.00 | 16.45-17.00 | 16.45-17.00 | 16.45-17.00 | 16.45-17.00 | 16.45-17.00 | 16.45-17.00 |
| Өйҙә | | | | | | | |
| **Саф 3уала й0р01.** | 17.00-19.00 | 17.00-19.00 | 17.00-19.00 | 17.00-19.00 | 17.00-19.00 | 17.00-19.00 | 17.00-19.00 |
| **Өйгә ҡайтыу, киске аш, тыныс уйындар, йыуындырыу** | 19.00-20.30 | 19.00-20.30 | 19.00-20.30 | 19.00-20.30 | 19.00-20.30 | 19.00-20.30 | 19.00-20.30 |
| **Төнгө йоҡо** | 20.30-7.00 | 20.30-7.00 | 20.30-7.00 | 20.30-7.00 | 20.30-7.00 | 20.30-7.00 | 20.30-7.00 |

## Режим моменттарын ойоштороу үҙенсәлектәре

Режим моменттарын тормошҡа ашырғанда, балаларҙың шәхси үҙенсәлектәре ниҫәпкә алырға кәрәк. Балалар баҡсаһының режимы баланың шәхси үҙенсәлектәренә ярашлы төҙөлһә, баланың үҙен уңайлы тойоуына, кәйефенең һәйбәт булыуына һәм әүҙемлегенә булышлы ҡитә.

**Туҡланыу.** Баланы ашарға ҡыҫтарға ярамай, улар аппетит менән ашарға тейеш. Әгәр балаларға ризыҡты һайлау хоҡуғы бирелһә, улар теләк менән ашаяҫаҡтар. Балаларҙың төрлө тиҙлектә ашауҙарын иҫәпкә алып, уларға үҙҙәренең яйы менән ашау мөмкинлеге бирелә.

Балаларҙы ашап бөткәндән һуң,өҫтәл артында башҡалар ашап бөткәнде көттөрөп ултыртырға ярамай. Ашап бөткәс, балалар«рәхмәт»әйтеп, үҙ-аллы уйындар менән шөғөлләнергә тейеш.

Балаларҙың һаулығын нығытыу һәм хәрәкәт әүҙемлеге ихтияждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн, көн һайын саф һауала йөрөү ҡарала. Саф һауала йөрөү ваҡытын ҡыҫҡартырға ярамай.

Көн ағышында, балаларҙың саф һауала йөрөүөн тәьмин итеү мөһим.

**Көндәлек уҡыу.** Көн режимында балаларға көн һайын даими уҡыу өсөн ваҡыт бүленергә тейеш. Уҡыу өсөн әҙәби әҫәрҙәрҙе генә түгел, танып-белеүҙе тәьмин

итеүсе китаптарҙы, балаларэнциклопедияһын, тыуған илдең һәм башҡа сит илдәрҙең тарихыһәммәҙәниәте тураһындағы әҫәрҙәрҙе һайларға кәрәк.

Китапты уҡыу һәм әҙәби геройҙар миҫалында уҡылғандар тураһында фекер алышыу балаларҙа социаль-әхлаҡи сифаттар тәрбиәләргә ярҙам итә. Китап уҡыуҙы дәрескә әйләндерергә ярамай - баланың һәр ваҡыт китап уҡыуҙы тыңлау йәки үҙ эштәре менән шөғөлләнеү теләген һайлау мөмкинлеге булырға тейеш. Педагогтың төп бурысы - бөтә балалар өсөн дә мауыҡтырғыс һәм ҡыҙыҡлы итеп уҡыу.

**Көндөҙгө йоҡо.** Балаларҙың көндөҙгө йоҡоһо өсөн шарттар булдырыу мөһим булып тора. Балалар йоҡлаған бүлмәлә тыныс һәм саф һауа булырға тейеш. Көн ағышындағы хәрәкәт әүҙемлеге һәм тыныс уйындар тәрән йоҡоға һәм тиҙ йоҡлап китеүгә ярҙам итә.

## Физкультура-һауыҡтырыу эше

Мәктәпкәсә ойошмала балаларҙың сәләмәтлеген нығытыу, организмын сыныҡтырыу һәм уның функцияларын камиллаштырыу буйынса даими эш алып барыу кәрәк.

Төрлө тәбиғәт факторҙарын (һауа, ҡояш, һыу) ҡулланып һәм балаларҙың һаулыҡ торошон, урындағы шарттарҙы иҫәпкә алып, медицина хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүе аҫтында төрлө сыныҡтырыу сараларын тормошҡа ашырыу кәрәк. Сыныҡтырыу сараларын үткәргәндә балаларҙың шәхси мөмкинлектәрен иҫәпкә алып, һәр бер бала менән айырым рәүештә эш итеү мөһим.

Мәктәпкәсә балалар ойошмаһының етәксеһе, медицина персоналы һәм ата-әсәләрҙең ҡарарынан сығып, махсус сыныҡтырыу сараларын үткәрергә мөмкин (мәҫәлән, һыу менән ҡойоноу).

Балаларҙың кәүҙә торошон дөрөҫ һаҡлауға иғтибар итеү, бүлмәне уртаса температура режимы менән тәьмин итеү, көн һайын елләтеү, балаларҙы бүлмәлә еңел кейем менән йөрөргә өйрәтеү мөһим.

Көн режимына ярашлы, балаларҙы саф һауаға алып сығырға кәрәк.

Оптималь хәрәкәт режимын — хәрәкәт әүҙемлеге формалары һәм дәрестәрҙең төрлө төрҙәрен рациональ сиратлаштырыуҙы тәьмин итеү мөһим, был хәрәкәт активлығының дөйөм ваҡыты баланың барлыҡ уяу булған ваҡытының 60 % нан да кәм булмаҫҡа тейеш.

Саф һауала үткәрелгән хәрәкәтле уйындарҙа һәм физик күнекмәләрҙә ҡатнашҡан балаларҙы дәртләндереп торорға кәрәк. Үҙ-аллы хәрәкәтле һәм спорт уйындарын, күнекмәләрҙе ойошторғанда балаларҙың инициативаһын үҫтереү, физкультура һәм спорт ҡулланмаларын үҙ-аллы ҡулланған балаларҙы дәртләндереү кәрәк.

Балаларҙа физик күнекмәләргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләргә һәм буш ваҡытта физкультура ҡулланмаларын ҡулланырға өйрәтергә кәрәк. Балаларҙың теләге буйынса, көн һайын иртәнге гимнастика үткәреү мөһим. Аҡыл нагрузкаһын талап иткән белем биреү эшмәкәрлеге барышында 1-3 минутлыҡ ял минуттары үткәрергә тәҡдим ителә.

Мөмкинлек булғанда балаларҙы йөҙөргә һәм гидроаэробика күнекмәләренә өйрәтергә кәрәк.

## Хәрәкәт әүҙемлеге режимы

| Эш төрө | Эшмәкәрлек төрө | Эшмәкәрлектең күләме һәм оҙонлоғо (минуттарҙа) | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | 3-4 йәш | 4-5 йәш | 5-6 йәш | 6-7 йәш |
| Физкультура дәрестәре | бүлмәлә | анаһына 2 тапҡыр 15-20 | аҙнаһына 2 тапҡыр 20-25 | аҙнаһына 2 тапҡыр 25-30 | аҙнаһына 2 тапҡыр 30-35 |
| | саф һауала | аҙнаһына 1 тапҡыр 15-20 | аҙнаһына 1 тапҡыр 20-25 | аҙнаһына 1 тапҡыр 25-30 | аҙнаһына 1 тапҡыр 30-35 |
| Көн режимында физкультура -һаулыҡ нығытыу эштәре. | иртәнге гимнастика (балаларҙың теләге буйынса) | көн һайын 5-6 | көн һайын 6-8 | көн һайын 8-10 | көн һайын 10-12 |
| | хәрәкәт һәм спорт уйындары һәм саф һауала күнекмәләр | көнөнә 2 тапҡыр (иртән һәм кис) 15-20 | көнөнә 2 тапҡыр (иртән һәм кис) 20-25 | көнөнә 2 тапҡыр (иртән һәм кис) 25-30 | көнөнә 2 тапҡыр (иртән һәм кис) 30-35 |
| | ял минуттары (дәрестең төрөнә һәм йөкмәткеһенә ҡарап) | көн һайын 3-5 | көн һайын 3-5 | көн һайын 3-5 | көн һайын 3-5 |
| Әүҙем ял | Физкультура саралары | айына 1 тапҡыр 20 | айына 1 тапҡыр 20 | айына 1 тапҡыр 30-45 | айына 1 тапҡыр 40 |
| | Физкультура байрамдары | ----- | йылына 2 тапҡыр 45 мин | йылына 2 тапҡыр 60 минутҡа тиклем | йылына 2 тапҡыр 60 мин |
| | Сәләмәтлек көнө | кварталға 1 тапҡыр | кварталға 1 тапҡыр | кварталға 1 тапҡыр | кварталға 1 тапҡыр |
| Үҙ-аллы хәрәкәт эшмәкәрлеге | Физкультура һәм спорт-уйын ҡорамалдарын үҙ-аллы файҙаланыу | көн һайын | көн һайын | көн һайын | көн һайын |
| | Үҙ-аллы хәрәкәтле | көн һайын | көн һайын | көн һайын | көн һайын |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | һәм спорт уйындары | | | | |

## Эш аҙнаһына белем биреү эшмәкәрлеген планлаштырыу

БАШ?ОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАЗЫ ДЫУАН РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТ Д)Й)М БЕЛЕМ БИРЕ! УЧРЕЖДЕНИЕЗЫ ӘБДРӘШИТ АУЫЛЫ «БАШЛАН;ЫС М2КТ2БЕ-БАЛАЛАР БА?САN№Ы»-ны8 белем биреү эшмәкәрлеге планы

- «Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында» ғы Федераль закон (29.12.2012 й. №273- ФЗ)
- Приказ Минобрнауки России от 17.10.2013 N 1155 "Об утверждении федерального государственного образовательного стандарта дошкольного образования"
- Приказ Министерства образования и науки РФ от 30 августа 2013 г. № 1014 "Об утверждении Порядка организации и осуществления образовательной деятельности по основным общеобразовательным программам - образовательным программам дошкольного образования". (с изменениями на 21 января 2019 года)
- Санитарные правила СП 2.4.3648-20 “Санитарно-эпидемиологические требования к организации воспитания и обучения, отдыха и оздоровления детей и молодежи” (утв. постановлением Главного государственного санитарного врача РФ от 28.09.2020 г. № 28).
- Санитарно-эпидемиологические правила и нормативы СанПиН 1.2.3685-21 «Гигиенические нормативы и требования к обеспечению безопасности и (или) безвредности для человека факторов вреды обитания» (утв. постановлением Главного государственного санитарного врача РФ от 28.01.2021 г. № 2).
- Санитарно-эпидемиологические правила и нормативы СанПиН 2.3/2.4.3590-20 «Санитарно-эпидемиологические требования к организации общественного питаниянаселения» (утв. постановлением Главного государственного санитарного врача РФ от 27.10.2020 г. № 32).

– Н.Е.Веракса, Т.С.Комарова, Э.М.Дорофеева редакторлығындағы “Тыуғандан алып мәктәпкә тиклем” (2019 й.)мәктәпкәсә дөйөм белем биреү программаһына таянып т060лг2н.

У7ыу йылы 1 сентябр62 башлана 32м 31 май6а тамамлана. Балалар ба7са3ы 5 к0нл0к эш а6на3ы режимында эшл2й. Белем бире1 эшм2к2рлеге баш7орт 32м рус теленд2 алып барыла.

2021-2022 у7ыу йылында бер т0рл0 й2шт2ге балалар т0рк0м0 эшл2й:

- төрлө йәштәге өлкән төркөмө балалары

План эстәлеге ике өлөштән тора: беренсе өлөшөндә балалар мотлаҡ үҙләштерергә тейешле булған (60%) федераль кимәлдә тәҡдим ителгән һәм федераль реестрға ингән Төп мәктәпкәсә белем биреү өлгө программаһы материалдарына ярашлы алынған йөкмәтке бирелә. Икенсе өлөшөндә (40%) белем-тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли-төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар бирелә. Һәр ике өлөштә бирелгән материалдар бер-береһенең йөкмәткеһен тулыландырып, асыҡлап, балаларға тирә-йүнде танып-белергә, улар нигеҙендә үҙ-аллы төрлө һығымталар яһарға һәм шул рәүешле уларҙың аҡыл-зиһен кимәлен үҫтерергә ярҙам итеүҙе күҙаллай.

Белем-т2рби2 біре1 эшенд2 7атнашыусылартарафынана 3айлап алын4ан 0л0ш 32м милли т062к 16енс2лект2рен са4ылдыр4ан париаль программалар:

- “Баш7ортостан – тыу4ан илем” м2кт2пк2с2 й2шт2ге балалар 0с0н Баш7ортостан Республика3ын 0йр2не1 программа3ы. (Ф.№. А6набаева, Г.Ш. 2лб2кова, 2.Р. Буранбаева, К.Ф. Мортаева)
- Парциальная программа обучения русской разговорной речи в башкирских детских дошкольных образовательных учреждениях (Давлетбаева Р. Г., Азнабаева Ф. Г., Каримова Я. С., Кагарманова Ф.)
- «Мине8 мен2н т0ш0р» парциаль программа3ы Е.А.Дудко (Парциальной программой Е.А.Дудко «Рисуй со мной»)

Уҡытыу-тәрбиә эше тәрбиәләнеүселәрҙең контингентын, уларҙың шәхси үҫеш һәм йәш үҙенсәлектәрен, ата-әсәләрҙең социаль заказдарын иҫәпкә алып төҙөлә.

Тәрбиә-белем биреү процесын ойошторған ваҡытта тәрбиәләү, үҫтереү һәм өйрәтеү маҡсаттарының һәм бурыстарының берҙәмлеген тәьмин итеү кәрәк, шуның менән бергә ҡуйылған маҡсат һәм бурыстарҙы балаларға саманан артыҡ эш бирмәйенсә, кәрәкле һәм етәрлек материалға таянып, тейешле «минимум»ға максималь рәүештә яҡынайтып хәл итеү кәрәк. Белем биреү процесын белем биреү өлкәләре интеграцияһын иҫәпкә алып, комплекслы-тематик принципҡа нигеҙләнеп ҡороу был маҡсатты тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирә.

Белем биреү эшен бөтә яҡлап төп темаға бәйләп төҙөү, баланың үҫешенә ҙур йоғонто яһай һәм уның практик яҡтан тәжрибә туплауына һәм күнекмәләрҙе башҡарыу ысулдарын үҙләштереүенә, аңлы фекерләүенә төрлө мөмкинлектәр аса. Темалар мәғлүмәттәрҙе төрлө ысулдар менән ойоштороорға ярҙам итә.

Төрлө йәштәге төркөмдәрҙә оҡшаш темаларҙы тормошҡа ашырыу мәктәпкәсә осорҙа балалар үҫешендәге күсәгилешлекте һәм белем биреү маҡсаттарының берҙәмлегенә ирешеүҙе, балаларҙың шәхси мөмкинлекләренә ҡарап уларҙың тулы үҫешен тәьмин итә.

Белем биреү процесын ойоштороуҙың тематик принцибы милли-төбәк һәм мәҙәни йөкмәткеле материалдарҙы индерергә, балалар баҡсаһының үҙенсәлеген иҫәпкә алып эш итергә мөмкинлек бирә.

Бер темаға бирелгән ваҡыт– 2-3 аҙна. Тема төркөмдә һәм үҫеш үҙәктәрендә (мөйөштәрендә) булған материалдарҙы һайлауҙа сағылырға тейеш.

Беренсе төркөмсә балалары менән (1-1,5 йәш) дәрестәр көндөң икенсе яртыһында үткәрелә. Балалар 3-5 кешенән торған төркөмсәләргә бүленә һәм дәрес ваҡыты 6 минут тәшкил итә.

1.5 йәштән алып 3 йәшкә тиклемге кесе йәштәге балалар өсөн өҙлөкһөҙ, туранан-тура белем биреү эшмәкәрлеге дауамы 10 минут. Белем биреү эшмәкәрлеге көндөң беренсе һәм икенсе яртыһында тормошҡа ашырыла (8-10-ар минут). Белем биреү эшмәкәрлеген саф һауала йөрөгәндә уйын майҙансығында ойоштороорға мөмкин.

3 йәштән алып 4 йәшкә тиклемге балалар өсөн өҙлөкһөҙ туранан-тура белем биреү эшмәкәрлегенең дауамы 15 минут, 4 йәштән алып 5 йәшкә тиклемгеге балалар өсөн - 20 минут, 5 йәштән 6 йәшкә тиклемге балалар өсөн - 25 минут, ә 6 йәштән 7 йәшкә тиклемге балалар өсөн 30 минут артыҡ түгел.

Көндөң беренсе яртыһында кескәйҙәр төркөмөндә һәм уртансытөркөмдә рөхсәт ителә торған максималь белем биреү нагрузкаһы күләме, төркөмгә ҡарап, 30 һәм 40 минуттан, ә ҙурҙар һәм әҙерлек төркөмдәрендә - төркөмгә ҡарап, 50 минуттан һәм 1,5 сәғәттән артмай. Өҙлөкһөҙ белем биреү эшмәкәрлегенә бирелгән ваҡыт уртаһында физкультура минуттары үткәрелә. Өҙлөкһөҙ белем биреү эшмәкәрлеге ваҡыттары араһындағы тәнәфестәр 10 минуттан кәм түгел.

Статик характерҙағы туранан-тура белем биреү эшмәкәрлеге уртаһында физкультура минуттары үткәрелә.

| белем биреү өлкәләре | Ойоштор олған белем биреү эшмәкәрлеге | Сабыйҙар төркөмө | Иң кескәй ҙәрҙең беренсе төркөмө | Иң кескәй ҙәрҙең икенсе төркөмө | Кескәйҙәр төркөмө | Уртансы төркөм | Өлкәндәр төркөмө | Мәктәпкә әҙерлек төркөмө |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | 1-1.5 й2ш | 1.5-2 й2ш | 2-3 й2ш | 3-4 й2ш | 4-5 й2ш | 5-6 й2ш | 6-7 й2ш |
| **1. мотлаҡ үҙләштерергә тейеш (60%)** | | | | | | | | |
| **белем биреү** | **База** | | | | | | | |
| | Танып-беле1 – э6л2не1 216емлеге | | | | | | | |
| ***Таныпбелеү үҫеше*** | Математика үҫеше | | | | 1 | 1 | 2 | 2 |
| | Тирә-йүнде таныпбелеү | 2 | 2 | | | | | |
| | Бала һәм тирә-йүн | | | 1 | | | | |
| | Фән һәм тәбиғәт нигеҙҙәре | | | | 1 | 1 | 1 | 1 |
| | Дидактик материалдар мен2н | 2 | 2 | | | | | |
| | | Коммуникатив әүҙемлек | | | | | | |
| ***Телмәр үҫеше*** | Телмәр үҫтереү | | | 0,5 | 1 | 1 | 1 | 1 |
| | Грамота нигеҙҙәре | | | | | | 1 | 1 |
| | Нәфис әҙәбиәт | | | 0,5 | | | | |
| | | С2н42т әүҙемлеге | | | | | | |
| ***Художестволы-эстетикүҫеш*** | музыка | | | 1 | | | | |
| | Һүрәт төшөрөү | | | | | | | |
| | Әүәләү/7оролмалар | | | | | | | |
| | Әүәләү/Йәбештереү/ҡу | | | | | | | |
| | Т060л0ш 7оролмалар мен2н эш | | | | | | | |
| | | Хәрәкәт әүҙемлеге | | | | | | |
| ***Физик үҫеш*** | Х2р2к2т 19тере1 | 2 | 2 | | | | | |
| | Бүлмәлә физкультура үткәреү | | | 3 | 2 | 2 | 2 | 2 |
| | Саф һауала физкультура үткәреү | | | | 1 | 1 | 1 | 1 |
| ***Социаль-коммуникатив үҫеш*** | Уйын, әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереү социализация, 1ҙ-үҙеңдехеҙмәтләндереү, хужалыҡ- | | Режим моменттарында | | | | | |

| Х21еф3е6 й2ш21 ниге662ре | | | Режим моменттарында | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| ***А6на4а*** | | 6 | 6 | 6 | 6 | 6 | 8 | 8 |
| | Иртэнге гимнастика | | | | көн һайын | | | |
| **Режим моменттарындағы аралашыуҙар** | Сыныҡтырыу сараларының комплексы | көн һайын | | | | | | |
| | Режим моменттарындағы аралашыуҙар | көн һайын | | | | | | |
| | Әҙәби әҫәрҙәр уҡыу | көн һайын | | | | | | |
| | Дежур итеү | көн һайын | | | | | | |
| | Саф һауала | көн һайын | | | | | | |
| | Сюжет-роль уйындары<br>Дидак 32м 19тере1 уйындары<br>Хәрәкәтле | көн һайын | | | | | | |
| | Конструктив-моделләштереү | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 |
| | Зынау (т2жриб2)1тк2ре1 | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 |
| | У7ыу 32м 30йл21 | 1 | 1 | 1 | 2 | 2 | 2 | 2 |
| | Балалар мен2н 28г2м2 | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 |
| | Иллюстрация 7арау | 2 | 2 | 2 | 2 | 2 | 2 | 2 |
| | Күңел асыу | | Айына 1 тап7ыр | | | | | |
| | Спорт уйындарына | | А6на3ына1 тап7ыр | | | | | |
| ***Балаларҙың үҙ-аллы*** | Үҫешмөйөштәрендәбалаларҙыңүҙ-аллыэшмәкәрлеге | | көн һайын | | | | | |
| | | **2. белем-тәрбиәбиреүэшендәкатнашыусылартарафынанһайлап алынғанһәммилли-** | | | | | | |
| | Коммуникатив әүҙемлек | | | | | | | |
| Телмәр үҫеше | Телмәр үҫтереү | 1 | 1 | 0,5 | | | | |
| | Нәфис әҙәбиәт | | | 0,5 | | | | |
| | Рус теле | | | | | | 2 | 2 |
| | | С2н42т әүҙемлеге | | | | | | |
| ***Художество-эстетик яҡтан үҫеш*** | музыка | 2 | 2 | 1 | 2 | 2 | 2 | 2 |
| | Һүрәт төшөрөү | | | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 |
| | Әүәләү/7оролмалар т0601 | | | 1 | | | | |
| | Әүәләү/Йәбештереү/ҡул хеҙмәте | | | | 1 | 1 | 1 | 1 |
| | Т060л0ш 7оролмалар мен2н эш | 1 | 1 | | | | | |
| ***А6на4а*** | | 10 | 10 | 10 | 10 | 10 | 14 | 14 |

**Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлегенд2мотлаҡ үҙләштерергә тейеш 32м белем-тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли-төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар 0л0ш0н 3анау**

| Т0рк0м | төрлөйәшт2гекеск2йбалал артөркөм0 | | | төрлөйәшт2ге 0лкәнбалалартөркөмө | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | **1-1.5 йәш** | **1.5-2 йәш** | **2-3 йәш** | **3-4 йәш** | **4-5 йәш** | **5-6 йәш** | **6-7 йәш** |
| **К0н0н2 с242тт2р** | | | | | | | |
| **мотлаҡ үҙләштерергә тейеш (60%)** | 7 мин. | 12 мин. | 12 мин. | 18 мин. | 24 мин. | 45 мин. | 54 мин. |
| **белем-тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли-төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар (40%)** | 5 мин. | 8 мин. | 8 мин. | 12 мин. | 16 мин. | 30 мин. | 36 мин. |
| **А6на3ына с242тт2р 3аны** | | | | | | | |
| **мотлаҡ үҙләштерергә тейеш (60%)** | 36 мин. | 60 мин. | 60 мин. | 90 мин. | 120 мин. | 240 мин. | 240мин. |
| **белем-тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли-төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар (40%)** | 24 мин. | 40 мин. | 40 мин. | 60 мин. | 80 мин. | 180 мин. | 180 мин. |
| **Йылына с242тт2р** | | | | | | | |
| **мотлаҡ үҙләштерергә тейеш (60%)** | 216 | 216 | 216 | 216 | 216 | 302 | 302 |
| **белем-тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли-төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар (40%)** | 144 | 144 | 144 | 144 | 144 | 202 | 202 |

| Б0т23е | 360 | 360 | 360 | 360 | 360 | 504 | 302 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|

**Календарь у7ыу графигы**

| | төрлөйәшт2гекеск2йбалаллартөркөм0 | | | төрлөйәшт2ге 0лкәнбалалартөркөмө | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | **1-1,5 йәш** | **1,5-2 йәш** | **2-3 йәш** | **3-4 йәш** | **4-5 йәш** | **5-6 йәш** | **6-7 йәш** |
| **Эш ва7ыты** | 9 с24. 00 минут, с242т 8.00 - 17.00 тиклем. | | | | | | |
| **Ял 32м байрам көндәре** | Ял к0нд2ре - ш2мбе, й2кш2мбе. Байрам к0нд2ре - 2021-2022 уҡыу йылы календарынаярашлы | | | | | | |
| **У7ыу йылы башы** | 1 сентябрь | | | | | | |
| **Уҡыу йылы оҙайлығы** | 36а6на | | | | | | |
| **Каникулдар** | Й2йге осор – 1 июнд2н 31 август7а тиклем. Ойошторолғанбелембиреүэшмәкәрлеге тик эстетик-һауыҡтырыуциклы 4ына | | | | | | |
| **У7ыу а6на3ы** | 5 к0н | | | | | | |
| **А6на4а ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге** | 1 с242т | 1 с242т 40 минут | 1 с242т 40 минут | 2 с242т 30 минут | 3 с242т 20 минут | 5 с242т 50 минут | 7 с242т |
| | 6 | 10 | 10 | 10 | 10 | 14 | 14 |
| **А6на4а ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге к0нд08 7ай3ы ярты3ында** | к0нд08 икенсе ярты3ында | к0нд08 беренсе 32м икенсе ярты3ында | к0нд08 беренсе 32м икенсе ярты3ында | к0нд08 беренсе ярты3ында | к0нд08 беренсе ярты3ында | к0нд08 беренсе 32м икенсе ярты3ында | к0нд08 беренсе 32м икенсе ярты3ында |
| **Ойошторолғанбелембиреүэшмәкәрлеге араһында4ы тәнәфес** | 10 минут | | | | | | |
| **У7ыу йылы 3у8ы** | 31 май | | | | | | |
| **Индивидуаль эш ва7ыты** | Көн а6айлы4ында | | | | | | |
| **Төркөм комплектлау** | 1 июнд2н 31 август7а тиклем. Урын бул4ан ва7ытта 1 сентябр62н 31 май4а тиклем | | | | | | |

# Программаны тормошҡа ашырыу шарттары

## Предметлы арауыҡ мөхитен ойоштороу үҙенсәлектәре

Мөхит төшөнсәһе аңлатмаһында тәбиғәт, социаль-көнкүреш йәки мәҙәни-эстетик характерлы тирә-йүн күҙ уңында тотола. Кешенең көн күреү шарттары - уның тормошта йәшәйеш арауығы булып тора. Балалар баҡсаһындағы белем биреү мөхите булып, балаларҙың йәшәүе өсөн кәрәкле махсус шарттар тора. Предметлы-үҫтереүсе мөхит, балаларҙың талаптарын ҡәнәғәтләндереүсе булараҡ, танып

белеүҙә, аралашыуҙа, хеҙмәттә, физик һәм рухи яҡтан үҫеште тәьмин итеүсе бай йөкмәткеле һәм сағыу биҙәлешле махсус ойошторолған йәшәйеш арауығы. Хәҙерге замандағы үҫтереүсе предметлы - арауыҡ мөхите баланың әүҙем йәшәү эшмәкәрлеген тәьмин итеүҙе, уның ижади һәләттәрен төрлө яҡлап һәм төрлө алымдар менән үҫтереүҙе үҙ эсенә ала.

## Мөхит ойоштороуға төп талаптар:

Мәктәпкәсә йәштәге балалар ойошмаһының үҫтереүсе предмет-арауыҡ мөхите түбәндәге талаптарға тап килә:

- бай йөкмәткеле һәм үҫтереүсе;
- вариатив, тиҙ йыйылмалы һәм ҡоролмалы;
- күп функционаллы;
- хәүефһеҙ;
- һаулыҡты нығытыуға, һаҡлауға ярҙам итеүсе;
- бала ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүсе, йәғни уның теләгән эшмәкәрлек менән шөғөлләнә алыу мөмкинлеге;
- эстетик яҡтан сағыу һәм мауыҡтырғыс.

## Мөхит ойоштороуҙың төп бурыстар:

Мәктәпкәсә йәштәге балалар ойошмаһының бүлмәләренең йыһаздары хәүефһеҙ (һаулыҡҡа ҡурҡыныс янамаған), эстетик яҡтан зауыҡлы итеп биҙәлгән. Йыһаз баланың йәшенә һәм буйына ярашлы, ә уйынсыҡтар һәр йәш төркөмөндәге балаларҙы үҫтереүсе булараҡ тейешле роль үтәүсе дидактик саралар булып ҡулланылыла.

Үҫтереүсе предметлы-арауыҡ мөхите бала һәм ололарҙың берҙәм һәм үҙаллылыҡ эшмәкәрлеге булараҡ, бай йөкмәткеле, кәрәкле һәм баланың ихтыяждарын тормошҡа ашырыу талаптарына яуап бирә.

Кескәйҙәр төркөмөндә балалар уйынының нигеҙендә предмет ята, шуға күрә ололар һәр ваҡыт уйын мөхите яңыртылып тора. Төркөм бүлмәһендә балаға үҙаллы хәрәкәтләнеү әүҙемлеге өсөн шарттар булдырылған: көнөнә бер нисә тапҡыр уйын майҙансығын йыһаздарҙан һәм уйынсыҡтарҙан бушатып, хәрәкәтле уйын эшмәкәрлеген үҫтереү өсөн  икенсе уйынсыҡтар ҡуйыла, хәрәкәт әүҙемлеген дәртләндереү өсөн был уйынсыҡтар алмаштырылып тора.

Өлкәндәр төркөмөндә төп теләк уйын темаһына нигеҙләнә, шуға күрә төрлөләнгән күп функциаль үтәүсе предметлы мөхит балаларҙың  әүҙем фекерләүен уята һәм улар һәр ваҡыт уйын арауығын һығылмалы модулдар, шаршауҙар, ултырғыстар, кубтар ҡулланып яңыса төҙөйҙәр. Предметлы - уйын мөхите балаларға уйын арауығын икенсе күҙлектән сығып ҡарарға, уйын урынын тулыландырыуҙа әүҙемлек күрһәтергә һәм уның һөҙөмтәһен күрергә ярҙам итә.

Үҫтереүсе предметлы-арауыҡ мөхите тәбиғи характерлы объекттар менән тәьмин ителеүҙе күҙаллай: балалар баҡсаһындағы майҙансыҡта үҫкән үҫемлектәрҙе, ҡош-ҡорттарҙы, бөжәктәрҙе күҙәтеү, уларға ярҙам итеү теләген уятырға тейеш., тәбиғәт материалдары менән тәжрибә, тикшереү эштәре үткәрелә һ.б.

Үҫтереүсе предметлы-арауыҡ мөхите, мәҙәни арауыҡ булараҡ та, балалар тәрбиәләүгә ҙур йоғонто яһай (халыҡ ижады, көнкүреш кәрәк-яраҡтары, репродукциялар, бөйөк кешеләрҙең портреттары, милли биҙәктәр, кейемдәр, музыка ҡоралдары: ҡурай, ҡумыҙ, дөңгөр, думбыра).

Төркөм бүлмәһендә һәр береһенә айырым урын бүленгән үҙәктәр йәки мөйөштәр булдырылған, уларҙы ҙур күләмле үҫтереүсе материалдар менән байытыу (китаптар, уйынсыҡтар, ижад өсөн материалдар һ.б.). Арауыҡты ошо кимәлдә ойоштороу, балаларға үҙе өсөн ҡыҙыҡлы шөғөл һайлауға, ә педагогҡа баланың шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, белем биреү эшен файҙалы ойоштороуға мөмкинлектәр бирә.

Мөйөштәрҙе (үҙәктәрҙе) тулыландырыу белем биреү эшенең тематик планына ярашлы үҙгәреп тора. Үҫтереү үҙәктәре (мөйөштәре) үҙ эсенә түбәндәгеләрҙе ала:

-сюжетлы-ролле уйындар өсөн мөйөш;

-театр уйындары өсөн мөйөш;

-китап мөйөшө;

-өҫтәл-арты уйындары өсөн мөйөш:

-күргәҙмә (балалар һүрәттәре, халыҡ оҫталарының эштәре һ.б.);

-тәбиғәт мөйөшө;

-һыу һәм ҡом менән уйнау, тәжрибәләр өсөн мөйөш;

-баланың үҙ-аллылыҡ эшмәкәрлегендәге төрлө тармаҡтар мөйөшө (һынлы сәнғәт, музыка, ҡоролмалар төҙөү һ.б.);

-ҙур йомшаҡ ҡоролмалар төҙөү мөйөшө (блоктар,өйҙәр, тоннелдар һ.б.);

-уйнау мөйөшө ( уйынсыҡтар һәм төҙөлөш материалдары менән) тора.

**Учреждениела һәм төркөм бүлмәләренд2 бүлмә предметлы-үҫтереүсе мөхит.**

| Бина төрҙәре | Төп тәғәйенләнеше | Йыһазландырыу |
|---|---|---|
| **Предметлы-үҫтереүсе мөхитте** | | |
| Коридор | - Хеҙмәткәрҙәр һәм ата-әсәләр 0с0н мәғлүмәт | - Ата-әсәләр өсөн стендтар, визитка.<br>- Хеҙмәткәрҙәр өсөн стенд |
| Участоктар | - Саф 3ауала й0р01, күҙәтеүҙәр;<br>- Уйын эшмәкәрлеге;<br>- үҙ аллы хәрәкәт эшмәкәрлеге<br>- Хеҙмәт эшмәкәрлеге. | - Бөтә йәш төркөмдәре өсөн саф 3ауала й0р01 майҙансыҡтары.<br>- Уйын, функциональ, спорт һәм ҡорамалдар.<br>- Физкультура майҙансығы.<br>- юл хәрәкәте ҡағиҙәләре менән таныштырыу өсөн юлдар<br>- Баҡса, клумбалар. Экологик һуҡмаҡ |
| Физкультура майҙансығы | - Физик культура буйынса ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге, спорт уйындары, ял саралары, байрамдар | - Спорт 7орамалдары<br>- Спорт уйындары 0с0н 7орамалдар |
| **Группала предметлы-үҫтереүсе мөхит** | | |
| Микроцентр «Физкультура | - Үҙ аллы хәрәкәт эшмәкәрлеген киңәйтеү | -й0р01, йүгереү, тигеҙлек өсөн ҡорамалдар |

| | | |
|---|---|---|
| м0й0ш0» | | - 3икере1 0с0н<br>- Шыуыу, ыр4ытыу, тотоу өсөн - Для ползания и лазания<br>- Спорт һәм хәрәкәт уйындары өсөн атрибуттар<br>- Традицион бульма4ан физкультура 7орамалдары |
| Микроцентр «Т2би42т м0й0ш0» | - Тәжрибә аһын киңәйтеү, уны хеҙмәт эшмәкәрлегендә ҡулланыу. | - Т2би42т календаре<br>- Йәш тәҡдимдәренә ярашлы, бүлмә үҫемлектәре<br>- Миҙгелле материалдар<br>- экологик тематикаға стендтар<br>- Макеттар<br>- Тәбиғәт йөкмәткеле әҙәбиәт, һүрәттәр йыйылмаһы, альбомдар<br>- Тәжрибә үткәреү өсөн ябай материал<br>- Дидактик, өйрәтеү һәм экология буйынса уйындар<br>- Хеҙмәт эшмәкәрлеге өсөн инвентарь<br>- Тәбиғи материалдар.<br>- астрономия буынса материал (ст, подг) |
| Микроцентр «үҫтереү уйындарым0й0ш0» | - Балаларҙың аһын сенсор тәжрибә3ен киңәйтеү | - Сенсор тәрбиә буйынса дидактик материал<br>- Дидактик уйындар<br>- 09т2л-баҫма уйындар<br>- Эксперименттар өсөн материалдар |
| Микроцентр «Төҙөлөш оҫтаханаһы» | - Йәшәү, донъяны танып белеү эшмәкәрлеге тәжрибәһен продуктив7а әйләндере1. Ҡул 08талы4ын, ижад19тере1. Ижадсылар позицияларын булдырыу | - өҫтәл төҙөлөш материалдары<br>- Пластмасс конструкторбар (кесе йәш- ҙур деталдәр менән)<br>- Металл деталдәр менән конструкторҙар - өлкән йәштәгеләр<br>- Бөтә төр схема һәм моделдәр өсөн конструктор – өлкән йәштәгеләр<br>- Йомшаҡ төҙөлөш - модулле уйын - кесе йәштән<br>- Транспорт уйынсы7тары<br>- Схема, иллюстрациялар айырым ҡоролмалар (күпер, йорттары, корабль, самолет һ. б.). |
| Микроцентр «Уйын зонаһы» | - Бар тирә-яҡ донъя тураһында белем алыу һәм уйында тормошҡа ашырыу. Тормош тәжрибәһе туплау | - Сюжет уйындары өсөн атрибутика («Ғаилә», «Больница», «Магазин», «Мәктәп», «Бөҙрәхана», «Почта», «Космонавт», «Китапхана», «Ателье»)<br>- Предмет - урынбаҫары |

| | | |
|---|---|---|
| Микроцентр «Хәүефһеҙлек мөйөшө» | - Тәжрибә аңын киңәйте1, уны көндәлек эшмәкәрлегендә ҡулланыла. | - профилактикалау буйынса дидактик, өҫтәл уйындары<br>- юл саты, ҡала, райондар макеты<br>- Юл билдәләре<br>- Юл хәрәкәте ҡағиҙәләре тураһында әҙәбиәт |
| Микроцентр «Тыу4ан я7ты 0йр2не1 м0Й0ш0» | - Баланы9 тыу4ан  яҡ7а ҡарашынкиңәйте1, тәжрибәhен туплау | - Башҡортостан республикаһы дәүләт символикалары<br>- Рус һәм башҡорт кейем өлгөһө<br>- Күргәҙмә материал: альбом, картиналар һ. б. фотоиллюстрация |
| Микроцентр «Китап м0Й0ш0» | - Үҙ аллы китап менән эшләү оҫталығын формалаштырыу, «таба» мәғлүмәт таба беле1 | - Баланың йәшенә ярашлы, балалар нәфис әҙәбиәте<br>- Нәфис әҙәбиәт<br>- Нәфис әҙәбиәт, тирә-яҡ донъя менән танышыу һәм белем биреү эшмәкәрлеге буйынса иллюстрациялар - рәссам – иллюстраторҙар тураһында материалдар<br>- шағир, яҙыусы портреттары (өлкән йәштәге)<br>- Тематик к1рг26м2л2р |
| Микроцентр «Театрм0Й0ш0» | - Балалар ижади һәләтен үҫтерә, үҙен күрһәтергә ынтылышы уйын-драматизация | - Ширма<br>- Костюм элементтары<br>- Төрлө театр төрҙәре (йәшенә ярашлы)<br>- Предмет декорациялар |
| Микроцентр «Ижад оҫтаханаһы» | - Йәшәү, донъяны танып белеү эшмәкәрлеге тәжрибәһенпродуктив7а әйләндере1. Ҡул 32л2тен, ижадты19тере1. Ижадсылар позицияларын булдырыу | - Төрлө форматтағы, төрлө формалағы, төрлө төҫтәрге ҡағыҙ<br>- Етерлек күләмдә төҫлө ҡәләм, буяу, бумала, сепр2к, пластилин (стека, әүәләгәндә өсөн таҡта)<br>- Төҫлө ҡағыҙ һәм ҡатырға<br>- етерлек кимәлдә  ҡайсы, елем, клеенка, сепр2к, аппликация өсөн салфеткалар<br>- Бросовый материалдар (фольга, кәнфитфантигы  һ. б.<br>- Күргәҙмә, ата-әсәләр һәм балаларҙың уртаҡ эше өсөн эш урындарын<br>- Альбом - раскраска<br>- Открыткалар йыйылмаһы, һүрәттәр, альбомдар һәм иллюстрацияларҙың менән китап, предметлы һүрәттәр |

| | | |
|---|---|---|
| | | - Халыҡ – ҡулланма сәнғәте әйбере |
| Микроцентр «Музыкам0Й0ш0» | - үҙаллылыҡ -ритмик эшмәкәрлектә ижади һәләттәрен үҫтереү | - Балалар музыка ҡоралдары<br>- Композиторҙар портреттары (өлкән йәштәге)<br>- Магнитофон<br>- аудиоя6малар<br>- Музыкаль уйынсыҡтар<br>- Уйынсыҡ - самоделка<br>- Музыкаль - дидактик уйындар<br>- Музыкаль - дидактик әсбаптар |

## Программаны тормошҡа ашырыу өсөн уҡытыу-методик ҡулланмалар

| белем биреү өлкәләре | Өҫтәлмә методик 7улланмалар |
|---|---|
| ***Физик үҫеше*** | -Ф.Г.Азнабаева , Д.У.Еникеева, Ф.Г. Яфаева, Х2р2к2тт2 192бе6, Балалар ба7са3ында физик белем баре1 эшм2к2рлеге буйынса методик 7улланма,«Китап»,0ф0, 2013<br>-Л.И. Пензулаева « Физкультурные занятия в детском саду», « Мозаика-синтез», 2012.<br>-М.А.Фисенко « Физкультура первая и вторая младшие группы» , ИТД « Корифей», 2010.<br>-С.Е.Голомидова « Физкультура. Нестандартные занятия. Старшая группа», ИТД « Корифей», 2010. |
| ***Социаль-коммуникатив үҫеш*** | - Азнабаева Ф.Г. Мин – ш2хес.-Уфа, Китап,2011.<br>- Азнабаева Ф.Ф. Обучаем развивая. – Уфа, 2004.<br>-Галанова Т.В. Развивающие игры с малышами до 3 лет. Ярославль, 2002.<br>- Кузнецова А. Лучшие развивающие игры. – М., 2008.<br>- Михайленко Н.Я. Организация сюжетной игры в детском саду: пособие для воспитателя / Н.Я. Михайленко, Н.А. Короткова. – М.: ЛИНКА-ПРЕСС, 2009.<br>- Алешине Н.В. Патриотическое воспитание дошкольников.- М.: ЦГЛ, 2004.<br>Белая К.Ю., Кондрыкинская Л.А. Патриотическое воспитание. (Учебно-методическое пособие). – М.: Элти-Кудиц, 2002.<br>- Козлова С.А. Мой мир: Приобщение ребенка к социальному миру. – М.: «ЛИНКА-ПРЕСС», 2000.<br>- Кондрыкинская Л.А. Занятия по патриотическому воспитанию в детском саду. – М.: ТЦ Сфера, 2010.<br>- Шорыгина Т.А. Беседы о правах ребенка. – М., 2007.<br>- Основы безопасности детей дошкольного возраста. / Н.Н. Авдеева, О.Л. Князева, Р.Б. Стеркина. М.: Просвещение, 2007.<br>- Белая К.Ю., Зимонина В.Н. Как обеспечить безопасность дошкольников: конспекты занятий по основам безопасности детей дошкольного возраста. – М., 2000.<br>- Хромцова Т.Г. Воспитание безопасного поведения дошкольников в быту. Учебное пособие. - М.: Педагогическое общество России, 2005.<br>- Улашенко Н.Б. Правила дорожного движения. Нестандартные занятия. Подготовительная группа. – Волгоград: ИТД «Корифей», 2010. |

| | |
|---|---|
| | - Саулина Т.Ф. Три сигнала светофора: Ознакомление дошкольников с правилами дорожного движения: Для работы с детьми 3-7 лет.- М.: Мозаика-Синтез, 2008.<br>- Правила дорожного движения для детей дошкольного возраста /Сост. Н.А.Извекова, А.Ф. Медведева и др.; Под ред. Е.А.Романовой, А.Б.Малюшкина. - М.: ТЦ Сфера, 2007.<br>- Авдеева Н.Н., Князева Н.Л., Стеркина Р.Б. Безопасность: Учебное пособие по основам безопасности жизнедеятельности старшего дошкольного возраста. – СПб.: «ДЕТСТВО-ПРЕСС», 2007.<br>- Шорыгина Т.А. Осторожные сказки: Безопасность для малышей. – М.: Книголюб, 2004. |
| *Телмәр үҫеше* | -Азнабаева Ф.Г., Йылыкбаева Г.Р., Харисова М.Р., Аминева Р.И. Тылсымлы 0нд2р.Балалар бакса3ы т2рби2селяре 0с0н к1рг26м2ле-методик 7улланма. «Китап»,2012.<br>- Азнабаева Ф.Г., Йылыкбаева Г.Р., Нарынбаева А.З. Г0лбостан: Балалар бакса3ында телм2р 19тере1 0с0н методик 7улланма.-«Китап»,2010.<br>- Давлетбаева Р.Г., АзнабаеваФ.Г и др. Программа обучения русской разговорной речи в башкирских детских дошкольных образовательных учреждениях.<br>-Каримова В.Б. М2кт2пк2с2 й2шт2ге балалар6ы грамота4а 26ерл21 0с0н методик 7улланма.- Мет.пособие,2005<br>-Азнабаева Ф.Г., Фаизова М.И.Азнабаева Е. Г. Русский язык в национальном дошкольном образовательном учреждении.- «Китап»,2010.<br>- Е.В. Колесникова, «От слова к звуку», Ювента ,2015.<br>- Е.В. Колесникова,«Запоминаю буквы»,Ювента, 2016.<br>- Нищева Н.В. Развитие связной речи. – СПб., 2009.<br>- Ушакова О.С. Развитие речи детей 3-4 лет. - М., 2008.<br>- Ушакова О.С., Арушанова А.Г., Струнина Е.М. Придумай слово: Речевые игры и упражнения для дошкольников: Книга для воспитателей детского сада и родителей. - М., 1996.<br>- Баландина Г.Ф. Игрушки - перчатки для кукольного театра. – Уфа: Китап, 2004.<br>- Жукова О. Игры со сказками. – СПб., 2004.<br>- Книга для чтения в детском саду и дома: 4-5 лет / Сост. В.В. Гербова и др. – М., 2006.<br>- Книга для чтения в детском саду и дома: 5-7 лет / Сост. В.В. Гербова и др. – М., 2006.<br>- Хрестоматия для детей старшего дошкольного возраста/ Под ред. В.И.Логиновой.- М.: Просвещение, 1990.<br>- Хрестоматия для дошкольников 2-4 года /Сост. Н.П.Ильчук и др. М.,99 |
| *Танып-белеү үҫеше* | -Азнабаева Ф.Г., Шафикова Г.Р. «Т26и42т 32м кеше». Методик 7улланма .- Уфа: Китап ,2012.<br>- Марченко Л.И. Комплексное развитие детей в процессе их общения с природой. – Уфа: Китап, 2008.<br>- Николаева С.Н. Юный эколог. Программа экологического образования в детском саду. – М.: Мозаика-Синтез, 2010.<br>- Колесникова Е.В. Программа «Математические ступеньки».- М.: ТЦ Сфера, 2007.<br>- Колесникова Е.В. Математика для детей 4-5 лет. – М., 2007.<br>- Колесникова Е.В. Математика для детей 6-7 лет. – М., 2007.<br>- Колесникова Е.В. Математика для дошкольников. 3-4 года. – М., 2000.<br>- Марченко Л.И. Весна. – Методические рекомендации по комплексному развитию дошкольников в процессе их общения с природой. Уфа, 2008. |

| | |
|---|---|
| | - Марченко Л.И. Зима. Методические рекомендации по комплексному развитию дошкольников в процессе их общения с природой. – Уфа, 2008.<br>- Марченко Л.И. Лето. Методические рекомендации по комплексному развитию дошкольников в процессе их общения с природой. – Уфа, 2008.<br>- Марченко Л.И. Осень. Методические рекомендации по комплексному развитию дошкольников в процессе их общения с природой. – М., 1996.<br>- Николаева С.Н. Методика экологического воспитания в детском саду. – М.: Просвещение, 2000.<br>- Николаева С.Н., Комарова И.А. Сюжетные игры в экологическом воспитании дошкольников. – М.: Издательство «Гном и Д», 2003.<br>- Рыжова Н.А. Воздух-невидимка. Пособие по экологическому образованию дошкольников. – М.: Линка-Пресс, 1998.<br>- Смирнова В.В., Банцева Н.И. Тропинка в природу. Экологическое образование в детском саду. – М.: Издательство «Союз», 2003. |
| *Художество-эстетик яктан үҫеш* | - Ғәлиева Ғ.Ғ. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы башҡорт халҡының көнкүреше, үткән тарихы, әҙәбиәте, сәнғәте, мәҙәниәте һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыу.<br>-«ИльЗам»: Методическое пособие по художественному развитию дошкольников (3-7 лет)/ под ред. Азнабаевой Ф.Г. – Уфа, 2009.<br>- Азнабаева Ф.Г. Рисуем фантазируя. Нетрадиционная техника рисования. – Уфа, 2009.<br>- Комарова Т.С. Изобразительная деятельность в детском саду. М: Просвещение, 1981<br>-Швайко Г.С. Занятия по изобразительной деятельности. М: ВАЛДОС, 2003<br>- Молчева А.В. Народное декоративно-прикладное искусство Башкортостана –дошкольникам. Уфа: «Китап», 1995.<br>- Сауко Т.Н., Буренина А.И. Топ-хлоп, малыши: программа музыкально-ритмического воспитания детей 2-3 лет. – СПб., 2001.<br>-Ф.Г. Г0б2йбуллина, Бе66е8 байрамдар, 0ф0 ,«Китап», -2004.<br>- М. С2лимов, Балалар 0с0н йыр6ар, 0ф0, «Китап», -2012<br>- Буренина А.И. Коммуникативные танцы-игры для детей - С-Пб, 2004<br>- Буренина А.И. Театр всевозможного. От игры до спектакля. СПб, 2002<br>- Волоснина Г.А. Аничков мост: вчера, сегодня, завтра. Музыкальные минутки для малышей.- С- Пб, 2006<br>- Давыдова М.А. Музыкальное воспитание в детском саду.-М., 2006<br>- Зарецкая Н.В. Веселая карусель, игры, танцы, упражнения 2-4 года.- М., 2004<br>-И.А.Лыкова Изобразительное искусство в детском саду, « Цветные ладошки»,» Карапуз-дидактика», 2007.<br>- Зарецкая Н.В. Танцы в детском саду.- М., 2004<br>- Зарецкая Н.В.Музыкальные сказки для детского сада.- М., 2004<br>- Корчаловская Н.В., Посевина Г.Д. Праздник каждый день. Ростов н/Д: Феникс, 2002 |

## ПСИХОЛОГИК ҺӘМ ПЕДАГОГИК ЭШТЕҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

## Мәҙәни – күңел асыу эшмәкәрлеге
## (байрамдарҙың, кисәләрҙең, ғәҙәттәге ваҡиғаларҙың үҙенсәлектәре)

Программала стандарт талаптарына ярашлы байрамдарға, кисәләргә, ғәҙәти ваҡиғаларға арналған «Мәҙәни-күңел асыу эшмәкәрлеге» бүлеге индерелгән һәм ул балаларҙың мәҙәни-күңел асыу эшмәкәрлегенең үҫеше, һәр бер балаға ял, хис-тойғо именлеге, шөғөлләнеү оҫталығын формалаштырыуҙы тәьмин итә. Бүлектә педагогтар өсөн, һәр йәштәге балалар төркөмөнөң буш ваҡыттарын ойоштороу бурыстары күрһәтелгән.

## Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Балалар баҡсаһында һәм төркөмдә эмоциональ климат булдырырға, балалар үҙҙәрен уңайлы һәм хәүефһеҙ тойһон өсөн шарттар булдырырға кәрәк.

Балаларҙа байрамдарҙа, уйын-көлкөлә, күңел асыуҙа ҡатнашыу теләген үҫтереү мөһим. Үҙ йөрөшлө уйынсыҡтарҙың һәм әкиәт геройҙарының хәрәкәттәрен күҙәтеү һәләтен үҫтереү, уларға ҡарата ыңғай ҡараш тәрбиәләү.

Әкиәт геройҙары ҡиәфәтенә инеү оҫталығын формалаштырыуға булышлыҡ итеү.

## Кескәйҙәр төркөмө( 3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

**Ял итеү.** Балаларҙың ҡыҙыҡһыныуын иҫәпкә алып, мәҙәни-күңел асыу эшмәкәрлеген үҫтереү. Һәр бер баланың ял (пассив һәм актив) итеүен һәм кәйеф торошоноң именлеген тәьмин итеү. Үҙ-үҙен уйын менән мәшғүл итеү оҫталығын формалаштырыу.

**Күңел асыуҙар.** Театр тамашаһын күрһәтеү. Йәнһүрәт ҡарауҙы һәм спектакль яҙмаларын тыңлауҙы ойоштороу. Төрлө тематик күңел асыуҙар үткәреү (үтелгән материалдарҙы дөйөмләштереү һәм нығытыу өсөн ).

**Байрамдар.** Байрам мәҙәниәтенә балаларҙы ылыҡтырыу. Дәүләт байрамдарын үткәреү («Яңы йыл», «Әсәйҙәр көнө»). Байрамда шатлыҡ һәм яҡшы кәйеф торошон булдырыу.

**Үҙ-аллылыҡ эшмәкәрлеге.** Балаларҙа һынлы сәнғәт эшмәкәрлеге менән шөғөлләнеү, китаптарҙан һүрәттәр ҡарау, төрлө уйындар уйнау, тәрбиәсе ярҙамында таныш әкиәттәрҙе  сәхнәләштереү, халыҡ йырҙарын һәм һамаҡтарын тыңлау теләген уятыу. Баланың уйнау, бейеү, музыка ҡоралдарында уйнау теләгенә булышлыҡ итеү. Баланың үҙ-аллылыҡ эшмәкәрлеген тормошҡа ашырыу өсөн тейешле шарттар булдырыу.

## Уртансы төркөм ( 4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

**Ял итеү.** Баланың буш ваҡытында үҙ-аллы эшмәкәрлек менән шөғөлләнеү, тәбиғәт матурлығына һоҡланыу; ҡоштар, ямғыр тауышын, көй тыңлау, һүрәт төшөрөү, илһамланыу теләген тормошҡа ашырыу.

**Күңел асыу.** Баланың үҙ-аллылыҡ эшмәкәрлегенә, ялына һәм яңы тәьҫораттар алыуына шарттар булдырыу. Танып-белеү аша күңел асыуға, халыҡ традицияларына, йолаларына һәм мәҙәниәтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Уйын-көлкө төрҙәрен ойоштороуға әҙерлек барышына балаларҙы йәлеп итеү, ҡурсаҡтар спектаклында, музыкаль һәм әҙәби концерттарҙа, спорт уйындарында ҡатнашыу теләген формалаштырыу.

Рухи һәм әхлаҡи тәрбиәне тормошҡа ашырыу.

Ижади эштәр менән шөғөлләнеү оҫталығын һәм теләген үҫтереү (һүрәт төшөрөү,әүәләү һ.б.).

**Байрамдар.** Халыҡ байрамдарына һәм уларҙы үткәреү мәҙәниәтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү (милли кейемдәр кейеү, байрам атрибуттарын әҙерләү, ололар һәм тәбиғәт менән балалар араһындағы мөнәсәбәттәр һ.б.). Байрамдарҙа ҡатнашыу теләген үҫтереү.

Тыуған илгә, йәшәгән еренә, ундағы төрлө милләт халыҡтарына ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Яңы йылға, 8 мартҡа, Ватанды һаҡлау көнөнә һәм халыҡ байрамдарына арналған саралар ойоштороу.

**Үҙ-аллылыҡ эшмәкәрлеге.** Эшмәкәрлектең төрлө төрҙәрен һәм төрлө йөкмәткеле дәрестәрҙе (танып-белеү, спорт, һынлы сәнғәт, хеҙмәт) һайлағанда, үҙ-аллылыҡ үҫешенә булышлыҡ итеү. Һәр бер баланың ижад йүнәлеше буйынса һәләтен формалаштырыу.

## Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

**Ял итеү.** Буш ваҡытта ҡыҙыҡлы һәм файҙалы эшмәкәрлек менән шөғөлләнеү теләген үҫтереү. Күңел асыу мәҙәниәтенең нигеҙҙәрен формалаштырыу (уйын, китап уҡыу, рәсем, әүәләү, сәйәхәт һ.б.).

**Күңел асыу.** Мәҙәниәт һәм танып-белеү ихтыяждарын асыу өсөн шарттар булдырыу һәм буш ваҡытты файҙалы үткәреү өсөн алған белемдәрҙе һәм оҫталыҡтарҙы ҡулланыу.

Спортҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү һәм уның менән шөғөлләнеү теләгенә ярҙам итеү.

**Байрамдар.** Ғәҙәти, ябай һәм байрам көндәре тураһында төшөнсә биреү. Байрамдарға ҡарата ыңғай ҡараш тәрбиәләү, уны әҙерләгәндә ҡатнашыу теләген булдырыу (музыка залын һәм төркөмдө биҙәү).

Тирә-яҡтағы кешеләргә ҡарата иғтибарлы булырға, уларҙы байрам менән ҡотларға, үҙ ҡулдары менән бүләк әҙерләргә күнектереү.

**Үҙ-аллы эшмәкәрлек.** Баланың ҡыҙыҡһыныу һәм шәхси һәләттәренең үҫеше өсөн шарттар булдырыу (күҙәтеү, тәжрибә үткәреү, коллекция йыйыу). Үҙ эшмәкәрлеген ойоштороу оҫталығын һәм ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә белеү нигеҙҙәрен формалаштырыу, таҙалыҡҡа һәм тәртипкә күнектереү. Тәрбиәселәр, ололар һәм йәштәштәре менән үҙ ара бәйләнеште үҫтереү.

**Ижад.** Йырға, ижадҡа, һүрәт төшөрөүгә ынтылыш үҫтереү. Баланың танып-белеү һәм сәнғәт эшмәкәрлеге менән мауығыуына ярҙам итеү, түңәрәк һәм студияларға йөрөү өсөн шарттар булдырыу.

## Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

**Ял итеү.** Балаларҙы ҡыҙыҡлы һәм файҙалы эшмәкәрлеккә йәлеп итеү (уйын, спорт, рәсем,әүәләү, көй тыңлау, йәнһүрәт ҡарау, китап уҡыу).

**Күңел асыу.** Төрлө күңел асыуҙарҙа әүҙем ҡатнашыу теләгән уятыуға булышлыҡ итеү. Үҙ-аллы эшмәкәрлектә белем һәм оҫталыҡты ҡулланыу, башҡаларға ҡарата ярҙамсыл һәм яҡшы мөнәсәбәттә булыу һәләтен үҫтереү.

Ижади һәләтте, ҡыҙыҡһыныусанлыҡты, хәтерҙе, фекерләү һәләтен, төрлө булған хәл-ваҡиғаларҙа үҙ-үҙен тота белеү оҫталығын үҫтереү.

Рәсәйҙә, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре һәм традициялары, кәсептәре, мәҙәниәте тураһындағы төшөнсәләрҙе тулыландырыу һәм аң-белем даирәһен киңәйтеү.

**Байрамдар.** Дәүләт һәм халыҡ байрамдары тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Балаларҙы байрамға әҙерлек үткәреү эштәренә йәлеп итеү. Байрам эшмәкәрлегендә ҡатнашыуҙан ҡәнәғәтлек тойғоһон алыуҙы формалаштырыу. Байрам мәҙәниәте нигеҙҙәрен формалаштырыу.

**Үҙ-аллы эшмәкәрлек.** Балаларға төрлө материалдар менән тәжрибә үткәреү (һыу, ҡом, балсыҡ менән һ.б.) һәм үҫемлектәрҙе, йәнлектәрҙе, тәбиғәтте күҙәтеү мөмкинлектәрен биреү.

Дидактик һәм өҫтәл-арты уйындары менән уйнау һәләттәрен үҫтереү. Үҙ-аллы эшмәкәрлекте ойоштороу һәм планлаштырыу оҫталығын формалаштырыу.

**Ижад.** Әҙәби-музыкаль һәм таныш-белеү эшмәкәрлегендә үҙ-аллылыҡты камиллаштырыу. Буш ваҡытта төрлө эшмәкәрлек: музыка, һынлы сәнғәт, театр һ.б. менән шөғөлләнгәндә ижады яҡтан ҡуйылған талаптарҙы үтәй белеү һәләтен формалаштырыу.

Баланың әҙәби-эстетик студияларға йөрөү теләгенә булышлыҡ итеү.

### БЕЛЕМ-Т2РБИ2 БИРЕ! ЭШЕНД2 ?АТНАШЫУСЫЛАР ТАРАФЫНАН №АЙЛАП АЛЫН;АН )Л)Ш №2М МИЛЛИ-Т)Б2К !:ЕНС2ЛЕКТ2РЕН СА;ЫЛДЫР;АН МАТЕРИАЛДАР.

**М2кт2пк2с2 й2шт2ге балалар6ы т062к компоненты мен2н таныштырыу6ы тормош7а ашырыусы педагогик шарттар**

Р2с2й Федерация3ыны8 т062кткре ара3ында Баш7ортостан Республика3ы и8 к1п т0рл0 милл2тлел2р6е8 бере2ен т2шкил ит2. «Баш7ортостан – тыу4ан илем» программа3ы Баш7ортостан Республика3ыны8 к1п милл2тлелеген2, й2ш21 р21ешен2, климат шарттарына, социаль-и7тисади 16енс2лект2рен2 ниге6л2н2.

Тыу4ан я7ты 0йр2не1 программа3ын т0пл0р2к, фай6алыра7 7улланыу ма7саында т162нд2ге педагогик шарттар билд2л2нел2

- баланы8 ш2хси м262нилеген формалаштырыу
- балалар мен2н эшл21се педагогик коллективты8 м262ни белемен 19тере1
- баланы 19тере1г2 булышлы7 ите1се м0хит ойоштороу
- балалар ба7са3ы мен2н ата-2с2л2р ара3ында ны7лы б2йл2неш булдырыу.

**Проект эшм2к2рлеген ойоштороу**

Проект эште9 технологиялары белем алыу процессында 32м т2рби2 эше барышында 216емл2штер2, 16 аллы 19ешк2 эт2ргес бер 7орал булып тора, к2р2к м24л1м2тте э6л2й 32 у4а эй2 булыу 32л2тен 7уллана беле1 19еш2, 16 фекере, 7арашы булыуы баланы8 16 к0с0н2

ышанысын арттыра. Т0рл0 ситуациялар6а ул ю4алып 7алмай, осра4ан я8ы проблемалар6ан сы4ыу юлдарын 16е э6л2п табыр4а ынтылыу арта.

Проект эшене8 3060мт23е – педагогтар6ы8, балалар6ы8 32м ата-2с2л2р6е8 ижади берлект2ге емеше торло форма, алымдар, методтар аша практик 32м ф2нни я7тан к1р32т2л21е м0мкин.

**К18ел асыу 32м байрамдар эшм2к2рлеге**

Баш7ортостан Республика3ында й2ш21се т0п халы7ты8 йолаларын, 40р0ф-4262тт2рен, к18ел асыу, милли байрамдарын терге6е1 тора. Балаңы8 й2ш2йешен, тормошон с2н42т донъя4ына сы4арып, баш7орт хал7ыны8 м262ни 7имм2тт2рен2 7ы6ы73ыныу6ы байытыу 32м 19тере1 зарур.

Йыр, бейе1, ши4ыр, т0рл0 уйын ярыштары, ижади конкурстар, б2йгел2р, балаңы8 а7ыл – зи3енен 19тере1г2 й1н2лтелг2н эш т0р62ре байрамды8 т0п 0л0ш0н т2шкил ит2. Ярыш 3060мт2л2ре буйынса балалар тейешле ба3а ала 32м лайы7лы б1л2кл2н2. Байрамда ата-2с2не8 216ем 7атнашыуы, килг2н 7уна7тар6ы т2мле милли аш-3ыу мен2н 3ыйлауы ла бик отошло.

**Педагогик коллективты8 м2кт2пк2с2 й2шт2ге балалар6ы8 4аил2е мен2н 16-ара килешеп эш ите1е**

Педагогик коллективты8 м2кт2пк2с2 й2шт2ге балалар6ы8 4аил23е мен2н берлект2ге эшм2к2рлеге – балаңы8 социаль, 2хл27, 262п, эстетик, а7ыл, физик сифаттарын 32м 216емлеген, яуаплылы4ын, 16аллылы4ын 19тере1, ата-2с2л2р, ололар, билд2ле 30н2р эй2л2рене8 эшт2рен2, халы7 педагогика3ына, ауы6-тел ижадына, милли йолаларына таяныу 0лг030нд2 уны8 ш2хси м262нилеген формалаштырыу.

Ата-2с2л2рг2 милл2тен, телен, илен ярат7ан, уны8 мен2н 4орурлан4ан, тарихын, ауы6-тел ижадын белг2н, 16ене8 гражданлы7 бурысын а8ла4ан, рухи, м262ни 7имм2тт2рен ихтирам итк2н халы7 педагогика3ын еткере1 отошло. Халы7 ижадын ки8 7улланып, халы7 педагогика3ына танып т2рби2л2й 29еп килг2н быуынды зи3енлер2к, а8лыра7, ю4ары зауы7лы ит2.

Баш7орт хал7ыны8 теле бай, н2фис, 16енс2лекле. Тел аша милл2т быуаттар буйы туплан4ан тормош т2жриб23ен 16 бала3ына тапшыра кил2. Ту4ан тел халы7ты8 рухи тормошон, 40р0ф-4262тен, йолаларын, традиияларын са4ылдары 32м ауы6-тел ижады аша рухи 7имм2тт2рен тапшыра. Тим2к, ту4ан тел – ул халы7 педагогика3ыны8 нигеб6е.

Телебе66е8, милл2т2бе66е8 кил2с2ге, и8 беренсе сиратта, 4аил2н2н башлана.

Балалар ба7са3ы ойошма3ы, ата-2с2л2р мен2н берлект2, был шм2к2рлект2 т1б2нд2ге бурыстар6ы 7уя

- балаңы милли рух нурында 7ойондороп тыу4ан телд2 аралаштырыу, б2л2к2й 32м оло Ватанды8 тарихын, м262ни2тен, кешелеклек 7имм2тт2рен 16л2штере1

– балаңы8 ижади 32л2тт2рен 19тере1

- халы7 а7ылын, с2н42тте 7улланып татыулы7ты пропагандалау

- милли-м262ни педагогик белем біре1 процессында4ы 16енс2лкт2р6е ш2хси 7улланыу.

Ата-2с2л2р мен2н эшм2к2рлек т0р62ре бик к1п.

Билд2ле с2н42т кешел2ре мен2н осрашыу6ар ойоштороу, театр, конерт, фестиваль, музейбар4а й0р01, 32129к2р артистар6ы8 сы4ышын 7арау, йола, 40р0ф-4262тт2р мен2н таныштырыу балала ы84ай сифаттар 19ешен2 яр6ам ит2.

**!9тере1се предметлы м0хит ойоштороу**

!9тере1се предметлы м0хит балалар6ы8 т0рл0 эшм2к2рлек 162кт2ренд2ге т0б2к 16енс2лект2рене8 й0км2тке3ен асып бир2 – Баш7ортостан я6ыусыларыны8 портреттары 32м китаптары к1рг26м23е, баш7орт халы7 2ки2тт2ре 32м х26ерге заман автор6арыны8 262би 292р62ре, улар буйынса 31р2т т0ш0р01, 7ул эшт2рен2 технологик карталар, схемалар, баш7ортостан Республика3ынада й2ш21се халы7 уйынсы7тары 0лг0л2ре, кейем-3алымдары, к2септ2ре, ш040лд2ре 32м баш7алар. !9тере1се-предметлы м0хит ойоштороу6а уны8 й0км2тке3е баланы8 белем, рух, физик 32м уны8 д0й0м 19ешен2, тел2кт2рен 72н242тл2ндере1 талаптарына тап киле1е к16аллана.

**Уйын 162ге**

Халы7 уйындары, легендалары, 2ки2тт2ре, фольклоры буйынса режиссерлы7 уйындары 0с0н йы3аздар

- макеттар

- 6ур булма4ан уйынсы7тар6ы8 образлы йыйылмалары – кешел2р, 3алдаттар, й2н31р2т, 2ки2т 32м китап герой6ары, т0рл0 материалдан эшл2нг2н уйын йы3аздары

- хайуандар – ер-урын ки8леге символдары.

**Телм2р 162ге**

262би 162к

Балалар6ы8 й2ш 16енс2лект2рен2 7арап т27дим ителг2н китаптар

- халы7 ауы6-тел ижады

- баш7орт, рус 32м Баш7ортостанда й2ш2гйн баш7а милл2т халы7 2ки2тт2ре

- Баш7ортостанда й2ш2г2н х26ерг2 заман автор6арыны8 292р62ре

- баш7орттар6ы8, рустар6ы8 32м баш7а халы7тар6ы8 к2септ2ре, ш040лд2ре, би621-7улланма с2н42те, ижады тура3ында дидактик уйындар, ки9елг2н 31р2тт2р, р2ссамдар6ы8 картиналары, фото31р2тт2р, Баш7ортостан я6ыусыларыны8 портреттары 3.б.

Т0рк0мд2ге балалар6ы8 ярат6ан китаптары

- ми6гелг2 б2йле 262би2т

- алмаштырыла тор4ан фонд

- Баш7ортостан т2би42те, т2би42т байлы7тары 32м халы7 2ки2тт2ре персонаждары тура3ында балалар6ы8 31р2тт2ре

- ауы6-тел ижады

- балалар6ы8 1662рене8 ярат6ан ш040лд2ре.

Театрлаштырыу эшм2к2рлеге

- ярат7ан баш7орт халы7 2ки2тт2рен с2хн2дл2штере1 0с0н кейемдр, битлект2р – Баш7орт халы7 2ки2тт2ре буйынса 7урса7 театры, к1л2г2 театры

– «кейенп-я3аныу» м0й0шй0 Баш7ортотстанда й2ш2г2н халы7тар6ы8 кейемд2ре, 7айыштар, бел26ект2р, таждар, т162т2162р, 7ашмау6ар, 7алпа7тар, к162л2кт1р, селт2рле 7улъяулы7тар, яулы7тар, шарфтар, та9малар, эшл2п2л2р.

- с2хн2л2штере1 32м режиссер уйындары 0с0н атрибуттар, битлект2р.

**Э6л2не1-тикшерене1 162ге**

- булек буйынса материалдар - ?ом, 3ыу, магниттар, 7а4ы6, быяла, резина

- яр6амсы прибор6ар – лупа, микроскоп

- 1лс2гес 7ала7тар

- ил2к

– 6о6 0с0н формалар

- клеенкана тегелг2н алъяп7ыстар – е8с2л2р – щетка, 3о97о, сепр2кт2р – т26и42т материалдары.

Т26и42т м0й0ш0

- к162те1 календары – 19ентел2р ултыртыл4ан 3ауыттар

- г0лд2р

- Баш7ортостанда4ы 7урсаулы7тар, шарлауы7тар, м2мерй2л2р тура3ында материалдар

- Баш7ортостанда4ы тау6ар, йыл4алар, к1лд2р макеттары

- йыл ми6гелене8 моделе.

**Конструкторлау 162ге**

- деталд2ре т0рл0 ысулдар мен2н2 беркетелг2н конструктор6ар – шаблондар, 31р2тт2р, альбомдар, силуэттар, конструктив карталар, Баш7ортостан Республика3ыны8 архитектура3ы

- ябай 3ы6малар, тер2к схемалар

- уйын 0с0н к2р2к бул4ан материалдар 32м эш 7оралдары.

**№ынлы с2н42т 162ге**

№1р2тл21 эщм2к2рлеге 0с0н йы3аздар

- Баш7ортостан халы7 би621-7улланма с2н42те 292р62ре к2шт23е

- трафареттар, геометрик фигуралар, силуэттар, т0рл0 3ы6ы7тар 3262у 0с0н 7улланыл4ан махсус 7улланмалар

- буяу6ар, бумалалар, т0рл0 72л2мд2р, а7бур6ар, фломастер6ар

- а7 32м т09л0 7а4ы66ар

- 7айсылар – мис2тт2р, губкалар, тампондар

- парафин ш2мд2р, балауы6, а7бур6ар

- Баш7ортостанда й2ш2г2н р2ссамдар, я6ыусылар, артистар6ы8 портреттары

- Баш7ортостанда й2ш2ш2гн халы7тар6ы8 милли кейем-3алымы, ая7 кейемд2ре, би621-7улланма с2н42те элементтарыны8 силуэттары

- Баш7ортостан р2ссамдарыны8 т0рл0 жанр6а4ы картиналары.

**Тыу4ан я7ты 0йр2не1 162ге**

- Баш7ортостан Республика3ыны8 карта3ы

- район карта3ы

- республика символдары

- баш7орт ир-егетт2ре 32м 7атын-7ы66ары кейемд2ре

- милли кейемд2ге 7урса7тар

- баш7орт орнаменты мен2н би62лг2н 3анды7, с28гелд2к

К0нк1реш, к2р2к-яра7тары, а4астан, ту66ан я3ал4ан 3ауыт-3абалар

- баш7орт хал7ыны8 к1см2 торла4ы – тирм2 макеты

- буй, я9ы, ар7ыры бала9тар

- 7орама юр4андар, сигелг2н та9тамалдар 32м баш7алар

- баш7орт хал7ыны8 ш040л0н асыусы дидактик 19тере1се уйындар «малсылы7», «умартасылы7», «3унарсылы7»

- баш7орт хал7ыны8 60т2 донъя ким2ленд2 танылган ш2хест2рене8 портреттары

- Баш7ортостанды8 т26и42т 7омарт7ылары 32м байлы7тарын 31р2тл2г2н макеттар, слайдтар, схемалр 32м р2ссамдар картиналары

- баш7орт хал7ыны8 к2сеп-30н2р62рен к1р32те1се к1рг26м2 материалдар.

**ҒАИЛӘ ҺӘМ БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ АРАҺЫНДАҒЫ ҮҘ-АРА БӘЙЛӘНЕШ**

Баланы шәхес булараҡ үҫтереү өсөн иң мөһим шарттарҙың береһе булып ғаилә һәм балалар баҡсаһы араһындағы үҙ-ара бәйләнештең нисек бер-береһенә ыңғай тәьҫир итеүе, йәки йоғонтоһо тора.

Төп маҡсат булып, балалар баҡсаһы педагогтары һәм ғаилә ағзалары араһында тығыҙ һәм нәтижәле үҙ-ара бәйләнеште формалаштырыуға кәрәкле шарттар булдырыу, ата-әсәләрҙең компетентлығын (бала тәрбиәләү буйынса килеп тыуған төрлө социаль-педагогик проблемаларҙы сисә белеү һәләтен) үҫтереү; ата-әсәләрҙең хоҡуҡтарын аңлауҙы һәм хөрмәтләүҙе тәьмин итеү тора.

Ата-әсәләрҙең һәм педагогтарҙың бер-береһен ғәйепләүҙе, бала тәрбиәләүҙә ҡулланылған алымдарҙы бергәләп кәңәшләшмәй эшләүҙебулдырмай, тулы хоҡуҡлы партнерҙар берҙәм эш итеүҙе ойоштороу кәрәк.

Балалар баҡсаһы һәм ғаилә араһындағы үҙ-ара бәйләнештең төп бурыстары:

- ғаиләлә һәм балалар баҡсаһында балалар тәрбиәләүҙә, уларҙы аң-белемгә өйрәтеүҙә, һәр төрлө үҫтереүсе эшмәкәрлек барышында килеп сыҡҡан һорауҙарға, педагогик ситуацияларға ҡарата ата-әсәләрҙең фекерен өйрәнеү;

- педагогтарҙы һәм ата-әсәләрҙе балалар баҡсаһы шарттарында һәм ғаиләлә тәрбиәләүҙең иң отошло тәжрибәләре менән таныштырыу, шулай уҡ тәрбиә һәм аң-

белемгә өйрәтеү эшендә килеп тыуған ҡыйынлыҡтар тураһында мәғлүмәт биреү, уларҙы булдырмау юлдарын өйрәтеү;

- педагогтарҙы һәм ата-әсәләрҙе тәрбиәләү һәм аң-белемгә өйрәтеү процесының көнүҙәк мәсьәләләре менән системалы рәүештә таныштырып тороу, уларҙы тормошҡа ашырыуҙа балалар баҡсаһының һәм ғаиләнең мөмкинлектәре тураһында һөйләшеүҙәр үткәреп тороу;

- педагогтар һәм ата-әсәләр араһындағы бәйләнеште нығытыу һәм үҫтереү маҡсатында балалар баҡсаһында йөкмәткеһе һәм формаһы төрлө булған хеҙмәттәшлек итеү саралары һәм уларҙы ойоштороу шарттары булдырыу;

- районда (ҡалала, республикала) ойошторолған төрлө сараларға ата-әсәләрҙе йәлеп итеү һәм мәктәпкәсә белем биреү өлкәһендәге проблемалар, ҡаҙаныштар менән таныштырыу;

- баланың төрлө ынтылыштарына һәм ихтыяждарына ҡарата иғтибарлы мөнәсәбәт күрһәткән ата-әсәләрҙе дәртләндереү, хуплау, ошо ихтыяждарҙы ғаиләлә ҡәнәғәтләндереү өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыу.

«Педагогтар-ата-әсәләр-балалар» өсмөйөшөндә күп яҡлы уртаҡ эшмәкәрлектең төп маҡсаты булып баланың шәхси ынтылыштарын һәм ихтыяждарын ғына түгел, шулай уҡ ата-әсәләрҙең һәм педагогтарҙың да теләген ҡәнәғәтләндереү тора.

Дөйөм эштәр күп төрлө традицион һәм инновацион формаларҙа ойошторолорға мөмкин (акциялар, ассамблеялар, музыка һәм шиғриәт кисәләре, ғаилә менән мәҙәниәт һәм сәнғәт сараларында ҡатнашыу, ғаилә клубтары, һорау һәм яуап кисәләре,салондар, студиялар, байрамдар, саф һауала йөрөүҙәр, экскурсиялар, проект эшмәкәрлеге, ғаилә театры, һ.б.).

Уртаҡ эшмәкәрлектең бындай формалары бала менән авторитар стилдә аралашыуҙы өҫтөн күреүсе ата-әсәләрҙең һәм педагогтарҙың үҙ-үҙҙәрен тотоуҙарына төҙәтмәләр индереү; уларҙа балалар ижадына ҡарата һаҡсыл, хәстәрле мөнәсәбәт тәрбиәләү мөмкинлектәрен дә бирә.

**Ғаиләнең сәнғәт студияһы.**Ғаилә сәнғәт студиялары - ул тәрбиәләнеүселәрҙең ғаиләләрен ижад менән (рәссам, хореограф, актер) шөғөлләнеү өсөн педагог булышлығында берләштерелгән үҙенсәлекле сәнғәт оҫтаханалары.

Студияла педагогтың, балаларҙың һәм ата-әсәләрҙең үҙ-ара ижади бәйләнештәре төрлө формала булыуы мөмкин: махсус ойошторолған уртаҡ дәрестәр; ата-әсәләр өсөн рәсем, нағыш сәнғәте, ҡул эштәре буйынса мастер-кластар (ата-әсәләр һайлауы буйынса); сәнғәт белгестәре, рәссамдәр, көнкүреш-биҙәү сәнғәте оҫталары менән осрашыуҙар; музейҙарға, күргәҙмәләргә барыу һ.б. формаһында булырға мөмкин.

**Ғаилә байрамдары.** Илебеҙ тормошондағы иҫтәлекле ваҡиғаларға бағышланған байрамдар мәктәпкәсә белембиреү ойошмалары өсөнғәҙәти байрамдар булып торалар. Улар тәрбиәселәр менән ата-әсәләрҙең уртаҡ ижадын үҫтереүҙә, уларҙы байрамды бергәләп әҙерләүҙә, үткәреүҙә яңы этәргес көс булып тора.

Байрамдар ниндәйҙер бер иҫтәлекле көнгә бағышланып (Әсәйҙәр көнө, Атайҙар байрамы, Яңы йыл байрамы, Еңеү көнө, Халыҡ-ара ғаилә көнө (15 май), Бөтә Рәсәй ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө (8 июль) һ.б.). Ғаилә байрамдары иртә йәштәге балалар һәм кескәйҙәр төркөмө балалары өсөн үтә лә мөһим.

**Ғаилә театры.**Мәктәпкәсә ижтимағи тәрбиәнең тарихында күп йылдар театр эшмәкәрлегенә тейешле кимәлдә ғаилә тәрбиәһе тәжрибәһенә иғтибар бирелмәне.

Ғаилә менәнпартнерлыҡ мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү балаларҙың һәм өлкәндәрҙең ғаилә театры эшмәкәрлеге ашабер-береһеменән аралашыу, бер-береһен яҡынырак белеү мөмкинлектәрен аса. Бернисә ғаилә ағзаларынан һәм педагогтарҙан (тәрбиәселәр, музыка етәксеһе һәм балалар баҡсаһы театр студияһыетәксеһе) торған ижади берләшмә ойоштороп, балалар баҡсаһында мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ярҙамында ғаилә театры ойоштороу мөмкин.

**Ғаилә абонементы.** Сәнғәт әҫәрҙәре менән ата-әсәләрҙе һәм балаларҙы таныштырыуға балалар баҡсаһы менән бер рәттән мәҙәниәт һәм культура ойошмалары ла тос өлөш индерә. Йәкшәмбе (шәмбе) ғаилә абонементтарына ярашлы әҙерләнгән программаларҙы ҡулланып, балалар баҡсаһы һәм уның партнерҙары (ижади һәм мәҙәни ойошмалар) фәһемле һәм файҙалы булған мәҙәни сараларҙы ойоштора алалар. Программалар ижадтың теге йәки был төрөнә арналған, комплекслы һәм предметлы булырға мөмкин. Мәҫәлән: «Һаумы, йыр», «Театр мөғжизәләре», «Рәссамда ҡунаҡта», «Китапханала ғаиләләр осрашыуы»һ.б.

**Ғаилә ассамблеяһы.** Ғаилә ассамблеяһы – бергә башҡарылған төрлө эшмәкәрлек аша балаларҙы һәм ололарҙы йәлеп итеп, уларҙы бер-береһе менән таныштырыу маҡсатында, ғаиләләр һәм педагогтарҙы ижад һәм мәҙәниәт аша берләштереү сараһы булып тора. Ғаилә ассамблеяһын ойоштороусы булып балалар баҡсаһы, йәки бер нисә ойошма; вуз, музей, балалар музыка мәктәбе, мәғарифкомитеты, газета редакцияһы һ.б. тора ала. Ассамблеяны миҙгелдең төрлө ваҡытында, иң һәйбәте - йәй көндәре, асыҡ һауала ойошторорға мөмкин.

**Проектлау эшмәкәрлеге.** Бергәләп башҡарылған проект эштәре балалар баҡсаһы менән идара итеүҙә, партнерлыҡ мөнәсәбәттәрен үҫтереүҙә ярҙам итә, ата-әсәләр менән педагогтарға «команда»ла эшләргә өйрәнергә, коллектив рәүештә фекерләү, планлаштырып эшләү ысулдарына эйә булырға; бала ихтыяждарынан сығып, проекттөҙөү алгоритмын үҙләштерергә күнектерә; аң-белем процесында ҡатнашыусы һәр кемгә ҡарата позитив асыҡ булыуға ирешергә; проектты ғәмәлгә ашырыу маҡсатында педагогтарҙың, ата-әсәләрҙең һәм балаларҙың тырышлыҡтарын берләштерергә ярҙам итә.

**Ғаилә календаре.** Ғаилә календаре проекттар өсөн ҡыҙыҡлы идеялар бирә. Ул ата-әсәләргә үҙ эшмәкәрлектәрен планлаштырырға ла, бала менән бергәләп эш итеү һәм аралашу өсөн ваҡыт табырға ла ярҙам итә.

Ғаилә календары бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә булған ике өлөштән тора:

- беренсе өлөшө балалар баҡсаһының тәрбиә һәм аң-белемгә өйрәтеү эшен ойоштороу тураһындағы мәғлүмәттәрҙе үҙ эсенә алған инвариант өлөш. Ул балалар баҡсаһында балаларын йөрөткән бөтә ғаиләләр өсөн дә мотлаҡ тип һанала.

- икенсе өлөшө һәр ғаиләнең үҙенсәлектәре, традициялары һәм йолалары нигеҙендә проектланған вариатив өлөшө.

Календарҙың инвариантив өлөшө - ул педагогтың балалар баҡсаһы өсөн ентекләп эшләнелгән уҡытыу-тәрбиә эше. Унда киләһе мәғлүмәттәрҙе индерергә мөмкин :

-миҙгелдәр, һәр миҙгелгә хас булған халыҡ уйындары һәм уларҙы ғаиләлә ойоштороу өсөн кәңәштәр;

-бөтә донья, Рәсәй, ҡала, район байрамдары һәм уларҙы балалар йәшенә ҡарап ғаиләлә үткәреү өсөн кәңәштәр;

-һөнәри байрамдар һәм һөнәрҙәр тураһында балалар менән әңгәмәләр үткәреү өсөн кәңәштәр, консультациялар һ.б.;

-театр репертуары һәм «ғаиләлә театр көнө»н үткәреү өсөн кәңәштәр;

-ҡалалағы музейҙар һәм күргәҙмәләр, ғаиләлә «музей көнөн» үткәреү өсөн кәңәштәр;

-концерттар һәм бала менән концерттарға йөрөү өсөн кәңәштәр;

-тәрбиә тураһындағы әйтемдәр, мәҡәлдәр, ғаилә эшмәкәрлегенең төрлө төрҙәренең йөкмәткеһе һәм уларҙы ойоштороу;

-ғаиләлә китап уҡыу, ғаилә менән тәбиғәткә сығыу, музейға, күргәҙмәләргә, иҫтәлекле урындарға барыу тураһында һөйләшеү.

Календарҙың вариатив өлөшө, ғаилә үҙе планлаштырған ғаилә байрамдары, ғаилә ағзаларының, туғандарының, дуҫтарының тыуған көндәре, ғаилә менән бергәләп сәйәхәт итеү, балаларҙың ирешкән уңыштары тураһында мәғлүмәттәрҙән тора.

Ғаилә календары, киләсәктә ата-әсәләргә, олатай-өләсәйҙәргә ғаиләнең һәм балалар баҡсаһынынуртаҡ эшләнәсәк эштәр тураһында төрлө фекерҙәр уята.

**Өйҙә балалар менән эшләү өсөн ҡулланма:** мәктәпкәсә йәштәге балалар менән өй шарттарында эшләү өсөн һәм баланың үсеш кимәлен күҙәтеп, тәрбиә эшенә кәрәкле төҙәтмәләр индереү маҡсатында Нафиҡоваа З.Ғ. авторлығындағы «Һаумы, мәктәп!» («Китап», 2014 йыл) методик ҡулланмаһын ҡулланыу кәрәк. Был әсбапта кескәйҙәрҙе мәктәпкә әҙерләүгә күнегеүҙәр, эш төрҙәре, тестар һәм ата-әсәләргә мәктәп һайлауға ҡайһы бер кәңәштәр бирелә. Ҡулланмала балаларҙың аҡыл-зиһенен, фекерләү ҡеүәһен, иғтибарын, хәтерен үҫтереүгә булышлыҡ итеүсе күнекмәләр ҙур урын алған, уларҙың мәктәп алдынан дөйөм физик һәм социаль яҡтан үҫешен баһалау күрһәткестәре бирелгән.

## Йөкмәтке бүлек. Иртә йәштәге балаларҙы аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиәләү.

## 1 йәштән 2 йәшкә тиклемге балаларға белем биреү эшмәкәрлеге йөкмәткеһе (иртә йәштәге кескәйҙәрҙең беренсе төркөмө)

Икенсе йәшкә сыҡҡан баланың үҙ-аллылығы үҫешә, предметтар менән уйнау эшмәкәрлеге формалаша, сюжетлы уйын элементтары барлыҡҡа килә башлай. Ололар менән аралашыу тәүҙә эшлекле ситуация (ситуативно-деловой), аҙаҡ – эшлекле хеҙмәттәшлек төҫө ала. Аңлап ҡабул итеүе, телмәре, күрһәтмә-хәрәкәтле фекерләүе, ысынбарлыҡты һиҙеп тойоуы үҫешә.

Сабыйҙарҙың ауырлығы ай һайын 200-250-шәр грамға арта, буйы 1 сантиметрға үҫә. Эске ағзаларҙың, һөйәктәрҙең, мускулдарҙың һәм юғары нервы системаһының төҙөлөшө һәм функциялары артабан үҫешә һәм нығына. Нервы күҙәнәктәренең эшләү һәләтлеге арта. Теремек булып, әүҙем хәрәкәтләнеү ваҡыты йәш ярымлыҡ баланың 3-4 сәғәт самаһы, ике йәшлек баланың 4-4,5 сәғәткә етә.

Баланың төп хәрәкәттәрҙе башҡара алыуы уның кәүҙә ағзаларының үҫешенә бәйле була: ҡыҫҡа аяҡтар, оҙон кәүҙә, ҙур баш бала хәрәкәтенә ныҡ тәьҫир итә. Йәш ярымлыҡ бала атлағанда йыш ҡына ҡолай, атлауҙан ҡапыл ғына туҡтай алмай, юлында осраған ҡаршылыҡтарҙы урап үтә алмай. Баланың кәүҙә торошо (буй-һыны) әле тейешенсә үҫешеп етешмәгән. Мускулдарҙың үҫешмәүе сәбәпле уға бер үк төрлө хәрәкәттәрҙе оҙаҡ ваҡыт эсендә башҡарыуы ауыр була. Мәҫәлән, әсәһенең ҡулына тотоноп атлау. Ул шуға ла үҙен күтәреп, ҡулдарға алыуҙы һорай.

Атлап йөрөүе әкренләп үҫешә. Тышта балалар ирекле рәүештә байтаҡ ҡына ваҡыт эсендә үҙ-аллы йөрөй алалар: тәпәш кенә түмһәләккә, ҡалҡыу урынға менә, төшә; үләндән атлай; арҡыры ятҡан таяҡ аша атлап үтә алалар. Аяҡты һөйрәп атлау әкренләп бөтә. Хәрәкәтле уйындарҙа һәм музыка дәрестәрендә балалар аяҡтарҙы табан ҡабырғаһы яғы менән бер-береһе эргәһенә ҡуйып атлай һәм бер урында үҙ тирәләй әйләнә ала башлайҙар.

Икенсе йәшкә сыҡҡан сабыйҙар үрмәләп әүҙем генә хәрәкәтләнә ала башлай: бәләкәй генә ҡалҡыулыҡҡа, диванға менә, һуңыраҡ - гимнастика баҫҡысына бер аяғын икенсеһе эргәһенә ҡуйып, ҡулдары менән тотоноп, өҫкә менә. Бүрәнә аша шыуышып төшә, эскәмйә аҫтынан сүкәйеп, йәки имгәкләп сыға, ҡоршау эсенән аша атлап, йә имгәкләп үтә беләләр. Йәш ярымлыҡ бала йәнлектәргә оҡшатып, улар кеүек хәрәкәтләнә белә башлай.

Ябай ғына хәрәкәтле уйындарҙа һәм бейеүҙәрҙә балалар үҙ хәрәкәттәре менән идара итә белә һәм хәрәкәттәрҙе бергәләп үтәй алыу күнекмәләренә эйә була башлайҙар (8-10 бала ҡатнашлығында).

Төрлө эшмәкәрлектә баланың сенсор тәжрибәһе үҫешә. Предмет менән танышыу барышында бала уларҙың формаһының әйтелешен ишетә (кубик, кирбес, шар, “ҡыйыҡ” – призма), шул уҡ ваҡытта уларҙы тотоп ҡарап, һәрмәп, күреп, бармаҡтарҙы уларҙың контуры буйынса йөрөтөп, туҡылдатып, ташлап, тәгәрәтеп, һыйпап ҡарап, предметтарҙың физик үҙенсәлектәрен өйрәнә.

Ошондай тәртиптә бала төп фигуралар (квадрат, тура дүртмөйөш, түңәрәк, өсмөйөш) менән таныша, бер үк төрлө әйтелгән предметтарҙың оҡшаш яҡтарын

һәм айырмаларын билдәләргә өйрәнә (*ҙур туп – бәләкәй ҡыҙыл туп, ҙур аҡ бесәй – бәләкәй ҡара бесәй*).

Сабыйҙар таратма һәм йыйылма уйынсыҡтарҙы (*пирамидкалар, бер-береһенең эсенә йыйылган агас ҡурсаҡтар, һауыттар һ.б.),* төҙөлөш материалдарын һәм сюжетҡа ярашлы уйынсыҡтарҙы теҙеү, ҡуйыу, һалыу кеүек ябай хәрәкәттәрҙе үҙләштерәләр. Был хәрәкәттәрҙе улар ололар күрһәтеүенә ҡарап, башҡарғанды ҡабатлап үтәйҙәр. Әкренләп берәм-берәм башҡарылған хәрәкәттәр бер бөтөн эш төрөнә әүерелә: *пирамиданы ҙурлыгы һәм төҫө буйынса айырылган балдаҡтарҙан төҙөргә, кирбестәрҙән ҡапҡа эшләргә һ.б.*

Сюжетлы уйынсыҡтар менән уйнау үҫешә. Балалар бер уйынсыҡ менән (*ҡурсаҡ*) башҡарылған хәрәкәтте икенселәренә күсерә белә (*айыуҡайга, бесәйгә, ҡуянга. һ.б.)* Уйын барышында бер хәрәкәтте икенсеһенә бәйләү теләге уяна. Мәҫәлән, ҡурсаҡты йоҡлатырға һалғас, уны юрған менән ябыу теләге уяна һәм бала юрған урынына кәрәкле предметты эҙләй.

Ҡайһы ваҡыт балалар 1-2 хәрәкәтте бер-бер артлы башҡарып, уларҙың йәшәйешкә тура килмәүен аңламай эш итәләр: йоҡлап ятҡан баланы машинала йөрөтә башлайҙар, йәки ашатырға маташалар. Ике йәш тулыуға балалар тормоштағы төрлө күренеш хәрәкәттәрен бәйләнешле итеп башҡара башлайҙар: ҡурсаҡты тышта йөрөткәс, уны ашаталар, аҙаҡ – йоҡларға һалалар. Шулай итеп, был эш-хәрәкәтте үҙләштереү баланың аҙаҡтан предметлы-уйын эшмәкәрлегенә нигеҙ булып тора.

Балалар сюжетлы уйынсыҡтар менән көнкүрештәге хәрәкәттәрҙе мәктәпкәсә осор дауамында башҡаралар. 3-7 йәшлек балалар һәр бер хәрәкәтте эҙмә-эҙлекле итеп теҙеп, ҙур уйын күренешен һүрәтләйҙәр: ашар алдынан ҡурсаҡтың ҡулын йыуалар, түшенә салфетка бәйләйҙәр, бутҡаны алып, ул эҫеме, юҡмы – шуны тикшерәләр. Ҡалаҡ менән бутҡа ашаталар, шунан ғына сынаяҡтан сәй эсерәләр. Икенсе йәшкә сыҡкан балаларҙа ошо рәүешле эш-хәрәкәт итеү әле үҫешмәгән. Бала тәрилкәне ҡурсаҡтың ауыҙы эргәһенә килтереп, уны ашатыуҙы күрһәтә. Ошоға оҡшаш хәрәкәттәр башҡа осраҡтарҙа ла күҙәтелә.. Шуның өсөн дә сюжетлы уйындар өсөн уйынсыҡтар һайлағанда уларҙың ябайлығына иғтибар итеү кәрәк.

Икенсе йәшкә сыҡкан кескәйҙәрҙә мәктәпкәсә йәштәге балаларға хас эшмәкәрлек төрҙәренең (предметтар менән сенсорика буйынса эш итеү, ҡоролмалар ҡороу, сюжетлы уйындар) элементтары үҫешә башлай. Тик уйындарҙа предметтарҙы ҡулланып уйнау һәр саҡ ҡабатланып тормай. Бала ниндәй уйынсыҡ йәки предмет күрә, ҡулындағы әйберҙе ташлап, шуға иғтибарын йүнәлтә. Әкренләп кенә бала башлаған эшен аҙағына еткереп, һөҙөмтәһен күреп уйын хәрәкәттәрен башҡарырға өйрәнә башлай.

Икенсе йәшкә сыҡкан бала телмәренең әүҙем үҫешкән осоро. Предметтар араһындағы бәйләнештәр (хәрәкәттәр) һәм уларҙы аңлатҡан һүҙҙәр бер йәшлек осор ваҡытындағыға ҡарағанда 6-10 тапҡырға тиҙерәк формалаша. Шул уҡ ваҡытта башҡаларҙың телмәрен аңлау һөйләүгә ҡарағанда әүҙемерәк үҫешә. Балалар предметтарҙың атамаһын, уларҙың хәлен, хәрәкәтен аңлатҡан һүҙҙәрҙе үҙләштерә. Бер үк һүҙ менән менән бер нисә хәрәкәт аңлатылыуына төшөнә башлайҙар: *ҡурсаҡ башына бүрек кейҙер, пирамидага балдаҡты кейҙер.*

Ике йәшлек бала предметтарҙы дөйөмләштереү һәләтенә эйә була башлай: ҡурсаҡ ҙур була, кейенгән йәки яланғас булырға мөмкин, малай йәки ҡыҙ ҡиәфәтендә (ҡыҙ-ҡурсаҡ, малай-ҡурсаҡ) һ.б.

Дөйөмләштерә алыу һөҙөмтәһендә бала һүрәттәге предметтарҙы таный ала, күрһәтә, атамаһын әйтә.

Йәш ярымлыҡ сабыйҙың һүҙ байлығы 20-30 һүҙ булһа, бер йәштә һигеҙ – ун айлыҡ бала 200-300 һүҙ белә. Уның телмәрендә исемдәр, ҡылымдар күп урын ала, сифаттар (*аҡ, матур, ҙур, бәләкәй*), рәүештәр (*тегендә, бында, был, ошо*) алмаштар (*ул, мин, һин*) осрай.

Баланың ябайлаштырып әйткән һүҙҙәре (*тө-тө, би-би һ.б.)* тулы һүҙҙәр менән алмаштырыла. Тәүге осоро был һүҙҙәр бик үк дөрөҫ әйтелмәһә лә, бала уны мәғәнәүи яҡтан дөрөҫ атай. Һүҙҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтәм тип, ололар уны ҡат-ҡат ҡабатлаһалар ҙа, бала һүҙҙәге өндәрҙе дөрөҫ итеп әйтә алмай, сөнки йәш ярымлыҡ сабый дөрөҫ итеп ике ирен ярҙамында барлыҡҡа килгән ***п, б, м*** өндәрен, тел алдында тел осо һәм тештәр һәм тештәр ярҙамында әйтелгән ***т, д*** өндәрен, тел арты һәм артҡы аңҡауҙа яһалған ***г, ғ, х*** өндәрен генә әйтә ала. Һыҙғырыулы (**с, з, ц**), шышылдаулы (***ш, щ, ж, ч***), танау, тел эргәһендә яһалған сонор өндәрҙе (***н, ң, л***), ҡалтыраулы ***р*** өнө һәм бергә ҡушылып әйтелә торған өндәр бала телмәрендә һуңынан ғына, өсөнсө йәшкә сыҡҡас, яйлап формалаша. Йәш ярымлыҡ бала ***п, б, м*** өндәрен, алғы аңҡауҙа тел осо ярҙамындабарлыҡҡа килгән ***т, д, н*** өндәрен, артҡы аңҡала яһалған ***г, х*** өндәрен күп осраҡта дөрөҫ әйтә. Сонор (талғын) тартынҡыларҙы ***(р, л, м, н, ң, й, в (уы),*** һыҙғырыулы тартынҡыларҙы (**с, з, ц**), шышылдаулы тартынҡыларҙы (***ш, щ, ж, ч***), шулай уҡ бергә ҡушылып әйтелгән өндәрҙе бала дөрөҫ итеп әйтә алмай.

Тәүге осоро бала әйткән һүҙ һөйләм ярҙамында әйтелгән тулы мәғәнәне аңлата: "бах" тәүге осраҡта "уйынсыҡты төшөрөүен", икенсе осраҡта – "үҙенең ҡолауын". Йәш ярымлыҡ бала телмәрендә ике һүҙҙән, ике йәшлек балала өс-дүрт һүҙҙән торған һөйләм барлыҡҡа килә башлай.

Йәш ярымдан үткән бала ололарға һорауҙарҙы йыш бирә башлай. Уларҙың мәғәнәһен бала тауыш интонацияһы аша бирә. Һорау мәғәнәһен аңлатҡан һүҙҙәрҙе бала ҡулланмай тиерлек. Һүҙ ярҙамында нимәнелер һорауҙы бала үҙе ҡарап, күреп торған осраҡта бирергә өйрәнә.

Икенсе йәшкә сыҡҡан бала үҙе менән йыш аралашҡан ололарҙың һәм балаларҙың исемдәрен әйтә белә, шулай уҡ туғанлыҡ терминдарын үҙләштерә (әсәй, атай, өләсәй, олатай). Бала ябай ғына кимәлдә кешенең хис-тойғоһон аңлатҡан һүҙҙәрҙең мәғәнәһен (ҡыуана, шатлана, ҡурҡа, йәлләй, ярата) аңлай башлай. Телмәрендә баһа биреүсе һүҙҙәр (насар, яҡшы, матур) барлыҡҡа килә башлай.

Баланың предметлы уйын эшмәкәрлегендә һәм үҙ-үҙен хеҙмәтләндереүендә үҙаллығы үҫешә: үҙ-аллы ашай, ҡулын-битен йыуа, өҫ-башындағы тәртипһеҙлекте төҙәтергә тырыша.

Тирә-йүндә үҙен дөрөҫ тоторға күнегә башлай: төркөмдәге йыһаздарҙың атамаһын белә, әйтә; ололарҙың бер-ике, йыл аҙағында ике-өс хәрәкәттән торған йомошон үтәй ала. Әкренләп "ярай", "ярамай" һүҙҙәрен аңлы рәүештә ҡулланып,

эш итә башлай. Ололар менән аралашыу хеҙмәттәшлек нигеҙендә ниндәйҙер предметҡа йүнәлтелгән йүнәлештә була.

Икенсе йәшкә сыҡҡан балалар алдан өйрәнгән уйындарҙы (икәүләп-өсәүләп) үҙ-ара ыңғай мөнәсәбәттәргә инеп уйнай алалар (“Йәшенмәк”, “Баҫтырыш”). Ләкин бергәләп аралашыу тәжрибәһе аҙ булғанлыҡтан, балалар уйынсыҡты тартып алырға, бер-береһен этергә, үпкәләп иларға мөмкиндәр. Шуға ла баланы “арауыҡ һаҡлап” уйнарға өйрәтеү кәрәк: тәүҙә ҡамасауламай бер-береһенең эргәһендә уйнарға өйрәтергә, аҙаҡ әкренләп 2-3 баланан торған төркөмдәргә бүлеп уйнатыу кәрәк. Татыу уйнар өсөн ябай ғына күнекмәләрҙе үтәргә өйрәтеү мөһим: *шылып ултыр, күршеңә урын бир; күршеңдең тәрилкәһенә теймә; йоҡо бүлмәһендә шаулама һ.б.*

## Аң-белемгә төшөндөрөү һәм тәрбиәүи бурыстар

Баланың һаулығын нығытыу, бала организмын сыныҡтырыуҙы дауам итеү, хәрәкәтләнеүҙең бөтә төрҙәрен дә үҫтереү.

Балаға хәрәкәтләнеү әүҙемлеген һәм кәйеф күтәренкелеген тәьмин итеүсе шарттар тыуҙырыу. Арыуҙы иҫкәртеү. Ябай ғына бөхтәлек, таҙалыҡ ҡағиҙәләренә өйрәтеү һәм үҙ-үҙен хеҙмәтләндерә белеүҙе формалаштырыу.

Үҙен уратып алған тирә-йүндә предметтарҙы танырға, уларҙы хәтерҙә ҡалдырырға өйрәтеү, һүҙ байлығын арттырыу. Предметтың хәрәкәтен, сифатын аңлатҡан һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөндөрөү һәм уларҙы үҙ телмәрендә ҡулланырға өйрәтеү. Ябай һөйләмле, бәләкәй күләмле әҫәрҙәрҙең эстәлеген аңлатыу.

Үҙ теләген аңлатыуҙы, һорауҙы ябай һөйләмдәр, фразалар менән белдерергә өйрәтеү.

Уйынсыҡтар һәм үҙе тирәһендәге башҡа предметтар менән уйнарға өйрәтеү. Ололар күрһәткән уйын хәрәкәттәрен отоп, ҡабатлап күрһәтергә һәм көнкүрештәге таныш хәл-күренештәрҙе иҫкә төшөрөп, уларҙы уйында сағылдырып уйната башлау.

Үҙ-үҙен тота белеү һәм әҙәп ҡағиҙәләрен үтәүҙе формалаштыра башлау: һаулыҡ һорашыу, хушлашыу, рәхмәт әйтә белеү, ололар үтенесен үтәй белеү һ.б. Башҡаларға ҡарата иғтибарлы һәм хөрмәтле булырға өйрәтеү. Йәнлектәргә һәм үҫемлектәргә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Матурлыҡҡа ынтылыш тәрбиәләү. Төрлө еҫтәргә, тауыштарға, төҫтәргә, предметтарҙың ҙурлығына, күләменә баланың иғтибарын йүнәлтеп, уларҙы иҫтә ҡалдырыу һәм айыра белеү күнекмәләре үткәреү.

Нәфис һүҙгә баланы йәлеп итеү. Матур көйҙәр тыңлатып, шатлыҡ, ҡыуаныс тойғолары тәрбиәләү. Көйгә ярашлы хәрәкәтләнергә өйрәтеү.

## Көн тәртибе барышындағы тәрбиә

Көн тәртибендә ашатыу, йоҡонан торғоҙоу, тышҡа сығырға йыйыныу һәм тыштан инеү, гигиена сараларын үткәреү балаларҙың күп ваҡытын ала. Һәр сараны үткәргәндә тәрбиәсенең түҙемле һәм тейешле ярҙам итеүенә балалар мохтаж була.

**Гигиена-әҙәп ҡағиҙәләре тәрбиәләү һәм үҙ-аллылыҡ тәрбиәләү.** Һәр бер баланы көн тәртибенә күнектереү әкренләп башҡарыла һәм бәләкәй генә төркөмсәләргә бүлеп эш ителә. Мәҫәлән, өҫтәл артына тәүҙә үҙ-аллы ашай белмәгән

2-3 баланы ултыртып, ашатып алалар, башҡа балалар был ваҡытта уйын менән мәшғүл булалар.

Беренсе төркөмсә балаларын аш алдынан ҡул йыуырға, ҡалаҡ менән бутҡа ашарға, 1,5 йәштә аш ашарға өйрәтәләр. Төрлө аш ризыҡтарын ашарға, ололар ярҙамында ауыҙ-морон һөртөргә, ҡулъяулыҡ (салфетка) ҡулланырға, ашап бөткәс, рәхмәт әйтергә өйрәтәләр.

Ошо рәүештә сиратлап һәр төркөмсә балаларын аш алдынан һәм бысраған һайын ҡулдарын йыуырға, үҙенең шәхси таҫтамалы менән ҡулланырға, өлкәндәрҙең ярҙамы менән бирелгән ризыҡты ашарға өйрәтеү. Ашап туйғас, рәхмәт әйтергә һәм үҙ ултырғысын этеп ҡуйырға күнектереү.

Бер йәштә ете айлыҡ бала үҙ-аллы сисенә башлай, тик ҡайһы саҡта уға әҙерәк ололар ярҙамы талап ителә (бүреген, быймаһын, итеген, салбарын сисә, төймәһе ысҡындырылған туфлиҙе үҙаллы һала, колготкаларын сисә белә).

Ике йәштә бала ололар күҙәтеүе аҫтында кейемдәрен билдәле тәртиптә кейә һәм сисергә өйрәнә.

**Бөхтәлеккә, әҙәплелеккә өйрәтеү.** Ике йәшлек бала ололар ярҙамында ҡулъяулыҡ менән һөртөнә белә һәм өҫ, аяҡ кейемдәрен тейешле тәртиптә йыйып ҡуя башлай. Төркөм бүлмәһендә тәртип һаҡларға тырыша. Үҙ-аллы үҙенең физиологик ихтыяждарын башҡара ала башлай.

Ябай әҙәп ҡағиҙәләренә өйрәтеү: өҫтәл артына ашарға таҙа ҡулдар менән ултырырға һәм үҙен әҙәпле тоторға, бүлмәлә ҡысҡырмаҫҡа, йоҡо бүлмәһендә ҡысҡырып һөйләшмәҫкә, ололарҙы тыңларға, уларҙың үтенесен, әйтеүен башҡарырға күнектереү.

Ҡабул итеү бүлмәһендә, йоҡо бүлмәһендә үҙенең әйберҙәре ятҡан урынды танып, унда үҙ әйберҙәрен матурлап ҡуя белергә өйрәтеү һ.б.

2-3 төркөмсәнән торған балалары әкренләп үҙҙәре ҡуллана торған әйберҙәрҙең атамаһын (һабын, таҫтамал, күлдәк һ.б.), көнкүрештә башҡарылған ябай хәрәкәттәрҙең, тән өлөштәренеңәйтелешен аңлы рәүештә үҙ телмәрендә ҡуллана башлай. Ябай ғына эш-хәрәкәтте аңлатҡан һүҙҙәрҙе аңлы ҡулланырға өйрәтеү (миңә бир, өҫтәлгә ҡуй һ.б.).

Шул уҡ ваҡытта предметтарҙың тәғәйенләнешен, төҫөн, дәүмәлен, ятҡан урынын аңлап әйтергә өйрәтәләр. Берәй эш башҡарғанда уның бер-береһе менән бәйле булған ниндәй хәрәкәттәрҙән тороуын аңлатыу(ҡул йыуыу, сисенеү һ.б.). Үтенесте, теләкте 2-3 һүҙҙән торған һөйләмдәр, фразалар аша әйтергә күнектереү.

**Тирә-яҡ мөхиттә предметлы - арауыҡ төшөнсәләрен киңәйтеү.**Бөтә эш төрҙәрен кескәйҙәрҙе ике төркөмсәгә бүлеп эш итеү уңышлы була: беренсе төркөм уйын менән мәшғүл ваҡытта икенсе төркөмсә менән аң-белемгә өйрәтеү, күнектереү саралары үтәлә.

Бүлмәлә йүнәлештәрҙе аңлай һәм билдәләй белеү һәләтен формалаштырыу. Беренсе төркөмсә менән шәхси кейем-һалымдар һаҡлай торған урындар һәм өҫтәл артында ултырыу урындары менән,өйҙән алып балалар майҙансығына тиклемге юл менән таныштырыу. Аҙаҡ төркөмсәләр алмашыналар.

**Телмәрҙе аңлау үҫеше.**Балаларҙың һүҙлек запасын киңәйтеү, көндәлек кәрәк-ярағтарҙың (һабын,таҫтамал һ.б),кәүҙә өлөштәренең атамалары менән

таныштырыу. Кейенеү һәм сисенеү тәртибенә өйрәтеү. Балаларҙы көндәлек шәхси кәрәк-яраҡтар менән ҡулланыу ҡағиҙәләренә өйрәтеү,уларҙың ятҡан урындары,төҫтәре,ҙурлыҡтары,ҡулланыу ҡағиҙәләрен аңлатыу.

**Әүҙем һөйләшеүҙең үҫеше.**Беренсе төркөмсә балаларын ябай ғына бер йәки ике һүҙҙән торған фразалар әйтергә өйрәтеү, ә икенсе төркөмсә балалары менән кейем–һалымдың, аяҡ кейеменең, йыһаздарҙың атамаларын, уларҙы ҡулланыу ҡағиҙәләренә өйрәтеү буйынса эш ойоштороу. Әйтергә теләгән теләктәрҙе, һорауҙарҙы, тойғоларҙы бәләкәй һөйләмдәр менән аңлата белеү һәләтенә булышлыҡ итеү.

## Тәрбиәләүсе уйын- дәрестәр

Икенсе йәшкә сыҡҡан балалар менән көнөнә 2-әр, аҙнаһына – бөтәһе 10 уйын-дәрес үткәрелә.

Беренсе төркөмсә балалары менән (1-1,5 йәш) дәрестәр көндөң икенсе яртыһында үткәрелә. Балалар 3-5 кешенән торған төркөмсәләргә бүленә һәм дәрес ваҡыты 3-6 минут тәшкил итә.

Икенсе төркөм балалары менән (1,5-2 йәш) дәрестәр төшкә тиклем һәм төштән һуң үткәрелә, дәрес үткәреү ваҡыты 6-10 минут, аҙнаһына бөтәһе 10 уйын-дәрес үткәрелә. Дәрестәрҙең характерына ҡарап, балаларҙы 4-6 кешенән торған төркөмсәләргә бүлергә мөмкин.

| Уйын-дәрестәр төрө | Дәрестәр һаны |
|---|---|
| 1. Тирә-йүнде танып-белеүһәм телмәр үҫтереү | 3 |
| 2. Хәрәкәттәр үҫтереү | 2 |
| 3. Төҙөлөш ҡоролмалары менән | 1 |
| 4. Дидактик материалдар менән | 2 |
| 5. Музыкаль тәрбиә | 2 |
| Уйын-дәрестәрҙең дөйөм һаны | 10 |

## ТЕЛМӘР ҮҪТЕРЕҮ

### Бер йәштән йәш ярымға тиклемге осор

**Телмәрҙе аңлау үҫеше.**Бала аңлаған һүҙҙәрҙең һанын арттырыу. Ололар әйткән һүҙ буйынса уйынсыҡты, кейем-һалымды, һауыт-һабаны көндәлек тормошта, һүрәттә таба белергә, күрһәтергә өйрәтеү.

Тән өлөштәрен (аяҡтар, ҡулдар, баш), бит өлөштәрен (ауыҙ, күҙҙәр, ҡолаҡтар); уйын һәм үҙ-үҙен хеҙмәтләндереү хәрәкәттәрен аңлатҡан һүҙҙәрҙе (йыуынырға, тышҡа сығыу, эсергә, ашарға, йоҡларға һ.б.); предметтарҙың төҫтәрен танырға һәм әйтергә (ҡыҙыл, күк); ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә дәүмәлде аңлатҡан һүҙҙәрҙе (ҙур, бәләкәй), форманы белдергән һүҙҙәрҙе (кубик, кирбес, пирамида) әйтергә, мәғәнәһенә төшөнөргә өйрәтеү.

**Әүҙем һөйләшеүҙең үҫеше.** Уйынсыҡтар ярҙамында ололар күрһәткән эш-хәрәкәттәрҙең айышын төҙөлөшө ябай ғына булған фразалар аша аңлатыу.

2-3 шаршауҙан торған уйынсыҡтар менән сәхнәләштерелгән әҫәрҙең йөкмәткеһен ябай ғына кимәлдә аңларға өйрәтеү.

Йыш ҡулланылған өндәр ҡушылмаһын һәм һүҙҙәрҙе ҡабатлап әйтергә өйрәтеү.

Хәрәкәтһеҙ, тыныс ҡиәфәттә төшөрөлгән таныш предметтарҙы һүрәттә күрһәтеп, атамаһын әйтә белергә өйрәтеү (1 йәштә 3 айҙа) һәм уларҙы хәрәкәттә әйтә белеү (1 йәштә 6 айҙа).

Баланы «Был нимә?», «Нимә эшләй?» һорауҙарына яуап бирергә өйрәтеү.

Ым-ишараны һүҙ ярҙамында аңлатырға өйрәтеү. Ике һүҙҙән торған һөйләмде ҡабатлап әйтергә күнектереү.

## Йәш ярымдан ике йәшкә тиклемге осор

**Телмәрҙе аңлау үҫеше.**Һүҙ байлығын арттырыуҙы дауам итеү. Балаларға предметтың төҫө (ҡыҙыл, күк, һары, йәшел), дәүмәле (ҙур, бәләкәй), формаһы (кубик, кирбес, ҡыйыҡ), тышҡы торошо (бысраҡ, таҙа), арауыҡтағы урыны (тегендә, ошонда, бында), ваҡытҡа бәйләнеше (хәҙер, бая) һәм һаны (берәү, күп) тураһындағы һүҙҙәрҙе аңлы рәүештә әйтергә өйрәтеү.

Ололар һорауы буйынса таныш предметтарҙы төҫө буйынса һайлай белеүҙе нығытыу.

Балаларҙы хайуандарҙың хәрәкәтләнеү төрөн (йүгерә, һикерә, оса һ.б.), ашау ысулын (ялай, һемерә, сүпләй, кимерә һ.б.), тауыш биреүен (өрә, мырылдай, ырылдай һ.б.), кешенең хәрәкәтләнеү төрөн (атлай, ята, ултыра һ.б.), уның эш башҡарыу төрҙәрен (йыуа, кейә, сисә, ашай һ.б.), шулай уҡ уның кәйеф торошон (көлә, ҡурҡа, шатлана, илай һ.б.) аңлатҡан һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөргә һәм әйтергә өйрәтеү.

Предметтар һәм хәрәкәттәр тураһында дөйөм төшөнсәләр формалаштырыу. Таныш предметтарҙы дәүмәлен һәм төҫөн айырмайынса танып күрһәтергә өйрәтеү (туп ҙур һәм бәләкәй, ҡыҙыл, ҙур туп). Бер үк хәрәкәтте төрлө предметтар менән башҡарырға өйрәтеү (ҡуянды, бесәйҙе, ҡурсаҡты ашатыу).

Бәләкәй күләмле уйынсыҡтар менән ҡурсаҡ театры аша сәхнәләштерелгән әҫәрҙең сюжетын аңларға өйрәтеү.

**Әүҙем һөйләшеүҙең үҫеше.** Өноҡшаш һүҙҙәрҙе дөйөм ҡулланышлы һүҙҙәр менән алмаштырырға өйрәтеү («муу-муу» - һыйыр баҡыра). Ике-өс һүҙҙән торған һөйләмдәрҙе ҡабатлап әйтеүҙе, бер һүҙ менән ололар һорауына яуап биреүҙе хуплау.

Әүҙем ҡулланылған һүҙ байлығын үҫтереү: предметтарҙың атамаһын, уларҙың тәғәйенләнешен, кешеләрҙең хәл-торошон аңлатҡан һүҙҙәрҙе ҡулланырға өйрәтеү; исемдәрҙе, сифаттарҙы, ҡылымдарҙы, алмаштарҙы (мин, һин, ул, миңә һ.б.), рәүештәрҙе (тегендә, бында, ошонда һ.б.) дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү.

Предметтарҙы көндәлек йәшәйештә һәм һүрәттә күрһәтә, кешеләрҙе һүрәт, енси һәм йәш буйынса танып әйтә белергә өйрәтеү (бәпес, атай, ҡартатай һ.б.).

Телмәр аша үҙ-ара аралашырға өйрәтеү (һора әле; рәхмәт әйт; ҡара, кем килгән; әйт әле һ.б.).

## Нәфис әҙәбиәт менән таныштырыу

Йөкмәткеһе буйынса балалар аңлай алырлыҡ ҡыҫҡа күләмле халыҡ йырҙарын, һамаҡтарҙы, әкиәттәрҙе һәм шиғырҙарҙы, яҙыусылар әҫәрҙәрен тыңларға, уларҙың йөкмәткеһенә төшөнөргә өйрәтеү. Әҫәрҙе уҡыуҙы һүрәт, уйынсыҡтар күрһәтеү, хәрәкәттәр ярҙамында аңлатыу.

Таныш әҫәрҙәрҙе күргәҙмәлелекһеҙ тыңларға күнектереү. Ололар артынан шиғыр юлдарын ҡабатлатыу һәм әҫәр йөкмәткеһе буйынса хәрәкәттәр башҡарырға өйрәтеү. Баланың тауыш интонацияһына иғтибар биреү.

## Хәрәкәттәр үҫеше

Хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереүгә тейешле шарттар булдырыу; тура йүнәлештә тигеҙлек һаҡлап, ҡулдарҙы әкренләп хәрәкәтләндереп йөрөү. Тәпәш кенә баҫҡысҡа менеү һәм төшөү; уның аша сығыу; аҫтынан сығыу; предметтарҙы ташларға, шылдырырға, йыйырға, этергә өйрәтеү; ҡайһы бер хәрәкәттәрҙе бергәләп башҡарырға өйрәтеү.

## Бер йәштән йәш ярымға тиклемге осор

**Атлау һәм тигеҙлек һаҡлап күнегеүҙәр башҡарыу.** Күмәкләп тура йүнәлештә иҙәндә ятҡан оҙон балаҫтан йөрөү. Ололар ярҙамында бер башы иҙәндән 10-15 сантиметрға күтәрелгән һәм киңлеге 25 см, оҙонлоғо 1,5-2 м булған таҡтанан күтәрелеү һәм кире төшөү. Төбө өҫкә әйләндереп һалынған 50 х 50 х 10 см күләмле йәшниккә менеү һәм кире төшөү. Ерҙән 5-10 см бейеклектә һуҙылған бау йәки таяҡ аша атлап үтеү.

**Шыуышыу, үрмәләү.** 2 м алыҫлыҡ араны шыуышып үтеү; 50 см бейеклектә һуҙылған бау аҫтынан сүкәйеп йәки имгәкләп үтеү; диаметры 50 см булған ҡоршау эсенән үтеү; 1 м бейеклектәге баҫҡыстан өҫкә менеү һәм кире төшөү.

**Тәгәрәтеү, ташлау.** Диаметры 25 см булған тупты алға табан ултырып, шунан тороп тәгәрәтеү. Диаметры 6-8 см булған тупты аҫка табан һәм алыҫлыҡҡа ташлау.

## Йәш ярымдан ике йәшкә тиклемге осор

**Атлау һәм тигеҙлек һаҡлап күнегеүҙәр башҡарыу.**Күмәкләп бергәләп атлау. Киңлеге 20 см, оҙонлоғо 1,5-2 м булған, бер башы иҙәндән 15-20 см күтәрелгән таҡтанан йөрөү. Төбө өҫкә әйләндереп һалынған йәшниккә менеү, төшөү (50х50х15 см). Иҙәндән 12-18 см бейеклектәге бау аша атлап үтеү.

**Шыуышыу, үрмәләү.**Диаметры 15-20 см булған бүрәнә аша сығып, 35-40 см бейеклектәге бау аҫтынан шыуышып, имгәкләп сығыу; диаметры 45 см булған ҡоршау эсенән үтеү. Бейеклеге 1,5 булған баҫҡысҡа үрмәләү һәм кире төшөү.

**Ташлау, тәгәрәтеү.**Диаметры 20-25 см булған тупты оло кеше менән парлашып тәгәрәтеү; тупты ауыш ерҙән тәгәрәтеү. Диаметры 6-8 см булған тупты уң һәм һул ҡул менән 50-70 см алыҫлыҡҡа ташлау.

**Дөйөм яҡтан үҫтереүсе күнегеүҙәр.**Эскәмйәлә ултырған килеш ҡулдарҙы алға һуҙыу һәм төшөрөү, арҡа артына йәшереү.

Иҙәндә ултырған килеш кәүҙәне уңға, һулға бороу һәм предметты биреү. Торған килеш алға эйелеү һәм турайыу.

Ололар ярҙамы менән 40-45 см бейеклектәге таяҡ аша алға эйелеү. Ололар ярҙамында бер урында сүкәйеү.

.Көн һайын уйынсыҡтар һәм уйынсыҡһыҙ хәрәкәтле уйындар уйнау.

1-1,6 йәшлек балалар менән хәрәкәтле уйындар һәр береһе менән айырым, шәхси рәүештә үткәрелә.

1,6 йәштән өлкән балалар менән хәрәкәтле уйындар шәхси рәүештә һәм бәләкәй төркөмдәргә бүлеп үткәрелә.

Төп хәрәкәттәрҙе үҫтереү(атлау, имгәкләү, үрмәләү, тупты тәгәрәтеү һәм ырғытыу).

Бер-береһенә ҡамасауламай төркөм менән бер яҡҡа ҡарай атларға, тәрбиәсене иғтибар менән тыңларға өйрәтеү.

«Тупты ҡыуып ет!», «Тупты ташла!», «Дөңгөргә шыуышып ет!», «Этте тот!», «Ҡайҙасысҡансыйылдай?». Үҙ-аллы йөрөүсе арбалар, машиналар, тәгәрмәсле уйынсыҡтар менән уйнау һ.б.

## Дидактик материалдар менән уйын-дәрестәр

### Бер йәштән йәш ярымға тиклемге осор

Балаларҙың һиҙеп-тойоу аша тирә-йүнде танып-белеүен үҫтереүҙе дауамитеү.

Предметтар менән эш-хәрәкәттәр башҡарырға өйрәтеү: пирамидалар үҙәгенә 2-3 бер үк ҙурлыҡтағы балдаҡтарҙы кейҙереү; бер-бер артлы кәмей барған 2-3 балдаҡты пирамидаға йыйыу; бәләкәй предметтарҙы ҙурҙары эсенә һалыу; бер урынлы ағас ҡурсаҡ һауытты асырға, ябырға өйрәтеү; пласмассанан эшләнгән һауыттарҙы асырға, ябырға өйрәтеү һ.б.

Предмет менән һәр төрлө хәрәкәттәрҙе (асырға-ябырға, кейҙерергә-сисергә, тәгәрәтеп, төртөп индерергә, бауҙар, таҫмалар үрергә, бер-береһенең өҫтөнә тигеҙләп һалырғаһ.б.) башҡара белеүҙе нығытыу: предметтың дәүмәленә ҡарап(ҙур, бәләкәй), төҫө буйынса(ҡыҙыл, күк, һары)тейешле форма өҫтөнә (өсмөйөш, квадрат, түңәрәк) һалыу-алыу, асыу-ябыу, кейҙереү-алыу, этепебәреү һ.б. Ботинка бауын тишектәргә индереү, төймәләрҙеэләктереү, сисеү һ.б.

Төрлө дидактикуйынсыҡтарменәнуйнарға өйрәтеү: шар, тупташлау; тишекле ҡумталарғапредметтарҙы һалыу, тишектәргә ҙурлығыбуйынсатөймәләриндереү, теҙеүһ. б.

### Йәш ярымдан ике йәшкә тиклемге осор

Предметтарҙы ҙурлығы буйынсатеҙеү: ололар ярҙамында ҙурҙан башлап,кәмей барған тәртиптә 4-5 ҡулсанан, ҡапҡастан торған пирамида йыйыу; ҡумталарға төрлө формалағы(түңәрәк, өсмөйөш, квадрат) ҡапҡастар таба белергә өйрәтеү; ике урынлыҡ ағас ҡурсаҡтарҙы, мискәләрҙе йыйыу; ике өлөшкә бүленгән киҫмә һүрәттәрҙән бөтөндө йыйыу(пирамида, алма). Тап килтереп, ябабелергә өйрәтеү. Ишетеү һәләтен үҫтереүгә «Кем өйҙә йәшәй?», «Кембеҙҙесаҡыра?» һ.б. уйындар уйнарға өйрәтеү.

Ҡыҙыл, күк, һары, йәшел төҫтәрҙе танырға, әйтергә өйрәтеү. Ололар ҡушыуыбуйынсабертөҫтәгепредметтарҙы һайлапалырға өйрәтеү.

Махсусдидактик ҡулланмаларменәнуйнарға өйрәтеү: иҙәндә һәм өҫтәлдә ҡороу өсөняраҡлаштырылғантөҙөлөшматериалдарындабәшмәктәрҙе һәмбөкөләрҙетөҫө

һәмтишектәрҙеңформаһыбуйынсатапкилтереп ҡумталарға, өҫтәлдәргә теҙергә өйрәтеү.

Кубик, кирбес, пирамида, призмаменәнтаныштырыу, уларҙыкөнкүрештәгепредметтарғаоҡшатабелергә өйрәтеү: ҡыйыҡ –призма, кирбес өй һ.б.

Ҡоролмалартөҙөү ысулдарыменәнтаныштырыу–эргәһенә терәп ҡуйыу, бер-береһе өҫтөнә һалыу. Ололарменәнбергәләп ҡоролмалартөҙөп, сюжетлыуйынуйнарға өйрәтә башлау.

Таныштөҙөлөшматериалдары һәмпластмассаконструкторҙарэлементтарыменән ҡоролмалартөҙөүгә күнектерә башлау.

## Музыкальтәрбиә

Икенсейәшкә сыҡҡансабыйҙаркөйгә ҡушылыпйырлауҙы, хәрәкәтләнеүҙе, уйнауҙыяраталар.

### Бер йәштән йәш ярымға тиклемге осор

Тыныс һәмшаткөйҙө тыңларғакүнектереү. Тыңлап, төрлөсә тауышбиргәнмузыка ҡоралдарынтанырға өйрәтә башлау (барабан, ҡурай, дөңгөр).

Үҙҙәренә оҡшағанйырҙың эстәлегенаңлатыу. Булдыраалғанса ҡушылыпйырларғайәлепитеү, әкренләпололарменәнбергә йырҙытамамларға өйрәтеү.

Көйгә баҫыпйөрөргә, ябай ғынабейеү хәрәкәттәребашҡарырға(аяҡтарҙаэйелеп-һығылыптороу, аяҡтарҙытыпылдатыпбаҫыу, бераяҡтыикенсеһеэргәһенә ҡуйыпатлау, сәпәкәйләү), ҡулдарҙадөңгөрҙө һелкетеп, ҡулъяулыҡтыболғап, үҙ тирәһендә әйләнеү, ҡулсуҡтарын әйләндереү.

Йәнлектәробразынсағылдырыпхәрәкәтләнеүҙехуплау(ҡуянҡай, ҡолонсаҡ һ.б.)

### Йәш ярымдан ике йәшкә тиклемге осор

Балаларҙың музыкальхәтерен һәмишетептөшөнөү һәләтен үҫтереү.

Танышмузыкаль әҫәрҙеишетеүҙәншатлыҡ кисереү тойғоларыуятыу, әҫәрҙеаҙағынатиклемтыңларғакүнектереү.

Музыка ҡоралдарын тауыш тембры буйынса танырға өйрәтеү (һыбыҙғы, ҡурай, барабан, гармун, дөңгөр), музыка ҡоралдарын күрһәтеп, уларҙа уйнап күрһәтеү.

Йырлағанда балаларҙың үҙ-аллы әүҙемлеген хуплау(ҡушылыпйырлау, өн оҡшаш тауыштар сығарып, ҡулдар, бармаҡтар менән ритмғаярашлы сәпәкәйләү, тыпылдау, туҡылдау һ.б.).

Музыкаға ярашлы хәрәкәтләнергә өйрәтеү, көйҙөң үҙгәреүенә ҡарап, хәрәкәтте үҙгәртә белергә күнектереү (атлауҙантыпылдауғайә әйләнеүгә күсеү һ.б.), уйынхәрәкәттәребашҡарыу(айыуҡай атлай, ҡуян һикерә, ҡошсоҡ суҡый). Көйҙөң юғарылығына, түбәнлегенә иғтибар тәрбиәләй башлау.

## Музыкаль уйындар, күңел асыуҙар һәм байрамдар

Сюжетлымузыкальуйындаруйнатыу. Көйтөрөнә ҡарап, уныхәрәкәттәрменән һүрәтләргә өйрәтеү. Ябайэстәлеклемузыкаль әҫәрҙәрҙесәхнәләштерергә өйрәтә башлау.

## 2 йәштән 3 йәшкә тиклемге балаларға белем биреү эшмәкәрлеге йөкмәткеһе.

### (Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө)

Өсөнсө йәшкә сыҡҡан кескәйҙәр үҙ-аллыҡ күрһәтә башлайҙар. Уларҙың төрлө предметтар менән эш итеүе үҫешә, бергәләп эш башҡарыу ваҡытында балалар һәм өлкәндәр араһындағы һөйләшеүҙәр, аралашыуҙар күбәйә; баланың тирә-йүндәге күренештәрҙе, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе аңлы рәүештә ҡабул итеүе яҡшыраҡ үҫешә башлай; уның телмәре, үҙ-үҙен тотоуы, уйнауы, күргәҙмә-хәрәкәтле фекерләүе үҫешә.

Өс йәшлек баланың аңлы рәүештә һөйләшеүе үҫешә. Балалар тирә-йүндәге предметтарҙың атамаларын үҙләштерәләр. Өлкәндәрҙең һүҙ ярҙамында әйткән ябай ғына йомоштарын (ҡарап, күреп торған осраҡта ғына) башҡара алалар.

Баланың үҙе аңлаған һүҙҙәре күбәйә. Тәртибен аңлы рәүештә үҙгәртеүгә өлкәндәрҙең һүҙҙәр ярҙамында бирелгән төрлө кәңәштәре ярҙам итә башлай.

Өсөнсө йәшкә сыҡҡан балаларҙың телмәре әүҙем үҫешә: улар һөйләшеүендә туған телдең грамматик яҡтан төҙөлөшө тулыһынса тип әйтерлек үҙләштерелә. Балалар ябай ғына һөйләмдәр төҙөп һөйләшә башлайҙар. Телмәрҙә барлыҡ һүҙ төркөмдәре лә тип әйтерлек ҡулланыла башлай. Әүҙем һүҙ байлығы 1000-1500 һүҙҙе тәшкил итә. Өс йәш тулғанда бала һүҙҙәр ярҙамында тиҫтерҙәре менән аралаша башлай.

Был осорҙа балалар тормошонда яңы эшмәкәрлек төрҙәре – уйын, һүрәт төшөрөү, ҡоролмалар ҡороу – формалаша башлай. Балалар уйынында хәрәкәттәр башҡарыу төп урынды биләй. Уйын ҡорамалдары ысын тормоштағы предметтарға тап килә. Тик өсөнсө йәштең уртаһында ғына балалар ысын предметтар урынына башҡа төрлө әйберҙәрҙе ҡулланып уйнай башлайҙар

Баланың һүрәт төшөрөү теләге уяна: ул күберәк кешене төшөрә: бала һүрәтендә түңәрәк баш һәм унан һуҙылған ептәр – аяҡтар - кеше кәүҙәһен сағылдыра. Өс йәшлек баланың күреү һәм ишетеү һәләте лә үҫешә: бала яңылышмай 2-3 предмет араһынан формаһы, дәүмәле һәм төҫө буйынса бер предметты һайлай ала. Көйҙәрҙе айыра һәм йырлап күрһәтә ала.

Өс йәшлек бала туған телдең бөтә өндәрен дә айыра, ләкин уларҙың күбеһен дөрөҫ итеп әйтә алмай. Фекерләүҙең төп формаһы булып күргәҙмәле-хәрәкәтләнеү фекерләүе тора.

Был йәш балалары үҙ хис-тойғоларын, теләктәрен тыя белмәйҙәр, башҡаларҙың кәйеф торошо уларға тиҙ күсеүсән була. Ошо йәштә балаларҙа үҙе башҡарған эше өсөн ояла, ғорурлана белеү тойғолары формалаша башлай, бала енес һәм исем айырмаһына бәйле үҙенең кем икәнлегенә төшөнә башлай, уның үҙаңы, мин-минлеге үҫешә.

Өс йәш осоро бала психикаһында, холҡонда тәбиғи рәүештә барлыҡҡа килә торған кризис менән тамалана: бала үҙен өлкәндәрҙән башҡа айырым бер кеше итеп хис итә. Уның аңында мин-минлелек образы тыуа һәм формалаша. Кризис осоро бер нисә айҙан бер-ике йылға тиклем һуҙылырға һәм балала насар ғәҙәттәр

формалашыуына килтерергә мөмкин. Бала тиҙ үсегеп, бушҡа илап, сәбәпһеҙ һуғышып барыусан, юҡ-барға тиҫкәреләнеп китеүсән була башлай. Ул ололарға ҡарата тупаҫ мөғәлләмәлә, насар ҡараштa була, әйткәнгә ҡолаҡ һалмай, үпкә тотоусан булып китә. Шуға ла балаға был осорҙа айырыуса иғтибарлы булыу һәм тәртибен төҙәтеүгә төрлө алымдар ҡулланып эш итеү талап ителә.

**«СОЦИАЛЬ-КОММУНИКАТИВ ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Йәмғиәттә йәшәй белеү күнекмәләрен үҙләштереү, аралашыуҙың үҫеше һәм әхләҡи тәрбиә

Баланың ололар менән әүҙем аралашыу осоро. Бала ололар телмәрен аңлай, һүҙ ярҙамында үҙенең ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә башлай. Предметлы мөхиттә иркен йөрөп, төрлө әйберҙәр менән таныша. Былар бөтәһе лә баланың тирә-йүнде өйрәнеүҙең сифатын юғары күтәрә.

Ололар менән аралашыуҙа бала үҙен ҡыҙыҡһындырған әйберҙәр тураһында белергә тырыша. Өлкәндәрҙең башҡарған эшенә, әйткән һүҙенә, үҙҙәренең теге йәки был осраҡта нисек тотоуына, хис-тойғоларының сағылышына иғтибарлы була башлай һәм уйында уларға оҡшарға тырышып, ошоларҙы ҡабатлай башлай.

Баланың кеше тураһындағы төшөнсәләре үҙе аралашҡан яҡындары аша формалаша. Кеше тураһындағы төшөнсәләре бала аңында әкренләп дөйөмләшә башлай: бала «атай», «әсәй» һүҙҙәрен аңлатҡан төшөнсәләр уның ата-әсәһенә генә ҡағылмай, ә башҡа балаларҙың да ата-әсәһе барлығын аңлай башлай. Һуңғараҡ бала үҙенең яҡындарыараһындағы бәйләнештәргә әкренләп төшөнә башлай: өләсәйе менән әсәйе, апайы менән үҙе, әсәһе араһындағы һ.б.

Бала ололар һәм балалар араһындағы айырманы һиҙемләй башлай: ололар кескәйҙәрҙе ярата, улар тураһында ҡайғырта. Кескәйҙәр уларҙы тыңларға, уларға оҡшарға тырышалар.

Өсөнсө йәшкә сыҡҡан бала кешенең физик торошон (ауырта, асыға, арый), эмоциональ яҡтан торошон (илай, көлә, шатлана, үпкәләй) һәм теләген (йоҡларға, ашарға, эсергә теләй) аңлай һәм һүҙҙәр менән әйтә белә. Шуға ла балала кешене йәлләү, уға ярҙамлашыу, ҡурсылау теләге уяна башлай һәм бала үҙе булдыра алғансы ярҙам ҡулы һуҙырға тырыша.

Ике йәшлек бала ололар ярҙамында ҡулъяулыҡ менән һөртөнә белә, аяҡ, өҫ, баш кейемдәрен тейешле тәртиптә йыйып ҡуя башлай. Төркөм бүлмәһендә тәртип һаҡларға тырыша. Үҙенең физиологик ихтыяждарын үҙ-аллы башҡара ала.

Ябай әҙәп ҡағиҙәләренә өйрәтеү алып барыла: өҫтәл артына таҙа ҡулдар менән ултырырға һәм үҙен әҙәпле тоторға, бүлмәлә ҡысҡырмаҫҡа, йоҡо бүлмәһендә ҡысҡырып һөйләшмәҫкә, ололарҙы тыңларға, уларҙың үтенесен, әйтеүен башҡарырға күнектереү.

**БАЛА ҒАИЛӘЛӘ ҺӘМ КЕШЕЛЕК ЙӘМҒИӘТЕНДӘ**

**Әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереү.** Тәүҙә тәрбиәсе күҙәтеүе аҫтында, һуңынан – үҙ-аллы ҡул йыуырға, үҙ таҫтамалына һөртөнөргә өйрәтеү.

Үҙ-үҙен бөхтә, таҙа тоторға өйрәтеү. Көндәлек шәхси кәрәк-яраҡтарҙы ҡулланыу ҡағиҙәләре менән таныштырыу (ҡулъяулыҡ, таҫтамал, тараҡ, көршәк).

Кейенергә, сисенергә өйрәтеү: төймәләрҙе ысҡындырырға, аяҡ кейемен сисеп, матур итеп ултыртырға һ.б. Билдәле бер тәртиптә сиселгән кейемдәрҙе урынлаштырырға күнектереү.

Ашау ваҡытында үҙ-аллылыҡ тәрбиәләү, ҡалаҡты уң ҡул менән тотоп ашарға өйрәтеү.

**Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү.** Өлкәндәр ярҙамында сисенеү, кейенеү, аяҡ кейемен һала белеү күнекмәләренә өйрәтеү. Көндөҙгө йоҡоға сисенгәс, кейемдәрҙе бер урынға ҡуйырға, өҫ кейемдәрен ултырғысҡа элергә, аяҡ кейемен ултырғыс аҫтына ҡуйырға кәрәклеген өйрәтеү. Ҙур төймәләрҙе элергә тырышыу, кейемдәге тәртипһеҙлекте күрә белергәһәм өлкәндәр ярҙамында төҙәтергә ынтылыу, йыйнаҡ булыу теләге уятыу.

**Хужалыҡ-көнкүреш хеҙмәте.** Өлкәндәр хеҙмәтен күҙәтеп, уларға оҡшарға тырышыуҙы хуплау. Ярҙамлашыу, эшкә ҡушылыу теләге уятыу. Уйынсыҡтарҙы таратып һалып ҡуймаҫҡа, уйнап бөткәс, йыйырға, ултырғысты урынына ҡуйырға өйрәтеү.

**Ололарҙың хеҙмәтен хөрмәтләү.** Өлкәндәр хеҙмәтен күҙәтеү. Тәрбиәсе майҙансыҡты сүп-сарҙан таҙарта, ҡоро япраҡтарҙы йыйып ала, ҡар көрәй, ҡоштар ашаһын тип, тағараҡҡа ем һала һ.б. Әйләнә-тирәләге һәр хеҙмәткә кескәйҙәрҙең иғтибарын йәлеп итеү, эш барышын аңлатыу, һөҙөмтәләрен күрһәтеү.

**ХӘҮЕФҺЕҘ ЙӘШӘҮ НИГЕҘҘӘРЕН ФОРМАЛАШТЫРЫУ**

**Тәбиғәттәхәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен һаҡлау.** Тәбиғәттәүҙ-үҙеңдехәүефһеҙтотоу элементтары менән таныштырыу (таныш булмаған хайуандарға яҡын бармаҫҡа, уларҙы һыйпамаҫҡа, үҫемлектәрҙе өҙмәҫкә, ауыҙға ҡапмаҫҡа).

**Юл хәрәкәтендә хәүефһеҙлек һаҡлау.** Транспорт төрҙәре тураһында тәүге төшөнсәләр биреү. Машина, юл, урам тураһында тәү төшөнсәләрҙе формалаштырыу.

**Йәшәйештә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү.** Тирә-йүндәге предметтар менән яҡындан таныштырыу, улар менән эш иткәндә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәргә өйрәтеү. «Мөмкин», «ярамай»,«хәүефле» төшөнсәһе менән таныштырыу. Майҙансыҡта һаҡ уйнау (һыу эсмәҫкә,ҡом менән бәрешмәҫкә).

**«ТАНЫП-БЕЛЕҮ ҮҪЕШЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

**Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлеге үҫеше.** Балаларҙың тирә-йүнде һиҙеп-тойоу, күреү, еҫкәү, ишетеү аша танып-белеүен үҫтереү. Баланы төрлө эшмәкәрлектә предметтарҙы һиҙеп-тойоп, тотоп-һәрмәп, ҡапшап, һыйпап, күҙ ҡарашы менән тоҫмоллап, сағыштырып танып-белеү тәжрибәһен байытыу.

**Сенсор тәрбиә.** Предметтарҙы өйрәнгәндә уларҙың формаһын, дәүмәлен, төҫөн айыра белергә өйрәтеү.

Бер үк һүҙ менән әйтелгән предметтар араһындағы оҡшашлыҡты һәм айырманы табырға, күрергә өйрәтеү. Мәҫәлән, ҡалаҡ: ҙур ҡыҙыл ҡалаҡ; бәләкәй ялтыр ҡалаҡ. Улар менән ашайҙар.

Предметтарҙың сифаттарын танырға, әйтергә өйрәтеү.

**Дидактик уйындар.**Дидактик уйындарҙа балаларҙың предметтарҙың дәүмәле, формаһы, төҫө, ҙурлығы тураһындағы белемдәрен нығытыу: төрлө ҙурлыктағы 5-8 дүңгәләктән торған пирамиданы йыйыу; 4 өлөшкә ҡырҡылған киҫмә һүрәттәрҙән, йыйылма кубиктарҙан бер бөтөндө йыйыу; оҡшашлығы йәки айырмаһы буйынса предметтарҙы төркөмләү һ.б.

Иғтибарҙы һәм хәтерҙе үҫтереүсе дидактик уйындар үткәреү: «Нимә юҡ булды?», «Нимә ҡысҡыра?», «Ниндәй музыка ҡоралы тауышы?» һ.б.

## Башланғыс ябай математик төшөнсәләр

**Күплек төшөнсәһе менән таныштырыу.** Ваҡ предметтарҙы күпләп бергә йыйыу (уҫка, һауытҡа, йәшниккә һ.б.), бер һауыттан икенсеһенә - күпләп, аҙаҡ бөртөкләп бушатыу, йә төҫөнә ҡарап һайлап алыу.

Предметтарҙың күп икәнлеген күрә белеү (өҫтәлдә, иҙәндә, келәмдә) һәм уларҙы тәрбиәсе ҡушыуы буйынса күпләп бер рәткә теҙеп, йә төҫтәре, ҙурлыҡтары буйынса парлап һала белеү.

Тәрбиәсенең әйтеүенсә, рәттән беренсе һәм аҙаҡҡы предметтарҙы алып, күплектең сиктәрен билдәләй белеү.

Тирә-йүндәге бер үк төрлө предметтарҙың күплеген таба һәм күрһәтә белеү (күп ҡурсаҡтар, күп машиналар һ.б.).

**Дәүмәл, ҙурлыҡ төшөнсәһе менән таныштырыу.** Тирә-йүндәге төрлө дәүмәлдәге предметтарҙы әйтә һәм күрһәтә белеү (ҙур – бәләкәй һ.б.).

Ҡул менән тирә-йүндәге предметтарҙың оҙонлоғон (таҫма, балаҫ), киңлеген (караuат, келәм), бейеклеген (ултырғыс, өҫтәл) һ.б. күрһәтә белеү.

**Форма төшөнсәһе менән таныштырыу.** Шарҙы, кубты, кирбесте башҡа предметтарҙан айыра белергә, уларҙың атамаһын әйтергә һәм улар менән төрлө хәрәкәттәр башҡарырға өйрәнеү: тәгәрәтеү, бер-береһенең өҫтөнә ҡуйыу. «Түңәрәк», «тәгәрәмәй», «тәгәрәй», «куб» төшөнсәләрен аңлау һәм әйтә белеү.

М. Монтессори дидактик материалдарын ҡулланыу.

**Арауыҡ тураһында төшөнсә.** Төркөм бүлмәһендә йүнәлештәрҙе билдәләй, аңлай белеү: алыҫ - яҡын, аҫта - өҫтә, бында - тегендә.

Өҫтәлдә киҫмә һүрәттәрҙе, кубиктарҙы теҙә, предметтарҙың (ҡурсаҡ, уйынсыҡ) өлөштәрен һәм шулай уҡ предметтарҙың хәрәкәт итеү йүнәлештәрен күрһәтә белеү.

Үҙенең кәүҙә өлөштәрен күрһәтә белергә өйрәтеү (баш, бит, ҡулдар, аяҡтар, арҡа).

Тәрбиәсе артынан билдәле йүнәлештә хәрәкәтләнә белеү.

### ТИРӘ-ЙҮН ПРЕДМЕТТАРЫ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ

Балаларҙа яҡын тирәләге предметтарға (уйынсыҡтар, һауыт-һаба, кейем-һалым, аяҡ кейемдәре, йорт йыһаздары, транспорт, һ.б.) ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Бала үҙен уратып алған әйберҙәр, уларҙың өлөштәре, сифаттары менән танышыуҙы дауам итә. Ябай төҙөлөшлө, сағыу буяулы, ҙурлығы буйынса уларҙы таный белергә, әйтергә өйрәнә:

- төҫө, ҙурлығы, нимәнән эшләнеүе буйынса (ҡағыҙ, ағас, сепрәк, балсыҡ), файҙаланыу маҡсаты буйынса уларҙы һайлап алып төркөмләргә;

- оҡшаш һәм ҡапма-ҡаршы сифаттары буйынса улар араһындағы бәйләнештәрҙе табырға, таныш предметтарҙы сағыштыра белергә; (төрлө бейәләйҙәр, аяҡ кейемдәре, ултырғыстар һ.б.), предметтарҙы төрлөсә ҡулланыу ысулдарын өйрәнәләр.

- бөтөндө һәм уның өлөштәрен таба белергә;

- әйберҙәрҙе төркөмләгәндә дөйөмләштереүсе һүҙҙәрҙе аңлап, ҡуллана белергә *(кейем-һалым, һауыт-һаба, йорт йыһаздары һ.б.);*

- әйберҙең ни өсөн кәрәклеген аңлап, дөрөҫ ҡулланырға (ҡалаҡ менән ашайҙар, сынаяҡтан сәй эсәләр).

Транспорт тураһында тәүге мәғлүмәт биреү.

Кеше тураһында башланғыс төшөнсәләр биреү, кеше һәм уның торлағы (өйө), тыуған ере, йәшәгән төбәге, урыны беҙ йәшәгән ҡала (ауыл), урам, күршеләр, яҡын туғандар. Улар йәшәгән урам.);

- кеше һәм уның хеҙмәтенең емеше, нәтижәһе *(ашарға әҙерләй, өй йыйыштыра, машина йөрөтә);* шофер, летчик профессияһы тураһында төшөнсә биреү;

- кеше һәм тәбиғәт *(кеше үҫемлектәрҙе, йорт хайуандарын ҡарай, тәрбиәләй, үҫтерә);*

- ғаилә ағзаларының хеҙмәте һәм баҡса хеҙмәткәрҙәренең эше менән таныштырыу. Уларҙың эшенең йөкмәткеһен һәм уны дөрөҫ итеп әйтә белергә өйрәтеү *(әсәйем һыйыр һауа-һауынсы; апайым мәктәптә уҡый- уҡыусы; тәрбиәсе балалар менән эшләй; ашнаҡсы аш бешерә);*

- ололар эшләгән әйберҙәргә, уларҙың хеҙмәт нәтижәләренә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**СОЦИАЛЬ ДОНЪЯ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ**

Бала йәшәгән ҡала атамаһы менән таныштырыу.

Яҡындарының хеҙмәтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Ҡайһы бер эш-хәрәкәттәрҙе танырға өйрәтеү (тәрбиәсе ярҙамсыһы һауыт-һаба йыуа, бүлмәне йыйыштыра, ашарға алып килә һ.б.). Ололар үҙ эштәрен яратып, тырышып башҡаралар. Балаларға ла тиҙерәк үҫергә, ҙурайырға, күп кенә эш-хәрәкәттәрҙе үҙ-аллы башҡара белергә өйрәнергә кәрәклекте һөйләү.

**ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ**

Баланы ябай ғына кимәлдә тәбиғәт күренештәре менән таныштырыу.

Ысынбарлыҡта, һүрәттә, уйынсыҡтарҙа йорт хайуандарын һәм ҡоштарын (бесәй, эт, һыйыр, тауыҡ һ.б.) һәм уларҙың балаларын танырға, атамаларын әйтергә өйрәтеү. Һүрәттән ҡайһы бер ҡыр хайуандарын (айыу, ҡуян, төлкө һ.б.) танырға һәм атарға өйрәтеү.

Тәрбиәсе менән бергәләп аквариумдағы балыҡтарҙы, майҙансыҡтағы ҡоштарҙы күҙәтеү һәм ашатыу, гөлдәргә һыу һибеү;

Үҙенсәлектәрен иҫтә ҡалдырып, үләнде, сәскәне, ағасты танырға өйрәтеү (үлән – тәпәш, ағас бейек булып үҫә, сәскәләр – төрлө-төрлө, матур төҫтә, хуш еҫле булалар).

Гел йәшел энәле булған шыршыны танып, башҡа ағастарҙан айыра белеү.

Ҡайһы бер бүлмә гөлдәренең исемдәрен, уларҙың һабағын, япрағын, сәскәһен айыра белергә өйрәтеү (яран гөлө, фикус сәскәһе).

Үҫемлектәрҙе тәрбиәләүҙә өлкәндәргә ярҙам итеү теләге уятыу һәм уларға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү (ағастарҙы һындырырға, түтәлдәге сәскәләрҙе өҙөргә, тапарға ярамай).

Тышҡы күренештәре буйынса емештәрҙе (алма, груша, әфлисун һ.б.) һәм йәшелсәләрҙе (ҡыяр, кишер, кәбеҫтә, помидор һ.б.) бер-береһенән айырырға өйрәтеү.

Хайуан кәүҙәләренең өлөштәрен (башы, ҡойроғо, аяҡ-тояҡтары)таба,әйтә һәм ошо атамаларҙы телмәрҙә файҙалана белеү;

Хайуандарҙы яратыу, уларҙы һаҡлау һәм тәрбиәләүгә ярҙам итеү теләге уятыу.

Ҡырағай йәнлектәр һәм урман ҡоштары менән таныштырыу.

Тәбиғәт күренештәренең, көн торошоноң бер-береһе менән бәйле булыуын төшөндөрөү (ҡар яуа, ҡояш яҡтырта; ҡояш сыҡһа, көн яҡтыра; ҡояш булмаһа, ҡараңғы төшә. Ямғыр яуһа, тышта бысраҡ - тышҡа сығырға ярамай. Ҡар һыуыҡ - уны ашарға ярамай - ауырыта).

Һыу һәм уның үҙенсәлектәре тураһында төшөнсәләрҙе киңәйтеү, нығытыу: һыу аға; йылғала һыу инәләр. Һыуҙа кешенең йөҙө, әйберҙең күләгәһе сағыла. Һыуҙа тимер бата, ағас йөҙә. Туңһа, һыу боҙға әйләнә (тәжрибәләр үткәреү).

**Йыл миҙгелендәге үҙгәрештәрҙе аңлатыу:**

**Көҙ:**һалҡын, япраҡтар һарғая, ҡойола, сәскәләр шиңә. Көҙөн йәшелсәләр өлгөрә, уларҙы йыялар.

**Ҡыш:** ағастар яланғас ҡала, япраҡтары ҡойола, ҡар яуа. Балалар саңғыла, санала шыуалар, ҡарҙан төрлө фигуралар әүәләйҙәр.

**Яҙ:** ҡар ирей, ҡояш йылыта, ағастар япраҡ яра, үлән сыға, бөжәктәр күренә;

**Йәй:**ҡояш ныҡ ҡыҙҙыра, эҫе, бөтә ерҙә йәшеллек, сәскәләр күп үҫә, күбәләктәр оса.

### «ТЕЛМӘР ҮҪЕШЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

## Телмәр үҫтереү

**Телмәрүҫтереүсемөхит.**Балаларға үтәргә төрлө эштәр ҡушып (Ҡара, кем килде! Әминә ҡурсағын кәштәгә һалдымы?), уны башҡа балалар һәм тәрбиәсе менән һөйләшергә мәжбүр итеү. Өс йәшендә баланың тиҫтерҙәре менән ярайһы ғына кимәлдә аралаша алыуына ирешеү.

Китаптан, альбомдан һүрәттәр ҡарап, һорауҙарға аңлы рәүештә яуаптар бирергә өйрәтеү. Персонаждарҙың эмоциональ торошона иғтибар итеү (шатлана, ҡайғыра, илай, көлә, асыулана һ.б.).

**Һүҙлек эше.** Тирә-йүндәге предметтар, уларҙың үҙенсәлектәре һәм сифаттары менән таныштырыу һәм уларҙы аңлатҡан һүҙҙәрҙе өйрәтеү. Уйынсыҡтарҙы, кейем-һалымды, һауыт-һабаны айыра, атамаларын дөрөҫ әйтә белеү. Уларҙың төрҙәрен дөйөмләштерергә өйрәтеү: кейем - *бүрек, пальто, тун, күлдәк, итек, быйма*; йорт йыһаздары – *өҫтәл, карауат, ултырғыс*; һауыттар – *сәйнүк, сынаяҡ, ҡалаҡ, тәрилкә*; уйынсыҡтар – *ҡурсаҡ, айыуҡай, машина, туп.*

Предметтарҙың, әйберҙәрҙең өлөштәрен айырып әйтеү: *сынаяктың тотҡаһы, өҫтәлдең аяҡтары.*

Физик сифаттарҙы һәм үҙенсәлектәрҙе әйтергә өйрәтеү: *йылы, һыуыҡ, йомшаҡ, шыма, өҙөлә, ватыла, тәмле, татлы, әсе.*

*Йыуыу, һөртөү, сисеү, кейеү, йәйеү, кейендереү* кеүек хәрәкәттәрҙе аңлатҡан һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөргә һәм әйтергә өйрәтеү. Бының өсөн балаларҙы күберәк хәрәкәт иттереп, шул хәрәкәттәрҙе бергәләп башҡарып, уйындар уйнатып аңлатыу.

Ҡапма-ҡаршы мәғәнәне аңлатҡан ҡылымдарҙы ҡулланырға өйрәтеү: *ас - яп, тор - ултыр, бир - ал, ят - тор һ.б.*

Кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе һәм хис-тойғоларҙы аңлатҡан ҡылымдар менән таныштырыу: *ҡосаҡлай, ярата, һыйпай, көлә, шатлана, илай, ҡыуана, үсегә, илай.*

Төҫтө, дәүмәлде, тәмде, температураны аңлатҡан сифаттар менән таныштырыу: *ҡыҙыл, күк, тәмле, әсе, һыуыҡ, һалҡын, эҫе, йылы, ҙур, бәләкәй, матур, насар һ.б.*

Арауыҡта торошто билдәләүсе һәм башҡа рәүештәрҙең мәғәнәһе һәм улар аңлатҡан һүҙҙәрҙең әйтелеше менән таныштырыу: *аҫта, өҫтә, алыҫ, яҡын, аҙ, күп, шәп, тиҙ һ.б.*

**Өндәр өҫтөндә эш.** Балаларҙың телмәр ағзалары мускулдарын нығытыу, үҫтереү. Өндәрҙең дөрөҫ әйтелешенә күнегеүҙәр башҡарыу: уларҙы тиҙ, яй, әкрен, көслө тауыш менән әйтеү. өноҡшаш һүҙҙәр менән уйындар үткәреү.

Телмәр ағзаларының үҫешенә, һығылмалығына, дөрөҫ тын алыуға, өндәрҙе ишетеп ҡабатлай белеү һәләтен үҫтереүгә күнегеүҙәр үткәреү. Һуҙынҡы өндәрҙе тауыштың көсөн, тембрын үҙгәртеп йырлатыу.

Башҡорт теленә хас булған өндәр ҡушымтаһын айырырға, дөрөҫ әйтергә өйрәтеү: *ҡул – кул, ҡор - көр, тор - төр, мал – мәл һ.б.* һүҙҙәрҙе тәрбиәсе менән бергәләп, аҙаҡ – баланың үҙенән айырым ҡабатлап әйтергә күнектереү.

Саф һауала күҙәтеүҙәрҙә, уйын ваҡытында, төҫлө һүрәттәр ҡарағанда һәм башҡа көн тәртибенә ярашлы эшмәкәрлектә һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелеү өлгөһөн биреп, уларҙы ишетеп, ҡабатлап әйтә белеү һәләтен үҫтереү. Бармаҡ уйындарының һүҙҙәрен әйтеп  уйнарға өйрәтеү.

**Телмәрҙең грамматик яҡтан төҙөлөшөн үҙләштереү.** Исемдәрҙе алмаш менән алмаштырырға өйрәтеп, телмәрҙә ҡулланыу үрнәктәре биреү. Ябай ғына һорауҙар бирергә өйрәтеү, уларҙы тауыш менән күрһәтә белеү. Телмәрҙә предметтарҙың торошон билдәләгән һүҙҙәрҙе ҡуллана белеү күнекмәләре үткәреү.

**Бәйләнешле телмәр үҫтереү.** Ололарҙың һорауын аңлап, яуап бирергә өйрәтеү. Бәләкәй генә дидактик хикәйәләрҙе күргәҙмәлелекһеҙ аңларға өйрәтеү. «Был нимә?», «Был кем?», «Нимә эшләй?» һорауҙарына яуап бирергә өйрәтеү.

Ҡатмарлыраҡ булған «Кем нимә кейгән?», «Кемгә бирә?», «Ҡайҙа?», «Ҡайсан?», һорауҙарының мәғәнәһенә төшөндөрөү.

Ике йәш ярымлыҡ балаларҙың үҙ-аллы йәки тәрбиәсе тәҡдиме буйынса уйынсыҡ тураһында йәки һүрәт буйынса һөйләргә маташыуын хуплау.

Диалог формаһында һөйләшеү өлгөләре биреп, уларҙы бала телмәрендә ҡулланырға өйрәтеү. Ябай ғына фразаларҙы ҡабатлатып, хәтерҙә ҡалдырырға тырышыу. Ике йәш ярымлыҡ балаларҙан ҡурсаҡтар ярҙамында бәләкәй генә әҫәр өҙөктәрен уйнатып, телмәр өлгөләрен хәтерҙә ҡалдырыу.

**НӘФИС ӘҘӘБИӘТ**

Кескәйҙәрҙе башҡорт халҡының һәм башҡа халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижады, яҙыусылар әҫәрҙәре менән таныштырыу. Әҫәр уҡыуҙы төрлө уйынсыҡтар, һүрәттәр, театрҙың төрлө төрҙәрен (өҫтәл, алъяпҡыс, күләгә, бармаҡ һ.б. театры) ҡулланып, күргәҙмәлелек аша башҡарыу.

Ҡайһы бер поэтик әҫәрҙәрҙе бергәләп уйнап башҡарыу. Шиғырҙың һүҙҙәрен, ябай фразаларҙы балаларҙың үҙҙәренә әйтеп бөтөрөү мөмкинлеген биреү. Шиғырҙарҙы балалар менән бергәләп һөйләү.

Балаларҙы сағыу һүрәтле китаптарҙы бергәләп ҡарарға күнектереү, таныш персонаждарҙың исемдәрен әйттереү, һорауҙарға яуаптар бирҙертеү.

Ябай ғына сюжетлы һүрәттәр эстәлеген балаларға һөйләп ишеттереү. Балаларға яҡшы таныш булған әкиәттәрҙе сәхнәләштереү.

Әҫәр геройҙарының эш-хәрәкәттәрен ҡабатлап, балаларҙың үҙҙәренән уларҙы башҡарыуын ойоштороу.

**«ХУДОЖЕСТВОЛЫ-ЭСТЕТИК ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Сәнғәт төрҙәре менән таныштырыу

Бала яратып ҡараған һүрәттәрҙе, күңел биреп тыңлаған әҙәби һәм ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәрен, йөрәгендә төрлө хис-тойғолар уятҡан йырҙың, көйҙөң яңғырауын зауыҡ менән ҡабул итергә өйрәтеү.

Уҡылған китаптарҙың һүрәттәрен ҡарау. Улар буйынса һорауҙарға яуап бирергә, әкренләп әңгәмәләшергә өйрәтеү.

Бала йәшенә ярашлы халыҡ уйынсыҡтары төрҙәре менән таныштырыу: ҡатлы ағас ҡурсаҡтар, һыҙғыртҡыстар, һыбыҙғылар, хәрәкәтләнгән уйынсыҡтар (тауыҡ ем сүпләй, бабай утын яра һ.б.), дымка, филимон, хохлома уйынсыҡтары. Уларҙың биҙәлешенә, уйнау ысулдарына иғтибар биреү. Уйынсыҡтарҙың формаһына, биҙәлешенә, ниндәй характерҙы сағылдырыуына (шатлыҡлы, асыулы, күңелһеҙ һ.б.) иғтибар итергә, улар менән уйнағанда ошо холоҡ-фигел үҙенсәлектәрен күрһәтә белергә күнектереү.

**ҺЫНЛЫ СӘНҒӘТ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ**

Балаларҙа ҡәләмгә, фломастерҙарға, бумалаға, буяуҙарға, балсыҡҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу. Ҡәләм, фломастер, буяу менән һүрәт төшөрәләр, ә балсыҡты әүәләйҙәр икәнлеге тураһында төшөнсәләр биреү.

**Предметлы һүрәт төшөрөү.** Дөрөҫ ултырырға, ҡәләмде, фломастерҙы менән бумаланы нытҡ ҡыҫмайынса тоторға, буяуҙар (гуашь) менән бысранмай эшләргә өйрәтеү.

*Ҡыҙыл, һары, йәшел, күк, аҡ, ҡара* төҫтәрҙе таный, айыра белеү күнекмәләрен нығытыу. Төҫтәрҙе дөрөҫ һайлай белеү.

Баланы ритмлы хәрәкәттәр менән ҡәләм ярҙамында нәҙек, ҡыҫҡа һыҙыҡтар, бумала менән буяу һалыу алымдары аша тирә-йүндәге әйберҙәрҙе һәм күренештәрҙе һүрәткә төшөрөргә өйрәтеү: *япраҡтар ҡойола, ямғыр яуа.*

Төрлө йүнәлештәге тура һыҙыҡтар үткәреү: *оҙон, ҡыҫҡа, ауыш, арҡыры һәм тура* һыҙыҡтарҙы сиратлаштырырға өйрәтеү.

Түңәрәк формалағы әйберҙәрҙе һәм тәбиғәт күренештәрен һүрәтләргә өйрәтеү: *туп, шар, ҡояш, болоттар* һ.б. Уларға ҡәләм, бумала менән тура һыҙыҡтар төшөрөү: ҡояш яҡтырта, болонда бәпембәләр үҫә.

Дүртмөйөшлө предметтарҙы төшөрөргә өйрәтеү: *кульяулыҡ, ашъяулыҡ, байраҡ һ.б.*

Баланы ҡәләм, буяу, ҡағыҙ, бумала һәм штамп (ҡалып) менән таныштырыу, улар менән эш итеү күнекмәләренә өйрәтеү.

Предметтарҙың, тирә-яҡтағы күренештәрҙең, уйынсыҡтарҙың, китаптағы һүрәттәрҙең (көнкүреш әйберҙәре, өҫ кейемдәре һ.б. нәмәләрҙең матурлығына һоҡланыу, ҡыуаныу тойғоларын, уларҙы күрә, айыра белеү һәләтлелеген тәрбиәләү һәм үҫтереү.

Балала ижади эшмәкәрлек һөҙөмтәһенә ыңғай мөнәсәбәт тәрбиәләү, үҙ теләге һәм уйы, йә тәрбиәсе әйтеүе буйынса төшөрөргә теләк уятыу.

**Әүәләү.** Әүәләүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу.Балсыҡтың үҙенсәнлеге менән таныштырыуҙы дауам итеү: *йомшаҡ, киҫәктәргә бүленә, йомарлана, йәйелә, ҡата, кибә.*

Устар эсендә балсыҡ киҫәген тура йүнәлештә һәм өйрөлтөп тәгәрәтеп йомарлау *(ҡәләм, шар)*; йомро балсыҡты уҫка һалып, йәлпәштереү; тура йүнәлештә тәгәрәтеп алған форманың ике башын бер-береһенә бөгөп, түңәрәк эшләү *(тәгәрмәс).*

Йомро форманың уртаһына бармаҡ менән баҫып, соҡор эшләү *(түбәтәй, тәрилкә).*

Биҙәк төшөрөү өсөн таяҡса, йә пластмассанан эшләнгән бысаҡ (стека) ҡулланырға өйрәтеү.

Форманың ситтәрен бармаҡ остары менән семтеү *(тәрилкә, сынаяҡ аҫты).*

Формаһы буйынса бер төрлө, йә төрлөсә булған, бер нисә өлөштән торған ябай предметтарҙы әүәләргә, өлөштәрҙе бер-береһенә йәбештерергә өйрәтеү *(ҡурсаҡ, ҡошсоҡ).*

Эш башҡарғанда йыйнаҡ, бөхтә булырға өйрәтеү: өҫтәлде, кейемде бысратмай, таҡта өҫтөндә эшләй белеү.

## ҠОРОЛМАЛАР ҠОРОУ ҺӘМ МОДЕЛЛӘШТЕРЕҮ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

Өҫтәлдә йәки иҙәндә уйнау өсөн ҡулланылған төҙөлөш материалдарын формаһына, ҙурлығына ҡарап танырға, айырырға, атамаһын әйтә белергә өйрәтеү *(кубик, кирбес, пластина, өс ҡырлы призма-ҡыйыҡ)*, яҫылыҡта төҙөлөш материалдарын урынлаштырыу варианттары менән таныштырыу.

Өлгө буйынса ябай алымдар менән төрлө ҡоролмалар төҙөргә өйрәтеү: кирбесте пластинаға һалыу (*машина*), кирбесте, йә кубиктарҙы бер-береһе өҫтөнә һалыу *(башня, бағана, баҫҡыс).*

Кубик, пластина һәм кирбестәрҙе бер-береһенә текәтеп, берләштереп өҫтәлдә теҙеү *(киң, тар юл).*

Төҙөү материалдарын бер-береһенең өҫтөнә йәки терәтеп һалыу юлы менән төрлө ҡоролмалар эшләргә өйрәтеү.

Уйынсыҡтар ҡулланып, сюжетлы ҡоролмалар төҙөргә өйрәтеү: *ҙур машинаға – ҙур гараж; бәләкәй машинаға – бәләкәй гараж.*

Уйындан һуң төҙөлөш материалдарын урынына йыйырға күнектереү.

Ябай ғына пластмассанан эшләнгән конструктор менән таныштыра башлау.

Йәй осоронда тәбиғи материалдарҙы ҡулланып *(ҡом, һыу, тубырсыҡ, ҡабырсаҡ, ҡырсын таш һ.б.)* төҙөргә өйрәтеү.

Ололар ярҙамында ябай ғына ҡоролмалар төҙөй (*бағана, машина, күпер һ.б.*). Үҙе төҙөгән ҡоролма тураһында бер-ике һүҙ менән нимә эшләгәнен әйтергә, ҡоролмаһы менән уйнарға өйрәтеү.

Баланың төҙөү-ҡороу эшмәкәрлегендә үҙ-аллылыҡ күрһәтеүен хуплау.

## МУЗЫКАЛЬ ТӘРБИӘ

Төрлө инструменттарҙа, яҙмаларҙа башҡарылған музыкаль пьесаларға, бәләкәй күләмле йырҙарға ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Музыка уйын ҡоралдары менән таныштырыу. Йырлау интонацияларын, ябай ритмик хәрәкәттәр тәрбиәләү.

Балаларҙың ихтибарын тыныс һәм етеҙ йырҙарға, төрлө характерҙағы музыкаль пьесаларҙы тыңлауға йүнәлтеү.

Музыкаль пьесаларҙың йөкмәткеһен аңлау. Музыкаль өндәрҙең нәҙек йәки ҡалын тауышын, динамикаһын айырырға өйрәтеү *(ҡыңғырау, металлофон һ.б.).*

**Тыңлау.** Был төркөмдә бигерәк тә халҡыбыҙҙың боронғо йырҙарын тыңлатыу мөһим. Ҡурайҙа, ҡумыҙҙа башҡарылған көйҙәрҙе ишеттереү. Уларҙы барабанда, дөңгөрҙә (бубен) уйнарға, ҡурайҙа өрөргә, ҡумыҙҙа уйнау хәрәкәттәрен ҡабатлай белергә өйрәтеү.

**Йырлау.** Йырҙа ҡабатланған музыкаль фразаларҙы тәрбиәсегә ҡушылып йырлау.

**Музыкаль - ритмик хәрәкәттәр**. Ритмик хәрәкәттәрҙе көй менән бергә башларға һәм көйҙөң аҙағына бөтөрөргә, көйҙөң характерына ҡарап хәрәкәтләнергә

өйрәтеү. Ябай бейеү хәрәкәттәрен өйрәтеү (*сәпәкәйләү, тыпырлатыу, ҡул суғын әйләндереү, бәүелтеү*).

Тәрбиәсе күрһәтеүе буйынса уйын күнегеүҙәрен ҡабатлатыу (ҡуяндар һикерәләр, ҡоштар осалар, ем сүпләйҙәр һ.б.).

Бейеү ваҡытында түңәрәк буйлап хәрәкәт итеү *(ҡулдар менән тотоношоп, парлашып бер-бер артлы йырҙың тактына бәйле хәрәкәт итеү).*

**«ФИЗИК ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Сәләмәт тормош тураһында башланғыс төшөнсә биреү

Балаларҙың һаулығын нығытыуҙы дауам итеү. Хәрәкәтләнеүҙең төрлө төрҙәрен үҙләштереүгә өйрәтеү. Баланың арыуын киҫәтеү. Үҙ-үҙен хеҙмәтләндереү һәм әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үтәргә күнектереү.

Ике йәш ярымлыҡ баҡсаға яңы йөрөй башлаған балалар һаны төркөмдә күп булһа, физик тәрбиә эшен программаны еңеләйтеп үткәреү ҡарала.

Йыл эсендә медицина хеҙмәткәрҙәре ҡулы аҫтында тәбиғи факторҙарҙы ҡулланып (һыу, һауа, ҡояш) сыныҡтырыу саралары үткәреү. Был сараларҙы үткәргәндә балаларҙың шәхси үҙенсәлектәрен һәм һаулыҡ торошон иҫтән сығармауҙы күҙ алдында тотоу.

Төркөмдә балаларҙы еңел кейемдә йөрөргә күнектереү. Саф һауала йөрөү ваҡытын тулыһынса маҡсатлы үтәүгә ирешергә.

Махсус сыныҡтырыу сараларын балалар баҡсаһы етәкселеге рөхсәте менән һәм медицина хеҙмәткәрҙәре ҡарамағында атҡарыу.

## Физик культура

**Хәрәкәтле уйындар**. Тәрбиәсе менән бергәләп, ябай ғына эстәлекле хәрәкәтле уйындар уйнарға ылыҡтырыу. Бәләкәй төркөмсәләргә бүленеп уйнарға өйрәтеү. Хәрәкәттәрҙе йәнлектәр образы аша бирә белергә, хис-тойғолар аша һүрәтләргә өйрәтеү (ҡуян кеүек һикереп, себештәр кеүек ем сүпләп).

# Йөкмәтке бүлек. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиәләү.

## 3 йәштән 4 йәшкә тиклемге балаларға белем биреү эшмәкәрлеге йөкмәткеһе(Кескәйҙәр төркөмө)

Өс-дүрт йәшлек бала әкренләп ғаилә даирәһенән ситкә сыға башлай. Уның башҡалар менән аралашыуы аныҡ ҡына осраҡҡа бәйле булмай башлай. Ғаилә ағзалары бала өсөн йәмғиәттә ниндәйҙер урын тотоусы һәм эш башҡарыусы ролендә ҡабул ителә башлай. Бала ла улар кеүек булырға тырыша һәм үҙенең теләгән уйын аша тормошҡа ашыра. Шулай итеп, уйын – баланың төп эшмәкәрлегенә әүерелә.

Бала уйынының төп һыҙаты – уның шартлылығы: предмет менән бер үк хәрәкәттәр башҡарыу икенсе предметҡа ла күсә һәм шул уҡ хәрәкәттәр ҡабатлана.

Уйын йөкмәткеһе уйынсыҡтар һәм уларҙы алмаштырыусы төрлө предметтарға бәйле була. Уйнау ваҡыты бик самалы, уйын сюжеты үтә ябай һәм бер-ике роль ҡатнашлығында бара. Ҡағиҙәле уйындар менән уйнау тик яңы ғына формалаша башлай.

Баланың рәсем төшөрөү эшмәкәрлеге уның предмет тураһындағы белеменә бәйле. Һүрәттәр ябай, предметтың ҡайһы бер элементтары һәм өлөштәре төшөп ҡалып төшөрөлөргә мөмкин. Бала төҫтәр ҡуллана башлай.

Был йәштә баланың ҡул суҡтарын үҫтереүгә әүәләү ныҡ ярҙам итә. Ололар ярҙамында улар был эште яратып башҡаралар. Ябай ғына ҡорамалар йәбештереү ҙә баланың үҫешенә әүҙем тәьҫир итә. Өлгө буйынса һәм үҙе уйлап бала төрлө ҡоролмалар төҙә ала.

Дүрт йәше тулып барған бала предметтарҙың бишкә яҡын формаһын, етенән артыҡ төҫтө айыра башлай. Предметтарҙы ҙурлығы буйынса айыра белә, төркөм бүлмәһендәге арауыҡта дөрөҫ хәрәкәтләнә: ҡайҙа барырға, нимәнең ҡайҙа ятыуын белә.

Баланың хәтере һәм иғтибары үҫешә. Өлкәндәрҙең һорауы буйынса 3-4 һүҙҙе һәм 5-6 предмет атамаһын хәтерҙә ҡалдырып, әйтә ала.

Йыл аҙағына дүрт йәшлек балалар күп кенә шиғырҙарҙы яттан һөйләй алалар.

Күргәҙмәле-хәрәкәтләнеү фекерләүе үҫешә. Бала күп нәмәне үҙе тикшереп өйрәнергә, аңларға тырыша. Уйын ваҡытында төрлө предметтарҙы бер-береһе урынына ҡулланып, алмаштырып уйнау бигерәк тә уның күҙаллауы үҫешенә ярҙам итә.

Балалар араһындағы мөнәсәбәттәр әҙәп ҡағиҙәләрен өйрәнеүгә һәм үтәүгә бәйле. Уйнағанда балалар бер-береһенә ҡарата үҙен нисек тоторға, нисек итеп һөйләшергә, сират һаҡлап көтөп тора белергә, ярҙамлашырға һ.б. өйрәнәләр. Тауыш-ыҙғыш күберәк уйынсыҡ өсөн сыға.

Күп ваҡыт баланың тәртибе һәм үҙ-үҙен тотошо уның эргәһендә барған ваҡиғаларға, күренештәргә бәйле була. Үҙ тәртибенә аңлы ҡараш был йәш төркөмөндә яңы ғына формалаша башлай. Шунлыҡтан баланың төркөмдә башҡа балалар араһында тотҡан урыны тәрбиәсе фекеренә бәйле. Ҡайһы ваҡыт бала үҙ теләген ололарҙың һүҙен тыңлап тыя белә башлай. Баланың үҙ-баһаһы үҫешә, уны ул тәрбиәсе баһалауына бәйле үҙләштерә.

Баланың енси яҡтан үҙенең кем булыуына иғтибары көсәйә, был уның ниндәй уйынсыҡтар менән уйнауында күренә.

**«СОЦИАЛЬ-КОММУНИКАТИВ ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Йәмғиәттә йәшәй белеү күнекмәләрен үҙләштереү, аралашыуҙың үҫеше һәм әхләҡи тәрбиә

Балалар баҡсаһында, өйҙә, урамда коллективта үҙ-үҙеңде тотоу күнегеүҙәрен нығытыу. Нимә яҡшы, нимә насар төшөнсәһе менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балаларға әхләҡи яҡтан тәрбиәләү өсөн шарттар булдырыу. Тиңдәшеңде яҡлау, ҡурсалау, ярҙам итеү теләге уятыу. Яҡшы һәм насар ҡылыҡтарға баһа бирә белеү, бер-береңә ҡарата һәйбәт мөнәсәбәт булдырыу.

Бер-берең менән дуҫ-татыу йәшәү; уйынсыҡтар, китаптар менән уртаҡ бүлешеү, бер-береңә ярҙам итеү теләге уятыу.

Балаларҙы әҙәпкә өйрәтеү (һаулыҡ һорашыу, һаубуллашыу, рәхмәт әйтеү һ.б.).

Төркөмдөң ҡабул итеү, йыуыныу, йоҡо бүлмәһендә, ашау урынында үҙ-үҙен тоторға, әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үтәргә өйрәтеү.

## БАЛА ҒАИЛӘЛӘ ҺӘМ КЕШЕЛЕК ЙӘМҒИӘТЕНДӘ

**«Мин» образы.** «Мин» образын формалаштырыуҙы дауам итеү. Балаларға туранан-тура уларға ҡағылған төрлө мәғлүмәтте хәбәр итеү (һин малай, һинең күҙҙәрең һоро, һин уйнарға яратаһың һ.б.), һәм шулай уҡ уларҙың үткәнен (үҙ-аллы атлай алмай инең, һөйләшә белмәй инең; шешәнән ашай инең) һәм улар менән булған үҙгәреште (хәҙер инде үҙеңде өҫтәл артында дөрөҫ тотаһың, һүрәт төшөрә беләһең, бейей беләһең; «тылсымлы» һүҙҙәр әйтә беләһең һ.б.).

**Ғаилә.** Балалар менән уларҙың ғаилә ағзалары тураһында әңгәмәләшеү (исемдәре нисек, нимә менән шөғөлләнәләр, бала менән нисек уйнайҙар һ.б.)

**Балалар баҡсаһы.** Балаларҙа балалар баҡсаһына ҡарата ыңғай ҡараш тәрбиәләү. Уларҙың иғтибарын төркөм, сисенеү бүлмәһенең матур биҙәлеүенә һәм уңайлы итеп йыһазландырылыуына йүнәлтеү (яҡты тәҙрәләр, матур шаршауҙар, уңайлы йыһаз, яңы уйынсыҡтар, китап мөйөшөндә ипле итеп теҙелгән сағыу рәсемле китаптар).

Балаларҙы майҙансыҡ менән таныштырыу: уның матурлығы, уңайлылығы, төрлө төҫлө буяуҙар менән биҙәлеүе, һ.б.

Шулай уҡ баларҙың иғтибарына майҙансыҡта үҫеп ултырған үҫемлектәргә, уларҙың матурлығына һәм төрлөлөгенә йүнәлтеү.

Балаларҙы төркөм тормошона йәлеп итеү, төркөмдә тәртип һәм таҙалыҡ булдырыуға ынтылыш тәрбиәләү; уйынсыҡтарға, китаптарға, шәхси әйберҙәргә ҡарата һаҡсыл булырға күнектереү. Балалар коллективының мөһимлеге, һәр баланың төркөмдә ҙур урын биләүен төшөндөрөү.

Бинала, төркөмдә, балалар майҙансығында дөрөҫ йүнәлеш табыуҙы камиллаштырыу.

Балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәренә (музыка етәксеһе, шәфҡәт туташы, мөдир, өлкән тәрбиәсе һ.б) ҡарата яҡшы мөнәсәбәт булдырыуҙы формалаштырыу. Уларҙың хеҙмәтен хөрмәт итеү, уларҙың исемен, атаһының исемен хәтерҙә ҡалдырыу.

## ҮҘ-ҮҘЕНДЕ ХЕҘМӘТЛӘНДЕРЕҮ, ҮҘ-АЛЛЫЛЫҠ, ХЕҘМӘТ ТӘРБИӘҺЕ

**Әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереү.** Үҙ-үҙен бөхтә, таҙа тоторға өйрәтеүҙе дауам итеү. Көндәлек шәхси кәрәк-яраҡтарҙы ҡулланыу ҡағиҙәләре менән таныштырыу (ҡулъяулыҡ, таҫтамал, тараҡ, көршәк); һабын менән ҡулланырға, бит-ҡулды, ҡолаҡтарҙы йыуырға һәм ҡоротҡансы һөртөргә күнектәреү. Ашау ваҡытында үҙ-аллылыҡ тәрбиәләү, аш һәм балғалаҡ, сәнске, ҡулъяулыҡ (салфетка) менән ҡулланырға күнектереү; икмәкте ваҡламаҫҡа, ашамлыҡты ауыҙ йомоп сәйнәргә, ашағанда һөйләшмәҫкә өйрәтеү.

**Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү.** Үҙ аллы сисенергә һәм кейенергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Ҙур төймәләрҙе элергә, аяҡ кейеме бауҙарын бәйләргә, кейемде матур итеп бөхтәләп һалырға, ултырғыс башына элергә, кейемдең тиҫкәреһен уңға әйләндерергә, кейенеп бөткәс, көҙгөгә ҡарап, сәсте һыйпап төҙәтергә, яғаларҙырәтләргә, кейемдәге етешһеҙлектәрҙе төҙәтергә, бөхтәлеккә, таҙалыҡҡа ғәҙәтләндерергә өйрәтеү. Шәхси шкафта һәр нәмәнең үҙ кәштәһе булыуын белдереү

мотлаҡ. Тиҫтерҙәренә төймәләрен элешергә, башлыҡтарын кейергә ярҙамлашыу теләге тәрбиәләү.

**Хужалыҡ-көнкүреш хеҙмәте.** Уйнап бөткәс, уйынсыҡтарҙы урынлаштырып ҡуйырға, ашап бөткәс, тәрилкәләрҙе ҡатлап, ҡалаҡты эсенә һалырға, һәр төрлө шөғөлдәр тамамланғас, эш урынын тәртипкә килтерергә, ултырғысты урынына ҡуйырға өйрәтеүҙе дауам итеү. Эш һөҙөмтәләрен күрһәтергә, эшсән, әрһеҙ балаларҙы дәртләндерергә. Йылдың икенсе яртыһында аш өҫтәлен сервизлау, шөғөлдәргә әҙерләү өсөн дежур итеү күнекмәләренә өйрәтеү.

**Тәбиғәттәге хеҙмәт.** Тәрбиәсегә эйәреп, уйын майҙансыҡтарын сүп-сарҙан, ҡоро япраҡтарҙан, эскәмйәне ҡарҙан таҙартыу теләге уятыу. Сәскәләргә һыу һибеү, ҡоштарға ем биреү эштәрен өлкәндәр ярҙамында башҡарырға булышлыҡ итеү. Сәскәләрҙең орлоҡтарын йыйырға ярҙамлашыуға ылыҡтырыу.

**Ололарҙың хеҙмәтен хөрмәтләү.** Ололарҙың хеҙмәтенә ҡарата ыңғай ҡараш тәрбиәләү. Балаларға аңлайышлы һөнәрҙәр тураһында һөйләү (тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы, музыка етәксеһе, табип, һатыусы, ашнаҡсы, шофер, төҙөүсе). Уларҙың хеҙмәте һәм эштәренең һөҙөмтәләре тураһында белемдәрен үҫтереү, киңәйтеү, байытыу.

Таныш булған һөнәрҙәргә ҡарата хөрмәт, ихтирам хистәре тәрбиәләү. Ололарға ҡарата ярҙам итеү теләге уятыу, уларҙың эштәренең һөҙөмтәләренә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

### ХӘҮЕФҺЕҘ ЙӘШӘҮ НИГЕҘҘӘРЕН ФОРМАЛАШТЫРЫУ

**Тәбиғәттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен һаҡлау.** Тере һәм йәнһеҙ тәбиғәттең бер-береһе менән бәйләнешле булыуын аңлатыу. Тәбиғәттә үҙ-үҙеңде дөрөҫ тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырыу (үҫемлектәрҙе өҙмәҫкә, ағастың ботаҡтарын һындырмаҫка, хайуандарға ҡағылмаҫка һ.б.).

**Юл хәрәкәтендәхәүефһеҙлек һаҡлау.** Юлдың машиналар һәм йәйәүлеләр йөрөй торған өлөштәре (тротуар) менән таныштырыу; светофорҙың ҡыҙыл, һары һәм йәшел төҫтәренең мәғәнәләрен аңларға ярҙам итеү. Юл сигналдары ярҙамында урамда йөрөргәөйрәтеү.

Ябай ғына юл ҡағиҙәләрен өйрәтеү. Транспорт саралары тураһында белемдәрен формалаштырыу.

**Йәшәйештә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү.** Балалар баксаһында, өйҙә ҡурҡыныс тыуҙырған предметтар һәм улар менән эш иткәндә башҡарыла торған иң ябай ҡағиҙәләр менән таныштырыу (ҡайнар һыу, ут, киҫә һәм сәнсә торған осло предметтар, электр приборҙары, баҫҡыстан төшөү, тәҙрәне, ишекте асыу һ. б.).

Бәләкәй предметтар менән уйнағанда хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәргә күнектереү (ауыҙға алмаҫка, ҡолаҡҡа, танауға тыҡмаҫка һ.б.).

Ярҙам кәрәк саҡта ололарғаөндәшергә өйрәтеү.

Ҡом, һыу, ҡар менән уйнағанда хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәй белеү күнекмәләрен формалаштырыу.

### «ТАНЫП-БЕЛЕҮ ҮҪЕШЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

### КОГНЕТИВ ҮҪЕШ

**Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлеге үҫеше.** Балаларҙы системаға һалынған сенсор эталондар һәм махсус әҙерләнгән перцептив (предметты тойоу-һиҙеү аша ҡабул итеү) алымдар ярҙамында тирә-йүндәге обьекттарҙы тикшерергә өйрәтеү.

Балаларҙы ололар менән берлектә тикшереү һәм тәжрибә эштәренә ылыҡтырып, өйрәнелгән предметтарҙың һәм күренештәрҙең йәшерен үҙенсәлектәрен асырға йәлеп итеү.

Эҙләнеү-тикшереү эшмәкәрлегенең маҡсатына һәм ҡуйылған бурыстарына ярашлы балаларҙы моделдәр ҡороп эш итеү ысулдарына өйрәтеү.

**Сенсор тәрбиә.** Балаларҙың һиҙеү-тойоу органдары аша аң-белемде өйрәнеүен үҫтереү, танып белгән предметтарҙы, күренештәрҙе телмәрендә сағылдырырға күнектереү. Образдар аша уларҙы күҙ алдына килтереүҙе үҫтереү һәм предметтарҙы һүрәтләгәндә сағыштырыуҙар һәм эпитеттар ҡулланырға өйрәтеү.

Балаларҙы төҫтәр, форма, дәүмәл һәм предметтарҙың башҡа үҙенсәлектәре менән таныштырыуҙы дауам итеү һәм уның өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыу;

Музыка ҡоралдары (ҡурай, ҡумыҙ, һыбыҙғы, һ.б.) һәм туған башҡорт телендә яңғыраған ауыҙ-тел ижады һәмәҙәби һәм музыкаль әҫәрҙәр менән таныштырыу.

Бер үк предметтарҙы бер нисә үҙенсәлеге буйынса (дәүмәле, формаһы, төҫө) төркөмләргә өйрәтеү.

Предметтарҙың айырмаһын һәм оҡшашлығын таба белеүҙе нығытыу. Форманы аңлатҡан һүҙҙәрҙе әйтергә өйрәтеү (түңәрәк, өсмөйөш, дүртмөйөш, квадрат).

Предметтарҙы һиҙеп-тойоу аша танып, уларҙы һүҙ ярҙамында әйтә белергә өйрәтеү. Предметтарҙы төрлөсә тикшереп ҡарау ысулдары менән таныштырыу.

**Дидактик уйындар.** 2-3 төҫтәге ҙур, уртаса һәм бәләкәй шарҙарҙы, предметтарҙы төҫө һәм дәүмәле буйынса төркөмләргә, дүңгәләктәре кәмей барған һәм уларҙы 2-3 төҫө буйынса билдәле бер тәртиптә пирамида йыйыу.

4-6 өлөштән торған киҫмә һүрәттән бөтөндө йыйыу («Һауыт-һаба», «Уйынсыҡтар» һ.б.).

Ҡағыҙәһе ҡатмарлана барған уйындарҙы уйнауҙы планлаштырыу.

## Башланғыс ябай математик төшөнсәләр

**Һан.** Төркөмләнгән предметтарҙың дөйөм сифатын күреп аңларға өйрәтеү (бөтә туптар ҙа түңәрәк, тәгәрәй; былары - күк төҫтә, ә былары - ҡыҙыл һ.б.

Төрлө төркөм предметтарын сағыштырыу ярҙамында «күп - бер», «аҙ», «бер үк», «берәү ҙә», «тигеҙ», «ни тиклем - шул тиклем», «ҡарағанда күберәк, аҙыраҡ» тигән төшөнсәләрҙе аңлап, ул предметтарҙы, береһе өҫтөнә икенсеһен һалып ҡарап, йә парлап алып, төҫө, дәүмәле, формаһы буйынса төркөмләү.

Бер төркөмдән икенсе төркөмгә предметтарҙы берәмләп ҡушыу, йә киреһенсә алыу юлы менән, ике төркөмдә лә уларҙы тигеҙләй белеү: «Тигеҙме?» тигән һорауҙы аңлауына ирешергә. «Нимә артыҡ?» (кәм?) һорауына яуап бирә белеү: «Мин һәр түңәрәккә бәшмәк һалдым. Түңәрәктәр күп, бәшмәктәр аҙ». Йәки «Бәшмәктәр шулай уҡ түңәрәктәр кеүек».

«Бер», «ике» һандары менән таныштырыу.

**Дәүмәл.** «Буй», «киңлек», «бейеклек» төшөнсәләрен аңлай һәм ҡулдар ярҙамында уларҙың дәүмәлен күрһәтә белеү.

Контраст йәки бер үк дәүмәлле предметтарҙы сағыштырып, «оҙон-ҡыҫҡа», «киң-тар», «бейек-тәпәш», «ауыр- еңел» төшөнсәләрен аңларға, айырырғаа, әйтергә һәм тирә-йүн предметтарында уларҙы таба белергә өйрәтеү.

**Геометрик фигуралар тураһында төшөнсәләр.** Түңәрәк, квадрат, өсмөйөш менән таныштырыу. Уларҙың оҡшашлығын һәм айырмаһын таба белеү. Шундай уҡ формалы предметтарҙы тирә-йүндә ҡараш йәки бармаҡтар менән тикшереп таба белеү.

**Арауыҡтағы йүнәлеш.**Баланың арауыҡта үҙенең кәүҙә торошо йүнәлештәрен аңлай, әйтә һәм күрһәтә белеүе: уң, һул ҡул, өҫкә- аҫка, алға- артҡа, алда-артта, аҫта, эсендә, эргәлә, өҫтөндә һ.б.

Төркөм бүлмәһендә һәм балалар баҡсаһы майҙансығында йүнәлештәрҙе билдәләй, таба, ҡуллана белеүе. Уң һәм һул ҡулдарын айыра белә.

**Ваҡыт төшөнсәләре.** Тәүлек өлөштәре: кис-иртә, көн-төн менән таныштырыу һәм ул ваҡыттарҙа кешеләр ниндәй эшмәкәрлек менән шөғөлләнеүен баланың һөйләй белеүе.

**ТИРӘ-ЙҮН ПРЕДМЕТТАРЫ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ**

Балаларҙы тирә-йүндәге предметтар,(уйынсыҡтар, йорт кәрәк-яраҡтары,транспорт төрҙәре һ.б.),уларҙың башҡарған функциялары һәм ҡулланышы менән таныштырыуҙы дауам итеү.

Көнкүрештәге предметтарҙың ҡайһы бер үҙенсәлектәрен (өлөштәре, дәүмәле, формаһы, төҫө) айыра белергә өйрәтеү, уларҙың төҙөлөштәре һәм функциялары араһындағы бәйләнеште төшөндөрөү. Предметтың бер генә өлөшө етмәһә лә,уны тормошта ҡулланып булмаясағын аңлатыу.

Балаларҙың предметтың билдәләре (ныҡ, ҡаты, йомшаҡ) һәм эшләнгән материалдары (ағастан, балсыҡтан, ҡағыҙҙан) тураһындағы белемдәрен киңәйтеү.Ябай ғына тәжрибәләр ярҙамында предметтарҙы тикшереү ысулдарына өйрәтеү (бата-батмай, йыртыла-йыртылмай). Таныш булған предметтарҙы дөйөмләштереү (һауыт-һаба, аш-һыу) һәм төркөмләү (кейем-һалым, һауыт -һаба).

Предметтарҙың ҡайһы берҙәрен кеше үҙкулы менән эшләүен (йорт йыһаздары, һауыт-һаба), ә ҡайһы берҙәре тәбиғәттә (таш, тубырсыҡ) барлыҡҡа килеүен аңлатыу. Кеше предметтарҙы үҙе һәм башҡалар көнкүрештә ҡулланһын өсөн эшләгәнлеген төшөндөрөү.

**СОЦИАЛЬ ДОНЪЯ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ**

Балалар әҙәбиәте әҫәрҙәрен кескәй генә спектаклдар ҡуйыу, уйындар формаһында сәхнәләштереү аша театр менән таныштырыу.

Баланы үҙе йәшәгән яҡын-тирә менән таныштырыу: йорт, урам, магазин, дауахана, бөҙрәхана.

Тыуған ере һәм иле тураһында тәүге төшөнсәләр биреү: ҡаланың/ауылдың исемен иҫкә төшөрөү, уның иҫтәлекле урындары менән таныштырыу.

Балаларға таныш булған һөнәрҙәр (тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы, музыка етәксеһе, табиб, һатыусы, ашнаҡсы, машина йөрөтөүсе, төҙөүсе һ.б.) тураһында һөйләү; уларҙың ниндәй эш-хәрәкәт башҡарыуҙары һәм эш һөҙөмтәләре

тураһында тулыраҡ мәғлүмәт биреү. Һәр һөнәр эйәһенең үҙ эшендә кешеләргә ҡарата иғтибарлы, яғымлы булыуын, башҡарған эшен етеҙ, тейешле итеп үтәүен аңлатыу.

**ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ**

Йәнле тәбиғәттең кешеләрҙән, үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһынан торғанлығын аңлатыу. Уларҙы күҙәтергә һәм өйрәнергә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу.

Тәбиғәттә бөтә нәмә тын ала, туҡлана, үҫешә, ишәйә. Уларҙың йәшәүе өсөн кәрәкле шарттар булыуы мотлаҡ (яҡтылыҡ, йылылыҡ, һауа, аҙыҡ).

Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт үҙ-ара тығыҙ бәйле. Тәбиғәткә бәйләнешле йола байрамдары тураһында төшөнсәләр биреү.«Ҡарға бутҡаһы», «Ҡар һыуына барыу».

Балаларға 2-3 ағас төрө (ҡайын, шыршы, саған) һәм бүлмә гөлдәре тураһында башланғыс белем биреү. Ағас олонон, япраҡтарын, ботағын, үләндең һабағын, япрағын, сәскәһен танырға һәм уларҙың нисек әйтелеүен белергә өйрәтеү.

Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре (юл япрағы, мәтрүшкә, кесерткән, миләш, балан) менән таныштырыу.

Емеш-йәшелсәләрҙе төҫө, тәме, ҙурлығы буйынса айыра һәм исемен әйтә белеү *(кишер – ҡыҙыл төҫтә, тәмле).* Бала уларҙы тикшереп ҡарарға өйрәнә *(һыйпай, тәмләй, һәрмәй, бармаҡ менән нык итеп баҫып ҡарай, еҫкәй).*

Ҡайһы бер орлоҡтарҙың тышҡы күренеше *(борсаҡ, ҡыяр, ҡабаҡ, кишер һ.б.)* һәм уларҙы сәсеү, тәрбиәләү ысулдары менән таныштырыу.

Ҡырағай һәм йорт хайуандары, уларҙың балалары тураһындағы төшөнсәләр тәрәнәйтелә: кеше эргәһендә һәм урманда йәшәүҙәре, ниндәй файҙа килтереүҙәре һ.б. Уларҙың тышҡы ҡиәфәттәрен, кәүҙә төҙөлөшөн, ҙурлығын, хәрәкәтләнеү ысулдарын, туҡланыуын, йәшәү шарттарын, ҡылыҡ-ғәҙәт үҙенсәлектәрен айыра белеү. Бала төрлө төркөм хайуандарҙың уларға ғына хас сифаттарын таный башлай *(ҡоштарҙың - ҡанаттары, суҡыштары, ҡаурыйҙары; балыҡтарҙың - тәңкәләре, йөҙгөстәре; һыйыр - мөгөҙлө, кәзә - һаҡаллы, ат - яллы, ҙур оҙон ҡойроҡло була һ.б.).*

Балаға йорт малдарының кешегә файҙа килтереүен төшөндөрөү (һыйыр – һөт, ҡаймаҡ, май, ҡорот; кәзә - мамыҡ, һөт бирә һ.б.).

Ҡайһы бер йәнлек тауыштарын отоп алып, ҡабатлау (*сәрәкәй, кәкүк, һыйыр, бәрәс).*

Температура үҙгәреү сәбәпле матдәләрҙең бер хәлдән икенсегә күсеүен күҙәтеү, аңлатыу (ҡар - һыу - боҙ). Тәжрибәләр үткәреү.

Балаларҙың күк есемдәре тураһындағы мәғлүмәттәре киңәйтелә (ҡояш, ер һәм ай араһындағы бәйләнештең тәүлек эсендә көн менән төндөң алмашыныуына килтереүе. Был күренештең даими ҡабатланып тороуы).

Ҡар һәм боҙҙоң үҙенсәлектәре менән таныштырыу (ҡар – һыуыҡ, еңел, боҙ – ҡаты, үтә күренеүсән).

Ҡом һәм балсыҡтың үҙенсәлектәрен үҙ теләгең менән үҙгәртеп булыу (ҡом – дымлы, ҡоро, таралып, ҡойолоп тора, балсыҡ – ҡамыр һымаҡ әүәләнә, кипһә, таш кеүек ҡата).

Һауа торошон билдәләп, уны тулыраҡ итеп һүрәтләү: һыуыҡ, йылы, эҫе; ямғыр яуа (ҡойоп, һибелеп); ел иҫә (талғын, көслө). Уларҙың үҙ-ара бәйләнеше: көслө ел иҫкәндә, көндөң һалҡыныраҡ булыуы.

**Йыл миҙгелендәге үҙгәрештәрҙе аңлатыу:**

Йыл миҙгелдәре, уларҙың бер-бер артлы ҡабатланыуы һәм кеше тормошона йоғонтоһо төшөндөрөлә. Йыл миҙгелдәрен уларҙың үҙҙәренә хас үҙенсәлектәре буйынса билдәләп, бәйләнешле телмәр аша тасуирлай белергә өйрәтеү. Йыл миҙгелдәре хаҡында халыҡ һынамыштары менән таныштырыу.

**Көҙ:** көндәр болотло һәм ямғырлы була. Кешеләр куртка һәм плащ кейә. Япраҡтар һарғая һәм ергә ҡойола. Ҡоштар йыйылышып, тупланып йылы яҡҡа осоп китәләр. Кешеләр баҡсаларҙа һәм ҡырҙарҙа уңыш йыя.

**Ҡыш:** көндәр ҡыҫҡара һәм һыуына. Иртә ҡараңғы төшә. Ағастар япраҡһыҙ тора. Һыу туңып, боҙға әйләнә. Ҡар яуа. Кешеләр йылы кейемдәрен кейә. Балалар саңғы, сана шыуа, ҡышларға ҡалған ҡоштарға ем ашата.

**Яҙ:** ҡояш яҡтыраҡ яҡтырта. Көндәр йылына башлай, ҡар ирей. Гөрләүектәр аға. Тәүге сәскәләр, үләндәр үҫеп сыға, ағастарҙың бөрөләре бүртә, япраҡ ярыла. Күбәләктәр, бөжәктәр күренә башлай. Кешеләр ҡышҡы кейемдәрен сисеп, еңел кейем кейәләр. Баҡсаларҙа һәм баҫыуҙарҙа яҙғы эштәр башлана.

**Йәй:** ҡояш ныҡ яҡтырта һәм ҡыҙҙыра. Төрлө-төрлө сәскәләр күпләп үҫеп сыға. Кешеләр йылғала һыу инә. Баҡсала, урманда, паркта төрлө ҡоштар һайрай. Еләк-емеш бешә.

### «ТЕЛМӘР ҮҪЕШЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

## Телмәр үҫтереү

**Телмәрүҫтереүсемөхит.**Телмәр үҫешенә тәьҫир итеүсе мөхит булдырыу өҫтөндәге эште дауам итеү: балаларҙы тиҫтерҙәре һәм уларға таныш ололар менән төрлө йомоштар аша аралашыуҙы үҫтереү (һора, әйт, ярҙам ит, рәхмәт әйт һ.б.) «Ҡарағыҙ әле, беҙгә кем килгән?», «Был кемдең ҡурсағы?», «Уйынсыҡтар ҡайҙа, кем таба?» һ.б.

Уйнағанда үҙ-ара килешеп, бер-береһен ҡыйырһытыу, рәнйетеү осраҡтары килеп сыҡмаһын өсөн алдан өйрәтелгән телмәр үрнәктәрен ҡулланырға өйрәтеү: «Саматҡа ярҙам ит?», «Кирбесте машинаға икәүләп һалығыҙ?», «Һин ҙур, аҡыллы малай, улай эшләмә?» һ.б.

Үҙ-аллылыҡ үҫтереү һәм аҡыл-зиһен кимәлен үҫтереү маҡсатында балаларға китаптар, һүрәттәр ҡарарға, төрлө тәбиғи предметтар (таш, ҡабырсаҡ, сәтләүек, ағас ҡайрылары, кипкән япраҡтар һ.б.) менән үҙ-аллы уйнау мөмкинлеген тыуҙырыу.

Балаларға аңлайышлы, фәһемле, уларға ҡыҙыҡ булған әкиәттәр уҡыу, саф һауала йөрөгәндә күҙәтеүҙәр ойоштороу, улар тураһында бергәләп һөйләшеү һ.б.

**Һүҙлек эше.** Өҫ, аяҡ, баш кейемдәрен, һауыт-һабаны, бүлмә йыһаздарын, транспорт төрҙәрен аңлатҡан һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә һәм тәғәйенләнешенә төшөндөрөүҙе дауам итеү.

Предметтарҙың өлөштәрен айыра һәм әйтә белергә өйрәтеү (мәҫәлән, күлдәктең еңе, яғаһы, кеҫәһе, төймәләре, итәге бар), сифаттарын (төҫ һәм уның сағылыштары, формаһы, дәүмәле); тышҡы яҡтан үҙенсәлектәре (шыма, йомшаҡ, ҡытыршы һ.б.); ҡайһы бер материалдар һәм уларҙың сифаттары тураһында төшөнсәләр биреү (ҡағыҙ йыртыла, һыулана; быяла ярыла; резина әйберҙәр ҡыҫыла, ебәрһәң – яңынан элекке формаһын ала); урынлашҡан урынын аңлатҡан һүҙҙәр (тәҙрә артында; өҫтәл өҫтөндә; юғары, бейек, алыҫ, карауат аҫтында һ.б.).

Балалар иғтибарын ҡайһы бер предметтың ҡулланыу буйынса оҡшаш булыуҙарына йәлеп итеү: *тәрилкә, сынаяҡ аҫты, сеүәтә һ.б.* – ашау өсөн кәрәкле әйберҙәр; *ултырғыс, диван, эскәмйә* – ултырыу өсөн кәрәкле йыһаздар һ.б.

Дөйөмләштереүсе һүҙҙәрҙе әйтергә һәм уларҙың мәғәнәһенә төшөнөргә өйрәтеү: *кейем-һалым, һауыт-һаба, йорт йыһаздары, емеш-еләк, йәшелсәләр, ҡоштар һ.б.*

Тәүлек өлөштәрен әйтергә өйрәтеү: *иртәнсәк (иртән), көндөҙ (төш), кис, төн.*

Тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап йорт хайуандарын һәм уларҙың балаларын айырырға, әйтергә өйрәтеү.

Күҙ ҡарашы менән йәшелсәләрҙе һәм емеш-еләкте таный һәм атамаһын әйтә белергә өйрәтеү.

**Өндәр өҫтөндә эш.**

Башҡорт теленең бөтә һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрен дә дөрөҫ әйтергә өйрәтеү.

Өндәр әйтелешендәге кәмселектәрҙе асыҡлау. Һәр бала менән айырым эш алып барыу.

Тын, һулыш менән идара итә белергә өйрәтеү. Фонематик ишетеү һәләтлеген үҫтереүгә күнекмәләр үткәреү.

**Ҡ-к, ғ-г, ҙ-з, ҫ-с, һ-ф, һ-х, а-ә, у-ү, о-ө** өндәренең айырмаһын ишетә, дөрөҫ итеп әйтә белергә күнектереү.

Телмәр тасуирлығын (баҫым, тауыш тембры, темпы, көсө) тәрбиәләү.

**Телмәрҙең грамматик яҡтан төҙөлөшөн үҙләштереү.**

Телмәрҙә исемдәрҙе һәм ҡылымдарҙы (терминды әйтмәйенсә) берлектә һәм күплектә ҡуллана белергә өйрәтеү.

Исемдәрҙе алмаштар менән алыштырып һөйләргә күнектереү. Эйәлек заты ялғауын дөрөҫ ҡулланырға, бирелгән һорауҙарға тулы яуап бирергә күнектереү.

Ябай һөйләмдәргә тултырыусы, аныҡлаусы һәм хәлде, урынды белдереүсе һүҙҙәр индереп һөйләргә тырышыуҙы хуплау, һөйләм өлгөләре биреп, уларҙы хәтерҙә ҡалдыртырға өйрәтеү.

Төрлө һүҙҙәр уйлап табып, уларҙы рифмаға һалыуҙы ҡеүәтләү.

**Бәйләнешле телмәр үҫтереү.**

Һөйләмдә һүҙҙәрҙе бер-береһенә бәйләп, килеш ялғауҙарын дөрөҫ ҡулланып, уй-фекерҙе эҙмә-эҙлекле, йөкмәткеле итеп һөйләргә өйрәтеү.

Балалар тормошонан ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы һөйләү. Уйындар уйнағанда ябай ғына һөйләмдәр төҙөү, ҡапма-ҡаршы һөйләшеүҙәр ойоштороу.

Бала телмәрендәге «ижади асыштар»ҙы хуплау. Шиғырҙар ятлатыу, әкиәтте ҡабатлатып һөйләтеү, йомаҡтар ҡойоу.

Китапҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Сәхнәләштерелгән уйындарға ылыҡтырып, тасуири һөйләү мәҙәниәтен үҫтереү.

Үҙ ғаиләһе тураһында һөйләргә өйрәтеү.

### НӘФИС ӘҘӘБИӘТ

Балаларға таныш булған һәм улар яратҡан әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡыу.

Яңы әҫәрҙәрҙе уҡып, эстәлеге буйынса әңгәмәләшеп, ундағы персонаждар менән бергә шатланырға, ҡыуанырға өйрәтеү, уларҙың насар ҡылыҡтарына кире ҡараш тәрбиәләү.

Әҫәр өҙөктәрен ҡат-ҡат уҡып, һөйләмдәрҙе бергә ҡабатлау, йә балаларҙың үҙҙәренән әйтеп бөтөртөү.

Тәрбиәсе күрһәтеүе һәм өйрәтеүе буйынса бәләкәй генә әҫәр өҙөктәрен сәхнәләштереп уйнау.

Яттан һамаҡтарҙы, ҡыҫҡа күләмле шиғырҙарҙы һөйләү.

Китаптарҙың һүрәттәрен бергәләп ҡарау. Һүрәт буйынса әҫәрҙең эстәлеген иҫкә төшөрөү, 2-3 һөйләм менән һөйләргә өйрәтеү.

### «ХУДОЖЕСТВОЛЫ-ЭСТЕТИК ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

## Сәнғәт төрҙәре менән таныштырыу

Балаларҙы тирә-йәндәге предметтарҙа, күренештәрҙә матурлыҡты күрергә, тойорға, һиҙергә, уны ыңғай хис-тойғолар аша ҡабул итергә, күңелендә шатлыҡ, ҡыуаныс тойғолары кисерергә өйрәтеүҙе дауам итеү (китаптағы сағыу һүрәттәр, халыҡ кәсептәре әйберҙәре, көнкүреш предметтары аша, кейем-һалымда, йорт биҙәлешендә һ.б.).

Тирә-йүндә сәнғәттең ябай ғына саралар аша сағылыуына төшөндөрөү (төҫ, тауыш, форма, хәрәкәт, ым-ишара аша).

Балаларҙы ҡурсаҡ театрына, һүрәттәр күргәҙмәһенә, балалар баҡсаһындағы этномузейға барыуға әҙерләү һәм ойоштороу.

Ауыҙ-тел ижадына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү (әкиәттәр, һамаҡтар, халыҡ уйындары), биҙәү-көнкүреш әйберҙәре менән, халыҡ йырҙары, музыкаль әҫәрҙәр

һәм музыка ҡоралдары менән таныштырыу; йыл миҙгелдәренең матурлығын таба, күрә һәм һоҡлана белергә өйрәтеү.

Балаларҙың матурлыҡҡа булған хис-тойғоларын үҫтереүсе мөхит булдырыу: бүлмәләрҙәге йыһаздарҙың, уйынсыҡтарҙың, һауыт-һабаның, стена-тәҙрәләр биҙәлешенең эстетик талаптарға тура килеүе; һәр нәмәнең үҙ урыны булып, кәрәкле тәртиптә урынлаштырылыуы; таҙалыҡ, бөхтәлек булдырыу.

**ҺЫНЛЫ СӘНҒӘТ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ**

Тирә-йүндәге матурлыҡҡа балаларҙың иғтибарын йәлеп итеү. Һынлы сәнғәт дәрестәренә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Рәсем төшөргәндә, әүәләгәндә, ҡорамалар йәбештергәндә ябай ғына предметтар һәм күренештәр аша ниндәйҙер образ тыуҙырырға тырышыуҙы хуплау, айырым һәм күмәкләп эш итә белергә өйрәтеү. Предметты тикшергәндә уны ике ҡул ярҙамында ҡапшап, һыйпап уның үҙенсәлектәрен билдәләргә өйрәтеү.

**Предметлы һүрәт төшөрөү.** Бумала, ҡәләм, граттаж таяҡсаһын ҡулланырға, буяуҙар менән эш итергә өйрәтеү. Алһыу, күкһел (зәңгәр), буҙ (серый) төҫтәр менән таныштырыу. Әйберҙәрҙе һәм тирә-йүн күренештәрен оҡшатып һүрәтләгәндә баланың үҙ-аллы төҫлө буяу һайларға һәм уны ҡуллана белергә төшөндөрөү. Бумаланың артыҡ һыуын йомшаҡ сепрәктә киптереп эш итергә күнектереү.

Предметлы һүрәт төшөрөү ысулдары: бумала осо менән төртөп алыу, өҙөк һәм тура һыҙыҡтар ярҙамында, уңдан һулға, өҫтән аҫҡа, төрлө киңлектә һәм оҙонлоҡта булған һыҙыҡтарҙы бер-береһе аша үткәреү (таҫма, балаҫ, билбау, таҫтамалдар төшөрөү).

Тура дүртмөйөшлө, түңәрәк формалағы предметтарҙы һәм улар менән сиратлашып килгән, түңәрәк һәм тура һыҙыҡтарҙан торған йәки түңәрәк һәм өсмөйөштән торған башҡа предметтарҙы төшөрөү: *ҡар бабай, себеш, машина, вагон и др.* (бер үк формалы, ләкин төрлө күләмдәге).

Һүрәтте ҡағыҙ битендә дөрөҫ (уртаһында, йә бөтә яҫылығында) урынлаштыра белеү.

Төрлө формалағы ҡалып (шаблон) ярҙамында биҙәк төшөрөү.

Халыҡтың биҙәү-ҡулланма сәнғәте буйынса биҙәктәр эшләй белеү (А.В.Молчева методикаһы буйынса).

Бер үк предметтың ҡабатланып килеүе аша ябай ғына сюжетҡа ҡоролған һүрәт төшөрөргә өйрәтеү *(беҙҙең баҡсалагы шыршылар, ҡоштар оса, сәскәләргә һыу һибәбеҙ һ.б.).*

Башҡортостан һәм Рәсәй рәссамдарын һәм уларҙың әҫәрҙәрен (4-5) белеү.

**Ҡорама йәбештереү.** Балаларҙа ҡорама йәбештереүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу.

2-3 өлөштән торған һәм төрлө формалағы, ҙурлыҡтағы предметтарҙың һүрәтен (тәрбиәсе алдан әҙерләй) ҡағыҙ битендә йыйыу һәм елем менән йәбештереү. Елемде

бумалаға аҙлап алырға, предметтың өлөштәрен клеенка өҫтөнә һалып, әкрен генә елем һөртөргә һәм уларҙы ҡағыҙ битенә йәбештерергә өйрәтеү. Йәбештергәндә сепрәк ҡулланырға күнектереү.

Төҫө, формаһы, ҙурлығы буйынса төрлөсә булған геометрик фигураларҙан (алдан әҙерләнгән) өсмөйөш, дүртмөйөш һәм түңәрәк эсендә бер-береһен аралаштырып, биҙәктәр төҙөргә өйрәтеү. Ошо уҡ эште фланелеграфта, магнит таҡтала башҡартыу.

Төрлө предметтарҙы айырым өлөштәрҙән йыйырға төшөндөрөү.

Ҡайсы менән ирекле эш итергә өйрәтеү. Квадрат, дүртмөйөш ҡырҡа белеү. Квадраттан – түңәрәк, дүртмөйөштән – оҙонса түңәрәк (овал) ҡырҡыу.

Төрлө ҡалыптар (шаблон) ярҙамында биҙәк төшөрөү.

Предметтарҙы ҡағыҙ битендә дөрөҫ урынлаштырырға өйрәтеү.

Дүртмөйөшлө һәм түңәрәк формалағы предметтарҙы ҡағыҙ бите өҫтөндә таратып һала һәм йәбештерә белеү (алма, шар); ике йәки унан да күберәк бер үк формалағы, әммә ҙурлығы буйынса төрлө булған *(пирамида, ҡар бабай)*, формаһы һәм ҙурлығы буйынса төрлө булып, бер нисә өлөштән торған предметтарҙы *(өй, машина)* йыя, йәбештерә белергә өйрәтеү.

**Әүәләү.** Балсыҡтың һәм пластилиндың үҙенсәлектәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балсыҡтан һәм пластилиндан өйрөлтөп тәгәрәтеп йомарлау, йәйеү, йәлпәштереү, нығ итеп устар араһында ҡыҫыу, бармаҡ батырыу, таяҡтанбөгөп түңәрәк яһау, ситтәрен семтеү ысулдарын ҡулланып, таныш предметтарҙы әүәләү, стека менән эш итә белеү.

Ике-өс өлөштән торған, бер үк формалы һәм ҙурлыҡтағы йәки төрлө формалы һәм күләмле предметтарҙы әүәләй белеү: *самолет, баҫҡыс, себеш һ.б.*

Башҡорт халҡының көнкүреш-ҡулланыу әйберҙәре менән таныштырыу, һауыт-һаба *(туҫтаҡ, тәпән, ижау һ.б.)* әүәләү һәм уларҙы халыҡ биҙәктәре менән матурлау.

Тәрбиәсе ҡарамағы буйынса 1-2 халыҡ уйынсыҡтары менән таныштырыу (башҡорт, дымка, филимон һ.б.).

**ҠОРОЛМАЛАР ҠОРОУ ҺӘМ МОДЕЛЛӘШТЕРЕҮ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ**

Формаһы, ҙурлығы буйынса төҙөү-ҡороуҙа ҡулланылған материалдарҙы танып, атамаларын әйтә белергә өйрәтеү.

*Тар, киң, бейек, тәпәш, оҙон, ҡыҫҡа* төшөнсәләрен аңлап, ҡоролмаларҙа ҡуллана белеү.

Ҡоролма өлгөһөн ябай ғына анализлап, уның өлөштәрен айырып, һәр өлөштөң ниндәй форманан тороуын билдәләп, күрһәтә белеү.

Ҡоролманың яҫылыҡтағы йүнәлештәрен билдәләй белеү күнекмәләрен формалаштырыу.

Ябай ғына төҙөү-ҡороу ысулдарын үҙләштереү: кубиктарҙы, кирбестәрҙе, пластиналарҙы горизонталь рәүештә бер йәки ике рәткә теҙеү *(машиналар өсөн юл)*

һ.б., төҫө, формаһы буйынса уларҙы сиратлатып бер-береһенән әҙ генә айырып баҫтырып ҡуйыу *(ҡапҡа, өй)*, ҡоролмаларҙың өҫтөн ҡаплай белеү һ.б.

Ололарҙың күрһәтеүе буйынса, ҡоролмаларҙы ҡабатлап төҙөй белеү.

Бер төрлө ҡоролманы икенсегә әйләндереү; уның бер өлөшөн икенсеһе менән алмаштырыу; ҡоролманы йә юғарыға, йә буйға дауам итеп төҙөү.

Шарт буйынса, һүрәткә ҡарап, йәки үҙенең уйы буйынса төҙөй белеү.

Төрлө төҫтәге фигураларҙы ҡулланып, төҫлө ҡоролма-моделдәр эшләү.

Төҙөлөш материалдарын таный, атамаһын әйтә һәм ҡоролмаларҙы ҡуллана белә. Кирбестәрҙе, пластиналарҙы вертикаль рәүештә урынлаштыра ала.

**МУЗЫКАЛЬ ТӘРБИӘ**

Балаларҙа төрлө характерҙағы көйҙәрҙе (бейеү, бишек йыры, марш) музыкаль яҡтан һиҙемләү һәм уларҙы айыра белеү һәләтен тәрбиәләү, уларҙы тыңлау теләген уятыу.

Таныш пьесаларҙы һәм йырҙарҙы танырға өйрәтеү.

Балаларҙа йырлау һәләтен үҫтереү. Бергәләп йырларға өйрәтә башлау. Хәрәкәттең һәм көйҙөң берҙәм үтәлешенә иғтибарлыҡ үҫтереү.

Тыңлау. Музыкаль әҫәрҙе аҙағына тиклем тыңларға, унда нимә тураһында йырланыуын һөйләргә өйрәтеү. Музыканың характерын (күңелле, тыныс) аңларға өйрәтеү. Ике бүлекле пьесаны таный белеү. Өндәрҙең октава һәм септима араһындағы ҡалынлығын һәм нәҙеклеген айырыу.

Яңғырауҙың (көслө, тыныс) үҙгәреүен һиҙемләргә өйрәтеү. Музыкаль ҡоралдарҙың яңғырашын айырыу һәм уларҙың атамаһын әйтә белеү (барабан, шалтырауыҡ, дөңгөр, ҡурай, металлофон, гармун).

Боронғо башҡорт халыҡ йырҙарын тыңлау.

**Йырлау.** Ре (ми) – ля (си) диапазонында музыка ҡоралы уйнауына ҡушылып, күңелле һәм шат кәйеф менән, наҙлы итеп, артыҡ ҡысҡырмай ғына, бер темпта һәм бер-береһенән ҡалышмай, һүҙҙәрҙе асыҡ итеп әйтеп йырларға өйрәтеү.

**Йыр ижады.** Балаларға сәңгелдәк йырҙарын «бәү-бәү» өндәренә, күңелле көйҙәрҙе «лә-лә» өндәр ҡушылмаһына йырларға өйрәтеү. Һалмаҡ һәм күңелле көйҙәрҙе айырырға өйрәтеү.

**Музыкаль - ритмик хәрәкәттәр**. Ике өлөштән торған көй формаһына ярашлы һәм тауыштың яңғырау көсөнә (көслө, әкрен) ҡарап хәрәкәттәрҙе үҙгәртергә өйрәтеү.

Көйҙөң башында һәм аҙағында хәрәкәтте үҙ-аллы башлау һәм тамамлау. Уртаса һәм шәп темптағы, тыныс йәки етеҙ характерлы көйгә ярашлы итеп (бөтәһе менән бергә һәм яңғыҙ) маршта атларға өйрәтеү: парлашып йөрөү, парлашып өйөрөлөү, ике аяҡты алмашлатып тыпырлау, ҡул суғы өсөн күнегеүҙәр башҡарыу, аяҡтарҙы алмашлап һикереп йүгереү (галоп).

Төп хәрәкәттәр (йөрөү һәм йүгереү) күнекмәләрен камиллаштырыу. Башҡалар менән бергә һәм яңғыҙ ғына атлап йөрөргә, музыка аҫтында еңел, һалмаҡ һәм тиҙ темпта йүгерергә өйрәтеү.

Бейеү хәрәкәттәрен башҡарыу сифатын яҡшыртыу: сиратлаштырып, ике аяҡ һәм бер аяҡ мелән тыпырҙау.

Парлашып әйләнеү, тура галоп башҡарыу, музыкаль әҫәрҙең темпына һәм ритмына ҡарап, предметтар, уйынсыҡтар менән һәм уларҙан башҡа көйгә тап килтереп хәрәкәтләнә белеү күнекмәләрен үҫтереү. Уйын һәм әкиәт образдарын тәьҫирле һәм хис-тойғоло итеп сағылдыра алыуға булышлыҡ итеү: *айыу килә, бесәй йәшеренеп кенә атлай,сысҡан балалары йүгерешә, ҡуян һикерә һ.б.*

**Музыкаль-уйын һәм бейеү ижады.**Көйгә ҡушылып ябай бейеү хәрәкәттәрен үҙ-аллы башҡарыуҙы тәрбиәләү. Йәнлектәрҙең холҡон һүрәтләгән хәрәкәттәрҙе дөрөҫ күрһәтә белеү (айыу килә, бесәй шыуыша һ.б.)

**Музыкаль ҡоралдарҙа уйнау.** Балаларҙы ябай музыка ҡоралдарындауйнап һәм уларҙың яңғырауышы менән таныштырыу: металлафон, ҡыңғырау, шалтырауыҡ, барабан, дөңгөр. Уларҙы һуҡма ҡоралдарҙа уйнарға өйрәтеү.

### «ФИЗИК ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

## Сәләмәт тормош тураһында башланғыс төшөнсә биреү

Балаларҙың һаулығын һаҡлау һәм нығытыу эшен дауам итеү: дөрөҫ һын, кәүҙә торошон формалаштырыу, төп хәрәкәттәрҙе үтәй белеүҙе нығытыу, үҫтереү.

Тирә-йүндә дөрөҫ хәрәкәтләнә белеүҙе үҫтереү. Балаларҙың бергәләп уйнауын, физик күнекмәләр башҡарыуын хуплау.

Әүҙемлек, үҙ-аллылыҡ, күтәренке күңел формалашыуына булышлыҡ итеү.

Төрлө тәбиғи факторҙарҙы (һыу, һауа, ҡояш) ҡулланып, медицина хеҙмәткәрҙәрҙе күҙәтеүе аҫтында балаларҙы сыныҡтырыу саралары үткәреү.

Төркөм бүлмәһендә балаларҙы еңел кейемдә йөрөргә өйрәтеү.

Саф һауала көн тәртибенә ярашлы кейем кейҙереү.

Көн һайын 5-6 минутлыҡ иртәнге гимнастика үткәреү.

Хәрәкәтле уйындарҙа һәм физик күнекмәләрҙе башҡарыуҙа бергәләп, ҡатнашып эш итергә күнектереү.

Физик күнекмәләргә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, буш ваҡытта физкультура йыһаздарын ҡулланырға өйрәтеү.

Мөмкинлек булғанда балаларҙы йөҙөргә өйрәтеү.

## Физик культура

Хәрәкәтләнеүҙең төрлө төрҙәрен үҫтереү. Балаларҙы аяҡтарын һөйрәмәй, баштарын төшөрмәй, ҡулдарҙы сиратлап һелтәп һәм аяҡтарҙы алмашлап атлап, иркен һәм еңел итеп йөрөргә һәм йүгерергә өйрәтеү.

Бейеклеккә һикергәндә ике аяҡты ерҙән этеп күтәрелергә һәм ергә дөрөҫ төшөрөргә өйрәтеү, бер урында һәм алға табан ике аяҡта һикереү.

Урындан алыҫҡа һәм бейеклеккә һикергәндә, туп ташлағанда, тәгәрәткәндә кәүҙәне дөрөҫ тоторға өйрәтеү.

Үрмәләгәндә арҡыры ағасҡа дөрөҫ тотонорға, тупты ике ҡул менән тотоп ташларға өйрәтеү.

Берәмләп колоннаға бер-береһе эргәһенә, сафҡа, түңәрәккә теҙелергә һәм үҙ урынын табырға күнектереү. Һәр төр хәрәкәтләнеүҙә дөрөҫ кәүҙә торошон һаҡлауға өйрәтеү.

Санала, өс тәгәрмәсле велосипедта үҙ-аллы ултырып йөрөргә өйрәтеү. Саңғыларҙы кейергә, сисергә, шыуырға, аҙаҡ урынына ҡуйырға өйрәтеү.

Хәрәкәтле уйындарҙа ҡағиҙәләрҙе үтәргә өйрәтеү. Тәүәкәллек, үҙ-аллылыҡ, етеҙлек тәрбиәләү.

**Хәрәкәтле уйындар.** Хәрәкәтләнеү эшмәкәрлегендә балаларҙың әүҙемлеген, ижадилығын хуплау. Ҡағиҙәле уйындар уйнауҙы ойоштороу. Тәгәрмәсле уйынсыҡтарҙа, машиналарҙа, велосипедта йөрөүҙе, шар, туп менән үҙ-аллы уйнауҙы ойоштороу. Ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәп, бер-береһе менән килешеп, тирә-йүндәге арауыҡта үҙҙәре торған ерҙе билдәләй белеү.

## 4 йәштән 5 йәшкә тиклемге балаларға белем биреү эшмәкәрлеге йөкмәткеһе.
## (Уртансы төркөм)

Бишенсе йәш бала организмының һәм уның аң-зиһененең әүҙем үҫешкән осоро.

Төп хәрәкәттәр үҫешендә айырыуса ныҡ үҙгәрештәр була. Хис-тойғоларға бай хәрәкәтләнеү - балаларҙы физик яҡтан үҫтереү сараһы ғына түгел, ә психик яҡтан да уларҙың ихтыяжын тәьмин итеү ролен үтәй.

Баланың үҙ эш-хәрәкәтен алдан планлаштырып, үҙенең фекеренсә, үҙе уйлағанса башҡара белеү һәләте үҫешә. Был эште үтәү маҡсаты менән бер рәттән уны ниндәй ысул, юл аша тормошҡа ашырыу ҙа күҙаллана.

Балалар тормошонда бергәләп сюжетлы-ролле, хәрәкәтле һәм дидактик уйындар уйнау төп урынды ала. Был уйындарҙа танып-төшөнөү һәләте, күҙәтеүсәнлек, ҡағиҙәләргә бойһоноу, үҙ-үҙен тота белеү күнекмәләре формалаша һәм нығына.

Уйын эшмәкәрлеге менән бер рәттән ҡул эше эшмәкәрлеге лә үҫешә, бигерәк тә рәсем төшөрөү һәм ҡоролмалар ҡороу. Балалар һүрәттәрендә һәм ҡоролмаларында күп ваҡыт уйлағанға тап килмәһә лә, сюжеттар төрлөрәк һәм ҡатмарлыраҡ була башлай.

Күҙаллау айырым өлөштәргә бүленеп ҡабул ителә. Балалар предметтарҙы тикшерергә, һәр өлөшөн айырып, улар араһындағы бәйләнештәрҙе билдәләй башлай.

Предметтар тураһындағы төшөнсәләр, уларҙың дөйөм үҙенсәлектәре, улар араһындағы бәйләнештәр, күренештәр тураһында бала фекер йөрөтә, эстән сағыштыра, үҙенең белемен барлай һәм уны нисек ҡулланыу юлын эҙләй башлай. Шуға ла улар предметтың төҙөлөшөн, эш-хәрәкәтен, тәбиғәт күренештәренең ни

өсөн үҙгәреүен һ.б. менән ҡыҙыҡһына башлай. Улар *нисек*? *ниңә*? *ни өсөн*? һорауҙарын бер туҡтауһыҙ бирәләр. Күп ваҡыт һорауҙарға ул үҙе яуап эҙләй башлай. Ололар был ваҡытта балалар һорауына, ҡыҙыҡһыныуына иғтибарлы булырға, кәрәкле йүнәлештә уларҙың ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндереү өсөн яуаптар бирерлек шарттар тыуҙырырға тейештәр. Юғиһә балаларҙа ситләшеү, аралашмау, өндәшмәү, үҙ-үҙенә бикләнеү, тиҫкәрелек, үҙ-һүҙләнеү, киреләнеү кеүек һыҙаттар барлыҡҡа килеүе мөмкин.

Биш йәшлек баланың бәйләнешле телмәре лә әүҙем үҫешә башлай, әҙәби әҫәр эстәлеген, үҙенең тормошондағы ниндәйҙер бер ваҡиға тураһында бала һүрәттәр, йәки үҙе төҙөгән ҡоролмалар буйынса һөйләй ала.

**«СОЦИАЛЬ-КОММУНИКАТИВ ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Йәмғиәттә йәшәй белеү күнекмәләрен үҙләштереү, аралашыуҙың үҫеше һәм әхләҡи тәрбиә

Баланың үҙенең булмышын аңлауға һәм холоҡ-фиғелен әхлаҡи яҡтан дөрөҫ тәрбиәләүгә йүнәлтелгән уйындар һәм күнекмәләр үткәреү. Улар балалар араһында ыңғай мөнәсәбәттәр булдырырға һәм бер-береһе өлгөһөндә бала тәртибен, холҡон яҡшы яҡҡа үҫтереүгә ярҙам итә.

- уй-фекерҙе һәм хис-тойғоно һүҙҙәр менән билдәләргә, телмәрҙә эмоциональ торошто аңлатҡан һүҙҙәрҙе ҡуллана белергә өйрәтеү;
- ым-ишараның тасуирлығын үҫтереү. Улар ярҙамында матур мөнәсәбәттәр урынлаштырып булыуҙы аңлатыу;
- дуҫлыҡ, дуҫлашыу, дуҫ төшөнсәләренең айышын аңларға өйрәтеү;
- үпкәләшеү, асыуланышыу кеүек насар сифаттарҙы бөтөрөү юлдарына өйрәтеү (ғәфү үтенеү, йылмайыу, арҡанан һыйпау һ.б.);
- тиҫтерҙәренең һәм өлкәндәрҙең кәйеф торошон һиҙемләй, аңлай белергә өйрәтеү, кәрәк ваҡытта ярҙам итә белеү һәләтен тәрбиәләү;
- асыуланышҡан саҡта һүҙ ярҙамы менән генә түгел, ым-ишара аша ла килешеп булыуҙы төшөндөрөү.

Балаларҙа бөхтәлеккә, үҙенең тышҡы ҡиәфәтендә матурлыҡ, таҙалыҡ һаҡлауға ынтылыш тәрбиәләүҙе дауам итеү.

Үҙаллы йыуынырға, аш алдынан, бәҙрәфтән һуң һабын менән ҡулдарҙы йыуып, ҡоро итеп үҙ таҫтамалына һөртөргә ғәҙәтләндереү.

Тараҡ, ҡулъяулыҡ менән ҡулланырға күнектереү. Йүткергәндә, сөскөргәндә икенсе яҡҡа әйләнеп, ауыҙ-морондо ҡулъяулыҡ менән ҡапларға өйрәтеү.

Ашағанда өҫтәл артында үҙ-үҙен тотоу һәм ашау ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәүҙе нығытыу: аҙыҡты әҙләп алыу, ауыҙҙы йомоп сәйнәү, ҡалаҡты, сәнскене, бысаҡты, салфеткаларҙы дөрөҫ ҡулланыу. Ашағас, ауыҙ сайҡатырға күнектереү.

**БАЛА ҒАИЛӘЛӘ ҺӘМ КЕШЕЛЕК ЙӘМҒИӘТЕНДӘ**

**«Мин» образы.** Баланың үткәне, хәҙергеһе, киләсәге (мин бәләкәй инем, мин үҫәм, мин ҙур булам) тураһында төшөнсәләр формалаштырыу.

Балаға уның хоҡуҡтары һәм башҡалар алдында торған бурыстары тураһында ябай ғына кимәлдә башланғыс төшөнсәләр биреү (балалар баҡсаһында, өйҙә, урамда, уйын ваҡытында, башҡаларға ҡарата мөнәсәбәт, белем алыу һ.б.; үҙ-аллы

ашау, кейенеү, уйынсыҡтарҙы йыйыштырып ҡуйыу һ.б.) Һәр бер балала ул яҡшы, уны ярата лар тигән ышанысты формалаштырыу.

Гендер тәрбиәһен биреү (малайҙар ҡыйыу, көслө; ҡыҙҙар наҙлы, күркәм, нәзәкәтле).

**Ғаилә.** Ғаилә, ғаилә ағҙалары тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү. Туғанлыҡ, туғандар араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында төшөнсәләр биреү (ул, ҡыҙ, әсәй, атай һ.б.).

Балаларҙың өйҙә шәхси башҡарыла торған бурыстары тураһында ҡыҙыҡһыныу (уйынсыҡтарҙы йыямы, һауыт-һаба йыуырға ярҙамлашамы һ.б.).

**Балалар баҡсаһы.** Балаларҙы балалар баҡсаһы, уның хеҙмәткәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балалар баҡсаһы бинаһы эсендә дөрөҫ йүнәлеш (ориентир) табыуҙы камиллаштырыу. Төркөмдәге майҙансыҡта әйберҙәргә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү,уларҙы кәрәкле ваҡытта һәм урында ҡулланыу һәм кире урынына алып ҡуйыу.

Балалар баҡсаһының традициялары менән таныштырыу. Балаға уның коллективтың ағзаһы булыуын, унда үҙ урыны булыуын аңлатыу. Төркөмдөң, залдың, майҙансыҡтың биҙәлешендәге үҙгәрештерҙе күрергә өйрәтеү (сағыу, матур, биҙәлгән уйынсыҡтар нисек матур күренә, балаларҙың һүрәттәре һ.б). һәм уларҙы биҙәгәндә балаларҙы әүҙем ҡатнашырға күнектереү.

**ҮҘ-ҮҘЕНДЕ ХЕҘМӘТЛӘНДЕРЕҮ, ҮҘ-АЛЛЫЛЫҠ, ХЕҘМӘТ ТӘРБИӘҺЕ**

**Әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереү.** Балаларҙа бөхтәлеккә, үҙенең тышҡы ҡиәфәтендә матурлыҡ, таҙалыҡ һаҡлауға ынтылыш тәрбиәләүҙе дауам итеү.

Үҙ-аллы йыуынырға, аш алдынан, бәҙрәфтән һуң һабын менән ҡулдарҙы йыуып, ҡоро итеп үҙ таҫтамалына һөртөргә ғәҙәтләндереү.

Тараҡ, ҡулъяулыҡ менән ҡулланырға күнектереү. Йүткергәндә, сөскөргәндә икенсе яҡҡа әйләнеп, ауыҙ-морондо ҡулъяулыҡ менән ҡапларға өйрәтеү.

Ашағанда өҫтәл артында үҙ-үҙен тотоу һәм ашау ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәүҙе нығытыу: ашамлыҡты аҙлап алыу, ауыҙҙы йомоп сәйнәү, ҡалаҡты, сәнскене, бысаҡты, салфеткаларҙы дөрөҫ ҡулланыу. Ашағас – ауыҙ сайҡатырға күнектереү.

**Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү.** Сисенеү һәм кейенеү – үҙенә күрә бер хеҙмәт. Эҙмә-эҙлекле сисенеү һәм кейенеү - үҙе бер һөнәр. Был эште етеҙ башҡара белеүҙең һәйбәт сифат икәнлеген аңлатыу.

Көҙгөгә ҡарапөҫ-башты төҙәтә белеүҙе дауам итеү. Кейем бысранһа, төймә өҙөлһә, аяҡ кейеме еүешләнһә йәки бауы сырмалһа, өлкәндәр ярҙамында етешһеҙлекте бөтөрөү сараһын күрергә өйрәтеү.

Йыйнаҡлыҡҡа һәм бөхтәлеккә өйрәтеүҙе дауам итеү. Ярҙамсыл булыу сифаттары тәрбиәләү.

**Хужалыҡ-көнкүреш хеҙмәте.** Үҙ-аллылыҡ, хеҙмәттән йәм табыу сифаттары тәрбиәләү маҡсатында, иртәнге мәлдәрҙә һәр балаға бәләкәй булһа ла айырым эш йөкмәтеү, һөҙөмтә ниндәй булырға тейешлеген аңлатыу.

Ҡайһы бер эште өлкәндәр әйтмәһә лә, эшләй белергә тейешлекте төшөндөрөү. 2-3 бала бер эште эшләгәндә, мәҫәлән, бүлмә гөлдәрен тәрбиәләгәндә (һыу һибеү, төптәрен йомшартыу, япраҡтарын һөртөү), үҙ-ара килешеп эшләү матур һөҙөмтә биргәнлеген иҫбатлау.

Балалар һәр төрлө йәки көндәлек эштән ялҡмаһын өсөн, эште йәнләндерергә, төрлө методик һәм тәрбиә ысулдары ҡулланып төрлөләндереү, яҡшы эш һөҙөмтәһен күрһәтеп, балаларҙы дәртләндереү.

Төркөм бүлмәһе, уйын майҙансығы тәртиптә тотолорға, ҡурсаҡтар кейеме таҙа, китаптар йыртылмаған, йыртылһа – йәбештерелгән булырға тейеш.

Төҙөлөш материалдары менән уйнап ялҡҡас, йәшниктәргә һалып ҡуйырға, уйынсыҡтарҙы тәртип менән урынлаштырырға өйрәтеү.

Һәр әйбергә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Тәбиғәттәге хеҙмәт.** Тәбиғәт ул – кеше өсөн хеҙмәтхана. Тимәк, кеше тәбиғәткә хеҙмәт итергә бурыслы икәнлекте аңлатыу. Уйын майҙансығы таҙа булһын өсөн, сүп-сарҙы йыйып алырға, һеперергә (ҡарҙан таҙартырға) кәрәклеген төшөндөрөү.

Мөхит таҙа һауалы, йәйен эҫелә күләгә булһын өсөн ағас үҫтерергә, матурлыҡ һәм зауыҡ өсөн сәскәләр сәсергә, улар үҫһен өсөн һыу һибергә, ҡомда уйнау өсөн уны йомшартып торорға; ҡоролмаларҙы боҙмаһаң, улар оҙаҡ хеҙмәт итәсәген, ҡоштарҙы яратып, ем биреп торһаң, тәбиғәт хозур буласағын, ғөмүмән, кеше тәбиғәтте хеҙмәте менән матурларға тейешлекте өйрәтеү.

Һөҙөмтәле эшкә өлгәшеүҙе, ярҙамсыл булырға тырышыуҙы хуплау.

Хеҙмәт тураһында әйтем, мәҡәлдәр, йомаҡтар, әкиәттәр. Халыҡ ижадынан миҫалдар ҡулланыу.

**Ололарҙың хеҙмәтен хөрмәтләү.** Яҡындарының һөнәре менән таныштырыу. Ата-әсәләрҙең профессияһына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**ХӘҮЕФҺЕҘ ЙӘШӘҮ НИГЕҘҘӘРЕН ФОРМАЛАШТЫРЫУ**

**Тәбиғәттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү.** Тәбиғәттә үҙеңде нисек хәүефһеҙ тотоу, хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһы, тере булмаған тәбиғәт күренештәре менән таныштырыуҙы дауам итеү.

«Ашарға яраҡлы», «ағыулы», «дарыу үләндәре» тигән төшөнсә менән таныштырыу.

Кеше өсөн хәүефле булған бөжәктәр һәм ағыулы үләндәр менән таныштырыу.

**Юл хәрәкәтендәхәүефһеҙлек һаҡлау.** Төркөм бүлмәһендә, уйын майҙансығында, яҡындағы арауыҡта йүнәлеш билдәләй белеү, иғтибарлылыҡ тәрбиәләү.

Светофорҙың ҡыҙыл, һары, йәшел төҫтәренең урынлашыу тәртибе һәм аңлатҡан мәғәнәләре менән таныштырыу. Светофор сигналына ярашлы хәрәкәт итергә күнектереү. Юл хеҙмәткәре-полиция хеҙмәткәренең эшен күҙәтеү һәм аңлатыу.

Йәмәғәт транспорттары төрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү (троллейбус, автобус, трамвай, поезд, самолёт, теплоход һ. б.). Транспорт туҡталышы тураһында төшөнсәләр биреү (маршрут автобусы, троллейбусы, трамвайы) туҡталышы. Яҡындағы урамда уларҙың урынын билдәләү. Автобус йәки троллейбус туҡталышын аңлатыусы юл билдәләре менән таныштырыу. Йәмәғәт транспортына ултырыу һәм унансығыу ҡағиҙәләренәиғтибар итеү.

Балаларҙың махсус транспорт саралары тураһындағы төшөнсәләрҙе һәм ҡулланышы («Ашығыс ярҙам» машинаһы, «Полиция» машинаһы, «Янғын һүндереү» машинаһы һ. б.)тураһындағы белемдәрен асыҡлау; улар биргән сигнал

тауыштарына иғтибар итергә, айыра белергә өйрәтеү; ҡайһы бер айырым осраҡтарҙа махсус транспорт сараларының юл йөрөү ҡағиҙәләрен боҙоу мөмкинлегенә иғтибар иттереү.

Юлдарҙа ҡурҡынысһыҙ йөрөү ҡағиҙәләрен өйрәнеү процессына ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Йәшәйештә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү.** Көндәлек режим барышында хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрҙе үтәү күнекмәләрен нығытыу (уйында, тикшереү-эҙләнеү тәжрибәләре башҡарғанда, уйын майҙансығында һ.б.).

Көнкүрештәге электр приборҙары менән таныштырыу, улар менән эш иткән ваҡытта ниндәй хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәргә кәрәклекте өйрәтеү.

Велосипедта йөрөү ҡағиҙәләре менән таныштырыу.

Янғын һүндереүселәрҙең эше менән таныштырыу. Ут сыҡмаһын өсөн ниндәй ҡағиҙәләрҙе белергә кәрәклекте төшөндөрөү.

Көнкүрештә ҡурҡынысһыҙлыҡ нигеҙҙәре тураһында белемдәрҙе үҙләштереүҙе дауам итеү, һаҡлыҡ, һиҙгерлек хисе тәрбиәләү. Ҡайсы, бысаҡ, осло предметтар менән эш итеүҙә, спорт инвентары, быяла предметтар ҡулланғанда һаҡ булырға күнектереү. Балаларҙы тормошта яңы, улар өсөн ғәҙәти булмаған осраҡтарҙа, таныш булмаған кешеләр менән осрашҡанда үҙ-үҙҙәрен дөрөҫ тоторға өйрәтеү.

## «ТАНЫП-БЕЛЕҮ ҮҪЕШЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

## ТИРӘ-ЙҮНДЕ ТАНЫП-БЕЛЕҮ ҺӘМ ТИКШЕРЕП ӨЙРӘНЕҮ ЭШМӘКӘРЛЕГЕНЕҢ ҮҪЕШЕ

**Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлеге үҫеше.** Сенсор эталондар һәм махсус ҡоролған перцептив алымдар ярҙамында балаларҙы төрлө обьекттарҙы тикшереү ысулдары менән таныштырыуҙы дауам итеү.

Яңы объектты тикшереп өйрәнеү барышында уның тураһында өҫтәлмә мәғлүмәттәр алыуҙы формалаштырыуҙы дауам итеү.

Ҡуйылған бурыстарға һәм эшмәкәрлекте башҡарыу алгоритмына ярашлы эҙмә-эҙлекле эш-хәрәкәт итергә күнектереү.

Ололар тәҡдим иткән танып-белеү-эҙләнеү эшмәкәрлеге моделдарын аңларға һәм ҡулланырға өйрәтеү.

**Сенсор тәрбиә.** Төрлө эшмәкәрлектә предметтарҙы уларҙың тышҡы сифаттары буйынса һиҙеп-тойоп, күҙ алдына килтереп, сағыштырып һ.б. танып-белеү һәләтен үҫтереүҙе дауам итеү.

Предметтарҙы тикшереүҙең яңы ысулдары менән таныштырыу, балаларҙың тирә-йүнде үҙаллы өйрәнергә теләүен хуплау.

Предметтарҙы, тирә-йүн күренештәрен барлыҡ һиҙеү-тойоу органдары ярҙамында әүҙем ҡабул итеүҙе үҫтереү һәм нығытыу. Өйрәнгән асыштарын телмәрҙә сағылдыра белергә күнектереү.

Төҫ, форма, дәүмәл, ауырлыҡ, оҙонлоҡ һ.б. кеүек эталон төшөнсәләрҙе көнкүрештә ҡуллана, бер-ике сифаты буйынса предметтарҙы һайлай белергә өйрәтеү.

Геометрик фигуралар (түңәрәк, өсмөйөш, квадрат, овал, тура дүртмөйөш), төҫтәр (ҡыҙыл, күк, йәшел, һары, ҡыҙғылт һары (оранжевый), миләүшә (фиолетовый), аҡ, һоро (серый) таныштырыу.

Һиҙеү, тойоу һәләтен үҫтереү. Төрлө материалдарҙы бармаҡтар менән һәрмәп, устар менән һыйпап уларҙың йомшаҡлығын, шымалығын, ҡытыршылығын, ҡатылығын, сәнскелеген, һибелеүсәнлеген, йәбешкәкселеген билдәләү.

Предметтарҙы йәшәйештәге нимәгәлер оҡшатып ҡабул итергә өйрәтеү (ай ҡоймаҡ кеүек, әтәс кикереге тараҡҡа оҡшаған һ.б.).

Предметтарҙы тышҡы яҡтан характерлаған эталондар (төҫ, форма, дәүмәл, ауырлыҡ һ.б.) уларҙың йәшәйештә бөтәһе тарафынан да ҡабул ителгән сифаттары һәм үҙенсәлектәре тип ҡабул итергә күнектереү.

1-2 сифаты йәки үҙенсәлеге буйынса предметтарҙы һайлап ала белеү.

**Проект эшмәкәрлеге**. Тикшеренеү-эҙләнеү һәм проект эшмәкәрелектәрҙе үтәү өсөн балаларға башланғыс мәғлүмәттәр биреү. Ата-әсәләр менән берлектә ул эштәрҙе үтәргә өйрәтә башлау, эштең һөҙөмтәләрен башҡаларға күрһәтеү һәм аңлатыу өсөн ярҙамлашыу һәм тейешле шарттар булдырыу.

**Дидактик уйындар.** Предметтарҙы сифаттары һәм үҙенсәлектәре буйынса сағыштырып, төркөмләүҙе, йәки айырыуҙы нығытыуға бағышланған уйындар уйнарға өйрәтеү. Предметтың өлөштәренән бөтөндө йыйыу уйындары уйнатыу (кубиктар, мозаика, пазлдар).

Балаларҙың ишетеп, тәмләп ҡарап, тире аша һиҙеп предметтарҙы таныу һәләттәрен үҫтереү: «Һәрмәп, тәмләп, тыңлаптаны!».

Күҙәтеүсәнлекте һәм иғтибарҙы үҫтереү: «Нимә үҙгәрҙе?», «Кемдә яулыҡ?» һ.б.).

## Башланғыс ябай математик төшөнсәләр

**Һан һәм иҫәпләү.** Балаларға күплек төшөнсәһен һәр төрлө сифаттары буйынса айырылған предметтарҙан тороуҙы төшөндөрөү: төрлө төҫтәге, формалағы, дәүмәлдәге предметтарҙыһанамайынса (бында түңәрәктәр күп- ҡыҙылдары, күктәре, ҙурҙары бар) күпме, аҙмы - билдәләү. Күплек эсенә ингән предметтарҙы парлап һалып (һанамайынса) предметтарҙың тигеҙлеген йәки тигеҙ булмауын билдәләргә өйрәтеү. Балалар телмәренә «Бында түңәрәктәр күп. Ҡыҙылдары бында, ә былары-күк. Ҡыҙыл түңәрәктәр күктәргә ҡарағанда күберәк». Йәки: «Күк түңәрәктәр ҡыҙыл түңәрәктәргә ҡарағанда аҙыраҡ». Йәки: «Ҡыҙыл түңәрәктәр менән күк түңәрәктәр бер тигеҙ».

Ике төркөм предметтарҙы сағыштырыу аша, «бер» һанын ҡушыу, йә алыу юлы менән 5 эсендәге һандарҙың барлыҡҡа килеүен аңлау һәм һанай белеү.

5-кә тиклем төп һәм рәт һандарын һанарға өйрәнеү. Һанағанда аҙаҡҡы һанды иҫәпләгән предметтар төркөмөнә бәйләп әйтә белеү (бер, ике, өс- бөтәһе өс ҡуян).

«Нисәнсе?», «Һан буйынса нисәнсе?» һорауҙарына яуап бирә белеү.

Предметтарҙы һаны яғынан, «1»-ҙе ҡушып, йә алып, тигеҙләй белеү. Уларҙы төҫө, формаһы, дәүмәле, һаны буйынса төркөмләү.

Рәттә, түңәрәктә, диагоналдә, периметрҙа урынлашҡан предметтарҙы һанай белеү.

**Дәүмәл.** Ике предметты дәүмәле (буйы, киңлеге, бейеклеге) буйынса сағыштыра белеү. Арта, йә кәмей барыу рәүешендә 5 – кә тиклем теҙә һәм теҙеү тәртибен һандар ярҙамында әйтә белеү.

Йәнәш торған төрлө төҫтәге предметтарҙы дәүмәле (бейеклек, киңлек) буйынса сағыштыра белеү (һары таҫма ҡыҙылынан оҙонораҡ, ә ҡыҙыл таҫма һары таҫманан ҡыҫҡараҡ).

Предметтарҙы дәүмәлдең киңлеге - тарлығы, оҙонлоғо - ҡыҫҡалығы, бейеклеге - тәпәшлеге буйынса сағыштырыу (һары таҫма йәшеленә ҡарағанда оҙонораҡ һәм киңерәк, ә йәшел таҫма һарыһынан ҡыҫҡараҡ һәм тарыраҡ).

Ҡалынлыҡ - йоҡалыҡ төшөнсәләре менән таныштырыу (ҡалын, ҡалынныраҡ, нәҙек, йоҡа).

**Геометрик фигуралар һәм формалар.** Тура дүртмөйөш, овал, цилиндр менән таныштырыу һәм уларҙы таныш фигуралар менән сағыштырып, оҡшашлығын, айырмаһын табыу.

Геометрик фигураларға билдәләмә бирә белеү (квадрат - бөтә яғы ла тигеҙ булған фигура).

Ҡатмарлы формалы предмет өлөштәренең геометрик фигуралар менән ниндәй бәйләнештә (оҡшашлыҡта) булыуын күрә, аңлай белеү. Таныш булған 3-4 геометрик фигураны үҙ-ара сағыштыра, логик фекерләү аша уларҙың оҡшашлығын һәм айырмаһын таба белеү.

**Арауыҡтағы йүнәлеш.** Баланың үҙенән ситтә булған арауыҡтағы йүнәлештәрҙе әйтә, аңлай һәм күрһәтә белеүе: һулда - уңда, өҫтә - аҫта, алда - артта.

Үҙ кәүҙәһенә ҡарата арауыҡта урынлашҡан предметтарҙың урынын билдәләй һәм әйтә белеү.

Билдәләнгән йүнәлештә хәрәкәт итә белеү. «Араһында, эргәһендә, алдында» төшөнсәләре менән танышыу.

Өҫтәл яҫылығында йүнәлеш билдәләй белеү (дежур булғанда).

Балалар баҡсаһы бинаһында һәм үҙе йәшәгән урамда дөрөҫ хәрәкәт итә белеү.

**Ваҡыт төшөнсәләре.** Тәүлек өлөштәрен дөрөҫ әйтә белеү: иртә, көн, кис, төн. Кеше эшмәкәрлегенә ҡарап, уларға билдәләмә бирә белеү. «Тәүлек» төшөнсәһен аңлатыу һәм уның өлөштәрен айыра, һанай белеү.

«Кисә, бөгөн, иртәгә» төшөнсәләрен аңлатыу. Моделдәр ярҙамында тәүлек өлөштәре менән таныштырыу.

**ТИРӘ-ЙҮН ПРЕДМЕТТАРЫ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ**

Балаларҙы уратып алған объекттар тураһындағы мәғлүмәттәрҙе киңәйтеү.

Эшмәкәрлектең бөтә төрҙәрендә лә (уйын,хеҙмәт,һынлы сәнғәт) ҡулланырға кәрәк булған предметтар менән таныштырыу.

Йәмәғәт транспорттары тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү (автобус, самолет, поезд).

Предметтарҙы билдәләре, төҫө, ҙурлығы, ауырлығы һәм эшләнгән материалы буйынса (быяла, пластик, металл, резина) айыра белергә өйрәтеү. Һәр бер предметтың айырым бер материалдан эшләнелеүе тураһында (машинаның корпусы металдан, тәгәрмәсе резинанан) аңлатыу.

Уйынсыҡтар һәм тормош кәрәк-яраҡтарының барлыҡҡа килеү тарихы миҫалында кеше хеҙмәте төрҙәренең үҙгәреп тороуо тураһында һөйләү.

Тормош-көнкүреш әйберҙәре, йорт йыһаздары менән таныштырыу (һыуытҡыс, газ плитәһе, саң һурҙырғыс, радио, компьютер, телевизор һ.б.). Уларҙы формаһына,

күләменә, ҙурлығына, төрөнә, төҙөлөшөнә ҡарап, төркөмләргә өйрәтеү. Электр лампаһы, электр энергияһы тураһында мәғлүмәт биреү.

## СОЦИАЛЬ ДОНЪЯ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ

Йәмғиәттә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре тураһындағы мәғлүмәттәрҙе киңәйтеү.

Йәмғиәт транспорттары тураһындағы белемдәрҙе (автобус, поезд, самолет) артабан тәрәнәйтеү.

Мәктәп тураһында тәүге төшөнсәләр биреү.

Мәҙәни тәрбиә үҙәктәре булған учреждениелар (театр, цирк, музей, зоопарк, күргәҙмә, кинотеатр, библиотека) һәм уларҙың атрибуттары, унда барғас, ниндәй тәртип ҡағиҙәләрен үтәү кәрәклеге, эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙең башҡарған эш-шөғөлө менән таныштырыу.

Бала йәшәгән ҡаланың, ауылдың матур, иҫтәлекле урындары менән таныштырыу. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт байрамдары тураһында ябай ғына мәғлүмәттәр биреү. Тыуған илде һаҡлаусы хәрбиләр (сик һаҡсылары, моряктар, осоусолар), Рәсәй армияһы һалдаттары тураһында һөйләү.

Ҡалалағы һәм ауылдағы тормош һәм хеҙмәт шарттары, уларҙың айырмаһы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе балаларҙың үҙ тәжрибәләренә таянып төшөндөрөү.

Төрлө һөнәрҙәр менән таныштырыуҙы дауам итеү (шофер, хат ташыусы, һатыусы). Уларҙың хеҙмәте, эш ҡоралдары, башҡарған эш-хәрәкәттәре, хеҙмәттәренең һөҙөмтәләре тураһында аңлатыу. Балаларҙы аҡса һәм уның ҡулланылышы менән таныштырыу. Тыуған илгә ҡарата һөйөү хисе тәрбиәләүҙе дауам итеү.

## ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ

Тыуған яҡтың ағастарын (ҡайын, имән, ҡарағай, саған һ.б.), ҡыуаҡтарын (сирень, сейә, акация һ.б.) таный һәм исемен әйтә белеү. Ағас һәм ҡыуаҡтың айырмаларынсағыштырыу, ылыҫлы һәм япраҡлы ағастарҙыңүҙенсәлектәре менән таныштырыу.

Бүлмә гөлдәренең ике яңы төрө (бегония, бальзамин) менән таныштырыу. Уларҙың тышҡы төҙөлөшө (тамыр, һабағының урынлашыуы, япраҡтар формаһы, сәскәләре, орлоҡтары) менән таныштырыу. Балаға үҫемлектең һәр өлөшө үҙенә хас эш башҡарғанын аңлатыу (тамыры уны тупраҡта (ерҙә) тотоп тора, һабағы ерҙән кәрәкле файҙалы матдәләрҙе япраҡ, сәскәләргә бирә, япрағы яҡтыны тота, күләгә төшөрә. Үҫемлектәргә үҫер өсөн йылылыҡ, дым, ҡояш яҡтыһы, тупраҡ кәрәк).

Емеш-йәшелсәнең яңы 2-3 төрөн (шалҡан, сөгөлдөр, ҡурай еләге, крыжовник) танып, исемдәрен әйтергә, үҙенсәлектәрен табырға өйрәтеү. Уларҙы дөйөм һүҙ - «йәшелсә», «емеш» тип атарға өйрәтеү.

Үҫемлектәрҙең орлоҡтан сәсеп үҫтерелеүе, уны тәрбиәләү (утау, һыу һибеү, төбөн йомшартыу) тураһында аңлатыу.

Баҫыуҙа үҫкән башаҡлы үҫемлектәр (бойҙай, һоло, арпа) һәм уларҙан он, ярма әҙерләүҙе, был продукттарҙан бешерелгән ризыҡтарҙы таныу: икмәк, бутҡа, печенье һ.б. (башҡорт милли аштары - ҡурмас, талҡан, һалма һ.б.). Болонда, туғайҙа үҫкән үҫемлектәрҙе белеү һәм таныу (аҡ сәскә, ҡыңғырау сәскә, андыҙ һ.б.).

Ашарға яраҡлы (ер еләге, ҡурай еләге, ҡыҙыл көртмәле) һәм ярамай торған (эт муйылы, бүре еләге, артыш) еләктәрҙе белдереү.

Ашарға ярамай торған (тырҡыш, ағыулы бәшмәк, ялған башлы бәшмәк) һәм ашарға яраҡлы бәшмәктәр (аҡ бәшмәк, гөрөҙҙә, ҡайын бәшмәге) менән таныштырыу.

Ҡырағай һәм йорт хайуандары, уларҙың балалары тураһындағы белемде тәрәнәйтеү, йорт хайуандарының улар тураһында ҡайғыртыуға мохтаж булыуын (торлаҡ эшләү, аҙыҡ әҙерләү, тәрбиәләү һ.б.) аңлатыу.

Ҡырағай хайуандарҙы уларҙың үҙенсәлекле сифаттары буйынса таный белеү (холҡо, йәшәү урыны, ашарға табыу юлы, дошмандан һаҡланыу төрҙәре буйынса).

Йәнлектәрҙең йәшәү шарттары (ер өҫтөндә, һыуҙа-ерҙә, ерҙә һәм һауала, тупраҡта), ошо шарттарға ярашлы уларҙың тән төҙөлөшө тураһында мәғлүмәт биреү.

Йәнлектәрҙең йыл миҙгелдәрендәге үҙгәрештәргә яраҡлашыуы (ҡышҡы йоҡоға талыу, йөнөн ҡойоу (яҙын, көҙөн), йылы яҡтарға осоп китеү. Өйөр, көтөү (хайуандар), туп (ҡоштар), эркеү (балыҡтар) төшөнсәләрен үҙләштереү.

2-3 ҡошто танырға һәм исемен әйтергә өйрәтеү (турғай, кәкүк, һандуғас, ҡарға); ҙурлығы, тауышы, ҡаурыйҙарының төҫө һ.б. билдәләре буйынса ҡоштарҙы таныу.

Аквариум – балыҡтарҙың йәшәгән урыны (мөхите) икәнлеген аңлатыу. Унда таҙа һыу, ҡом, ҡырсынташ, һыу аҫты үҫемлектәре барлығын асыҡлау. Аквариумда йәшәгән балыҡтарҙы төрҙәре буйынса танып, атамаларын әйтә белеү.

Төрлө бөжәктәр, уларҙың тышҡы ҡиәфәттәре, тауыштары тураһында төшөнсәләр биреү (күбәләк, ҡуңыҙ, ҡырмыҫҡа, бал ҡорто, сиңерткә). Уларҙы кәүҙә төҙөлөшө (ҡанаты бар, юҡ), хәрәкәтләнеүе (шыуыша, оса, һикерә), йәшәгән урыны (һыуҙа, ерҙә) һ.б. билдәләре буйынса сағыштырыу.

Тәлмәрйен менән таныштырыу, уның тышҡы ҡиәфәте, кәүҙәһенең төҙөлөшө, аяҡ остарының төҙөлөшө, уларҙың ерҙә һәм һыуҙа хәрәкәтләнеүгә яраҡлашыуын төшөндөрөү.

Быуа, күл, йылға – йәнлектәрҙең һәм үҫемлектәрҙең йәшәү урыны икәнлеге, Башҡортостандың ҙур күлдәре, йылғалары, унда йәшәгән йәнлектәр, балыҡтар менән таныштырыу.

Балаға күк есемдәре (ҡояш, ай, йондоҙҙар) һәм башҡа күренештәр тураһында аңлатыуҙы дауам итеү *(ҡояш ҡалҡыу, байыу, таң атыу, йондоҙ атылыу һ.б.).* Ҡояштың ер йөҙөнә яҡтылыҡ, йылылыҡ биреүе һәм тормош сығанағы булып тороуы хаҡында аңлатыу. Миҙгел байрамдары: «Науруз», «Нардуған», «Ҡарға бутҡаһы» һ.б.

Һауа торошон билдәләй һәм аңлата белергә өйрәтеү. Һауа торошо тураһында халыҡ һынамыштары менән таныштырыу.

Йыл миҙгелдәренең үҙгәреүе кешегә, үҫемлеккә, йәнлектәр донъяһына тәьҫире итеүе тураһында белешмә биреү.

Миҙгел билдәләрен асыҡлауҙы камиллаштырыу.

**Көҙ:** һалҡынайта, йыш ҡына быҫҡаҡлап ямғыр яуа. Күктә ҡара ауыр болоттар ағыла. Үтә һуғып торған ел иҫә. Япраҡ ҡойола. Кешеләр баҡсала һәм яланда уңыш йыя.

**Ҡыш:** ҡар яуа, буран сыға. Көндәр һалҡын тора. Йылғалар боҙ менән ҡаплана. Көндәр ҡыҫҡа. Кешеләр йылы кейемдәрен кейә.

**Яҙ:** ҡояш ерҙе йылыта, яҡтырта. Ҡар ирей. Йылғалар боҙҙан асыла. Үләндәр үҫә башлай. Ағастар япраҡ яра, сәскәләр сыға. Бөжәктәр уяна. Ҡоштар йылы яҡтан ҡайта. Кешеләр йылы кейемдәрен сисә.

**Йәй:** күк йөҙө аяҙ, сыуаҡ. Ҡояш ҡыҙҙыра. Йылы ямғырҙар яуа, күк күкрәй. Үҫемлектәр шаулап үҫә. Йылғала һыу йылына, кешеләр һыу инәләр, балыҡ тоталар, еләк-емеш йыялар.

**«ТЕЛМӘР ҮҪЕШЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Телмәр үҫтереү

**Телмәрүҫтереүсемөхит.**Тирә-йүндәге күренештәрҙе, предметтарҙы өйрәнеүҙе, үҙләштереүҙе тәрәнәйтеү аша балаларҙың һүҙ байлығын арттырыу.

Телмәр үҫтереүгә ярҙам итеүсе шарттар булдырыу: төркөмдә китапхана мөйөшө ойоштороу; өҫтәлмә мәғлүмәттәр алырлыҡ төрлө ҡыҙыҡлы әйберҙәр (глобус, карталар, ер шарындағы төрлө хайуандар, йәнлектәр, үҫемлектәр, бөжәктәр, транспорт төрҙәре, тәбиғәт ҡомартҡылары һүрәтләнгә фотолар, журналдар, төрлө халыҡтың милли кейемдәре, эш ҡоралдары, һүрәттәр менән биҙәлгән һүҙлектәр, белешмәләр йыйынтығы һ.б.) урынлаштырылған мөйөш; тикшереү-эксперимент үткәреү мөйөшө ойоштороу.

Аралашҡанда бер-береһе менән ыңғай мөнәсәбәттә булырға өйрәтеү, «тылсымлы һүҙҙәр»ҙе ҡулланырға күнектереү.

Баланы ҡыҙыҡһындырған күренештәрҙең айышына төшөнөргә, төрлө һорауҙарын яуапһыҙ ҡалдырмаҫҡа тырышып, ярҙам итеү.

**Һүҙлек эше.** Һүҙлеккә яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр индереү (исем, сифат, ҡылым, рәүеш, алмаш, һан һ.б.).

Һүрәттән һәм ысынбарлыҡтан кейем-һалым (күлдәк, бүрек, яулыҡ, түбәтәй һ.б.), уйынсыҡ (ҡурсаҡ, айыуҡай, ат, туп, бесәй, ҡуян, һ.б.), һаут-һаба (сәйнүк, сынаяҡ, ҡалаҡ, тәрилкә, самауыр һ.б.), йәшелсә (ҡыяр, кишер, һуған һ.б.), еләк-емеш (алма, сейә, еләк һ.б.), бүлмә йыһаздары-өҫтәл, ултырғыс, карауат, һике һ.б.; ауыл, ҡала йорттары айырмаһын (ҙур, бейек һ.б.);

ғаилә ағзалары һәм яҡын кешеләренең (атай, әсәй, ҡусты, һеңле, апай, ағай, олатай, өләсәй, ҡартатай) нисек аталыуын;

кеше кәүҙәһе өлөштәре (кеше, ҡул, аяҡ, баш, бармаҡтар);

предметтарҙың сифаттары: төҫтәре (ҡыҙыл, күк, йәшел, аҡ, ҡара); сифаты, дәүмәле (ҙур, бәләкәй, бейек, тәпәш, таҙа, бысыраҡ); миҡдары (әҙ, күп, әҙерәк, күберәк); бер, ике, өс һандары төшөнсәләрен;

көнкүреш һөм уйын хәрәкәттәрен аңлаткан (йыу(-а, -алар, -ҙы, -ына), аша (-а, -й, -ҙар), эс (-ә, -ләр), кей (-ә, -ен, -әләр) сис (-ә, -енә, -ендек, -енделәр), йоҡлай, йөрөй, ултыра, атлай, ята, кил, баҫ, бир, мә, ал, тор, алып бир, һәм башҡа хәҙерге һәм үткән заман ҡылымдары, уларға күплек ялғауҙары ҡушыуҙы: (йыуҙы (-лар), ашаны (-лар);

балаларҙың үҙ-үҙҙәрен нисек тотарға кәрәклеген аңлата торған һүҙҙәр: ярай, ярамай, кәрәк, кәрәкмәй, яҡшы, насар, теймә, ташла, алма, тапама, түкмә һәм башҡалар;

предметтың урынын билдәләй белеү *(уңда, һулда, арала, эргәлә, янында, тегендә, бында*); тәүлек ваҡытын *(иртә, кис, төш, төн, кис, таң);*кешенең кәйеф торошон билдәләүсе *(асыулы, күңелһеҙ, шат, бойоҡ);* һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөндөрөү;

телмәрҙә предметтарҙың өлөшөн, сифатын, ниндәй материалдан эшләнгәнде аңлатҡан һүҙҙәрҙе, кеше һөнәрҙәре һәм улар башҡарған эш-хәрәкәтте аңлатыусы һүҙҙәрҙе ҡулланырға өйрәтеү;

Телмәрҙә дөйөмләштереүсе һүҙҙәрҙән һуң тиң киҫәктәрҙе теҙә белеү (мал-тыуар: *һарыҡ, кәзә, ат, һыйыр, тана, үгеҙ, быҙау, бейә, айғыр, ҡолон* һ.б.;кейем-һалым: *башлыҡ, бүрек, кәпәс, ҡолаҡсын, шәл, яулыҡ, пальто, тун, быйма, итек, калуш, бейәләй һ.б.).*

Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәрҙе аңлы рәүештә ҡулланырға өйрәтеү: *йыуан-нәҙек, таҙа-бысраҡ, төҙ-ҡыйыш, ҡаты-йомшаҡ.*

Бер үк төрлө әйтелгән, ләкин төрлө мәғәнә аңлатҡан һүҙҙәр менән таныштырыу: *май, баҫма, тартма, ҡала.*

**Өндәр өҫтөндә эш.**

Башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү өҫтөндә даими эш алып барыу. Өндәр әйтелеше ирен, тел һәм тештәрҙең торошона бәйле булыуын аңлатыу һәм күрһәтеү.

Башҡорт теленең үҙенсәлекле һуҙынҡы (ә,ө,ү) һәм тартынҡы (ҫ,һ,ҙ, ғ,ң, ҡ) өндәрен дөрөҫ әйтергә күнегеүҙәр үткәреү.

Кескәйҙәрҙең телмәр аппаратын (ирендәр, тештәр, тел, тамаҡ) төрлө позицияларға ҡуйып, күнегеүҙәр үткәреү, уларҙы дөрөҫ итеп тын алырға өйрәтеү, тынды кәрәгенсә сығара белергә өйрәтеү.

Тауыш менән идара итә белергә өйрәтеү.

Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылыарҙың айырмаһын ишетә, айыра белеүҙе, уларҙың әйтелешен үҙләштереүҙе нығытыу. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең әйтелешен нығытыу. Өндөң һүҙҙә урынын билдәләргә өйрәтеү (башында, аҙағында).

Рус теленән ингән *ц, ч, ш, щ* өндәренең әйтелешен үҙләштереү һәм нығытыу.

**Телмәрҙең грамматик яҡтан төҙөлөшөн үҙләштереү.**

Эйәлек заты ялғауын дөрөҫ ҡулланыуҙы үҙләштереү: минең әсәйем (ҡурсағым, ҡалағым, бармағым һ.б.).

Ҡыҙыл туп, татыу ғаилә, тәпәш тәрилкә, һ.б. ошоларға оҡшаш һүҙбәйләнештәрҙә исемдәрҙең сифатын аңлаткан һүҙҙәрҙе мәғәнәһе буйынса дөрөҫ ҡуллана белергә өйрәтеү.

Эйә менән хәбәрҙе яраштыра белеү: мин уйнайым, ашайым, ҡоям, бирәм һ.б. Мин әсәйемде яратам (атайымды, ағайымды, өләсәйемде, ҡурсағымды, бесәйемде һ.б.)

Күплек ялғауҙарының яңғырашына һәм дөрөҫ ҡулланышына иғтибар йүнәлтеү.

Ябай ғына һүҙъяһалыш ысулдары менән таныштырыу: ҡурай - ҡурай – сы (һүҙ яһаусы ялғау ярҙамында); билбау, Аҡъяр (һүҙҙәрҙе ҡушып; матур-матур (һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән).

**Бәйләнешле телмәр үҫтереү.**

Балаларҙы ябай һәм ҡушма һөйләмдәр ярҙамында әйтелгән үтенестәрҙе аңларға һәм үтәргә өйрәтеү: *Зифаға ҡурсағыңды биреп тор, уның да уйнағыһы килә. Гүзәлгә ярҙам ит, ул бәләкәй генә әле.*

«Мин, һин, беҙ, һеҙ, ул, улар» алмаштарының һәм «Унда, бында, аҫта, өҫтә» рәүештәренең мәғнәләрен аңлы рәүештә һөйләмдә ҡуллана белергә өйрәтеү.

Балаларҙы уларҙың үҙҙәре күҙәткән, күргән ваҡиғалар хаҡында һәм шулай уҡ сюжетлы һүрәттәр буйынса өлкәндәрҙең хеҙмәте тураһында ябай ғына хикәйә төҙөргә өйрәтеү.

Телмәрҙә 3-4 һүҙле һөйләмдәр ҡуллана, алмаштар, сифаттар, рәүештәр һәм һандар индереп, һөйләмдәр төҙөй белергә өйрәтеү.

Диалогик телмәр үҫтереү өҫтөндә даими рәүештә эш алып барыу.

Уйынсыҡтар менән бер-ике күренештән торған кескәй генә әҫәрҙе, йә уның өҙөгөн уйнарға өйрәтеү.

Балаларҙы нәфис әҙәбиәт һәм ауыҙ-тел ижады өлгөләре менән таныштырыу.

Уйынсыҡтар йәки һүрәттәр ярҙамында еңел аңлашыла торған, бәләкәй күләмле хикәйәләрҙе, шиғырҙарҙы, әкиәттәрҙе тыңларға һәм уларҙың йөкмәткеһен аңларға күнектереү, яттан һөйләргә өйрәтеү.

**НӘФИС ӘҘӘБИӘТ**

Балаларҙы уҡыған әҫәрҙе иғтибар менән тыңларға, уның эстәлегенә төшөнөргә, сюжетҡа ҡарап, үҙенең хис-тойғоларын һүҙҙәр ярҙамында аңлата белергә өйрәтеү.

Әҫәрҙең ҡыҙыҡлы урындарынан өҙөктәрҙе һайлап алып, уларҙы ҡат-ҡат уҡып сығыу, балаларҙың үҙҙәренән уның йөкмәткеһен ҡабатлап һөйләтеү.

Һүҙҙәрҙең матур әйтелешенә, уларҙың аңлатҡан мәғәнәһенең тәрәнлегенә балаларҙың иғтибарын йәлеп итеү.

Китапҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләүҙе дауам итеү, таныш әҫәрҙәр эстәлегенең һүрәттәр аша асылышын төшөндөрөү. Китап ҡарағанда уны биҙәгән рәссамдар менән таныштырыу.

### «ХУДОЖЕСТВОЛЫ-ЭСТЕТИК ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

## Сәнғәт төрҙәре менән таныштырыу

Балаларҙа сәнғәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыуҙы дауам итеү, халыҡ сәнғәте әҫәрҙәре менән таныштырыу (биҙәнеү әйберҙәре, һүрәттәр, йорт йыһаздары, көнкүреш предметтары һ.б.), музыка әҫәрҙәрен тыңлатыу аша уларҙа төрлө хис-тойғолар тыуҙырыуға ынтылыу.

Артист, рәссам, композитор һөнәрҙәре менән таныштырыу. Башҡортостан Республикаһының арҙаҡлы сәнғәт оҫталары менән таныштырыу (Арыҫлан Мөбәрәков, Хөрмәтулла Үтәшев, Камиль Вәлиев, Хөсәйен Әхмәтов, Рудольф Нуриев, Әхмәт Лотфуллин һ.б.)

Әҙәби, музыка әҫәрендә, һүрәттә тасуирланған образдарҙа таныш предметтарҙы, күренештәрҙе таный белеү.

Ҡурсаҡ театрына, һынлы сәнғәт күргәҙмәләренә йөрөргә күнектереү.

Сәнғәт төрҙәрен һәм жанрҙарын билдәләй белергә өйрәтеү: әҙәби әҫәрҙә: шиғыр, сәсмә әҫәр, йомаҡ һ.б.; йыр, бейеү, музыка, һүрәт (репродукция), скульптура (һынлы сәнғәт), бина һәм ҡоролмалар (архитектура).

Тасуирлауҙың төп төрҙәрен айырырға һәм атарға өйрәтеү (төҫ, форма, дәүмәл, ритм, хәрәкәт, ым-ишара, тауыш).

Архитектура менән таныштырыу. Балалар баҡсаһы, мәктәп, өйҙәр – бөтәһе лә архитектура ҡоролмалары. Балаларға биналарҙы ҡарап, уларҙың өлөштәрен айырып, формаһын, урынлашҡан урынын әйтергә өйрәтеү. Йорттарҙың айырмаһын һәм оҡшашлығын билдәләү.

Балаларҙың һүрәттә, әүәләүҙә, йәбештереүҙә ысынбарлыҡтағы йәки әкиәт донъяһындағы ҡоролмаларҙы һүрәтләүен хуплау.

Музейға ата-әсәләр менән берлектә экскурсия ойоштороу. Музей тураһында мәғлүмәттәр биреү, унда үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырыу.

Китапхана менән таныштырыу, уның сәнғәттә тотҡан урыны – шағирҙар һәм яҙыусылар ижад иткән китаптар йыйыла һәм кешеләргә уларҙы уҡый алыу мөмкинлеген бирә. Китапханала үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырыу.

Халыҡ сәнғәте менән таныштырыу (ауыҙ-тел ижады, халыҡ йырҙары, ҡурай моңо, көнкүреш һәм биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәре, йорт-ҡура йыһаздары, һауыт-һаба өлгөләре һ.б.).

Балаларҙы төркөм бүлмәләренең һәм балалар баҡсаһы бинаһы эсенең нисек йыһазландырылыуы менән таныштырыу.

Балаларҙа сәнғәт әҫәрҙәренә ҡарата һаҡсыл булыу сифаттарын тәрбиәләү.

## ҺЫНЛЫ СӘНҒӘТ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

Һынлы сәнғәткә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Ҡәләм, буяу (гуашь), фломастер, төҫлө аҡбур, ҡом  һ.б. ҡулланып, төрлө предметтарҙы һәм күренештәрҙе һүрәтләү мөмкин икәнлекте аңлатыу.

Рәсем төшөрөүгә, ҡорамалар йәбештереүгә, балсыҡтан төрлө әйберҙәр әүәләүгә теләк, ынтылыш уятыу.

Предметтарҙы тикшереп ҡарарға, ҡулдар ярҙамында ниндәй образдар тыуҙырып була алғанлығын күҙаллап, күрһәтергә өйрәтеү. Төрлө формалағы, төҫтәге, дәүмәлдәге предметтарҙы эстетик яҡтан дөрөҫ ҡабул итергә өйрәтеү. Шул предметтарға оҡшатып эште нисек башҡарыу кәрәклеген балаларға алдан планлаштырырға өйрәтеү. Уларға эштең үтәлеү ысулын күрһәтеп, тәүҙә балалар менән бергә, аҙаҡ – уларҙан үҙ-аллы был эште башҡартыу.

Коллектив эштәр башҡарырға өйрәтеү.

**Предметлы һүрәт төшөрөү.**Тасуири образ тыуҙырыу өсөн төҫтәрҙе һәм уларҙың сағылышын дөрөҫ ҡуллана, аҡ һәм ҡара буяуҙы ҡушып, төҫтәрҙең тон ҡуйылығын үҙгәртеү.

Контурҙан сыҡмай, асыҡ урын ҡалдырмай, һүрәттәрҙе буяй, буманың бөтә яҫылығын ҡулланып, киң һыҙыҡтар, ә осо менән нөктә һәм нәҙек һыҙыҡтар үткәрә белеү тәжрибәһе биреү.

Бер нисә өлөштән торған түңәрәк, дүртмөйөш, өсмөйөш формаһындағы предметтарҙы яҫылыҡта урынлашҡан урындарын билдәләп (өҫтә, аҫта, уңда, һулда) төшөрә белеү.

Бер һыҙыҡ кимәлендә бер-бер артлы 2-3 предметты төшөрә белеү: себештәр урамда йөрөй.

Төшөрөлгән һүрәттең формаһын һәм уның яҫылыҡта урынлашҡан урынын дөрөҫ күрһәтеү ниәтендә ҡағыҙ битенең торошон һайлай белеү.

Балаларға рәсемдең төп мәғәнәһен аңлатҡан өлөшө ҡағыҙ битенең уртаһында урынлаштырылыуын һәм уның һүрәттәге башҡа предметтарҙан ҙурлығы менән айырылыуын аңлатыу һәм һүрәт төшөргәндә был ҡағиҙәне ҡуллана белергә өйрәтеү.

**Декоратив рәсем төшөрөү.** Биҙәк элементтарын халыҡ орнаменты мотивтары менән төшөрә белеү (рустарҙың – мазки, нөктә, тура һыҙыҡтар, дуға һ.б., башҡорттарҙың – ҡусҡар, кәкерсә, ромб, әүернә).Төрлө биҙәктәрҙе киң таҫмала (ҡашмау, һарыуыс), квадрат эсендә (келәм, балаҫ), дүртмөйөштә (алъяпҡыс, ашъяулыҡ) һ.б. төшөрөү.

Рус халыҡ биҙәктәре (дымка, филимон, городец) менән таныштырыу. Дымка һәм филимон биҙәктәрен ҡулланып, сюжетлы композиция төҙөргә өйрәтеү. Дымка һәм филимон биҙәктәре аша зауыҡлыҡты һәм матурлыҡты күрә белеү һәләтен үҫтереү, был биҙәктәрҙе өлгө өсөн ҡулланыу (өлгө өсөн балаларҙың элек әүәләп һәм ҡырҡып эшләнгән уйынсыҡтарын ҡулланырға була).

Горордец биҙәктәре менән таныштырыу. Городец биҙәгенең төҫөн күрә һәм уның элементтарын айыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү, төшөрөлгән һүрәттәрҙә городец биҙәктәрен ҡулланыу.

**Әүәләү.** Балсыҡты тәгәрәтеп йомарлау, бармаҡ батырып соҡоу, йәйеп баҫыу, бармаҡ остары менән ҡыҫып йәмшәйтеү, йоҡартыу, семтеп ситтәрен бөгөү, балдаҡ һымаҡ бөгөү, бармаҡ менән төп деталдән тартып, семтеп сығарып, өҫтәлмә деталдәр эшләү, һылау, һыйпау ысулдарына өйрәтеү.

Төрлө ысулдар менән түңәрәк һәм оҙонса түңәрәк формалы (еләк-емеш, йәшелсәләр, балыҡтар, ҡоштар), конус формалы (сысҡан, кишер), тумалаҡ форманы бармаҡ батырып соҡоп, эсен ҡыуыш итеп (сынаяҡ, тәпән), йәлпәштерелгән түңәрәктең ситен бөгөп (сынаяҡ аҫты, тәрилкә), ике өлөштө бергә йәбештереп һылап ҡуйыу юлы менән (сынаяҡ тотҡаһы, сәйнүк мороно) эшләй белеү.

Халыҡ уйынсыҡтары өлгөһө буйынса эшләй белеү: тәпән, тырыз, туҫтаҡ һәм башҡа һауыт-һаба, муйынсаҡтар, беләҙектәр, ҡатлы-ҡатлы рус ағас ҡурсаҡтары, дымка әтәстәре, кәзәләре һ.б. һәм уларҙы стека ярҙамында, йә өҫтөнә йәбештереү ысулы менән биҙәү.

Бер нисә предметтан торған (төрлө ҙурлыҡтағы һәм формалағы) композицияны бергәләп эшләргә өйрәтеү.

**Йәбештереү.**Ҡайсыны дөрөҫ тотоп, уның менән эш итә белеү, тар һәм киң таҫмаларҙы – бер үк хәрәкәтттәр менән, квадратты диагональ буйынса һәм ҡыя һыҙыҡлап киҫә белеү; түңәрәкте, квадраттың, оҙонса түңәрәктең, дүртмөйөштөң остарын (мөйөштәрен) түңәрәкләтеп ҡырҡыу.

Бер нисә өлөштән торған предметтарҙы йыйып, йәбештерә белеү.

Бер үк йәки бер нисә төрлө геометрик элементтарҙы ҡулланып, киң таҫмала, квадратта, таныш әйберҙәрҙең силуэты эсендә биҙәк, орнамент төҙөп, йәбештерә белеү.

**ҠОРОЛМАЛАР ҠОРОУ ҺӘМ МОДЕЛЛӘШТЕРЕҮ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ**

Төҙөү-ҡороуҙы башҡарғанда конструкцияның деталдәрен белеү: кубик, кирбес, призма, пластина, брус. Мәҫәлән: брус – дүрт ҡырлы итеп юнылған ағас. Уларҙы таный, әйтә белеү: конструктив үҙсәнлектәренә (тотороҡлоғона, һығылмалығына, йомшаҡлығына, ныҡлығына, формаһына, ҙурлығына) ҡарап, уларҙы ҡуллана белеү.

Төҙөү объекттары тураһында дөйөмләштерелгән төшөнсәләр формалаштырыу.

Төрлө күләмдәге, бейеклектәге, төҫтәге ябай ғына бер нисә ҡоролма төҙөү, дөйөм яҡтарын һәм айырмаһын табып, уларҙы сағыштыра белеү.

Өлгөһөҙ, тәрбиәсенең тәкдимдәре, йә билдәле шарт буйынса, ҡоролманың моделен күҙаллай һәм төҙөй белеү, уйынсыҡтарҙың ҙурлығына, бейеклегенә ҡарап, уларҙан төрлө конструкцияларһәм ҡоролмалар төҙә белеү.

Ижади эшкә әҙерлек: үҙ-аллы тема, материал һайлап ала белеү, төрлө ҡоролмаларҙың айырым деталдәрен һәм предметты алмаштырған әйберҙәрҙе ҡулланыу күнекмәләренә өйрәтеү.

Икәүләп һәм күмәкләп эшләү күнекмәләрен үҫтереү.

Тәбиғи материалдарҙың үҙсәнлектәрен белеү һәм, уларҙы (ағас ҡайыры, ботағы, япраҡтары, тубырсыҡтар, сәтләүек ҡабығы, мүк һ.б.) бер-береһенә йәбештереп, төрлө предметтар эшләү.

Ҡағыҙ менән эшләүҙең төрлө ысулдарын үҙләштереү (бөтәрләү, йыртыу, бөкләү,төрлө ҙурлыҡтағы һәм төҫтәге йомарлаҡтар һ.б. эшләү), дүртмөйөштө мөйөштәрен һәм ситтәрен тап килтереп, уртаға бөкләп (автобус, байраҡ, өй, гараж һ.б.) эшләү.

**МУЗЫКАЛЬ ТӘРБИӘ**

Музыкаға һөйөү тәрбиәләүҙе дауам итеү, уны тыңларға теләк, ынтылыш тәрбиәләү, музыканан алған хис-тойғоно һәм тәьҫораттарҙы байытыу, музыкаль яҡтан мәҙәнилекте үҫтереү.

**Тыңлау.** Көйҙө иғтибар һәм ҡыҙыҡһыныу менән тыңларға, уның характерын тойорға өйрәтеү. Көйө буйынса йырҙы, пьесаны таный белеү. Өндәрҙе юғарылығы буйынса айыра белеү (секта, септима).

Башҡорт музыка ҡоралдары – ҡурай һәм ҡумыҙ менән яҡындан танышыу, уларҙа башҡарылған көйҙәрҙе тыңлау, характерҙары буйынса айыра белергә өйрәтеү. Башҡорт халыҡ йырҙарын тыңлау, улар тураһында ҡыҫҡаса төшөнсә биреү.

**Йырлау.** Йырҙы көсәнмәй, тасуири, етеҙ һәм моңло итеп йырларға, тынды фразалар араһында алырға, һүҙҙәрҙе асыҡ әйтергә, көйҙөң мелодияһын дөрөҫ тапшырырға өйрәтеү.

Йырҙы берҙәм башларға һәм тамамларға өйрәтеү, музыка инструменты менән бергәләп йәки яңғыҙ йырлау.

**Йыр ижады.**Бишек йырына көйҙө үҙ-аллы уйлап сығарып, ижад итә белергә өйрәтеү. Йырлап бирелгән һорауҙарға («Һинең исемең нисек?», «Бесәй, һиңә ни кәрәк?», «Һин ҡайҙа?») яуап бирергә өйрәтеү. Бирелгән текстҡа импровизация менән көй сығарыу һәләтен формалаштырыу.

**Музыкаль-ритмик хәрәкәттәр.** Балаларҙы көйҙөң характерына ярашлы хәрәкәт итергә өйрәтеү, ике һәм өс өлөштән торған көйгә ҡарап, хәрәкәттәрҙе үҙ-аллы үҙгәртә белергә өйрәтеү.

Бейеү хәрәкәттәрен башҡара белеү: аяҡтарҙы алмаш-тилмәш аяҡ осона һәм үксәгә ҡуйыу, ике аяҡты бергә ҡуйып, тубыҡтарҙы ҡыҫып, торған урында әҙ генә бер нисә тапҡыр эйелеү («пружинка»); яңғыҙ һәм парлашып әйләнеү; парлашып түңәрәктә йөрөү; ат булып сабыу; түңәрәктән сығып таралышыу һәм кире түңәрәккә тора белеү; аяҡтарҙы бер-бер артлы алмаштырып баҫып, аҙымдар яһау һәм тыпырлау; предметтар менән хәрәкәттәр башҡарыу; аяҡтан-аяҡҡа һикереү.

**Музыкаль-уйын һәм бейеү ижады.** Уйынлы образдарҙы тасуири итеп күрһәтергә өйрәтеү (япраҡ өйөрөлә, ҡар яуа). Йырҙарҙы уйнап хәрәкәтләнеп башҡарыу һәм сәхнәләштерә белеү (шаян ҡуян, хәйләкәр төлкө, уҫал бүре һ.б.).

**Музыкаль ҡоралдарҙа уйнау.** Ябай көйҙәрҙе ағас ҡалаҡта, шалтырауыҡта, дөңгөрҙә, металлафонда ябай көйҙәрҙе уйнарға өйрәтеү. Ҡурайға, ҡумыҙға ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу.

### «ФИЗИК ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

## Сәләмәт тормош тураһында башланғыс төшөнсә биреү

Медицина хеҙмәткәрҙәре етәкселегендә тәбиғи факторҙар ҡулланып, сыныҡтырыу саралары үткәреү.

Көн һайын 6-8 минутлыҡ иртәнге гимнастика үткәреү.

Йыл миҙгеленә ярашлы төрлө хәрәкәтле һәи спорт уйындары үткәреү (ҡышын – санала, саңғыла шыуыу, боҙ юлдан аяҡ өҫтөндә йәки ултырып шыуыу; йәйен – велосипедта, самокатта йөрөү). Мөмкинлеккә ҡарап, йөҙөргә өйрәтеү.

Айына 1 тапҡыр 20 минутлыҡ физкультура буйынса күңел асыуҙар, йылына 2 тапҡыр (йәй һәм ҡыш) 45 минутлыҡ физкультура байрамдары үткәреү.

## Физик культура

Хәрәкәтләнеүҙең төрлө төрҙәрен дөрөҫ башҡарыуҙы нығытыу. Хәрәкәттәрҙе башҡарғанда уларҙың матурлығын, мәғәнәлеген, тасиурлығын, һомғоллоғон сағылдырыуға иғтибар биреү.

Кәүҙәнең дөрөҫ торошон формалаштырыу.

Аяҡ һәм ҡул хәрәкәттәрен бер-береһенә тап килтереп атлау, йүгереү күнекмәләрен камиллаштырыу.

Аяҡ осона, үксәгә баҫып атлауҙы нығытыу.

Темпты, йүнәлеште үҙгәртеп, тубыҡтарҙы юғары күтәреп йүгерергә өйрәтеү.

Шыуышыу һәм үрмәләүҙең төрлө төрҙәрен (имгәкләп, шыуышып, эскәмйә буйлап) нығытыу.

Гимнастика стенкаһының әле бер яғына, әле икенсе яғына күсеп, үрмәләргә өйрәтеү.

Һикереү, ҡом тултырылған тоҡсай ырғытыу, сәпкә бәреү, тупты тотоп алыу төрҙәрен нығытыу.

Тигеҙлек һаҡлауҙы нығытыуға айырыуса иғтибар итеү.

Сафҡа теҙелеү буйынса күнегеүҙәр башҡарыуға, колоннаға берәрләп, икешәрләп, өсәрләп теҙелергә, төрлө яҡҡа боролорға өйрәтеү.

Хәрәкәтле, спорт, халыҡ уйындары менән таныштырыу.

**Хәрәкәтле уйындар.** Туптар, һикергестәр, ҡоршауҙар һ.б. менән уйындар үткәреп, әүҙем хәрәкәтләнеүҙе үҫтереү.

Тирә-йүндә йүнәлеш билдәләүҙе, үҙ-аллылыҡты, осҡорлоҡто, зирәклекте, ижади һәләтлекте үҫтереүгә уйындар үткәреү.

Ололар әйтеүен көтмәй, уйында ҡағиҙәләрҙе үҙ-аллы үтәй белеүгә ғәҙәтләндереү.

## 5 йәштән 6 йәшкә тиклемге балаларға белем биреү эшмәкәрлеге йөкмәткеһе.

## (Өлкәндәр төркөмө)

Был йәш балаларының аң-зиһен кимәле, әхлаҡи-рухи һәм эмоциональ яҡтан үҫеше әүҙемләшә. Шәхси үҫештә һәм эшмәкәрлектә яңы һыҙаттар барлыҡҡа килә. Баланың үҙе күҙәтмәгән, күрмәгән предметтар һәм күрешентәр тураһындағы белеме арта, киңәйә; төрлө предметтар һәм күренештәр араһындағы үҙ-ара бәйләнеш баланы әүҙем ҡыҙыҡһындыра башлай һәм уларҙың айышына төшөнөргә уның тырышыуы арта.

Биш йәшлек баланың психологик яҡтан да үҙ-үҙен баһалауы үҙгәрә: ул үҙен башҡа балалар араһында иң ҙурҙар рәтендә тип тоя башлай. Ололар уға үҙенең был торошона төшөнөргә, аңларға ярҙам итәләр һәм тағы ла ҡатмарлыраҡ бурыстарға ирешеүенә булышалар, уға яңынан-яңы үҙе сисәрлек ҡаршылыҡтар ҡуйып, булған белемен ҡулланыу һәм һынау маҡсатында төрлө осраҡтар тыуҙыралар. Ныҡышмалылыҡ, башланған эште аҙағына еткерә белеү һәләтен үҫтерәләр.

Үҙ-аллылыҡ тәрбиәләүҙә баланың үҙенә ҡуйған маҡсаты йәки ололар ҡушҡан эште үтәү ысулын алдан уйлау һәм башҡарған эшенең һөҙөмтәһен баһалай белеү һәләте ярҙам итә. Үҙ-аллылыҡтың юғары формаһы булып бирелгән эште ижади рәүештә үтәү тора. Тәрбиәсе балаларҙың һәр төр эшмәкәрлегендә ошо маҡсатҡа ирешеүҙе төп бурыс итеп ҡуя, сөнки бала үҙе теләп, үҙе уйынса эш итһә, ул эшләнгән эшенән ләззәт, ҡыуаныс кисерә һәм тағы ла әүҙемерәк булырға тырыша.

Өлкәндәр балаларҙың аң-белемгә булған ынтылышын һәм ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндереү өсөн бөтә шарттарҙы ла тыуҙырырға тейештәр: проблемалы осраҡтар булдырып, уны сисеү ысулын эҙләүҙе ойоштороу, ябай ғына тәжрибәләр үткәреп, үҙ-аллы һығымта яһатыу (һыу, ҡар, һауа, магнит, ҙурайтып күрһәтеүсе быялалар һ.б. менән), үҫтереүсе уйындар уйнатыу, башватҡыстар систереү, үҙ-аллы уйынсыҡтар эшләтеү, төрлө схемалар, моделдәр, символдар уйлап сығарыу һ.б.

Был йәштәге балалар мәктәптә уҡыуға ҡыҙыҡһыныу күрһәтә башлайҙар. Был ҡыҙыҡһыныуҙың үҫешенә тәрбиәсе үҙе ярҙам итә: мәктәп темаһына сюжетлы-ролле уйындар ойоштороу, төрлө ҡыҙыҡлы китаптар менән таныштырыу, уҡыусылар менән бергәләп уйындар, күңел асыуҙар, экскурсиялар ойоштора. Баланың мәктәпкә булған ынтылышын үҫтерә, нығыта.

Хәтер, күҙаллау, иғтибарлыҡ, үҙ-аллылыҡ һыҙаттары үҫтереүгә төрлө күнегеүҙәр, уйындар үткәрә. Балаға үҙ эш-хәрәкәтенә баһа бирә белергә, тырышлыҡ, ныҡышмалыҡ күрһәтергә өйрәтә.

Махсус ойошторолған дәрестәр күбеһенсә бөтә төркөм балалары менән уҙғарыла һәм күнегеүҙәр башҡарыуға улар төркөмсәләргә бүленә. Һәр эшмәкәрлектә балаларға үҙ-аллылыҡ, үҙенсә уйлап таба алыу мөмкинлеге, ижадилыҡ биреү кәрәк, сөнки улар баланың зиһенен, аҡылын үҫтерә, уй-фекерен киңәйтә, ҡыҙыҡһыныуын, яңы асыштарға ынтылыуын һүндермәй.

Балаларҙың үҙ-ара һәм өлкәндәр менән аралаша белеү тәжрибәһен туплауға был йәштә айырыуса ныҡ әһәмиәт бирелә. Тәрбиәсенең был осорҙа уйнаған роле үтә лә ҙур: ул үҙ тәжрибәһе менән туранан-тура үҙе башҡарып, күрһәтеп уртаҡлаша: яңы белем, эш башҡарыу ысулдарына өйрәтә. Шул уҡ ваҡытта ул балалар менән бергәләп, кәңәшләшеп, һәр береһенең фекеренә ҡолаҡ һалып, уларҙың бергә эш-хәл итә белеү мөмкинлеген үҫтереп, хеҙмәттәш булараҡ эш итә. Хатта тәрбиәсе

балаларҙан «ярҙам» да һораусы оло кеше ролен үтәгән булып, уларға асылырға, үҙҙәренең булған белем-мәғлүмәттәренә таянып, эш-хәрәкәт башҡарғанда төрлө ысулдар ҡулланырға мәжбүр итә.

Был йәштә баланың үҙ-аңы үҫешә һәм ул уның үҙенең һәм башҡаларҙың башҡарған эшенә, ҡылыҡ-холоҡ сағылышына дөрөҫ баһа биреүе менән билдәләнә. Баланың үҙе башҡарған ҡырын эштәрҙе йәки үҙ-үҙен дөрөҫ тотмау осраҡтарын танып, ололар ярҙамында уларҙы төҙәтергә ынтылыуы – уның холҡонда, тәртибендә яҡшы һыҙаттар тәрбиәләүҙә беренсе урын алып тора.

Баланың тәртибе, үҙ-үҙен тотоуы уның үҙе тураһындағы төшөнсәләренә бәйле була. Үҙенең «мин-минлеген» дөрөҫ ҡабул итеп, яҡшыраҡ, матурыраҡ, өлгөрөрәк, зирәгерәк булырға тырышыуы балаға һәр эшмәкәрлектә уңышлы булырға, яңы дуҫтар-иптәштәр табырға, аралашҡанда дөрөҫ ҡарар ҡабул итергә ярҙам итә.

**«СОЦИАЛЬ-КОММУНИКАТИВ ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Йәмғиәттә йәшәй белеү күнекмәләрен үҙләштереү, аралашыуҙың үҫеше һәм әхләҡи тәрбиә

Баланың үҙе тураһындағы төшөнсәләрен әүҙем үҫтереү. Үҙенең хис-тойғоларын һиҙемләп, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү.

Тиҫтерҙәре араһында үҙ урынын табырға, үҙенең «мин-минлеген» иҫбатларға, башҡаларҙан үҙенең нимә менән айырылыуын һәм оҡшашлығын табырға ярҙам итеүсе саралар үткәреү.

Башҡаларҙың үҙен ҡабул итеүе, дөрөҫ мөнәсәбәттә ихтирамлы, хөрмәтле булыуы - уның үҙенең тәртибенә, холоҡ-ҡылығына, әйткән һүҙҙәренә бәйле икәнлекте төшөндөрөү.

Социаль яҡтан шәхси үҫештә хис-тойғоноң тотҡан урынын төшөндөрөү. Был эште өс йүнәлештә үткәреү:

1. «Мин башҡалар араһында» - балаға үҙ-үҙен асыу, өйрәнеү өсөн яҡындары, яратҡан дуҫтары, әйберҙәре, уйынсыҡтары, шөғөлө, хис-тойғолары тураһында һөйләргә өйрәтеү. «Мин кем?», «Мин ниндәй?», «Беҙ нимә менән оҡшашбыҙ, нимә менән айырылабыҙ?», «Беҙ – төрлөләр», «Минең кәйефем», «Кәрәк булһа – өйрәнәм», «Мин һәм минең ғаиләм», «Минең хыялдарым», «Үҙем тураһында», «Минең яратҡан шөғөлөм» һәм башҡа темаларға дәрестәр үткәреү.

2. «Мин нимә эшләй алам?» Был бүлектә һиҙеп-тойоу ағзалары аша донъяны танып-белеүгә бағышланған дәрестәр үткәреү ҡарала. Дәрестәрҙе әкиәт донъяһына сәйәхәт рәүешендә үткәреү: ҡом, һыу, боҙ, әкиәт терапияһы һәм башҡалар ҡулланыу. «Үткер күҙ Бөркөт иленә» - күҙҙәр һәм улар эшмәкәрлеге тураһында, «Тылсымлы өндәр утрауына» - телмәр ағзалары төҙөлөшө һәм эшмәкәрлеге, «Һиҙгер ҡолаҡ Ҡуянҡай» - ишетеү һәләте тураһында, «Һиҙгер танау Аҡбай» - еҫтәрҙе һиҙеү һәм айырыуға бағышланған һәм башҡа дәрестәр үткәреү.

Шатлыҡ, күңелһеҙлек, ҡурҡыу, асыу кеүек эмоциональ торошторға төшөнөргә өйрәтеү.

3. «Мин һәм башҡалар». Бергәләп эш иткәндә, уйнағанда балаға үҙ урынын табырға, башҡалар менән тигеҙ, тыныс мөғәләмәлә булырға ярҙамлашыу. «Һин ниндәй?», «Улар кемдәр?», «Мин ниндәй яҡшы эш башҡара алам?», «Батырлыҡ»,

«Үсекләшеү – яҡшымы?», «Кемде яҡларға?» һәм ошондай башҡа темаларға дәрестәр үткәреү.

Тән, кейем-һалым таҙалығына иғтибарлы һәм бөхтәлеккә ынтылыш тәрбиәләүҙе дауам итеү: үҙаллы теш таҙарта, тырнаҡтарҙы тәрбиәләргә, сәсте тарап йөрөргә, ҡулъяулыҡ менән ҡуллана белергә.

Тиҙ һәм билдәле тәртиптә сисенергә һәм кейенергә, кейемдәрҙе үҙ урынына ҡуйырға, үҙенең йоҡлаған урынын йыйыштыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Ашағанда кәүҙә торошон кәрәкле рәүештә тота, ашау ҡағиҙәләрен үтәй, ашау кәрәк-ярағын (ҡалаҡ, сәнске, бысаҡ) дөрөҫ ҡулланырға күнектереү.

### БАЛА ҒАИЛӘЛӘ ҺӘМ КЕШЕЛЕК ЙӘМҒИӘТЕНДӘ

**«Мин» образы.** Баланың үҫкән һайын йәмғиәттә тотҡан урынының үҙгәреү төшөнсәһен киңәйтеү (бәләкәйҙәр өсөн яуаплы, ололарға хөрмәт һәм ярҙам итеү һ.б.).

Балаларҙың үҙҙәренең үткәне, хәҙергеһе, киләсәге тураһында символик һәм образлы саралар менән белемдәрен тәрәнәйтеү.

Гендер төшөнсәһен йәмғиәттә ҡабул ителгән белемдәр аша киңәйтеү. Тиңдәштәреңә ҡарата (ҡыҙҙар малайҙарға, малайҙар ҡыҙҙарға) ыңғай мөнәсәбәт тәрбиәләү.

**Ғаилә.** Балаға ғаилә, ғаилә ҡанундары, тарихы тураһында тәрәнерәк мәғлүмәт биреү. Үҙҙәренең ғаилә тарихына таянып шәжәрә төҙөргә өйрәтә башлау. Ата-әсәләренең эш урындары, башҡарған хеҙмәттәре һәм уларҙың ни тиклем мөһим икәнен тәрәнерәк өйрәнеү. Балаларҙы төрлө ғаилә байрамдарына әҙерләнергә һәм ойоштороуҙа ҡатнашырға өндәү һәм дәртләндереү. Ғаиләлә баланың даими башҡара торған эштәрен үтәргә күнектереү.

**Балалар баҡсаһы.** Тирә-яҡ мөхит менән ҡыҙыҡһыныуҙы дауам итеү: балалар баҡсаһында, өйҙә, баланың үҙендә матурлыҡты, күңел күтәренкелегенә тәьҫир иткән үҙгәрештәрҙе табып, күрһәтеп, баланың иғтибарын ошоға йүнәлтеү.

Бинаның биҙәлешендәге үҙгәрештәргә иғтибар итеү: был үҙгәрештең сәбәбен төшөндөрөү, үҙгәрештәргә ҡарата үҙенең уй-фекерен һәм тәҡдимдәрен әйтә белергә күнектереү. Балаларҙы тирә-йүндәге күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы баһалай белергә өйретеү.

Төркөмдө тәртиптә һәм таҙалыҡта тотоуға өндәү, сәнғәт әҫәрҙәре һәм һүрәттәр менән биҙәү. Байрамдарға төркөм бүлмәһен балалар ҡулы менән эшләнгән әйберҙәр менән биҙәү, һүрәттәр йәбештереү (ҡошсоҡтар, күбәләктәр, ҡар бөртөктәре, ағас ботаҡтар һ.б.).

Балаларға коллектив ағзаһы булыуын төшөндөрөү, бергә булған эшмәкәрлекте әүҙем тормош позицияһы аша ойоштороу; башҡа йәштәге балалар менән үҙ-ара килешеп балалар баҡсаһының тормошонда ҡатнашыу. Балалар баҡсаһында үткән сараларҙа ата-әсәләр менән бергә ҡатнашыу( спектаклдәрҙә, спорт байрамдарында, төрлө күңел асыуҙарҙа, балалар күргәҙмәләрендә).

### ҮҘ-ҮҘЕНДӘ ХЕҘМӘТЛӘНДЕРЕҮ, ҮҘ-АЛЛЫЛЫҠ, ХЕҘМӘТ ТӘРБИӘҺЕ

**Әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереү.** Тән, кейем-һалым таҙалығына иғтибарлы булыу һәм бөхтәлеккә ынтылыу тәрбиәләү: үҙ-аллы теш таҙарта,

тырнаҡтарҙы тәрбиәләргә, сәс тарап йөрөргә, ҡулъялыҡ менән ҡуллана белергә күнектереү.

Тиҙ һәм билдәле тәртиптә сисенергә һәм кейенергә, кейемдәрҙе үҙ урынына ҡуйырға, үҙенең йоҡлаған урынын йыйыштыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Ашағанда кәүҙә торошон кәрәкле тотоп, ашау ҡағиҙәләрен үтәп, ашау кәрәк-ярағын (сәнске, бысаҡ) дөрөҫ ҡулланырға күнектереү.

**Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү.** Эҙмә-эҙлекле сисенә һәм кейенә белеүҙе, шәхси кейемде һаҡлап, таҙа һәм бөхтә йөрөргә, аяҡ кейемен таҙарта белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Шкафтарҙа кейем матур эленеп торорға, һәр нәмә үҙ урынында булырға тейешлекте, матур, зауыҡ менән кейенеү - мәҙәнилекте белдереүҙе аңлатыу. Тиҫтерҙәренә, кескәйҙәргә, тәрбиәсегә, өлкәндәргә ярҙамлашыу теләге уятыу.

**Хужалыҡ-көнкүреш хеҙмәте.** Һәр эш һөҙөмтәле булырға тейешлеген аңлатыу. Төркөм бүлмәһендәге, уйын майҙансығындағы таҙалыҡ, бөхтәлек – күңел күтәренкелеге, ҡыуаныс биреүен күрһәтеү.

Һәр хеҙмәтте үҙеңә һәм башҡаларға шатлыҡ булһын өсөн еренә еткереп башҡарыу зарур. Уйынсыҡтарға, беҙҙе уратып алған кешеләргә хеҙмәт иткән әйберҙәргә һаҡсыл ҡараштa булыу эште еңеләйтә: китапты йыртмаһаң – ул матур көйө ҡала, уйынсыҡ хайуандарҙың ҡул-аяғы теүәл ҡалһа – шәберәк «йүгерәләр» һ.б.

Дежур балаға эштең айышына төшөнөргә өйрәтеү, һөҙөмтәһен күрһәтеү. «Күмәк эш – күңелле эш» мәҡәлен ысынбарлыҡта иҫбатлау. Бәләкәй генә эште лә намыҫ менән башҡарырға ғәҙәтләндереү.

**Тәбиғәттәге хеҙмәт.** Тирә-йүндә, мөхиттә һәр ваҡыт тәртип булдырырға ғәҙәтләндереү. Һәр эште яуаплы, намыҫлы башҡарыу: бүлмә гөлдәренә һыу һибеү, төптәрен йомшартыу, япраҡтарын йыуыу, аквариумдағы балыҡтарҙы ашатыу, тутыйғош йәки терпене нисек дөрөҫ тәрбиәләүҙе дауам итеү. Һуғанбаш, гөл бүлбеләрен айырып ултыртырға өйрәтеү, ағас һәм ҡыуаҡ төптәрен йомшартыу, эш ҡоралдарына һаҡсыл ҡараш, уларҙы таҙа торорға, айырым урынға ҡуйырға кәрәклекте төшөндөрөү.

**Ололарҙың хеҙмәтен хөрмәтләү.** Ололар хеҙмәтенең йәмғиәттә тотҡан урыны, һөҙөмтәһе тураһында һөйләү. Кеше ҡулы менән эшләнгән әйберҙәргә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

### ХӘҮЕФҺЕҘ ЙӘШӘҮ НИГЕҘҘӘРЕН ФОРМАЛАШТЫРЫУ

**Тәбиғәттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү.** Тәбиғәттә үҙеңде нисек хәүефһеҙ тотоу кәрәклеген һәм экологик мәҙәниәт нигеҙҙәрен формалаштырыу.

Үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһына зыян килтермәҫкә кәрәклекте аңлатыу, сөнки тәбиғәттә бөтә нәмә бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә тора.

Тере булмаған тәбиғәт күренештәре менән таныштырыу (йәшен йәшнәү, күк күкрәү, йәйғор). Йәшен ваҡытында үҙеңде нисек торорға.

Балаларҙы имгәнгәндә йәки бөжәк тешләгәндә нисек беренсе ярҙам күрһәтергә өйрәтеү.

**Юл хәрәкәтендәхәүефһеҙлек һаҡлау.** Балаларҙы юл элементтары менән таныштырыу (машиналар йөрөгән өлөшө, йәйеүлеләр юлды аша сығыу өсөн күрһәтелгән өлөш, тротуар-кешеләр генә йөрөй торған өлөшө);

Балалар баҡсаһы һәм бала йәшәгән йорт урынлашҡан урамдар менән таныштырыу.

Машиналар, кешеләр һәм велосипедсылар хәрәкәтләнгәндә үтәлә торған юл ҡағиҙәләрен ҡабатлау, нығытыу.

Юл билдәләре менән таныштырыуҙы дауам итеү («Балалар», «Хәрәкәт тыйыла», «Автобус туҡталышы», «Йәйәү юлды аша сығыу», «Тәүге медицина ярҙамы күрһәтеү пункты», «Туҡланыу пункты», «Тороу урыны», «Машина менән инеү тыйыла», «Юл эштәре», «Велосипед өсөн юл».

Йәмәғәт урындарында, юл хәрәкәтендә кешеләрҙең һәм үҙ-үҙеңде нисек тоторға кәрәклекте иҫкә төшөрөү, күҙәтеү, сағыштырыу, һығымта яһау, уларға баһа бирә белеү күнекмәләрен үҫтереү; юлда хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәмәгән осраҡта килеп сыҡҡан күңелһеҙ хәлдәрҙең сәбәптәрен, һөҙөмтәләрен аңлатыу.

**Йәшәйештә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү.** Балаларҙа тормошта хәүефһеҙ йәшәй белеү нигеҙҙәрен формалаштырыу.

Йылдың һәр миҙгелендә төрлө эшмәкәрлек ваҡытында хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәй белергә күнектереү (һыу ингәндә, велосипедта йөрөгәндә, санала, конькилә, саңғыла шыуғанда һ.б.).

Көнкүрештә ҡурҡыныс сығанаҡтары булған предметтар тураһындағы белемдәрен киңәйтеү (үтек, газ плитәһе, электр приборҙары һ.б.). Уларҙыһаҡ ҡулланыу ҡағиҙәләрен нығытыу.

Янғын сығыу сәбәптәрен аңлатыу, көнкүрештә янғын булдырмаҫ өсөн ниндәй талаптарҙы үтәү кәрәклеген төшөндөрөү. Янғын ваҡытында үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре. МЧС хеҙмәте менән таныштырыу. Ҡурҡыныс янағанда ололарға ярҙам һорап шылтыратыуға кәрәкле телефон номерҙарын өйрәтеү: «01», «02», «03», «112»".

Үҙенең исем, фамилияһын, йәшен, өй адресын, ата-әсәһенең телефон номерын яттан әйтә белеүенә өлгәшеү.

Таныш булмаған кешеләр менән осраҡлы осрашыуҙар һәм аралашыу барышында балаларға үҙҙәрен нисек тоторға кәрәклеге тураһында аңлатыу.

## «ТАНЫП-БЕЛЕҮ ҮҪЕШЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

## КОГНЕТИВ ҮҪЕШ

**Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлеге үҫеше** Махсус системаға һалынған сенсор эталондар һәм перцептив алымдар ярҙамында объекттарҙы өйрәнеүҙең, тикшереүҙең дөйөм ысулдарын, алымдарын камиллаштырыу. Аң-белемгә өйрәнеү маҡсатында уларҙы һайлай һәм ҡуллана белергә өйрәтеү.

Төрлө саралар аша предметтар, объекттар, тәбиғәт күренештәре араһындағы бәйләнеште табырға, үҙ-аллы тәжрибә үткәрергә һәм яңы обьект тураһында мәғлүмәттәр алырға өйрәтеү.

Ололар ярҙамында моделдар төҙөргә һәм танып-белеү эшмәкәрлегендә урынлы ҡуллана белеүҙе формалаштырыу.

**Сенсор тәрбиә.** Предметтарҙы, уларҙың сифаттарын, бер-береһе араһындағы бәйләнеште сағыштыра, уларҙы ниндәйҙер бер сифаты буйынса парлау, төркөмләү.

Төҫтәр менән таныштырыуҙы дауам итеү.

Төҫтәрҙең төп төҫтән ҡайтышыраҡ, йәғни ағыраҡ, йәки ҡуйыраҡ (аҡһыл, ҡыҙғылт, ҡыҙылыраҡ, ҡып-ҡыҙыл, һ.б.) икәнлекте аңлатыу һәм һүҙҙәр менән уларҙы атай белергә өйрәтеү.

Төҫтәр спекторы менән таныштырыуҙы дауам итеү: ҡыҙыл, ҡыҙғылт-һары, һары, йәшел, зәңгәр, күк, миләүшә. Былар хроматик төҫтәр (грек теленән «төҫлө» тигән мәғәнәне аңлата). Улар төҫтәр спекторын барлыҡҡа килтерә. Спекторҙың бөтә төҫтәрен ҡыҙыл, һары, күк төҫтәрҙе төрлө пропорцияла ҡушыу аша килтереп сығарыуҙы аңлатыу. Ахроматик (грек теленән «төҫһөҙ») төҫтәр (аҡ, ҡара, һоро) төҫтәр менән таныштырыу.

Төрлө геометрик фигуралар менән таныштырыуҙы дауам итеү, шартлы эталон итеп ялпаҡ һәм күләмле формалы предметтарҙы ҡулланырға өйрәтеү.

Төрлө формалағы предметтарҙы ҡулдар менән һыйпап, тикшерергә өйрәтеү. Предметтарҙың тышы ҡабарынҡы йөнлө, йомшаҡ, тигеҙ, шыма, ҡытыршы, сәнскеле һ.б. булыуын аңлатыу. Күҙ үлсәүе менән самалауҙы үҫтереү.

Ҡыҙыҡлы тәжрибәләр, фокустар аша балала төрлө эҙләнеү эштәренә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Проект эшмәкәрлеге**. Балаларға өс төрҙәге проекттар башҡарыу өсөн шарттар булдырыу:

1) эҙләнеү-тикшереү проекты. Предметтың йәки тәбиғәт күренешен ныҡлап тикшереү, өйрәнеү. Проект һөҙөмтәләрен башҡаларға күрһәтеп, һөйләргә өйрәтеү;

2) ижади проекттар. Улар баланың шәхси һәләттәре менән бәйле;

3) норматив проекттар - баланың коллективта әҙәп һәм әхлаҡи тәртип нормалары уйлап сығарып башҡаларға тәҡдим итеүе.

Проект эшмәкәрлегендә тәүге күнекмәләрҙе башҡарырға өйрәтеү, артабан үҫтереү; ирешелгән һөҙөмтәләрҙе телмәр ярҙамында һөйләргә өйрәтеү, презентацияны яҡларға шарттар булдырыу. Тәжрибә үткәреү эшмәкәрлегендә ата-әсәләрҙе лә йәлеп итеү.

**Дидактик уйындар.** Балаларҙың сенсомотор һәләттәрен үҫтереүҙе дауам итеү.

Уларҙы 2-4 баланан торған төркөмдәргә бүлеп уйнатыу; уйын ҡағиҙәләрен үтәргә күнектереү.

Балаларҙың иғтибарын нығытыу, ҡарап, ишетеп, һиҙеп-тойоп хәтерҙә ҡалдырыу һәләтен үҫтереү маҡсатында предметтарҙы тышҡы үҙенсәлектәре аша ғына түгел, 2 сифаты, тәғәйенләнеше буйынса төркөмләүгә уйындар үткәреү.

Өлөштәрҙән бөтөндө төҙөүҙе, предметтың айырмаһын, оҡшашлығын айыра белеүгә уйындар ойоштороу.

Балаларҙың төрлө дидактик уйынсыҡтар һәм уйындар (халыҡ, компьютер уйындары һ.б.) менән уйнау теләген ҡәнәғәтләндереү

Ябай ғына күренештәрҙең бер-береһе менән бәйле икәнлегенә төшөндөрөүҙе дидактик уйындар аша дауам итеү. Уйында үҙ-аллыҡ күрһәтергә, уйын ҡағиҙәләренә буйһонорға күнектереү.

## Башланғыс ябай математик төшөнсәләр

**Һан һәм иҫәп.** Төрлө төҫтәге, дәүмәлдәге, формалағы, ҡулланышы, тәғәйенләнеше менән айырылып торған предметтарҙы бергә ҡушып күплек (множество) төшөнсәһен аңлатыу. Күплектәге предметтарҙы төркөмдәргә бүлеү һәм

яңынан ҡушыу. Бер бөтөн күплектә предметтар өлөштәргә бүленгән төркөмдәрҙекенә ҡарағанда күберәк. Уларҙы һанап күрһәтергә мөмкин. Күплектең өлөштәрен сағыштырып, ҡайҙа предметтар күберәк, ҡайҙа аҙыраҡ – шуны билдәләү йәки ике өлөштө лә тигеҙләү.

Ике предметтың оҙонлоғон, киңлеген, бейеклеген өсөнсө предмет (шартлы үлсәү) ярҙамында билдәләү. Шартлы үлсәү сағыштырылған предметтың береһенә тиң булырға тейеш.

Күҙ үлсәмен үҫтереү, күҙ ҡарашы аша предметтарҙы шартлы үлсәү ярҙамында сағыштырып, дәүмәлдәрен билдәләү: оҙонораҡ-ҡыҫҡараҡ, киңерәк-тарыраҡ, бейегерәк-тәпәшерәк.

Предметты (ҡағыҙ битен, таҫманы, түңәрәкте, квадратты һ.б.) бер нисә өлөшкә бүлергә өйрәтеү. Бүленгән өлөштәрҙе бөтөн предмет менән сағыштырып, өлөштәрҙең нисек аталыуын аңлатыу (яртыһы, йәки ике, өс, дүрт өлөшкә бүлдек), уның һәр саҡ бөтөн предметтан кәм икәнен төшөндөрөү.

Өс һәм унан да күберәк булған (төркөм) предметтарҙы сағыштырып, улар араһындағы һан яғынан булған бәйләнеште табып, «1», йә «2» һанын ҡушыу, йә алыу юлы менән 10 эсендәге һандарҙың барлыҡҡа килеүен аңлатыу.

10-ға тиклем төп һәм рәт һандарын иҫәпләргә (һанарға) өйрәтеү.

Һан башы итеп телгән бер предметты алып, төрлөсә урынлашҡан предметтарҙы төрлө йүнәлештә һанарға өйрәтеү.

Бирелгән һан буйынса предметтарҙы төркөмләй белеү.

10 һаны эсендәге предметтарҙы (2, 3, 4, 5) төркөмгә бүлә белеү, килеп сыҡҡан төркөмдәрҙе һәм төркөм эсендәге предметтарҙы һанай белеү; «Бөтәһе нисә төркөм?», «Һәр төркөмдә нисә предмет?» һорауҙарына яуап бирә белеү.

10 һаны эсендәге йәнәш торған һандарҙың үҙ-ара бәйләнешен аңлау (5 дүрттән ҙур, ләкин 6-нан 1-гә кәм).

5 эсендәге һандарҙың нисә берәмектән тороуын аңлатыу.

1-ҙән 5-кә тиклемге цифрҙар менән таныштырыу.

Ябай арифметик мәсьәләләр сисеү һәм уларҙы һүрәт ярҙамында яҙыу (төшөрөү); «артыҡ», «кәм», «тигеҙ була» билдәләре менән таныштырыу.

**Дәүмәл.** Предметтарҙы дәүмәле буйынса арта, йә кәмей барған рәүештә 10-ға тиклем теҙә һәм теҙеү тәртибен һанап, әйтә белеү.

Бер рәттә ятҡан йәнәш предметтарҙы бер-береһе менән һәм шулай уҡ алдан һәм арттан килгән рәттәге предметтар менән сағыштыра белеү (һары таҫма күгенән оҙонораҡ, ләкин йәшел таҫманан ҡыҫҡараҡ; һары таҫма ҡыҙыл, аҡ, күк таҫмаларҙан оҙонораҡ, ләкин йәшел, алһыу, һорғолттарынан ҡыҫҡараҡ).

Күҙ самаһы менән предметтарҙы дәүмәле буйынса өлгөгә ҡарап һайлай белеү.

Предметтарҙы, ауырлығына ҡарап, үлсәү ярҙамында сағыштыра белеү. Ауырлығы артыуына, йә кәмеүенә ҡарап, предметтарҙы (6-ға тиклем) бер рәткә теҙә белеү. Теҙеү тәртибен аңлата белеү.

Бер предметты шартлы үлсәм итеп алыу юлы менән ике предметты дәүмәле буйынса сағыштырыу.

Арауыҡтың өс үлсәмле булыуын, күләм төшөнсәһен аңлатыу.

**Геометрик фигуралар һәм формалар.** Конус, брус, цилиндр, пластина менән таныштырыу, уларҙың атамаларын дөрөҫ әйтергә өйрәтеү. Тура һәм өҙөк һыҙыҡ тураһында төшөнсә биреү.

Күпмөйөш һәм дүртмөйөштәр менән таныштырыу, уларға билдәләмә биреү. «Сиге», «түбәһе», «эске яғы» төшөнсәләре менән таныштырыу һәм уларҙы тирә-йүндәге предметтарҙан таба, күрә, әйтә белергә өйрәнеү.

**Аралыҡта йүнәлеш билдәләү.** Предметтарҙың бер-береһенә ҡарата урынлашҡан урынын билдәләй белеү.

«Эргәлә, һулғараҡ, уңғараҡ, уртала» төшөнсәләрен киңәйтеү.

Ҡағыҙ битендә йүнәлеш билдәләй белеү, ҡағыҙ бите мөйөштәренең урындарын әйтә, күрһәтә белеү.

Урамда йөрөү ҡағиҙәләре менән таныштырыу һәм иҙәндәге, ҡағыҙ битендәге схемала юл йүнәлешен билдәләй, күрһәтә белеү.

**Ваҡыт төшөнсәләренең айышына төшөү.** Аҙна көндәрен эҙмә-эҙлекле әйтә белеү, бөгөн ниндәй көн, кисә, иртәгә аҙнаның ниндәй көн булыуын әйтә белеү.

«Ай» тураһында төшөнсә, йыл эсендә нисә ай, миҙгел барлығы тураһында төшөнсә биреү. Календарь тураһында аңлатыу.

## ТИРӘ-ЙҮН ПРЕДМЕТТАРЫ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ

Предметтар доньяһы тураһындағы белемдәрҙе байытыу. Таныш булмаған предметтарҙың ҡулланышы менән таныштырыу. Кеше тормошон еңеләйткән әйберҙәр (миксер, кер йыуыу машинаһы, ит үткәргес), йортҡа йәм биреүсе предметтар (картина, ковер, люстра һ.б.) тураһындағы төшөнсәләрҙе формалаштырыу.

Предметтың тиҙ боҙолмауы һәм оҙаҡ хеҙмәт итеүе уның ниндәй материалдан эшләнеүен, уның сифаттарына бәйле булыуын аңлатыу. Предметтың ниндәй материалдан эшләнеүен, төҙөлөшөн, тышҡы-киәфәтен, ҡатылығын, йомшаҡлығын үҙ-аллы билдәләргә өйрәтеү. Предметтарҙыүҙенсәлектәре буйынса (ҡулланышы, төҫө, формаһы, эшләнгән материалы) сағыштырып, төркөмләргә өйрәтеү, мәҫәлән: һауыт-һаба фарфорҙан, быяланан, керамиканан, пластмассанан эшләнгән булырға мөмкин.

Предметтарҙың барлыҡҡа килеүендә кеше хеҙмәтенең ҙур роль уйнауы тураһында аңлатыу: «Был өҫтәл ҡайҙан килгән?», «Ҡартатайым түбәтәйе», «Өләсәйемдең еләне», һ.б.

## СОЦИАЛЬ ДОНЪЯ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ

Балаларҙа профессия тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү.

Төрлө уҡыу йорттары тураһындағы белемдәрен формалаштырыу (балалар баҡсаһы, мәктәп, колледж, институт). Кешеләрҙең төрлө эшмәкәрлектәре (фән, ижад, сәнғәт, сәнәғәт, ауыл хужалығы) менән таныштырыу.

Мәҙәниәт үҙәктәренең (музей, театр, цирк һ.б.), эше, атрибуттары, уларҙа ҡабул ителгән тәртип ҡағиҙәләре, йәмғиәт тормошонда тотҡан урындары, һөнәри эш башҡарыусы белгестәр менән таныштырыуҙы дауам итеү.

Аҡса һәм уның файҙаһы (кешегә хеҙмәт хаҡын биргәндә, ниндәйҙер әйбер һатып алғанда түләр өсөн) кәрәклеген аңлатыу. Семья бюджеты, уны нисек йыйыу һәм тотоноу.

Кешелек тарихы (Боронғо донья, Урта быуат, хәҙерге йәмғиәт) тураһында башланғыс төшөнсәләрҙе донъяуи мәҙәниәт әҫәрҙәре (һынлы сәнғәт, скульптура, донъя халыҡтары риүәйәттәре, легендалары, эпостары) һәм төрлө заманда йәшәгән кешеләрҙең йәшәү рәүешен өйрәнеү аша (кейем-һалымы, көнкүреш йыһаздары, йолалары, йыһаздары) таныштырыуҙы дауам итеү. Башҡортостан халыҡтарының кәсептәре.

Балаларға тәрбиәсе, уҡытыусы, табип, төҙөүсе, ауыл хужалығы, траспорт, һатыу итеү, бәйләнеш тармағы һ.б. төрлө сәнәғәт хеҙмәткәрҙәре һөнәрҙәре тураһында төшөндөрөүҙе дауам итеү, улар эшенең мөһимлегенә һәм халыҡ өсөн кәрәклегенә баҫым яһау. Һәр эште башҡарыуҙа төрлө техника ҡулланыла, улар менән эшләй белеү өсөн белем һәм тәжрибә кәрәк. Ниндәй шәхси һәм һөнәри сифаттар кәрәк һәр бер һөнәр эйәһенә - уны балаларҙың тәжрибәһенә һәм үҙләштерелгән аң-белеменә таянып аңлатыу ҡарала.

Ижады һөнәр кешеләре (рәссамдар, яҙыусылар, композиторҙар, халыҡ кәсептәре оҫталары) һәм уларҙың эштәре менән таныштырыу. Кешенең хеҙмәтенә ҡарата рәхмәтле булыу тойғоһон тәрбиәләү.

Тыуған ер (Башҡортостан, тыуған ауыл/ҡала), ил (Башҡортостан, Рәсәй) тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Балаларға Тыуған яҡтың мәҙәниәте, йолалары, иҫтәлекле урындары тураһында һөйләү, арҙаҡлы шәхестәре менән таныштырыу.

Тыуған ил, дәүләт байрамдары (8 март, Ватанды һаҡлаусылар көнө, Яңы йыл, Сөмбәлә, Һабантуй, Ҡарға бутҡаһы, Ураҙа байрамы һ.б.) тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Тыуған илгә ҡарата ғорурлыҡ хисе тәрбиәләү. Рәсәй дәүләте бөйөк, күп милләтле ил тигән төшөнсәне формалаштырыу. Рәсәйҙең башҡалаһы - Мәскәү, Рәсәйҙең флагы, гербы, гимны менән таныштырыу.

Башҡортостан – башҡорттар йәшәгән ер. Уның башҡалаһы – Өфө, Башҡортостандың флагы, гербы, гимны менән таныштырыу.

Рәсәй армияһы тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Тыуған илде һаҡлаусыларға ҡарата хөрмәт һәм ғорурлыҡ хистәре тәрбиәләү, Тыуған илдең тыныслығын һәм хәүефһеҙлеген һаҡлау ни тиклем ауыр, яуаплы икәнлеген аңлатыу. Бөйөк Ватан һуғышы тураһында һөйләү, балалар баҡсаһына ветерандарҙы һәм хәрбиҙәрҙе саҡырыу. Балалар менән хәрби темаға ҡағылған картиналар, репродукциялар, альбомдар ҡарау.

Һуғыш һәм тыл ветерандары тураһында һөйләү. Уларға ҡуйылған һәйкәлдәр менән танышыу.

«Үлемһеҙ полк» сараһында ҡатнашыу.

**ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ**

Башҡортостан тәбиғәте тураһындағы белемдәрен киңәйтеү, тәбиғәткә һаҡсыл һәм аңлы ҡараш тәрбиәләү. Кешеләрҙең тәбиғәтте һаҡлау эшмәкәрлеге менән таныштырыу: ағас ултыртыу, ҡышын ҡоштарҙы, йәнлектәрҙе ашатыу. Балыҡтар тураһында хәстәрлек күреү. Ҡурсаулыҡтар тураһында төшөнсә биреү.

Башҡортостан ҡурсаулыҡтары,  Шүлгәнташ, Асылыкүл, Ғәҙелшә шарлауығы һ.б. менән таныштырыу.

Үҫемлектәрҙең үҫеүе өсөн кәрәкле шарттар тураһында төшөнсә киңәйтеләː тупраҡ, дым, ҡояш яҡтыһы һәм йылыһы. «Үҫемлек» тигән дөйөм төшөнсә үҙләштерелә (үҫемлектәр ҙә кеше кеүек йәнле: уның тамыры, һабағы, япрағы, сәскәһе, орлоғо була. Үҫемлектәр – ағастар, ҡыуаҡтар, үләндәр һ.б.).

Бүлмә гөлдәре менән танышыу: төҙөлөшө, тышҡы күренеше, уларҙың ниндәй ихтыяжға мохтаж булыуы (һыу, ашлама һ.б. кәрәклеге), үрсетеү (ботаҡ, тамыр, орлоҡ менән)һәм тәрбиәләү ысулдары. Һабаҡтары үрмәләп, ергә йәйелеп, һуған һымаҡ үҫкән үҫемлектәр.

Үҫемлектәрҙе ботаҡ, мыйыҡтар, япраҡ һәм орлоҡ сәсеү юлы менән үрсетеү; яҡтылыҡ һәм күләгә, дым яратҡан, ҡороға сыҙамлы үҫемлектәр тураһында мәғлүмәт биреү.

Болон үҫемлектәре менән танышыу дауам итә (клевер, меңъяпраҡ, туғай яраны, муллаян үләне).

Культуралаштырылған үҫемлектәр – арыш, бойҙай, һоло; уларҙы үҫтереү ысулдары менән таныштырыу. Һабағына һәм ботағына ҡарап, уларҙы айыра белеү. Ҡый үләндәрен таный, айыра белеү.

Һыуҙа үҫеүсе үҫемлектәр менән таныштырыуҙы дауам итеү (томбойоҡ, һыу боросо).

Йәшелсә-емеш тураһында дөйөмләштерелгән төшөнсәләрҙе белеү (улар үҫемлектәрҙең бер өлөшө һәм шул уҡ ваҡытта уларҙың емеше лә була).

Урман, болон, ялан-ҡыр тураһындағы белемдәрҙе нығытыу: ундағы үҫемлектәрҙең бер-береһе менән бәйле булыуы.

Ағасты, ҡыуаҡты айыра белеү.

Баҡсала һәм урманда үҫкән, ашарға яраҡлы еләктәр тураһындағы белемде киңәйтеү (ҡыҙыл көртмәле, ҡурай еләге, бөрлөгән, ҡарағат, балан).

«Йорт хайуандары» тигән дөйөм төшөнсәне түбәндәге сифаттар буйынса билдәләй белеүː кеше эргәһендә йәшәй, уға файҙа килтерә, кеше уның тураһында хәстәрлек күрә (ҡарай, ашата һ.б.).

Ҡырағай хайуандарҙы урманда йәшәү, ашарға үҙҙәре табыу, торлаҡты үҙҙәре хәстәрләү сифаттары аша билдәләү.

Йәнлектәрҙең дошмандан һаҡланыу ысулдарын, төрҙәрен белеү (төҫөн үҙгәртә, шәп йүгерә, йәшеренә, ҡойроғо менән эҙен һеперә һ.б.). Уларҙың киләсәк быуын тураһындағы хәстәрлеге менән таныштырыу.

Ҡош кәүҙәһенең төҙөлөшөндәге дөйөм билдәләре (баш, аяҡ-тәпәй, ҡанат, ҡойроҡ); тәнен мамыҡ, ҡаурый ҡаплауын, айырмалы билдәләрен (суҡышының төҙөлөшө, йөндәренең төҫө һ.б.) белеү.

Ҡоштарҙың һиҙеү органдары (ишетеү, күреү, тойоу, тәмләү), тәпәйҙәр менән ҡанаттарҙың хәрәкәтләнеүгә яраҡлашыуы тураһында белеү (ҙур ҡанатлы – оса, көслө аяҡлы – йүгерә, бармаҡтары ярылы – йөҙә).

Йорт ҡоштарын һәм уларҙың бәпкәләрен таный һәм айыра белеү. Уларҙың тышҡы ҡиәфәттәре, холоҡтары, туҡланыуы, үрсеүе тураһында мәғлүмәт алыу (тауыҡ, өйрәк, ҡаҙ, күркә).

Ҡышлай торған (ҡарға, һайыҫҡан, турғай, сәпсек) һәм йылы яҡҡа осоп китә торған күсер ҡоштар (ҡарлуғас, торна, сыйырсыҡ, сәүкә) тураһында төшөнсә биреү. Уларҙың йылы яҡҡа осоп китеү сәбәбен аңлатыу.

Балыҡтарҙың ыуылдырыҡ сәсеп һәм бала тыуҙырып үрсеүе менән танышыу. Балыҡ селбәрәләрен аквариумда үҫтереү шарттарын төшөндөрөү (өҫтәлмә яҡтылыҡ, һыуҙы йылытыу, аэрация һ.б.).

Болонда *(сиңерткә, бал ҡорто, һағыҙаҡ, ҡуңыҙ)*, һыуҙа *(һыу ҡуңыҙы, салҡан ҡандала, йомро селәүсендәр)* йәшәүсе бөжәктәр тураһында һөйләшеү.

Имеҙеүселәр төркөмө *(йорт ҡуяны, терпе, тейен, алйырҙан)*, һөйрәлеүселәр төркөмө *(ташбаҡа, кеҫәртке, йылан)*, уларҙың тышҡы күренеше, хәрәкәтләнеүе, туҡланыуы, холоҡтары, үрсеү юлдары, йәшәү үҙенсәлектәре менән танышыу.

Тәбиғәт күренештәре тураһында балаларҙың белеме тәрәнәйтелә:

- һыуҙың төрлө хәлдә булыуына ҡарап, тәбиғәт күренештәрен әйтә белеү (һибәләп яуған һалҡын ямғыр, ысыҡ, томан, ҡар, бәҫ, боҙ, тамсылар). Һыуҙың кешеләр, йәнлектәр, үҫемлектәр өсөн әһәмиәте;

- ҡар тураһында төшөнсәләрҙе киңәйтеү (һыуыҡ көндә – ҡар күҙе булып, йылытҡанда – ябалаҡлап, көслө һыуыҡ елдә – энә һымаҡ ырашҡы яуа; ҡар шығырлай, һибелә, әүәләнә һ.б.);

- боҙҙоң үҙенсәлектәрен артабан өйрәнеү (шыма, тайғаҡ, һыуыҡ, ныҡ, ҡаты, үтә күренеүсән, мурт, ватылыусан һ.б.);

- һауа тураһында төшөнсәләр байый (ҡыҫыла, ауырлығы бар). Уларҙы таба белеү ысулдары тураһында мәғлүмәт бирелә.

- яҡтылыҡтың үҙенсәлектәре менән танышыу (тура һыҙыҡ булып тарала, ҡаплаһаң – күләгә төшә һ.б.), йәнле тәбиғәт өсөн әһәмиәтен асыҡлау;

- магнит, уның ҡапма-ҡаршы полюстары, металдарҙы үҙенә тартыуы һәм этеүе тураһында белешмә биреү;

- ҡайһы бер металдар һәм минералдар өлгөһө менән танышыу (тимер рудаһы, алюмин, таш күмер, тоҙ). Уларҙың үҙсәнлектәре, кеше өсөн әһәмиәте. Башҡортостандың файҙалы ҡаҙылмалары;

- әйберҙәрҙең (машина, ҡояш, болот, автобус) хәрәкәте тураһында башланғыс төшөнсә (тиҙ, әкрен, шәп). Уның башланғыс нөктәһен, хәрәкәт юлын күҙәтә, тиҙлекте сағыштыра белергә өйрәтеү;

- Ер шары һәм уның юлдашы Ай тураһындағы белемдәрҙең артабан тәрәнәйеүе. Уларҙың йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәткә йоғонтоһо. Глобус һәм карталар менән таныштырыу.

Миҙгелдәрҙе йәнһеҙ һәм йәнле тәбиғәттәге, шулай уҡ кешеләр тормошондағы үҙгәрештәр буйынса билдәләргә өйрәтеү:

**Көҙ:** көндөң оҙонлоғо кәмей. Һыуыта. Күк йөҙө йонсоу, болотло, оҙаҡҡа һуҙылған һалҡын, һибәләмә ямғыр яуа, киҫкен һалҡын ел иҫә. Иртәнсәк ысыҡ, ҡырау, томан төшә. Үҫемлектәрҙең ер өҫтөндәге өлөшө һулый. Ағас һәм ҡыуаҡ япраҡтары төҫөн үҙгәртә. Бөжәктәр юғала. Күсер ҡоштар йылы яҡҡа осоп китә, йәнлектәр, кешеләр ҡышҡа әҙерләнә.

**Ҡыш:** иң ҡыҫҡа көндәр һәм иң оҙон төндәр. Ҡояшлы көндәр бик аҙ. Ҡояш түбән генә тора. Тышта һалҡын. Ҡаты һыуыҡтар тора. Ер өҫтөн ҡар ҡаплаған.

Йылға-күлдәр боҙ менән ҡапланған. Үтә һуғып торған әсе ел өрә. Үҫемлектәр донъяһы тәрән йоҡоға сумған.

**Яҙ:** көн оҙая бара. Ҡояш нығыраҡ йылыта, ҡар, боҙ ирей. Тамсылар тама, гөрләүектәр аға, ҡарҙан асылған (әрселгән) ер күренә, үҫемлектәргә үҫер өсөн уңайлы шарттар тыуа, бөжәктәр уяна, ҡоштар йылы яҡтан ҡайта. Кешеләр яҙғы эшкә әҙерләнә.

**Йәй**: иң оҙон көндәр. Эҫе, ҡояш ҡыҙҙыра, йылы һипмә ямғыр яуа, йәйғор ҡалҡа. Үҫемлектәр шаулап үҫә, сәскә ата. Бөжәктәр, йәнлектәр бала сығара. Йылға-күлдәрҙә һыу йылына, кешеләр һыу инә.

**«ТЕЛМӘР ҮҪЕШЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Телмәр үҫтереү

**Телмәрүҫтереүсемөхит.**Аралашыу аша телмәр үҫтереүгә булышлыҡ итеү. Ололар һәм тиңдәштәре менән аралашыу-һөйләшеү мөмкинлеге тыуҙырыу өсөн балаларға төрлө эштәр ҡушыу: («Сисенеү бүлмәһенә сығып ҡара әле, кем килгән», «Апайҙан һора һәм миңә һөйлә!», «Таһирға нимә тип әйттең?. Ул һиңә нимә тип яуап бирҙе?».

Баланың тәрбиәселәр менән үҙенең күргәне, уҡығаны, кемдер менән бергә аралашҡандағы тәьҫораттары тураһында әңгәмәләшергә теләүен хуплау.

Телмәр үҫтереү маҡсатында балаларға башҡорт халҡының кәсептәре (бал ҡорто, йылҡы малы һ.б. үрсетеү); биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәре эшләү (мамыҡ шәл бәйләү; нағыш сигеү; ҡашмау, селтәр һ.б. тегеү, көмөштән алҡа, беләҙек, балдаҡ сүкеү); милли аштар төрө (ҡымыҙ, ҡорот, ҡатыҡ, сәк-сәк, бауырһаҡ һ.б.) милли кейем төрҙәре (сарыҡ, камзул, елән һ.б.), музыка ҡоралдары (ҡурай, ҡумыҙ, думбыра) менән таныштырыу.

Баланың телмәрен байытыуға Башҡортостан һәм Рәсәй тарихындағы иҫтәлекле ваҡиғалар (Башҡортостандың Рәсәйгә үҙ-аллы ҡушылыуы, 1812 йылда, шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышында бергәләп күрһәткән батырлыҡтары һ.б.), «Урал батыр» эпосында һүрәтләнгән күренештәр, республика сәнәғәтенең үҫеше (нефть табыусы һәм эшкәртеүсе заводтар, файҙалы ҡаҙылмалар табыу, ауыл хужалығындағы уңыштар, мәҙәниәт өлкәһендәге ҡаҙаныштар һ.б. мәғлүмәттәр менән таныштырыу ярҙам итә. Тыуған ерҙең тәбиғәте, халҡының йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, йыр-бейеүҙәре, ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре һ.б. был юҫыҡта әүҙем ҡулланылырға тейеш.

Балаларға күргәҙмә материал булараҡололар һәм үҙ-ара аралашыу өсөн үҙ-аллы өйрәнергә китаптар, һүрәттәр, уйынсыҡтар тәҡдим итеү.

Балаларға ҡыҙыҡлы ваҡиғалар һөйләү (мәҫәлән, йорт хайуандарының ҡылыҡтары тураһында кешеләрҙең һәм хайуандарҙың хәл-торошон аңлатҡан һүрәттәр күрһәтеү (шатлана, моңһоулана һ.б.).

**Һүҙлек эше.** Тирә-йүндәге өйберҙәр, ваҡиғалар һәм күренештәр тураһында төшөнсәләр биреү аша балаларҙың һүҙ байлығын арттырыуҙы һәм әүҙемләштереүҙе дауам итеү.

Әйберҙәрҙең ҡайҙа, нисек урынлашыуын (артында, алдында, юғарыла, түбәндә, аҫта, өҫтә, уңда, һулда), тәүлектең ҡайһы ваҡыты булыуын (иртә, кис, көндөҙ, төнөн), кешеләрҙең хәлен (шатланыу, ҡыуаныу, үпкәләү) белдерә торған һүҙҙәрҙе әйтә һәм һөйләшкәндә ҡуллана белеү.

Предмет өлөштәренең исемдәрен әйтеп, уларҙың үҙенсәлеген белдерә торған сифаттарҙы, рәүештәрҙе һәм ялғауҙарҙы дөрөҫ ҡулланып һөйләү. Үҫемлектәр, ҡоштар, емештәр, иген кеүек дөйөм төшөнсә белдерә торған һүҙҙәрҙе аңларға һәм һөйләмдә ҡулланырға өйрәтеү.

Балаларҙың һүҙлеген *ташсы, тракторсы, табиб, таусы, осоусы, малсы, уҡытыусы, кейем тегеүсе* һөнәрҙәрен аңлата торған һүҙҙәр; *һыуытҡыс, саңһурғыс, үтек, компьютер, кеҫә телефоны, кер йыуғыс, ит турағыс, ҡар таҙартҡыс* кеүек көнкүреш техникаһы исемдәре; көрән, *зәңгәр, яҡты, ҡараңғы, эсе, шифалы, күңелһеҙ, йомшаҡ* кеүек сифаттар; *уңған, оҫта, батыр* кеүек рәүештәр; кешенең эш-хәрәкәтен, хеҙмәт эшмәкәрлеген белдерә торған ҡылымдар иҫәбенә байытыу һәм ҡулланыуға индереү.

Мәғәнәһе яғынан бер булған (синоним) һүҙҙәрҙе ҡулланыу буйынса күнегеүҙәр үткәреү, ябай ғына кроссвордтар сисеү.

Һүҙ яһаусы ялғауҙарҙы, күплек ялғауҙарын, дөйөмләштереүсе һәм ҡушма һүҙҙәрҙе, алмаш, һандарҙы телмәрҙә урынлы ҡулланырға өйрәтеү.

**Өндәр өҫтөндә эш.** Балаларҙың артикуляция аппаратын нығытыу, фонематик ишетеү һәләттәрен үҫтереү, өндәрҙе дөрөҫ әйтеү йүнәлешендә элек башланған эштәрҙе дауам итеү.

Теге йәки был өндөң яһалышында ҡатнаша торған телмәр органдары тураһында төшөнсә биреү. Һүҙҙәрҙәге айырым өндәргә баҫым яһатып, уларҙы асыҡ һәм дөрөҫ әйттереү күнекмәләре булдырыу (*ааа-т, а-ттт, ббб-ал, бааа-л, ба-ллл*).

Өндәрҙе һәм һүҙҙәрҙе, шул һүҙҙәр ингән һөйләмдәрҙе, балаларҙың асыҡ тауыш менән дөрөҫ итеп әйтә белеүҙәренә өлгәшеү. Балаларҙың үткән йылдарҙа (төркөмдәрҙә) өйрәнгән һуҙынҡыларҙы һәм тартынҡыларҙы дөрөҫ итеп әйтә һәм уларҙы бер-береһенән айыра белеүҙәренә өлгәшеү.

Өндәрҙең һүҙ яһауҙағы әһәмиәтен асыҡ миҫалдар аша төшөндөрөү.

**Телмәрҙең грамматик яҡтан төҙөлөшөн үҙләштереү.** «Ҡайсан?», «Нисәнсе?», «Был нимәнән эшләнгән?», «-мы, -ме, -мо, -мө» һорау киҫәксәләрен ҡушып, һорау бирә белеү.

«Ошо, шул, теге, был» күрһәтеү алмаштарын, рәт һандарын (беренсе, икенсе) ҡуллана белеү.

Һүҙҙәргә күплек (-лар, -ләр, -тар, -тәр, -дар, -дәр, ҙар, -ҙәр) һәм эйәлек заты һәм килеш ялғауҙарын ҡушырға (әсәйем, атайым, ҡурсағым һ.б.), сифат һәм ҡылымдар менән яраштырып, һөйләмдәр төҙөү;

ҡылымдарҙың хәҙерге, үткән, киләсә заман формаларын дөрөҫ ҡулланырға өйрәтә башлау (ашай, ашаны, ашар);

тәрбиәсе үрнәге буйынса тамырҙаш һүҙҙәр төҙә белеү; *ҡояш - ҡояшҡай, ҡояшлы; тау-тауҙар, таулы, тауҡай;*

һүҙъяһалыштың төрлө ысулдары менән таныштырыу. Ижад итеү мөмкинлеген биреү һәм хуплау.

Балаларҙы өлгө буйынса ябай һөйләмдәр төҙөргә өйрәтеүҙе дауам итеү.

**Бәйләнешле телмәр үҫтереү.** Балаларҙың диалогик һәм монологик телмәрен үҫтереүҙе дауам итеү: уларҙың әңгәмәгә ҡатнаша белеүҙәренә ирешеү, бер-береһенә һорауҙар бирҙертеү, шулһорауҙарға яуап ҡайтара белергә өйрәтеү. Яуап ҡайтарғанда, һүҙҙәрҙе асыҡ һәм башҡалар аңларлыҡ итеп, тамамланған һөйләмдәр менән әйтергә күнектереү.

Ябай һәм ҡушма һөйләмдәр төҙөп, һөйләргә өйрәтеү. Ҡыҙыҡлы әңгәмәләргә йәлеп итеп, балаларҙың ижад итеү һәләте үҫешенә булышлыҡ итеү.

План йәки өлгө буйынса үҙ-аллы берәй предмет тураһында яңы ишеткән һәм уҡылған бәләкәй күләмле хикәйәне, йә әкиәтте эҙмә-эҙлекле һәм тасуири һөйләй белергә өйрәтеү. Һүрәт буйынса хикәйәләр, әкиәттәр төҙөү. Телмәрҙә тура һәм ситләтелгән телмәрҙе ҡулланыу.

Кескәй күләмле әҫәрҙәрҙе сәхнәләштергәндә тура һәм ситләтелгән телмәр ҡуллана белергә өйрәтеү.

Әҙәби һәм халыҡ ижады әҫәрҙәрен уҡыу. Китапҡа ҡыҙыҡһыныу һәм һөйөү тәрбиәләү.

**НӘФИС ӘҘӘБИӘТ**

Нәфис әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләүҙе дауам итеү. Әкиәттәрҙең, хикәйәләрҙең, шиғырҙарҙың эстәлегенә төшөнөргә, уларға ҡарата хис-тойғоларҙы сағылдыра белергә өйрәтеү. Әҫәр персонаждарының холоҡ-фиғеленә, башҡарған эштәренә үҙ фекерен әйтә белергә өйрәтеү, уларҙың ниндәй маҡсатта тегеләй, йә былай эш итеүенә төшөндөрөү.

Әҫәрҙәге һүҙ матурлығына иғтибар биреү, жанр төрҙәрен айыра белеү һәләтен үҫтереү (әкиәт, хикәйә, шиғыр, йомаҡ, мәҡәл).

Шиғырҙарҙы тасуири һөйләргә, сәхнәләштерелгән әҫәрҙе башҡарғанда тауыш менән идара итергә өйрәтеү.

Китап биҙәктәренә, һүрәттәренә баланың иғтибарын йәлеп итеү. Рәссамдар тураһында мәғлүмәттәр биреү, бер үк әҫәрҙең төрлө рәссамдар тарафынан биҙәлгән өлгөләрен сағыштырыу. Балаларҙың үҙҙәренә лә уҡылған әҫәр буйынса һүрәттәр төшөрөргә тәҡдим итеү.

**«ХУДОЖЕСТВОЛЫ-ЭСТЕТИК ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Сәнғәт төрҙәре менән таныштырыу

Тирә-йүндә һәм сәнғәт әҫәрҙәрендә (музыка, һынлы сәнғәт, әҙәбиәт, халыҡ кәсептәре, архитектура, балет, театр, цирк, фотография һ.б.) матурлыҡты күрә

белергә, аңларға өйрәтеүҙе һәм уға ҡарата ыңғай мөнәсәбәт формалаштырыуҙы дауам итеү.

Эстетик хис-тойғоларҙы, зауыҡлы әҫәрҙәрҙән алынған тәьҫораттарҙы үҫтереүҙе, сәнғәт әҫәрҙәренең төрҙәрен айыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Зауыҡлы сәнғәт әҫәрҙәрендә тыуҙырылған образды һәм уның ниндәй саралар аша һүрәтләнеүен танырға, уның тураһында һөйләй, үҙ-аллы эшмәкәрлек өсөн тейешле материалдар һәм әсбаптар һайларға күнектереү.

Сәнғәт әҫәрҙәрен төрҙәре буйынса (әҙәбиәт, музыка, һынлы сәнғәт, архитектура, театр һ.б.) айырырға, уларҙы һүҙ ярҙамында әйтергә, төркөмләүҙе формалаштырыу.

Һынлы сәнғәт һәм музыка жанрҙары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Баланы һынлы сәнғәттә, музыкаль һәм әҙәби әҫәрҙәрҙе театрлаштырыу эшмәкәрлегендә тәьҫирле сараларҙы һайлау һәм ҡуллана белеү нигеҙҙәренә өйрәтеү, төрлө эшмәкәрлектә әүҙем ҡатнашыу теләге уятыу, уларҙы башҡарыуға кәрәк-яраҡтарҙы әҙерләү, башҡарыу ысулдарына, алымдарына өйрәтеү.

Һынлы сәнғәт һәм музыкаль әҫәрҙәр менән таныштырыуҙы дауам итеү. Рәссамдарҙың (И.Шишкин, И. Левитан, В. Серов, И. Грабарь, Ә. Лотфуллин, М.Нестеров, һ.б.) тыуған яҡтың матурлығын һүрәтләгән живопись әҫәрҙәрен өйрәнеүҙе дауам итеү. Графика тураһында төшөнсәләр биреү, уның һүрәтләү ысулдары менән таныштырыу. Китап биҙәүсе рәссамдар ижады тураһында һөйләү, уларҙың әҫәрҙәрен ҡарау, йөкмәткеһен һөйләргә өйрәтеү.

Архитектура тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Башҡарған функцияһы буйынса йорттарҙың, биналарҙың төрлө булыуын аңлатыу: кеше йәшәү өсөн төҙөлгән йорттар, һатыу итеү өсөн магазиндәр, күңел асыу өсөн һалынған театр биналары, мәсет, йәмғиәт йорто һ.б. (Мәскәүҙәге Останкино телебашняһы, Өфөләге Конгресс-холл, Өфө-Арена, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт драма театры бинаһы һ.б.), уларҙың оҡшашлығын һәм айырмаларын билдәләргә өйрәтеү. Балаларға ҡоролмаларҙың төҙөлөшө уның ниндәй маҡсатта ҡулланыуына бәйле икәнлекте төшөндөрөү. Иғтибарлыҡ тәрбиәләү: биналарҙың төрлө пропорцияла, ҡоролошо буйынса төрлө формала, биҙәлештәренең дә бер-береһенән айырылып тороуын күҙәтеп, айырырға һәм әйтергә өйрәтеү.

Әҙәби әҫәрҙәр, әкиәттәр менән таныштырғанда төрлө ҡоролмаларға иғтибар итергә өйрәтеү (тирмә, бейәләй өй, тауыҡ тәпәйендәге өй, боҙҙан ҡоролған өй, ҡомған, япраҡ һ.б.)

«Халыҡ сәнғәте», «халыҡ сәнғәте төрҙәре һәм жанрҙары» тигән төшөнсәләр менән таныштырыу. Ҡобайыр, халыҡ йыры, бейеүе, сигеү, балаҫ һуғыу, кейеҙ баҫыу халыҡ һөнәрҙәре төрҙәре менән таныштыра башлау.

Сәнғәт әҫәрҙәренә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**ҺЫНЛЫ СӘНҒӘТ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ**

Һынлы һәм музыка сәнғәтендәге жанрҙар менән таныштырыу.

Һынлы сәнғәттә, музыка әҫәрҙәрендә һәм театр эшмәкәрлегендә һүрәтләү саралары менән таныштырыу.

Буяу менән һүрәт төшөрөү сәнғәте (живопись) әҫәрҙәре һәм рәссамдар, тыуған яҡ һүрәтләнгән әҫәрҙәр менән таныштырыу.

Графика тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү, китап биҙәүсе рәссамдар менән таныштырыу (А.Мөхтәруллин, А.Хәйруллин, А Чудинов һ.б.).

Архитектура менән таныштырыуҙы дауам итеү: кешеләр йәшәгән йорттар, театр, мәсет, йәмғиәт йорто тигән төшөнсәләрҙе аңлатҡан ҡоролмалар менән таныштырыу: «Ихлас» мәсете, «Ҡунаҡ йорто-Гостиный двор», Өфөләге «Даско Гарден» рестарандар комплексы, «Планета» аквопаркы, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт йорто, Өфө дәүләт татар театры«Нур» һ.б.

Әкиәттә һүрәтләнгән йорттар төрө менән таныштырыу: тирмәкәй, бейәләй, ҡомған, япраҡ һ.б.

Ижади һөнәр эйәләренең эше менән таныштырыу. Телевидение, музей, театр, цирк, кино тураһында төшөнсәләр биреү һәм уларға ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. «Башҡортостан» киностудияһы тураһында мәғлүмәт биреү.

Халыҡ сәнғәте һәм уларҙың төрҙәре тигән төшөнсәләрҙе һиҙемләргә өйрәтеү. Ҡобайыр, халыҡ йыры, бейеүе, көнкүреш һөнәрҙәре төрҙәре менән таныштыра башлау.

Библиотека, музей тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү: Третьяков исемендәге дәүләт галерияһы, Зәки Вәлиди исемендәге милли библиотека, Башҡортостан Республикаһының милли музейы һ.б.

Сәнғәт әҫәрҙәренә ҡарата һаҡсыл ҡараш, ҡурсылыҡ тәрбиәләү.

**Предметлы һүрәт төшөрөү.** Натуранан һәм күҙ алдына килтереп, сәскә, еләк-емеш, уйынсыҡ һ.б. төшөрә белеү, уларҙың формаһын, пропорцияһын, төҫөн; яҫылыҡта нисек урынлашыуына ҡарап, форманың үҙгәреүен күрһәтә белеү. Натюрморт төшөрөү.

Таныш төҫтәрҙе нығытыу, *көрән, зәңгәр, күк, миләүшә* (фиолетовый) һәм төҫтәрҙең сағылыштары – *зәңгәр, алһыу, аҡһыл йәшел (салатный), сейә (вишневый)* менән таныштырыу.

Гуашь менән эш иткәндә төҫтәрҙе бер-береһе менән ҡушып, яңы төҫтәр алырға, уларҙы ҡуйы йәки асыҡ итер өсөн һыу өҫтәргә өйрәтеү.

Акварель, гуашь һәм башҡа материалдар менән, төрлө ысулдарҙы ҡулланып, һүрәт төшөрә белеү (штрих, тушевка, размывка, по-сырому, «сухая кисть» һ.б.).

Төрлө һүрәт төшөрөү материалдарын ҡулланып (төҫлө аҡбур, фломастер, гуашь, акварель, күмер ҡәләм, төрлө бумалалар һ.б.) эш итергә өйрәтеү.

Предметтың контурын ябай ҡәләм менән нығ баҫмай төшөрөргә һәм рәсемде буяғанда бысраҡ эҙҙәр ҡалдырмай эшләргә күнектереү.

Бумала менән төрлө ысулдар ҡулланып буярға өйрәтеү: киң һыҙыҡтарҙы бумала өбөрөһөнөң (ворс) бөтә киңлеге менән, нәҙек кенә һыҙыҡтарҙы – өбөрөнөң осо менән; бумаланың тик осо ярҙамында нөктәләр төшөрөргә өйрәтеү.

**Сюжетлыһүрәт төшөрөү**. Тирә-яҡ мөхиткә һәм әҙәби әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса сюжетлы композиция төҙөргә өйрәтеүҙе дауам итеү(«Йомро икмәк үҙ юлында кемдәрҙе осратҡан?», «Ике һаран айыу»).

Һүрәттә предметтарҙың, тирә-йүндәге күренештәрҙең һәм әҙәби әҫәр геройҙарының образын бирергә ынтылдырыу. Предметтарҙы яҫылыкта төрлөсә урынлаштырып булыуҙы төшөндөрөү (ята, тора, тәгәрәй, йәнле предметтар хәрәкәтләнә, ел иҫкәндә ағастар бөгөлә һ.б.). Һүрәттә кешенең һәм йәнлектәрҙең ябай ғына хәрәкәтен ҡул һәм аяҡ тороштарын үҙгәртеү аша күрһәтә белеү.

Ҡағыҙҙа композицияны дөрөҫ урынлаштыра белеү һәләтен үҫтереү. Сюжеттағы предметтарҙың дәүмәленә, формаһына балаларҙың иғтибарын йәлеп итеү (өйҙәр ҙур, ағастар тәпәш һәм бейек).

**Декоратив һүрәт төшөрөү**. Халыҡ биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәренең, көнкүреш кәрәк-яраҡтарының биҙәктәре менән таныштырыу. Башҡорт һәм рус халыҡ биҙәктәре элементтарын (әүернә, ромб; сәскә, япраҡ, сәскә бөрөһө, япраҡ мыйығы) ҡулланып, биҙәктәр, орнаменттар төҙөү һәм улар менән һүрәттәрҙе биҙәү (ҡулъяулыҡ, һарауыс, таҫтамал, билбау).

Һынлы сәнғәттең төрлө төрҙәрендә тасуирлау сараларын айыра белергә өйрәтеү (формаһы, төҫө, композицияһы һ.б.). Һүрәтләү материалдарының үҙенсәлектәре, тасуирлау маҡсатында төрлө төҫтәрҙе һәм уларҙың сағылыштарын ҡуллана, башҡорт һәм рус халыҡ биҙәү сәнғәте биҙәктәрен айыра һәм төшөрә белеүҙәге күнекмәләрен үҫтереү.

**Әүәләү.** Балсыҡтан, пластилиндан, тоҙло ҡамырҙан һ. б. әүәләү ысулдарына өйрәтеүҙе дауам итеү.

Һәр төрлө әүәләү ысулдарын белеү: скульптуралы һәм конструктив әүәләү йәки икеһен бергә ҡатнаштырып эшләү ысулы; стеканы ҡуллана белеү, әүәләгән предметтың өҫтөн еүеш сепрәк менән һылау, һыйпау.

Натуранан йәки күҙ алдына килтереп, 2-3 таныш предметты ябай хәрәкәттәрҙә күрһәтеп, скульптура төркөмө әүәләү. Үҙаллы сюжет таба, төрлө алымдар ҡулланып, үҙенең планы буйынса эш итергә өйрәтеү.

Һауыт-һабаны, төрлө ҙурлыҡтағы балдаҡтарҙы бер-береһенең өҫтөнә һалыу, йә стека ярҙамында йомро балсыҡ киҫәгенең эсенән балсыҡ соҡоп сығарыу ысулы менән эшләй белеү.

Әүәләнгән предметтың өҫтөн стека менән эшкәртә, рельеф, йә буяуҙар менән биҙәй белеү.

Үҙләштерелгән ысулдар һәм алымдар ҡулланып, төрлө формалағы предметтарҙы, уларҙың хәрәкәтен, торошон һүрәтләп, ябай ғына сюжетлы композиция уйлап әүәләү.

**Декоратив әүәләү.** Натуранан, йә күҙ алдына килтереп, балсыҡ киҫәгенән формаһы буйынса ҡатмарлы булған уйынсыҡтар, декоратив пластиналарға йәбештереп, йә соҡоп эшләнгән рельеф ысулын ҡулланып, орнаменттар төшөрә белеү.

Халыҡ уйынсыҡтарына (филимон, дымка, һ.б.) оҡшатып ҡоштарҙы, хайуандарҙы, кешеләрҙе әүәләргә өйрәтеү (ҡошсоҡ-һыҙғыртҡыс, утын ҡырҡҡан айыу, ем сүпләгән тауыҡ һ.б.).

Коллектив эште бергәләп башҡарыу.

**Ҡорама йәбештереү.** Ҡайсы менән эш итә белеү күнекмәһе: тура һыҙыҡ буйынса, йә төрлө йүнәлештәрҙә киҫеү, тиражлап киҫеү ысулы; ҡатмарлы һүрәтте силуэты буйынса киҫеү.

Икегә, йә гармун һымаҡ бөкләнгән ҡағыҙҙан дүртмөйөш, түңәрәк, оҙонса түңәрәк формалар киҫеү.

Һүрәтте бер нисә өлөштән йыйып йәбештерә, уларҙан сюжетлы композиция төҙөй белеү.

Башҡорт һәм руҫ халҡының биҙәү-ҡулланма сәнғәтенә таянып, геометрик фигураларҙы, үҫемлек элементтарын, ҡош, йәнлек һүрәттәрен ҡулланып, орнамент төҙөй, киҫә, йыя белеү.

Биҙәк (орнамент) элементтарын квадрат, тура дүртмөйөш, киң таҫма, силуэт эсендә симметрия һаҡлап урынлаштырыу ҡағиҙәләрен белеү һәм ҡулланыу.

**Көнкүреш өсөн зауыҡлы әйберҙәр эшләү ижады.**Ҡағыҙ менән эш итеү алымдарын камиллаштырыу. Ҡағыҙҙы төрлө йүнәлештә дүрт өлөшкә бөкләү, әҙер өлгөләр буйынса эшләү (кәпәс, кәмә, өй).

Ҡағыҙҙан күләмле фигуралар эшләү: тура дүртмөйөшлө ҡағыҙҙы бер нисә тигеҙ өлөшкә бүлеү, бөкләү, бөкләнгән урындан уны ҡырҡып, төрлө күләмле әйберҙәр эшләүҙе нығытыу (кәрзинә, өй).

Тәбиғәт (тубырсыҡ, ботаҡ, япраҡ) һәм башҡа материалдарҙан (тимер сыбыҡ, коробка) төрлө уйынсыҡтар, сувенирҙар эшләргә өйрәтеү (ҡулъяулыҡ, сәскә һ.б).

Ата-әсәйҙәргә, балалар баҡсаһының хеҙмәткәрҙәренә, сюжетлы-ролле уйындар уйнау өсөн үҙллы уйынсыҡтар эшләй белеү һәләтен үҫтереү.

Материалдарҙы һаҡсыл ҡулланырға кәрәклеген аңлатыу.

**ҠОРОЛМАЛАР ҠОРОУ ҺӘМ МОДЕЛЛӘШТЕРЕҮ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ**

Төрлө төҙөлөш-ҡоролма материалдарын һәм уларҙың үҙенсәнлектәрен белергә, айырырға өйрәтеү.

Предметтарҙы һәм өлгөләрҙе үҙ-аллы анализлап, уларҙың төп һәм ярҙамсы өлөштәрен билдәләп, бер-береһе араһында булған бәйләнештәрҙе табып, уларҙың мөһим үҙенсәлектәрен төркөмләп, ҡоролмалар төҙөүҙә төрлө ысул ҡулланып эш итә белеү.

Һүрәткә, фотоһүрәткә, чертежға ҡарап, кәрәкле төҙөлөш материалдары һайлап алып төҙөй белеү (өйҙәр, спорт һәм уйын ҡорамалары һ.б.). Оригами ысулы менән төрлө әйберҙәр эшләй алыу. Тәбиғи һәм ташландыҡ материалдарҙан уйынсыҡтар эшләй белеү.

Бер деталде икенсеһе менән алмаштырыу ҡағиҙәһен белеү һәм ҡулланыу.

Предметтарҙы төҙөп ҡороу планын күҙ алдына килтереү һәм уны тормошҡа ашыра белеү һәләтен үҫтереү.

Кем ниндәй ҡоролма төҙөргә тейешлеген алдан билдәләп, бергәләп эш итергә өйрәтеү. Төҙөлгән ҡоролманы анализлап, баһа бирергә өйрәтеү, етешһеҙлектәрен төҙәтә белеү.

Төрлө формалағы һәм ҙурлыҡтағы пластина, брус , цилиндр, конус һ.б. яңы деталдәр менән таныштырыу.

## МУЗЫКАЛЬ ТӘРБИӘ

Музыкаға ҡарата ҡыҙыҡһыныу һәм мөхәббәт, уны тоя белеү һәләтен үҫтереүҙе дауам итеү. Классик музыка, халыҡ көйҙәре һәм хәҙерге заман музыкаһы менән таныштырыу нигеҙендә музыкаль мәҙәнилекте формалаштырыу.

Балаларҙың музыкаль яҡтан һәләттәрен (тауыш юғарылығын, ритмын, тембрын, динамикаһын) айырыуҙы һәм ишетеүҙе үҫтереүҙе дауам итеү.

Йырлау, музыка аҫтында хәрәкәттәр яһау, балалар музыка уйын ҡоралдарында уйнау һәм импровизациялау күнекмәләрен үҫтереү; балаларҙың ижади әүҙемлегенә булышлыҡ итеү.

**Тыңлау.** Музыкаль әҫәрҙәрҙең жанрҙарын (марш, бейеү, йыр) айырырға өйрәтеү.

Музыкаль хәтерҙе үҫтереү, музыкаль әҫәрҙең айырым өлөштәре (инеш, йомғаҡлау, музыкаль фраза) буйынса уларҙы таныуҙы камиллаштырыу.

Квинта сиктәре эсендә өндәрҙең юғарылығын, яңғыраштары буйынса музыка уйын ҡоралдарын (клавишлы-бәрмә һәм ҡыллы: фортепиано, скрипка, виолончель, балалайка) айырыу күнекмәләрен үҫтереү. Төрлө музыка ҡоралдарының яңғырауын таныу (фортепиано, баян, ҡурай, ҡумыҙ). Әйтелгән ҡоралдарҙа башҡарылған йырҙарҙы тыңлатыу.

**Йырлау.** Балаларҙы тасуири итеп, тыныс, ҡыҫҡырмай, талғын, еңел, $ре_{ү}$ – $до_{ә}$ диапазонында йырларға өйрәтеү; тынды йыр алдынан һәм музыкаль фразалар araһында алырға өйрәтеү; һүҙҙәрҙе асыҡ әйтеү; йырҙы ваҡытында башлау һәм тамамлау; көйҙө дөрөҫ итеп башҡарырға өйрәтеү; элек өйрәнелгән йырҙарҙы яңғыҙ башҡарыу.

**Йыр ижады.** Бирелгән текстҡа ярашлы көй уйлап сығарырға өйрәтеү. Төрлө көйҙәрҙе яңғырашы буйынса ҡабул итеп, уларҙы үҙ-аллы характеры буйынса айыра белергә өйрәтеү: моңло һәм яғымлы бишек йырын, дәртле һәм теремек марш көйөн, һалмаҡ вальсты, шат күңелле бейеү көйөн һ.б.

**Музыкаль-ритмик хәрәкәттәр.** Көйҙөң характерына, музыкаль фразаларға ярашлы хәрәкәттәрҙе үҙгәртә белергә, төрлө предметтар менән, йәки уларҙан башҡа башҡарырға өйрәтеү.

Бейеү хәрәкәттәрен өйрәтеү: аяҡтарҙы алмашлап баҫып, аҙымлап атлау; тубыҡтарҙы күтәрә биреп баҫыу; ҡул суҡтарын һелкетеү; бармаҡтарҙы сиртеү; бер урында тыпырлау; бер аяҡта һикереп, алға табан аҙым яһау һәм икенсе аяҡ менән дә шул уҡ хәрәкәттәрҙе башҡарыу. Балаларға ошо хәрәкәттәрҙән торған бейеүҙәрҙе өйрәтеү.

Йырлы түңәрәк бейеүҙәре, шулай уҡ башҡа халыҡтарҙың бейеүҙәре менән таныштырыу. Музыкаль уйындарҙы һәм бейеүҙәрҙе үҙ-аллы башҡарыу. Йырлы түңәрәк бейеүҙәренең йөкмәткеһен сәхнәләштереү.

Төрлө уйындарҙа әкиәт хайуандарын һәм ҡоштарын (ат, кәзә, төлкө, айыу, ҡуян, торна, ҡоҙғон һ.б.) кәүҙәләндерергә өйрәтеү.

Музыка ҡоралдарында ябай ғына көйҙәрҙе яңғыҙ һәм бәләкәй төркөмдәр менән уйнарға өйрәтеү.

**Музыкаль-уйын һәм бейеү ижады.**

Бейеү ижадын үҫтереү; ижадта үҙ-аллылыҡ күрһәтеп, бейеүҙәр өсөн хәрәкәттәр уйлап сығарырға, бейеү композицияһын төҙөргә өйрәтеү.

Үҙ-аллы йырҙың эстәлеген сағылдырыусы хәрәкәттәр уйлап сығарырға өйрәтеү.

Йырҙарҙың, әйлән-бәйлән уйындарының эстәлеген сәхнәләштереү теләге уятыу.

**Балалар музыка уйын ҡоралдарында уйнау.** Балаларҙы иң ябай көйҙәрҙебалалар музыка уйын ҡоралдарында уйнарға; көйҙөң үҫеш динамикаһын һәм темпынһаҡлап, таныш йырҙарҙы шәхси рәүештә һәм бәләкәй төркөмдәр менән башҡарырға өйрәтеү.

Балалар ижадын үҫтереү, уларҙы әүҙем рәүештә үҙ-аллы башҡарыуға дәртләндереү.

**«ФИЗИК ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Сәләмәт тормош тураһында башланғыс төшөнсә биреү

Һаулыҡты нығытыу сараларын башҡарыу, төп хәрәкәттәрҙе үтәү оҫталығын байытыу.

Һәр төр хәрәкәттә кәүҙә торошон дөрөҫ тотоуҙы формалаштырыу, әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙ-аллы һәм теләк менән башҡарыуҙы формалаштырыу.

Тән, хәрәкәт матурлығына иғтибар тәрбиәләү.

Медицина хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүе аҫтында тәбиғи сараларҙы ҡулланып, (һыу, һауа, ҡояш) сыныҡтырыу процедуралары физик күнекмәләр менән аралаштырып башҡарыуҙы дауам итеү.

Көн һайын 8-10 минутлыҡ иртәнге гимнастика үткәреүҙе дауам итеү. Дәрестәрҙә 1-3 минутлыҡ, улар араһында 10 минутлыҡ ял минуттары үткәреү.

Балаларҙы үҙ-аллы спорт һәм хәрәкәтле уйындар уйнарға өйрәтеү: ҡышын санала, саңғыла йөрөү; йәйен – ике тәгәрмәсле велосипедта, тәгәрмәсле конькилә йөрөү, йөҙөргә өйрәтеү һ.б.

Физик яҡтан сыныҡтырыу һәм һауыҡтырыу саралары аша балаларҙа үҙ-аллылыҡ, ижадилыҡ, психик яҡтан тотороҡлоҡ һәм әхлаҡи һыҙаттар тәрбиәләү.

## Физик культура

Баланың кәүҙәһенең дөрөҫ торошон формалаштырыуҙы дауам итеү.

Хәрәкәтләнеү күнекмәләрен камиллаштырыу.

Психофизилогик сифаттар – йылғырлыҡ, көс, сыҙамлыҡ, һығылмалыҡ - тәрбиәләү.

Терәк предметтан этенеп, еңел генә йүгерә һәм атлай белеү. Баҫтырышып йүгереү, ҡаршылыҡтар үтеп йүгереү.

Тиҙлекте үҙгәртеп, гимнастика стенаһынан үрмәләү.Йүгереп килеп оҙонлоҡҡа һәм бейеклеккә һикереү. Һикереү төрөнә ҡарап, аяҡтар менән этенә белеү, йомшаҡ урынға һикергес аша һикереү, тигеҙлек һаҡлап ергә һикереп төшөү.

Предметты ташлағанда ҡулдарҙы һелтәү һәм әйберҙеырғытыуҙы бергә башҡара белеү, тупты һыңар ҡул менән тота белеү, тупты ергә ике ҡул менән алмашлап һуғып, хәрәкәтләнеү.

Саңғыла аяҡтарҙы шыуҙырып йөрөү, ҡалҡыу урынға саңғыла менә белеү, тауҙан шыуып төшөү, ике тәгәрмәсле велосипедта йөрөү, самокатта аяҡтарҙы алмаштырып этеп йөрөү. Түрә-йүндәге аралыҡта йүнәлеште дөрөҫ билдәләү.

Спорт уйындарының ябай ғына элементтарына өйрәтеү, ярыш рәүешендә уйындар ойоштороу.

Өлкәндәргә спорт йыһаздарын әҙерләргә, аҙаҡ – йыйышырға ярҙамлашыу.

Баланың шәхес булараҡ формалашыуына һәр яҡлап ярҙам итеү.

**Хәрәкәтле уйындар.**Таныш булған уйындарҙы үҙ-аллы ойоштororға тырышыуҙы, уйында әүҙемлек күрһәтеүҙе хуплау.

Балаларҙа хәрәкәтле уйындарҙа, ярыштарҙа, эстафеталарҙа ҡатнашырға ынтылыш тәрбиәләү. Спорт уйындарына һәм күнегеүҙәренә өйрәтеү.

Уйын ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәп, аҙағына тиклем уйнау. Ярышыу, күмәкләп бер командала уйнау һәләтен үҫтереү.

## 6 йәштән 7 йәшкә тиклемге балаларға белем биреү эшмәкәрлеге йөкмәткеһе.
## (Мәктәпкә әҙерлек төркөмө)

Етенсе йәшкә сыҡҡан балалар уйындарҙа көндәлек йәшәйештә кешеләр араһындағы ҡатмарлы мөнәсәбәттәрҙе сағылдырып уйнай башлайҙар: бала ҡарау, эшкә йөрөү, сирҙе дауалау, төрлө һөнәрҙәргә хас эшмәкәрлекте ойоштороу һ.б.

Уйын даирәһе ҡатмарлана һәм үҙ эсенә бер нисә сюжет йүнәлешен ала. Балалар һәр уйнаусының үҙ роле нисек башҡарыуын күҙ алдында тотоп, уға ярашлы үҙҙәренең тәртибен, үҙ-үҙен тотоуын, ҡылыҡ-холҡон сюжетҡа ярашлы үҙгәртә ала. Мәҫәлән, бала табибҡа ауырыу кеше булып түгел, ә ауырыу – уҡытыусы, ауырыу – әсәй, ауырыу – сәс алыусы ролендә мөрәжәғәт итә.

Ролде башҡарыу образ тыуҙырыуға ғына ҡайтып ҡалмай, ә уйындың сюжетҡа бәйле үҫешен дә сағылдыра. Һалдат үҙенең командиры ҡушҡан фарманды үтәй, төҙөүсе прораб күрһәткән план буйынса эшләй һ.б.

Әгәр ҙә уйын барышында яңы роль кәрәклеге килеп тыуһа, бала был ролде лә үҙенеке менән бер рәттән уйнай башлай. Тиҫтерҙәренең ролде нисек башҡарыуын балалар һүҙҙәр ярҙамында аңлата алалар.

Һынлы сәнғәттә лә балалар һүрәтләгән образдар ҡатмарлана төшә. Һүрәттәрҙең төҫлөлөгө арта, предмет өлөштәрен сағылдырыуға айырыуса иғтибар бирелә. Һүрәттәрҙә балаларҙың енси яҡтан айырмаһы сағыла башлай; ҡыҙҙар күберәк үҙҙәре хыял иткән образдарҙы төшөрә (балерина, принцесса, топ-модель һ.б.), ә малайҙар – төрлө техникаға, космосҡа, хәрби темаларға бәйле рәсемдәр төшөрә.

Кеше һүрәтен төшөргәндә лә бөтә тән өлөштәренә иғтибар бирелеүе һәм уларҙың бер-береһенә ҡарата дөрөҫ пропорцияла булыуы күҙгә ташлана: ҡул

суҡтарындағы бармаҡтар, күҙҙәр, ҡаштар, эйәк һ.б.  Кеше өҫтөндәге кейемдә лә төрлөсә биҙәй башлайҙар.

Ҡоролмалар төҙөүҙә күберәк төҙөлөш материалдары ҡулланыла. Бирелгән планды, төҙөлгән ҡоролманы балалар еңел анализлай һәм уларҙың өлөштәрен үҙҙәренә таныш күләмле предметтар менән сағыштырып, формаһын билдәләй алалар.

Балаларҙың үҙҙәре уйлап төҙөгән ҡоролмаларында симметрия һәм пропорция һаҡлана, уларҙың дөрөҫ ҡоролоуы, төҙөлөүе күҙ ҡарашы ярҙамында билдәләнә. Балалар ҡоролманы төҙөү планын еңел күҙ алдына килтерә, кәрәкле материалдарҙы таба һәм төҙөү тәртибен һәм ысулын билдәләй алалар.

Ҡоролманы был йәш балалары үҙ-аллы уйлап йәки алдан ҡушылғанса төҙә алалар. Ҡағыҙ менән эшләргә (бөкләп, бөгөп, йыртып, йомарлап), тәбиғи материалдарҙы ҡулланырға өйрәтеү дауам итә.

Балаларҙың күҙаллауы үҫешә, ләкин бер үк ваҡытта предметтың бер нисә үҙенсәлеген улар иҫәпкә алып эш итергә ҡыйынһыналар.

Фекерләү, дөйөмләштереү, сағыштырыу һәләте үҫешә, шулай ҙа балаға күргәҙмәлелеккә таяныу кәрәк әле.

Баланың иғтибары ирекле була башлай, иғтибарын йәлеп итеп  бала үҙ теләге менән 30 минутҡа тиклем берәй шөғөл менән булыша ала.

Баланың телмәре әүҙем үҫешә: һүҙ байлығы күренеп арта, телмәрендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр, антонимдар, синонимдар осрай башлай.

Диалогик һәм монологик телмәрҙең ҡайһы бер төрҙәре үҫешә.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә мәктәпкәсә йәш тамамлана. Тирә-йүнде үҙләштереү кешелек тарафынан ижад ителгән донъя тип ҡабул ителә, кешеләр араһындағы ыңғай мөнәсәбәт итеү ҡанундары үҙләштерелә, енси яҡтан үҙенең кем булыуына төшөнә, уҡыусы булыу теләге формалаша.

**«СОЦИАЛЬ-КОММУНИКАТИВ ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Йәмғиәттә йәшәй белеү күнекмәләрен үҙләштереү, аралашыуҙың үҫеше һәм әхләҡи тәрбиә

Алты йәшлек баланың бөгөнгө заман тормошона тулы хоҡуҡлы йәмғиәт ағзаһы булып инеп китеүен тәьмин итеү өсөн балалар баҡсаһында түбәндәге бурыстар ҡуйыла:

- баланың социаль яҡтан шәхси үҫешен уның предметлы донъяны һәм кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе үҙләштереү эшмәкәрлеге аша башҡарыу;
- баланың тирә-йүндәге предметтарҙы, күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы хис-тойғо аша ҡабул итә алыуына ирешеү;
- һәр төр эшмәкәрлекте үҙе теләп, үҙ ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында башҡарырға ынтылыу теләген уятыу;
- бөтә төр эшмәкәрлектәрҙе бергә ҡушып, бер маҡсатта башҡарыу;
- бала ҡыҙыҡһыныуының бөтә төрҙәренә лә таянып (яңы асышҡа ынтылыу, хис-тойғо, үҙенең практик тәржибәһе аша) эш итеү;
- балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәренең, ата-әсәләрҙең, мәктәп уҡытыусыларының берлектә эш итеүенә ирешеү;
- төрлө педагогик баһалауҙы ҡулланыу;

-баланың социаль яҡтан үҫеш кимәлен йәш, енси, шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып күҙәтеп барыу һәм кәрәкле төҙәтмәләр индереү.

Социаль яҡтан шәхси үҫеште тәьмин итеү йүнәлештәре:

Минең хис-тойғоларым (нимәгә шатланам, ҡыуанам, ҡайғырам, үпкәләйем, илайым);

Мин үҙем тураһында нимәләр беләм? (йыр яратам, рәсем төшөрәм, бәләкәй туғанымды яратам, атайым-әсәйем менән һөйләшергә, уйнарға яратам, олатайым-өләсәйем менән осрашырға ынтылам, уларға ярҙамлашам);

Аралашыу саралары (һүҙ менән, күҙ ҡарашы, тышҡы ҡиәфәт, йыр-моң аша һ.б.);

Беҙ бер-беребеҙҙе ниндәй итеп күрәбеҙ? (аҡыллы, тәртипле, уҫал, хәйләкәр, ярҙамсыл, йомарт, тырыш, уңған);

Башҡалар араһында үҙеңде нисек тотаһың? (үсекмәй, үпкәләмәй, ыҙғышмай, тыныс, мөләйем, урын бирәм, ярҙам итәм, йәлләйем, яҡшы һүҙҙәр әйтәм, йыуатам һ.б.);

Үҙ-ара аралашыу мәҙәниәте (ихтирамлы, иғтибарлы булып, йылмайып, тылсымлы һүҙҙәр ҡулланып, ололап, тыныс тауыш менән өндәшеп һ.б.).

Тиҙ һәм дөрөҫ итеп үҙ-аллы йыуына, ҡоротҡансы һөртөнә, тешен таҙарта, ашағандан һуң ауыҙ сайҡата, йоҡо алдынан аяҡтарын йыуа белергә күнектереүҙе дауам итеү.

Шәхси гигиена әйберҙәрен (тараҡ, теш щеткаһы, таҫтамал, ҡулъяулыҡ һ.б.) тотона белеүҙе ныҒытыу. Үҙенең тышҡы ҡиәфәтенә иғтибарлы булып, бөхтәлек, таҙалыҡ һаҡлап, кейемендәге етешһеҙлектәрҙе үҙ-аллы йүнәтә белергә күнектереүҙе дауам итеү.

## БАЛА ҒАИЛӘЛӘ ҺӘМ КЕШЕЛЕК ЙӘМҒИӘТЕНДӘ

**«Мин» образы.**Кешенең тормошондаүҙе үҫкән һайын үҙгәреүҙәр була; кескәйҙәр балалар баҡсаһына йөрөй, уҡыусы мәктәптә уҡый, оло кеше эшләй, ҡарт кеше үҙенең тәжрибәһен йәштәргә өйрәтә. Баланың үткән, бөгөнгө һәм киләсәктәге тормошо тураһындағы төшөнсәләрҙе тәрәнәйтеү.

Гендер төшөнсәһе тураһындағы белемдәрен киңәйтеү. Балаларҙа ҡыҙҙарға һәм малайҙарға ғына хас булған һыҙаттарҙы үҫтереү.

**Ғаилә.** Ғаилә тарихи тураһындағы мәғлүмәттәрҙе тыуғанил тарихына бәйләп тәрәнәйтеү (һәр бер быуындың ил тарихында ҡалдырған эҙе).Балаларға ата-әсәйҙәрҙең, олатай-өләсәйҙең хәрби наградалары тураһында һөйләү.

Өй адресын, телефон номерын, ата-әсәләрҙең исем-шәрифтәрен, телефон номерҙарын, һөнәрҙәрен хәтерҙә ҡалдырыуҙы ныҒытыу.

**Балалар баҡсаһы.**Тирә-яҡ мөхит тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү (бинаны, бүлмәне, уйын майҙансығын, балалар баҡсаһынбиҙәү, һ.б.). Балаларҙы матур, сағыу әйберҙәргә иғтибар итеп, уларҙы айырып күрһәтергә өйрәтеү (стенаның бияуына, йорт йыһаздарына, уйын майҙансығының ҡоролмаларына һ.б.).

Балаларҙың үҫешенә булышлыҡ итеүсе мөхитбулдырыу эшенә уларҙың үҙҙәрен йәлеп итеү (мини-музей, күргәҙмәләр, библиотека, төҙөүселәр, эҙләнеү-тикшеренеү, тәжрибәләр үткәреү үҙеге һ.б.).Уратып алған мөхитте биҙәлеше яғынан баһаларға өйрәтеү; үҙ фекерендәлилләй белеү.

Балаларға коллективтың әүҙем ағзаһы тигән төшөнсәне аңлатыу: балалар баҡсаһы тормошонда кескәйҙәр һәм ата-әсәләр менән төрлө эшмәкәрлектә ҡатнашыу аша, проект эштәр үтәү барышында (кескәйҙәр төркөмөн балалар баҡсаһына өйрәтеү, байрамдарға әҙерләнеү, ярыштарҙа ҡатнашыу һ.б.) күмәк файҙалы эш башҡарыла.

**ҮҘ-ҮҘЕҢДЕ ХЕҘМӘТЛӘНДЕРЕҮ, ҮҘ-АЛЛЫЛЫҠ, ХЕҘМӘТ ТӘРБИӘҺЕ**

**Әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереү.** Тиҙ һәм дөрөҫ итеп үҙ-аллы йыуына, ҡоротҡансы һөртөнә, тешен таҙарта, ашағандан һуң ауыҙын сайҡата, йоҡо алдынан аяҡ йыуа белергә күнектереүҙе дауам итеү.

Шәхси гигиена әйберҙәрен (тараҡ, теш щеткаһы, таҫтамал, ҡулъяулыҡ) тотона белеүҙе нығытыу. Үҙенең тышҡы ҡиәфәтенә иғтибарлы булып, бөхтәлек, таҙалыҡ һаҡлап, кейемендәге етешһеҙлектәрҙе үҙ-аллы йүнәтә белергә күнектереүҙе дауам итеү.

**Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү.** Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереүҙең бөтә төрҙәрен тайпылышһыҙ үтәү мотлаҡ, был хеҙмәттә үҙ-аллылыҡ, йыйнаҡлыҡ, таҙалыҡ, бөхтәлек, эшсәнлек зарур икәнлеген аңлатыу. Йәшәү һәм эш урынын һәр саҡ тәртиптә тотоуҙы ғәҙәткә индерергә өйрәтеү.

**Хужалыҡ-көнкүреш хеҙмәте.** Балаға хеҙмәттә үҙ-аллылыҡ мөмкинлеге биреү: бүлмә гөлдәренә һыу һибеү, төптәрен йомшартыу, япраҡтарын һөртөү, йыуыу; балыҡтарҙы ашатыу, аквариумда һыу яңыртыу; тутыйғош, терпе, йорт ҡуянын тәрбиәләү; шөғөлдәргә ҡулланмалар, әсбаптар таратыу; иртәнге, төшкө, киске ашҡа өҫтәл әҙерләү; китаптарҙы «дауалау», уйынсыҡтарҙы йыуыу, бәләкәй көрәк менән ҡар таҙартыу; уйын майҙансығын сүп-сарҙан таҙартыу, һепереү һ.б.

«Эшең файҙа өсөн, өйрәнеүең үҙең өсөн», тип иҫкәртеп тороуҙың һәйбәт һөҙөмтәләре. Күмәк эштә әүҙем булырға ғәҙәтләндереп, баланы тәрбиәле, мәҙәниәтле, ата-әсәһе, халҡы, йәмғиәт өсөн эшһөйәр һәм файҙалы кеше булып үҫтереү сараларын ҡулланыу.

**Тәбиғәттәге хеҙмәт.** Тәбиғәт мөйөшөндә, уйын майҙансығында дежурлыҡ бурыстарын үҙ-аллы намыҫ менән башҡарырға күнектереү.

Йәшелсә-емеш, сәскәләр өсөн түтәлдәр әҙерләү, үрсетмәләрҙе күсереп ултыртыу, уларҙы тәрбиәләү ысулдарын башҡарырға өйрәтеү.

Ҡышлаусы ҡоштарға ниндәй тәрбиә кәрәклеген ысынбарлыҡта күрһәтеү.

Күмәк хеҙмәттә һәр бер балаға эш бүлеп биреп, уның башҡарылыу һөҙөмтәһен күрергә, баһаларға ғәҙәтләндереү.

**Ололарҙың хеҙмәтен хөрмәтләү.** Ололарҙың хеҙмәте һәм йәмғиәттәге роле тураһында һөйләү. Эшләгән кешеләргә ҡарата хөрмәт хисе тәрбиәләү.

Төрлө профессия һөнәрҙәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, бигерәк тә атай-әсәй һөнәрҙәренә һәм уларҙың эшләгән урындарына хөрмәт тәрбиәләү.

**ХӘҮЕФҺЕҘ ЙӘШӘҮ НИГЕҘҘӘРЕН ФОРМАЛАШТЫРЫУ**

**Тәбиғәттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү**Үҙеңде нисек тәбиғәттә хәүефһеҙ тотоу ҡағиҙәләрен ҡабатлау һәм нығытыу.

Экологик мәҙәниәт нигеҙҙәрен формалаштырыуҙы дауам итеү. «Ҡыҙыл китап» менән таныштырыу. Ҡыҙыл китапҡа ингән айырым хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһы менән таныштырыу. Тәбиғәт күренештәре тураһындағы белемдәрен

киңәйтеү (йәшен, күк күкрәү, йәйғор, ел-дауыл, ҡойон, һ.б). Ундай осраҡтарҙа үҙеңде нисек тоторға кәрәклекте өйрәтеү.

**Юл хәрәкәтендәхәүефһеҙлек һаҡлау.** Балаларҙың урам төҙөлөшө һәм юл хәрәкәте тураһындағы белемдәрен системаға һалып ҡабатлатыу һәм нығытыу. «Майҙан», «Проспект», «Бульвар» төшөнсәләре менән таныштырыу.

Хәрәкәтләнеүҙә юл билдәләрен, маршруттарҙы, план-схемаларҙы файҙаланып, арауыҡта йөрөргә өйрәтеү.

Тыйыусы билдәләр: «Һулға (уңға) боролоу тыйыла», «Хәрәкәт тыйыла», «Йәйәүлеләргә юл ябыҡ», «Инеү тыйыла», «Тукталыу тыйыла» һ. б. менән танышыуҙы дауам итеү. Балалар рәсемдәрендә юл билдәләре сағылышын хуплау. Бойороусы билдәләр: «Тура барырға», «Һулға (уңға) барырға», «Түңәрәк буйынса барырға» һ. б. менән таныштырыу. Юл хәрәкәтендә ҡабул ителгән символик билдәләрҙең мәғәнәләренә төшөнөргә булышлыҡ итеү. Мәғлүмәт биреүсе-күрһәтеүсе билдәләр: «Бер яҡлы хәрәкәтле юл», транспорттың барыу тиҙлеге «40», «70» һ.б.

Балаларға сервис билдәләренең: «Ашау-эсеү пункты», «Яғыулыҡ ҡойоу станцияһы», «Телефон», «ЮХИДИ -ГИБДД посты», «Ял итеү урыны» һ. б.-ҙың ни өсөн ҡулланылышын аңлатыу.

Балаларҙы юлдар төҙөүсе махсус техника төрҙәре, төҙөүселәр һөнәре хеҙмәте менән таныштырыу. Хәүефһеҙ хәрәкәт итеү юлдарҙың сифаты менән бәйле булыуҙы) төшөндөрөү.

Балаға өйҙән балалар баҡсаһына, йорт эргәһендәге йәмғиәт биналарына (магазин, почта, поликлиника һ.б.) ололар оҙатыуында бара-ҡайта белеүҙе төшөндөрөү һәм күнектереү.

**Йәшәйештә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү.** Балаларҙың балалар баҡсаһында, өйҙә, йәмәғәт урындарында үҙ-үҙҙәрен әҙәпле тотоу ҡағиҙәләрен үтәй белеүҙәрен нығытыу; башҡаларҙан да был ҡағиҙәләрҙең үтәлеүен талап итергә өйрәтеү. Кәрәк булған осраҡта, ашығыс ярҙам саҡырыу телефоны номерын йыйырға өйрәтеү.

Көнкүреш приборҙары менән дөрөҫ ҡуллана белеүҙе нығытыу.

Төрлө уйындарҙа һәр бер йыл миҙгелендә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәргә күнектереү. Ҡурҡыныс тыуған осраҡтарҙа ярҙам һорап ололарға мөрәжәғәт итергә өйрәтеү. «Өйҙә яңғыҙ», «Юғалдым», «Аҙаштым», «Сит кеше осраны» тигән осраҡтарҙа үҙ-үҙеңде тота белеү күнекмәләрен нығытыу.

ҒХМ (Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы), янғындан ҡотҡарыу хеҙмәте, ашығыс медицина ярҙамы хеҙмәте тураһында белемдәрҙе киңәйтеү. Ярҙам һорап мөрәжәғәт итеү телефондарын ҡабатлау, ятлау.

Үҙенең исем, фамилияһын, йәшен, өй адресын, ата-әсәһенең телефон номерын яттан әйтә белеүенә өлгәшеү.

## «ТАНЫП-БЕЛЕҮ ҮҪЕШЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

## КОГНЕТИВ ҮҪЕШ

**Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлеге үҫеше.** Махсус системаға һалынған сенсор эталондар һәм перцептив алымдар ярҙамында объекттарҙы өйрәтеү төрҙәрен дөйөмләштереү, танып-белеү маҡсаттарына ярашлы һайлап алыу.

Таныш булмаған объекттарҙы өйрәнгәндә үҙ тәжрибәһенә таянырға, өйрәнелгән төрлө тикшеренеү ысулдарын ҡулланырға күнектереү.

Проект эшенең шарттарына һәм маҡсаттарына ярашлы кәрәкле мәғлүмәттәрҙе эҙләү, табыу ысулдарын билдәләргә өйрәтеү.

Бирелгән алгоритм буйынса үҙ-аллы эш итергә өйрәтеү: маҡсат ҡуйыу, уға ирешеү өсөн эҙмә-эҙлекле эш төрҙәрен башҡара белергә күнектереү. Әгәр һөҙөмтәнең ҡуйылған маҡсатҡа тура килмәгәнлеге асыҡланһа, уны төҙәтеү өсөн үҙ эшен үҙгәртә алыу һәләтен үҫтереү.

Балаларҙы танып-белеү маҡсатында эҙләнеү эштәре башҡарыу өсөн үҙ-аллы уның моделдәрен ҡорорға һәм башҡарырға өйрәтеү.

**Сенсор тәрбиә.** Һиҙеү-тойоу органдарының һәләтен үҫтереүҙе дауам итеү (ҡарау, ишетеү, еҫкәү, тәмләү, тейеп, һәрмәп тойоу).

Ҡулдарҙың һәм күҙҙәрҙең хәрәкәтләнеү һәләтен, етеҙлеген үҫтереү, ҡул суҡтары һығылмалылығын, ваҡ предметтарҙы һәрмәп тотоу, сүпләү эштәрен башҡара белергә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Тирә-йүндәге күренештәргә, предметтарға иғтибар йүнәлтә, уларҙың айырмаһын, оҡшашлығын таба, төрлө үҙенсәлектәре буйынса (формаһы, дәүмәле, төҙөлөшө, төҫө, тауышы һ.б.) төркөмләй, матур төҫтәрҙең сағылышы менән һоҡлана белеү һәләтен үҫтереүҙе дауам итеү.

Төҫтәр спектрын нығытыуҙы һәм төп төҫтәрҙең сағылышын билдәләй белеүҙе, предметтарҙы тормошта ҡабул ителгән эталондары буйынса айыра белеүҙе (форма, төҫ, материал төрө һ.б.) дауам итеү.

Дөйөм сифаттары (форма, төҫ, төҙөлөшө, дәүмәле, ауырлығы һ.б.) буйынса предметтарҙы төркөмләй белеү.

Балаларҙың хроматик һәи ахроматик төҫтәр тураһындағы белемдәрен нығытыу.

**Проект эшмәкәрлеге.** Проект эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә үҫтереү, мәғлүмәттәр сығанағының дөрөҫлөгөнә иғтибар биреү, проекттың ыңғай һәм кире һөҙөмтәләрен күрә белеү.

Норматив проект өҫтөндә эшләгәндә уның һөҙөмтәләре тураһында фекер алышырға өйрәтеү.

**Дидактик уйындар.** Балаларҙы бер-береһе менән ярышып уйнарға өйрәтеүҙе дауам итеү (лото, мозаика, домино, шашки). Уйындарҙы ойоштора белергә һәм алып барыусы ролен башҡарырға өйрәтеү.

Уйында баланың хәл-хәрәкәтен алып барыусының һәм башҡа уйнаусыларҙың башҡарған хәрәкәттәренә тап килтерә белергә өйрәтеү.

Уйын һайлағанда һәм уның маҡсатына ирешеү юлдарын эҙләгәндә үҙ-аллылыҡ һәм тапҡырлыҡ күрһәтеү мөмкинлеген биреү.

Өҫтәл-баҫма уйындарында ҡағиҙәләрҙе тәрбиәсе күрһәтеүенә оҡшатып, үҙ-аллы уйнарға күнектереү.

Ҡайһы бер дидактик уйындарҙы әҙерләгәндә балаларҙы был эшкә йәлеп итеү «Тауышынан тап!», «Һәрмәп, атамаһын әйт!».

Уйынды бергәләп, ойошҡан рәүештә тамамлау һәм уйын аҙағында бергәләп һәр кемдең уйынына баһа биреү һәләтен формалаштырыу.

## Башланғыс ябай математик төшөнсәләр

**Һан һәм иҫәп.** 3 һанын ҡушыу һәм алыу юлы менән 10 эсендәге һандарҙың барлыҡҡа килеүен аңлатыу.

Теләгән һандан башлап 10 эсендә кире һәм ыңғай һанау.

Тиҫтәләп һәм йөҙәрләп һанарға өйрәтеү.

0-дән 9-ға тиклемге цифрҙар менән таныштырыу. Теләгән цифрҙың алдынан һәм артынан килгән цифрҙы таба, әйтә, күрһәтә белеү.

10 һанына ингән теләгән бер һанды төҙөй белеү.

Тәңкә аҡсалар менән таныштырыу, улар ярҙамында 10 эсендәге төрлө һандарҙы табыу.

«Ҡушырға», «алырға», «тигеҙ була» билдәләре менән танышыу.

Һандар һәм билдәләр (тамғалар) ярҙамында ябай мәсьәләләр сисеү.

**Дәүмәл.** Рәт эсендәге бер үк төҫтә булған предметтарҙы үҙ-ара дәүмәле буйынса һәм шулай уҡ алдан һәм арттан килгән рәттәге предметтарҙы һандары буйынса сағыштыра белеү.

Шартлы үлсәм ярҙамында предметтарҙың оҙонлоғон, киңлеген, бейеклеген үлсәргә өйрәтеү.

Шыйыҡ һәм һибелеүсән эсемлектәрҙең ауырлығын билдәләп, ауырлыҡтың массаһын әйтә белеү.

Предметтарҙы һәм фигураларҙы 2 һәм 4 тигеҙ өлөшкә бүлеү, уларҙы үҙ-ара бөтөн менән сағыштыра һәм дәүмәлдең атамаларын әйтә белеү (яртыһы, өсөнсө, дүртенсе өлөшө).

**Геометрик фигуралар менән таныштырыу.** Күпмөйөштәр менән таныштырыу. Төрлө күпмөйөштәрҙе танып, әйтә белеү.

Төрлө геометрик фигураларҙы бер нисә бәләкәй фигураларға бүлә белеү (бөкләү, киҫеү ярҙамында).

Ҡағыҙҙа төрлө геометрик фигуралар төшөрөү.

Яҫылыҡтағы нөктә, нур төшөнсәләре.

Тура, өҙөк, тулҡын һыҙыҡтар менән таныштырыу.

**Арауыҡтағы йүнәлеш.** Бер-береңә ҡарата урынды, йүнәлеште аңлай, таба белеү (Мараттың алдынан тор, Зиләнең уң ҡулын ал).

Уйынсыҡтарҙың, предметтарҙың яҫылыҡтағы урындарын билдәләй белеү.

Юл ҡағиҙәләрен өйрәнеүҙе дауам итеү.

Өй адресын белеү, балалар баҡсаһына барған юлды таный, аңлатып һөйләй белеү, яҡын-тирәләге йәмәғәт биналарын (почта, магазин, мәктәп) белеү.

Дәфтәр, китап битендәге йүнәлештәрҙе аңлай, таба белеү. Шаҡмаҡ һәм тура һыҙыҡлы дәфтәр битендә юлдарҙы һ.б. билдәләрҙе таба белеү.

Схема, шаблон (ҡалып), линейка, трафарет менән таныштырыу.

**Ваҡыт төшөнсәләре.** Йыл һәм миҙгел айҙарының атамаларын белеү, йыл төшөнсәһен аңлатыу.

Сәғәт, һауа температураһын билдәләүсе термометр менән таныштырыу.

Календарь тураһында төшөнсә. Мөсәл календары тураһында мәғлүмәт биреү.

**ТИРӘ-ЙҮН ПРЕДМЕТТАРЫ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ**

Предметтар доньяһы тураһындағы белемдәрҙе байытыу. Транспорт төрҙәре тураһында белемдәрен киңәйтеү (һыу, һауа, ер өҫтө, ер аҫты транспорттары).

Кешеләрҙең көнкүрешен еңеләйтеүсе предметтар (компьютер, робот, станок, телефон, микротулҡын мейесе һ.б) тураһындағы төшөнсәләрҙе формалаштырыу. Тормошта йәшәүе еңел һәм уңайлы булһын өсөн предметтарҙың яңынан-яңы үҙгәртеп торолоуы тураһында аңлатыу. Предметтарҙың барлыҡҡа килеү тарихы менән таныштырыу.

Тәбиғәт обьекттары һәм кеше ҡулы ярҙамында эшләнгән предметтар менән һоҡлана белеү тойғоһо тәрбиәләү. Тәбиғәттә булмаған предметтарҙы кеше үҙенең хеҙмәте менән барлыҡҡа килтергән: ҡанатһыҙ оса алмағас, самолет уйлап сығарған. Буйы тәпәш булып, бейектә эштәр башҡара алмағас, кран эшләгән. Былар барыһы ла кешенең аҡыл һәм ҡул көсө хеҙмәте һөҙөмтәһе икәнлекте аңлатыу.

Предметтың билдәләре һәм материалдарының сифаттары тураһындағы төшөнсәләрҙе дөйөмләштереү. Нимәлер эшләү өсөн кеше тәбиғәттәге төрлө материалдарҙы ҡулланырға өйрәнә.

Тәбиғәттә булмаған объекттарҙы ҡул эше һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килтереүҙе аңлатыу һәм унда кеше хеҙмәтенең ҙур роль уйнауы тураһында һөйләү. Предметтарҙы тикшереүҙә төрлө ысулдарҙы, алымдарҙы ҡуллана белергә өйрәтеү (эргәһенә һалып, терәтеп ҡуйып, өҫтөнә һалып сағыштырыу һ.б.).

**СОЦИАЛЬ ДОНЪЯ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ**

Китапхана һәм музейҙар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Мәктәп, колледж, юғары уҡыу йорттары тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Мәктәпкә экскурсия ойоштороп уҡыусылар, уҡытыусылар, ғөмүмән, мәктәп тормошо менән таныштырыу.

Балаларҙы кеше эшмәкәрлеге өлкәләре (фән, сәнғәт, ауыл хужалығы, сәнәғәт, һ.б.) һәм уларҙың көнкүрештә, шулай уҡ баланың ғаиләһе, балалар баҡсаһы тормошонда тотҡан урыны, әһәмиәте тураһында аңлатыу.

Тәжрибә һәм практик эшмәкәрлек аша танышылған һөнәрҙәрҙең ябай ғына эш-хәрәкәттәрен башҡарып ҡарау (һыу, һауа, магнит менән ябай ғына тәжрибәләр үткәреү, бергәләп һүрәт төшөрөү, композиция әүәләү, бәләкәй төркөм балаларын кейендерешергә ярҙам итеү һ.б.).

Төрлө һөнәр кешеләренең эштәре тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Һәр һөнәр эйәһе үҙ эшен үтәгәндә сифатлы итеп эшләргә, үҙенең эшенә яуаплы ҡарарға, эшенән кешеләр ҙә, үҙе лә шатлыҡ, ҡыуаныс кисерергә тейеш икәнлекте төшөндөрөү.

Ябай ғына кимәлдә экономика нигеҙҙәре тураһындағы белемдәрен киңәйтеү (аҡса, уның тарихы, йәмғиәттәге роле, ғаилә бюджеты, кешеләрҙең материал һәм финанс яҡтан төрлө кимәлдә булыуы, һ.б.)

Башҡортостан һәм Рәсәй тураһындағы белемдәрҙе байытыу, үҫтереү. Иҫтәлекле урындар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың флагы, гимны, гербы тураһындағы белемдәрҙе нығытыу. Рәсәй һәм Башҡортостан бөйөк һәм күп милләтле ил тигән төшөнсәне үҫтереү. Башҡортостандың арҙаҡлы кешеләре.

Дәүләт байрамдары һәм Рәсәйҙең баш ҡалаһы - Мәскәү тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Ю.А.Гагарин һәм башҡа йыһан геройҙары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Рәсәй армияһы тураһындағы белемдәрҙе тәрәнәйтеү.

Башҡортостан - бай тарихлы һәм мәҙәниәтле республика, ул Рәсәй Федерацияһына инеүсе иң беренсе республика.

“Урал батыр” эпосы – донъя кимәлендәге әҙәби ҡомартҡы.

Ерҙең эволюцияһы тураһында ябай ғына төшөнсәләрҙе формалаштырыу (Ер шарының барлыҡҡа килеүе, үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһының эволюцияһы һ.б.). Тәбиғәттә һәм йәмғиәттә кешенең тотҡан урыны, төрлө халыҡтарҙың барлыҡҡа килеүендәге фараздар. Башҡорт ҡәбиләләре.

Сәнғәт ижады, уйын, продуктив эшмәкәрлектәр аша кешелек донъяһының тарихы менән таныштырыу. Балаларға Ер шары - беҙҙең дөйөм йортобоҙ һәм унда төрлө милләт халыҡтарының дуҫ йәшәүе тураһында һөйләү. Һәр халыҡтың мәҙәниәтен, телен, тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын хөрмәт итергә кәрәклекте аңлатыу. Башҡортостанда йәшәгән халыҡтар, уларҙың мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, милли кейемдәре, аштары һ.б.

Ерҙә йәшәгән һәр кем кешелек донъяһының ағзаһы икәнлекте төшөндөрөү. Башҡа илдәрҙә йәшәүсе балаларҙың тормошо менән таныштырыу. Балаларҙың хоҡуғы, уны яҡлаусы ойошмалар (опека, ЮНЕСКО) тураһында мәғлүмәттәр биреү. Донъяла һәм кем ирекле шәхес булып үҫешергә тейешле аңлатыу.

Тыуған илебеҙ Башҡортостан, балалар йәшәгән төбәк (ҡала/ауыл) менән, уларҙың тәбиғәте, халҡы, мәҙәниәте, иҫтәлекле урынлары, тарихы һәм йолалары менән таныштырыуҙы тәрәнәйтеү, киңәйтеү.

**ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ**

Көн һәм төн тураһында төшөнсәләр биреү, уларҙың Ерҙең Ҡояш һәм үҙе тирәләй әйләнеүенә бәйле булыуын аңлатыу. Һауа торошон тәбиғәт миҙгеленә бәйләп асыҡларға өйрәтеү.

Үҫемлектәр һәм йәнлектәр, тере организм булғанлыҡтан, тын алалар, туҡланалар, үҫәләр, үрсейҙәр. Һәр йән эйәһенең үҙ йәшәү мөхите бар: кешеләр – ауыл-ҡалаларҙа, үҫемлектәр, йәнлектәр – ялан-ҡырҙарҙа, болондарҙа, урманда, йылға-күлдәрҙә йәшәй.

Үҫемлектәр донъяһы тураһындағы төшөнсәләр формалашыуҙы нығытыу: уларға ҡояш яҡтыһы, йылылыҡ, дым, тупраҡ, ашлама кәрәк. Үҫемлектәр тупраҡта, һыуҙа үҫә; ҡышҡы шарттарға яраҡлаша (япраҡ ҡоя, тынлыҡ хәленә күсә).

Тәбиғәт мөйөшөндәге һәм тәбиғәттәге үҫемлектәрҙе тышҡы күренеше, төҙөлөшө буйынса айыра, әйтә белеү (ҡабығы, олоно, ботағы, япрағы һ.б.).

Туғайҙа үҫкән үләндәр, башаҡлы һәм шифалы үҫемлектәр менән танышыу дауам итә. Баҡсалағы сәскәләр тураһында, ҡый үләндәре тураһында аңлатыу.

Йәшелсә, емеш-еләк тураһында дөйөмләштерелгән төшөнсәләр, уларҙы үҫтереү, тәрбиәләү, уларҙың үҫеш стадиялары, тышҡы күренештәре, килтергән файҙалары тураһында әңгәмәләр.

Урман еләктәре, бәшмәктәре, уларҙың ашарға яраҡлы һәм ярамай торғандары тураһында төшөнсәләрҙе нығытыу.

Йылға-күл, урман, болон, яландарҙың, балалар баҡсаһы ихатаһы, урамының үҫемлектәр мөхите менән бәйләнешен аңлатыу.

Характерлы үҙенсәлектәре һәм сифаттары буйынса йорт һәм ҡыр хайуандары тураһындағы төшөнсәләрҙе системалаштырыу.

Төрлө йәнлектәрҙең ҡышлауға төрлөсә әҙерләнеүе (аҙыҡ туплау, май йыйыу, йөн ҡойоу (ташлау) һәм алмаштырыу, йоҡоға китеү, ҡоштарҙың йылы яҡҡа осоп китеүе, кеше торлаҡтары эргәһенәрәк урынлашыуы, балыҡтарҙың һыу төбөнә төшөүе, бөжәктәрҙең ағас ҡайырылары араһында ҡатып ҡалыуы һ.б.)менән таныштырыу.

Башҡортостандан башҡа ерҙәрҙә йәшәгән экзотик хайуандар менән таныштырыу *(дөйә, фил, ишәк).* Уларҙың тышҡы күренештәре, кәүҙә төҙөлөшө, кешенең файҙаланыу ысулдары аша таный һәм айыра белеү.

Ҡош төрҙәре тураһында дөйөм төшөнсәләр биреү: биҙәү өсөн (декоратив ҡош), йорт ҡоштары, ҡышлаусы, күсер ҡоштар.Уларҙы тышҡы күренештәре, холоҡтары, туҡланыу, үрсеү ысулдары һ.б. үҙенсәлектәре буйынса таный белеү.

Аквариум – балыҡтарҙың йәшәү урыны, мөхите. Ундағы балыҡтар менән танышыуҙы дауам итеү.

Бөжәктәр тураһындағы төшөнсәләр киңәйә: уларҙың туҡланыу төрҙәре (үҫемлектәр, сәскә һуты, бөжәктәр менән). Уларҙы төркөмләй, бер-береһенән айыра белеү.

Миҙгелдәрҙе йәнһеҙ һәм йәнле тәбиғәттәге, шулай уҡ кешеләр тормошондағы үҙгәрештәр буйынса билдәләргә өйрәнеү:

**Көҙ:** сентябрь айы көҙҙөң беренсе айы тигән төшөнсәне хәтерҙә нығытыу. Көҙ миҙгеленең башҡорт халҡының һынамыштары аша билдәләй, үҙгәрештәрен күрә белергә өйрәнеү (һыуытты; ҡырау төшә, ер , йыйылып торған һыуҙар туңа башлай, япраҡтар ҡойола).

Баҡса ҡыуаҡтарының ботаҡтарын киҫеү, ниңә шулай эшләргә кәрәклеген аңлатыу. Көҙҙән ултыртып ҡалдыра торған үҫемлектәрҙе ултыртыу (һарымһаҡ, йәшел һуған, кишер).

Тәбиғәт материалдарын йыйырға өйрәтеү (орлоҡтар, тубырсыҡтар, сәтләүектәр, япраҡтар).

**Ҡыш:** тәбиғәттәге миҙгел үҙгәрештәре тураһында белемдәрен үҫтереү (төн оҙон, көн ҡыҫҡа, һыуыҡ, һалҡын, боҙлауыҡ һ.б.)

Балаларҙың иғтибарын оҙаҡ емештәрен ҡоймай ултырған ағастарға (миләш, балан, һ.б.) йүнәлтеү. Был емештәрҙең ҡош-ҡорткa ризыҡ булыуын аңлатыу.

Ҡарҙың үҙенсәлеген билдәләргә өйрәтеү (һыуыҡ, ҡабарып торған, йомшаҡ, ҡойола, йәбешә һ.б.).

Февраль айында һауа торошоноң үҙгәреүен билдәләп үтеү (йә ҡояш яҡтырта, йә ел иҫә, йә булмаһа ҡар яуырға тотона, өй ҡыйыҡтарында боҙлауыҡ барлыҡҡа килә).

22 декабрь - иң ҡыҫҡа көн икәнлеген аңлатыу.

**Яҙ:** балаларға тәбиғәттең яҙ миҙгелендәге үҙгәрештәре тураһында һөйләү (ҡояш йышыраҡ яҡтырта һәм йылыта, умырзаялар сыға башлай, ағастар һәм ҡыуаҡтар бөрөләнә, боҙ китергә йыйына; тәлмәрйендәр, кеҫәрткеләр уяна; ҡоштар оя ҡора; күбәләктәр килеп сыға, ҡырмыҫҡалар уяна).

Термометр менән таныштырыу (бағаналағы терегөмөш һауа торошона ҡарап күтәрелергә һәм төшөргә мөмкин). Ағас-ҡыуаҡтарҙы ултыртҡанды уларҙың ботаҡтарын киҫкәнде күҙәтеү.

Тәбиғәт мөйөшөндәге үҙгәрештәрҙе күҙәтеү (бүлмә гөлдәре япраҡ бирә, сәскә ата һ.б.) Сәскәләрҙе тәрбиәләргә өйрәнеү.

Балаларҙы башҡорт халыҡ һынамыштары менән таныштырыу: «Оҙон боҙбармаҡ - оҙон яҙға» һ.б.

**Йәй.** Тәбиғәттә булған үҙгәрештәрҙе асыҡлау (оҙон көндәр, ҡыҫҡа төндәр, йылы, эҫе; ҡойма ямғыр, йәшен, йәйғор). Йәй көнө үҫемлектәргә үҫергә уңайлы шарттар булыуын аңлатыу.

Башҡорт халыҡ һынамыштары менән таныштырыу: «Ямғырҙан һуң йәйғор оҙаҡ торһа – һауа боҙолоуға, тиҙ юғалһа – яҡшы һауа торошона», «Кис серәкәйҙәр күп булһа-көн йылытыуға».

22 июнь – иң оҙон көн тип атала, был көндән һуң төн оҙоная, ә көн ҡыҫҡара башлай.

Кешеләрҙең баҡсалағы, баҫыуҙағы эштәре менән таныштырыу. Ололарға ярҙам итеү теләге уятыу.

### «ТЕЛМӘР ҮҪЕШЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

## Телмәр үҫтереү

**Телмәрүҫтереүсемөхит.**Телмәр саралары аша һөйләшеүҙе, аралашыуҙы үҫтереүҙе дауам итеү. Балаларға тирә-яҡ донъяның күп төрлө булыуы тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү.

Халыҡ кәсептәре әйберҙәре, мини-коллекциялар (төрлө материалдарҙан эшләнгән открыткалар, маркалар, тәңкәләр, уйынсыҡтар йыйылмаһы), иллюстрациялы китаптар (төрлө рәссамдар төшөрөүендәге әкиәттәр һүрәттәре), электрон аң-белем биреү саралары аша башҡорт телендәге видеояҙмалар, роликтар, йырҙар, спектаклдәр ҡарау һ.б. аша башҡортса һөйләшеү, аралашыу телмәрен үҫтереү.

Башҡортостандың, тыуған яҡтың (ҡаланың/ауылдың) иҫтәлекле урындарын сағылдырған фотолар, презентациялар, альбомдар;Өфөнөң, Мәскәүҙең элекке тормошон сағылдырған картиналар, һүрәттәр, музей экспонаттары менән таныштырыу, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү.

Баланың төрлө информация сығанаҡтарынан алған тәьҫораттары (телетапшырыу, яҡындарының һөйләүе, күргәҙмәләргә барып, балалар өсөн ҡуйылған спектаклдәр ҡарап), улар тураһында ябай ғына кимәлдәүҙ фекерен әйтергә өйрәтеү.

Көндәлек тормошта, уйнағанда балаларҙың  бер-береһенә ҡарата яғымлы мөнәсәбәттә булырға өйрәтеү (ғәфү үтенеү, рәхмәт әйтеү, хуплау әйтеү).

Балаларҙы төрлө бәхәстәрҙе, конфликтлы моменттарҙы дәлилләп, аңлатып сисергә өйрәтеү.

Яңы һүҙҙәр үҙләштереп, телмәрҙе байытыу.

**Һүҙлек эше.** Тирә-йүнде күҙәтеү аша кейем-һалым (көҙгө, яҙғы, ҡышҡы, йәйге кейемдәр), кешеләрҙең өйҙәге көндәлек эштәре (мал ҡарау, аш-һыу әҙерләү, өй йыйыштырыу), өлкәндәрҙең баҫыуҙа, фермала, заводта, фабрикала башҡарған хеҙмәттәре атамаларын, сифатын, эш-хәрәкәтен, эшләү рәүешен аңлатҡан һүҙ-төшөнсәләрҙе дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү.

«Ҡыш», «Яҙ», «Йәй», «Көҙ» темаларына үткәрелгән күҙәтеүҙәр балаға миҙгелдең төп билдәләрен белдергән һүҙҙәрҙе төшөнергә һәм ҡулланырға ярҙам итә.

Телмәрҙә (терминдың үҙе менән таныштырмайынса) бер үк мәғәнәле һүҙҙәр-синонимдар (яғымлы, һөйкөмлө) менән, шулай уҡ дөйөм төшөнсә белдергән һүҙҙәрҙе үҙ телмәрендә ҡуллана белергә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Балалар телмәренә антонимдар (ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр) индереү: ҡараңғы-яҡты, тәпәш-бейек; эшсән, тырыш, уңған.

Һүҙъяһалыш ысулдары менән таныштырыуҙы дауам итеү: һүҙҙәрҙе ҡушып – билбау, ҡулъяулыҡ; һүҙ яһаусы ялғауҙар ярҙамында – ташсы, уҡыусы, ҡайынлыҡ.

**Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү мәҙәниәтен тәрбиәләү.** Фонематикишетеү һәләтен үҫтереү, телмәр аппаратын формалаштырыу йүнәлешендә даими эшләү. Өндәр әйтелешен нығытыу буйынса күнегеүҙәр үткәреү. Башҡорт теленең барлыҡ һуҙынҡыларын, бигрәк тә ышҡыулы [ж, ш, щ, х, в, ф, ҙ, ҫ, һ, й, уа], ҡуш [ц, ч] тартынҡыларҙы дөрөҫ әйтергә иғтибар биреү. Шулай уҡ [с-з], [с-ц], [ш-ж], [ч-ц], [с-ш], [ж-з], [к-ҡ], [л-р] һәм шуның кеүек йыш ҡына бутап әйтелә торған өндәрҙе айыра белергә өйрәтеү, уларҙы аҫыҡ, дөрөҫ итеп әйтә алыуҙарына ирешеү.

Фонематик ишетеү һәләтен камиллаштырыу: балаларҙы билдәле өнгә һүҙ таба белергә, ошо өн булған һүҙҙе һөйләмдән айырып ала белергә һәм һүҙҙә ул өндөң урынын (һүҙҙең башында, уртаһында, аҙағында) билдәләй белергә өйрәтеү.

Өндәргә ябай ғына анализ биреү: һуҙынҡы өндәр һуҙылып әйтелә, уларҙы йырлап була; тартынҡы өндәр ҡаршылыҡ аша әйтеләләр.

**Телмәрҙең грамматик яҡтан төҙөлөшөн үҙләштереү.** Балаларҙы һөйләмдә эйә менән хәбәрҙәре һәм һөйләмдең башҡа киҫәктәрен яраштырып һөйләргә,

берлек һандағы һүҙҙәрҙе күплек формаһына әйләндерә белергә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Исемдәрҙе алмаштар менән алмаштырыу буйынса күнегеүҙәр үткәреү: Сания ҡалаҡ йыуа. Ул-ярҙамсы.

Балаларҙың һөйләмдәге һәр һүҙҙе үҙ урынына ҡуйып, ялғауҙарҙы дөрөҫ ялғап һөйләй белергә өйрәтеү.

Телмәрҙә ябай һәм ҡушма һөйләмдәр ҡулланырға өйрәтеүҙе дауам итеү.

Әкиәттәрҙе ролдәргә бүлеп һөйләгәндә геройҙарҙың кисерештәренә бәйле рәүештә интонацияны үҙгәртеп, кәрәкле урында пауза яһап һөйләшергә өйрәтеү.

**Бәйләнешле телмәр үҫтереү.** Диалогик һәм монологик телмәр формаларын камиллаштырыу. Һорауҙарға тулы, һәр кем ишетерлек һәм аңларлыҡ итеп, һорауҙарҙы ҡабатлатмайынса, яуап бирергә күнектереү эшен дауам итеү. Балаларҙың үҙҙәренең дә һорау бирә белеү күнекмәләрн нығытыу; телмәр, үҙ-ара аралашыу мәҙәниәтен тәрбиәләү.

Балаларҙы бәләкәй күләмле хикәйә һәм әкиәттәрҙе тәрбиәсе һорауҙарынан башҡа бәйләнешле, эҙмә-эҙлекле һәм тасуири итеп һөйләргә өйрәтеү.

Балаларҙы билдәле бер әйбер тураһында йәки сюжетлы һүрәттәргә ҡарап, тәрбиәсе өлгөһөндә йәки сюжетлы һүрәттәргә ҡарап, тәрбиәсе өлгөһөндә йәки бирелгән план һәм схема-модель нигеҙендә бәләкәй генә хикәйәләр төҙөп һөйләргә, иптәшенә йәки тәрбиәсегә фекерен үҙ һүҙҙәре менән әйтеп бирергә күнектереү.

Баланы үҙ кисерештәрен, хистәрен кәрәкле һүҙҙәр менән һөйләп бирергә өйрәтеү.

**Грамотаға өйрәтеү.** Һөйләм тураһында ябай төшөнсә биреү (грамматик билдә бирмәйенсә). Ике-өс һүҙҙән торған һөйләмдәр төҙөп, уларҙы һүҙҙәргә бүлеү. Һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеү. Ижектәрҙән һүҙҙәр төҙөү. Ижектәрҙең һәм һүҙҙәрҙең тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙән тороуон төшөндөрөү.

Ике һәм өс һүҙҙән торған һөйләмдәрҙең схемаһын төҙөргә һәм ошо схемаларҙы ҡулланып, һөйләм төҙөргә өйрәтеү.

Өндәрҙең билдәһе булған киҫмә хәрефтәр менән таныштыра башлау.

**НӘФИС ӘҘӘБИӘТ**

Нәфис әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләүҙе дауам итеү. Әҫәр геройҙары менән бергәләп шатланыу, ҡайғырыу, борсолоу, ҡыуаныу тойғолары кисереү һәләтен тәрбиәләү.

Әҙәби әҫәрҙәге төрлө һүрәтләү сараларына балаларҙың иғтибарын йәлеп итеү.

Яттан шиғыр һөйләгәндә, әҫәрҙәрҙе сәхнәләштергәндә тауыш, ым-ишара, бит мускулдары менән әҫәргә үҙ ҡарашын сағылдырып, күрһәтә белергә өйрәтеү.

Әҙәби жанрҙар тураһында төшөнсәләр биреү: әкиәт, хикәйә, ҡобайыр, һамаҡ, шиғыр, йомаҡ, мәҡәл.

**«ХУДОЖЕСТВОЛЫ-ЭСТЕТИК ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Сәнғәт төрҙәре менән таныштырыу

Сәнғәткә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләүҙе дауам итеп, уның ижади эшмәкәрлек булыуы һәм сәнғәттең төрлө төрҙәре тураһында төшөнсәләр биреү (көнкүреш өсөн зауыҡлы әйберҙәр эшләү сәнғәте, һынлы сәнғәт, әҙәбиәт, музыка, архитектура, театр, бейеү, кино, цирк, һ.б.).

Һынлы сәнғәт тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Рус һәм башҡорт рәссамдары әҫәрҙәре менән таныштырыу: И. Шишкин «Арыш», И. Левитан «Алтын көҙ», А. Саврасов «Ҡара ҡарғалар ҡайтты», В.Васнецов «Аленушка», «Батырҙар»; К.Дәүләткилдеев «Башҡорт һунарсыһы», Б.Домашников «Ҡыш», М. Елгаштина «Сим йылғаһы». Лотфуллин «Алтын көҙ», «Өс ҡатын», А. Кузнецов «Салауат Юлаевтан һорау алыу», «Динислам бабай», А. Ситдикова «Башҡорт балы», «Зәңгәр мендәрҙәр», А. Тюлькин «Башҡорт урамы», «Архиерей биҫтәһе», М.Нестеров «Ағиҙел йылғаһы».

Бәләкәй формалағы скульптура тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү (форма, пропорция, төҫ, хәрәкәт торошо һ.б.), китап биҙәүсе рәссамдар менән таныштырыуҙы дауам итеү (И. Билибин, Ю.Васнецов, В.Конашевич, Е. Чарушин, А.Мөхтәруллин, Ф.Ислахов, Л.Фролова, А.Василов һ.б.).

Халыҡ көнкүреш сәнғәте менән таныштырыу: кейеҙ баҫыу, келәм туҡыу, шәл бәйләү, ағас семәрләп биҙәү, таҫтамал сигеү, тире иләү һ.б.

Архитектура өлгөләре менән таныштырыуҙы дауам итеп, архитектура ҡоролмаларының төрлө тәғәйенләнешле булыуын (Карауан һарай, Конгресс-холл, Ләлә-тюльпан мәсете, Спорт-арена һарайы, Башҡортостан опера һәм балет театры һ.б.), йәшәү өсөн төҙөлгән йорттар, мәктәптәр, дауаханалар, санаторийҙар, магазиндар һ.б. тураһында төшөнсәләр биреү.

Ер шарында бөтә донъяға танылған билдәле архитектура ҡомартҡылары булыуы тураһында таныштырыу: Мәскәүҙәге Кремль, Санкт-Петербургтағы Исаакиев соборы, Францияләғы Эйфелево башняһы, Бөйөк Ҡытай стенаһы, Өфөләге Конгресс-холл бинаһы һ.б.

Зауыҡлы эшмәкәрлектә архитектура ҡоролмаларының матурлығын һүрәтләргә өйрәтеү: семәрле тәҙрә ҡапҡастары, өй ҡыйығы ситтәре, мөһабәт ҡапҡалар һ.б.

Зауыҡлы ижад итеүсе сәнғәт эйәләренең һөнәре тураһында төшөнсәләр (рәссам, композитор, артист, бейеүсе, йырсы, пианист, ҡурайсы, режиссер, архитектор һ.б.) биреү.

Һиҙеү-тойоу ағзалары үҫешенең сәнғәт төрөнә тәьҫире: йырҙы, музыкаль әҫәрҙе тыңлайҙар; һүрәтте ҡарайҙар һ.б.).

Сәнғәт төрҙәре һәм уларҙың үҫеш тарихы менән таныштырыу. Халыҡ һәм профессиональ сәнғәт менән таныштырыу, уларға ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, үҙ көсөн ниндәйҙер сәнғәт төрөндә һынап ҡарау теләге уятыу.

**ҺЫНЛЫ СӘНҒӘТ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ**

Һынлы сәнғәткә тотороҡло ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Предметты ҡул суҡтары ярҙамында тикшереп, өйрәнеп, уның нимәнән эшләнгәнлеген һәм ниндәй сифаттарға эйә булыуын белергә өйрәтеү.

Күренештәрҙе, предметтарҙы эстетик яҡтан образлы итеп ҡабул итергә, һынлы сәнғәт саралары ярҙамында һүрәтләргә өйрәтеү. Өйрәнелгән алымдарҙы ҡулланып, үҙ-аллы һүрәт төшөрөргә, әүәләргә, ҡорамалар йәбештерергә ылыҡтырыу.

Предметтың үҙенә ҡарап (натуранан); уның формаһын, дәүмәлен, өлөштәренең пропорцияһын дөрөҫ итеп биреп, һүрәт төшөрөргә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Күмәкләп ижад итеүҙе хуплау. Үҙенең эшендә етешһеҙлекте табып, төҙәтә белергә күнектереү.

**Предметлы һүрәт төшөрөү.**Предметтарға ҡарап һәм хәтер буйынса һүрәт төшөрөү. Күҙәтеүсәнлек тәрбиәләү, предметтарға хас һыҙаттарҙы билдәләй һәм рәсемдә уны сағылдырып, төшөрә белергә өйрәтеү (формаһын, пропорцияһын һаҡлау, альбом битендә дөрөҫ урынлаштырыу).

Рәсем төшөрөү ысулдарын нығытыу. Төрлө материалдар ҡулланып (*гуашь, акварель, күмер, аҡбур, фломастер, ҡәләм һ.б.*) һүрәт төшөрөү.

Ҡәләм менән тура һәм тулҡын һыҙыҡтарҙы ҡул суҡтарын төрлө йүнәлештә бороп төшөрә белеү; ҡыҫҡа, оҙон һыҙыҡтарҙы, бөҙрәләнгән түңәрәктәрҙе бармаҡтар ярҙамында башҡара белеү.

Төҫтәрҙең һәм улар сағылыштарының төрлө булыуын, төп төҫтәрҙе бер-береһенә ҡушып, төрлө буяу сағылыштарын алып булыуҙы төшөндөрөү. Төҫтәрҙең тәбиғәттә лә төрлөсә үҙгәреүен күҙәтеүҙе ойоштороу (бер үк предметты уйынсыҡ майҙансығында көҙөн, яҙын, ҡышын, йәйен);.

Төҫтәрҙең атамаларын әйтә, уларҙың айырмаһын, төрлө сағылыштарын билдәләй һәм рәсемдә ҡуллана белергә өйрәтеү.

**Сюжетлы һүрәт төшөрөү.** Сюжетлы рәсем төшөрөүгә өйрәтеүҙе дауам итеү. Предметтарҙың дәүмәл буйынса айырмаһын һүрәтләй белеү (турғай бәләкәй, ҡарға ҙур), кешеләрҙең, йәнлектәрҙең хәрәкәтен күрһәтеп төшөрөү.

Һүрәтте ҡағыҙҙа нисек урынлашҡан, шулай уҡ урынлаштырырға өйрәтеү, һүрәтләнгән предметтарҙың ҙурлығына иғтибарҙарын йәлеп итеү (ағас бейек, сәскә тәпәшерәк). Һүрәттә композиция төҙөгәндә кешеләрҙең, йәнлектәрҙең хәрәкәтен, үҫемлектәрҙең елгә эйелеүен дөрөҫ күрһәтеү.

Халыҡ ижадын һәм автор әҫәрҙәренең сюжетын дөрөҫ һүрәтләү һәләтен үҫтереү. Үҙ-аллылыҡты үҫтереү һәм композицияның темаһын, төҫөн үҙ-аллы һайлау.

**Декоратив һүрәт төшөрөү.**Халыҡ биҙәктәрен төҙөү: рус, башҡорт халыҡ биҙәктәрен айыра, төшөрә, буяй белеү. Көнкүреш әйберҙәре силуэттарын биҙәү.

Балаларҙа декоратив ижадты үҫтереү. Халыҡ сәнғәте менән (гжель, городец, хохлома) таныштырыуҙы дауам итеү. Халыҡ декоратив сәнғәтенең айырым төрҙәрендәге төҫтәрҙе айырырға һәм дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү. Төрлө формалағы ҡағыҙҙа, уйынсыҡтар һәм предметтар силуэтында композиция төҙөү һәләтен үҫтереү. Декоратив композиция төҙөгәндә халыҡ сәнғәтенең биҙәктәрен һәм төҫтәрен урынлы ҡулланырға өйрәтеүҙе дауам итеү.

**Әүәләү.** Предметтың төп һәм башҡа өлөштәренең пропорцияһын һаҡлап хәрәкәтләнеүен, кәүҙә торошон сағылдырып әүәләргә өйрәтеүҙе дауам итеү. Әүәләгән предметтың өҫтөн бармаҡтар һәм стека ярҙамында тигеҙләү, матурлау, биҙәкләү.

Бергәләп төрлө сюжетҡа скульптура төркөмөнән композиция төҙөп әүәләү. Ҡатмарлы формалы предметтарҙы әүәләгәндә пропорция һаҡларға, стека менән соҡоп биҙәргә өйрәтеүҙе дауам итеү.

**Декоратив әүәләү.** Декоратив әүәләү алымдарын үҫтереүҙе дауам итеү, төрлө әүәләү алымдарын ҡулланыу (һылау, соҡоп, тәрән рельеф). Балсыҡтан әүәләгәндә пластинаны таяҡса ярҙамында биҙәргә өйрәтеү. Төрлө төҫтәге пластилиндан һәм балсыҡтан предметлы, сюжетлы, коллектив композиция төҙөүҙе дауам итеү.

Ике-өс предметты әүәләп, уларҙан сюжетлы композиция төҙөү, әүәләнгән предметтарҙы халыҡ биҙәктәре һәм орнаменттары менән биҙәй белеүҙе камиллаштырыу.

**Ҡорама йәбештереү.** Предметты һәм берәй темаға бәйле сюжетты ҡорамаларҙан йәбештерә белеүҙе дауам итеү: альбом битендә дөрөҫ урынлаштырып, һәр өлөштөң пропорцияһын һаҡлап, эш итергә күнектереү.

Төрлө биҙәктәрҙе, орнаменттарҙы һәм композицияларҙы геометрик фигуралар һәм үҫемлектәр элементтарын ҡулланып төҙөү.

Ҡоштарҙы, йәнлектәрҙе балалар уйы буйынса йәки халыҡ сәнғәте өлгөһөндә йыйып, йәбештерә белеү.

Ҡағыҙҙы төрлө ысул менән ҡырҡыу, йыртыу, өҙөү, күләм биреп йомарлау, елем менән кәрәкле урынын һылап йәбештерергә өйрәтеү.

Ҡәләм менән предметтың силуэтын төшөрөп, мозаика ысулы менән йәбештереү.

**Биҙәү-ҡулланма ижады: ҡағыҙ һәм ҡатырға менән эш.** Дүртмөйөшлө,тура дүртмөйөшлө, түңәрәк формалы ҡағыҙҙы төрлө йүнәлештә бөкләү һәләтен үҫтереү (пилотка); төрлө фактуралы ҡағыҙҙы ҡулланыу, шаблон ярҙамында билдәләп эшләү, уйынсыҡтар төҙөргә өйрәтеүҙе дауам итеү. Төҫлө ҡағыҙ киҫәгенән предметтар эшләү (балаҫ, юл), уйынсыҡтар, сувенирҙар, байрам өсөн биҙәүестәр эшләгәндә төҫтәрҙе дөрөҫ һайлау.

Өлгө буйынса эшләү һәләтен үҫтереү. Оригами ысулын ҡулланып күләмле уйынсыҡтар эшләргә өйрәтеүҙе дауам итеү.

**Биҙәү-ҡулланма ижады: туҡыма менән эш.** Энәгә еп һаплау, төйөн төйнәү, төймә тегеү, ябай әйберҙәр тегеү һәләтен үҫтереү (ҡурсаҡ өсөн алъяпҡыс, орлоҡтар өсөн тоҡ), төрлө фактуралағы туҡыма киҫәген ҡулланып, аппликация эшләү, алдан уйланылған сюжеттың контурын аҡбур ярҙамында һыҙыу һәм дөрөҫ итеп ҡырҡыу алымдарын нығытыу.

**Биҙәү-ҡулланма ижады: тәбиғи материалдар менән эш.** Тубырсыҡтан, ботаҡтан, үләндән һәм башҡа тәбиғи материалдарҙан кешеләрҙең, йәнлектәрҙең, ҡоштарҙың һындарын эшләү һәләтен үҫтереү, дөйөм композиция төҙөү (әкиәт геройҙары, ялан), образдарҙы дөрөҫ тасуирларға өйрәтеүҙе дауам итеү. Күҙ алдына килтерә белеү һәм фантазияны үҫтереү. Материалдар менән һаҡ һәм һаҡсыл эш итергә өйрәтеү.

**ҠОРОЛМАЛАР ҠОРОУ ҺӘМ МОДЕЛЛӘШТЕРЕҮ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ**

Төрлө ҡоролмалар төҙөүгә теләк уятыу. Ҡоролмаларҙың төп һәм ярҙамсы өлөштәрен айыра, уларҙың үҙенсәлектәрен, формаһын, дәүмәлен, урынлаштырыу урынын билдәләп, беркетергә өйрәтеү, үҙ-аллы ижади эш итергә күнектереү.

Күмәкләп, парлап эшләү күнекмәләрен нығытыу: кемдең эштең ниндәй өлөшөн башҡарыуҙы билдәләү, алдан нисек ҡоролма төҙөүҙе планлаштырыу, бер-береһенә ҡамасауламай дөйөм планға ярашлы эшләүҙе ойоштороу.

Ҡулланышы бер үк булған предметты төрлө маҡсатҡа ярашлы итеп ҡороу (йәйәүлеләр өсөн күпер, ауыр йөк машиналары өсөн күпер, поезд үтер өсөн күпер).

Дөйөм темаға (сюжетҡа) бәйле ҡоролмалар төҙөү (урам, машиналар, өйҙәр һ.б.).

Төрлө пластмасс конструкторҙар менән таныштырыу. Һүрәт, тәрбиәсе әйтеүе буйынса һәм үҙе уйлап ҡоролмалар төҙөү.

Өлөштәре ағас сөйҙәр менән беркетелә торған ағас конструкторҙар ярҙамында йорт йыһаздарын, машиналарҙы һ.б. һүрәт, йәки схема, йәки тәрбиәсе әйтеүе буйынса төҙөү. Төҙөлгән ҡоролмаларҙы пластмасс тотҡостар һәм ағас сүкештәр ярҙамында сисеү.

Предметтың төҙөлөшөн күреп, уның ниндәй өлөштәрҙән тороуын билдәләй белеү.

### МУЗЫКАЛЬ ТӘРБИӘ

Балаларҙа төрлө жанрҙағы музыкаль әҫәрҙәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Музыка тәьҫире аҫтында алынған тәьҫораттарҙы киңәйтеү.

Йырлау тауышы аппаратын формалаштырыуға, музыкаға эйәреп хәрәкәт итеү күнекмәләрен үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

Ябай ғына кимәлдә музыкаль төшөнсәләр менән таныштырыу.

Ансамблдә (төрлө музыка ҡоралдарында) уйнарға өйрәтеү.

Йырҙарҙы, бейеүҙәрҙе үҙ-аллы башҡарыуға ынтылыш тәрбиәләү.

**Тыңлау.** Квинта - терция сиктәре эсендә көйҙөң моңон, яңғырау үҙенсәлеген, көсөн ишетә һәм айыра белеү һәләтен үҫтереүҙе дауам итеү. Өндәрҙең юғары, түбән яңғырау нескәлеген айыра белеү. Таныш әҫәрҙе таный белеү.

Балаларҙа музыкаль тәьҫирҙәрҙе байытыуҙы һәм музыкаль зауыҡ формалаштырыуҙы дауам итеү, музыкаль хәтерҙе үҫтереү. Фекерләү ҡеүәһен, күҙаллау, хәтер, ишетеү һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

Ябай ғына музыкаль төшөнсәләр (темп, ритм); музыкаль жанрҙар (опера,концерт, симфоник концерт), композиторҙар һәм музыканттар ижады менәнтаныштырыу.

Бейеүҙе (полька, вальс, халыҡ бейеүе), йырҙы, маршты айырып әйтә белеү һәм йөкмәткеһенең өлөштәрен таный белергә өйрәтеү (инеш, ҡушымта, аҙағы).

Вокаль музыка менән таныштырыу: башҡорт халыҡ йырҙары, башҡа халыҡ йырҙары, хәҙерге заман йырҙары, инструменталь музыка менән таныштырыу: фортепиано, баян, скрипка, ҡурай, оркестр менән таныштырыу: халыҡ инструменттары, тынлы һәм симфоник оркестр.

Башҡорт халҡының тормошонда ҡурайҙың, йырҙың, ҡурайсыларҙың тотҡан урынын күрһәтеү. Атаҡлы ҡурайсылар (Ишмулла Дилмөхәмәтов, Роберт Юлдашев,

һ.б.) башҡарыуында әҫәрҙәр тыңлау. Халыҡ йырҙарын һәм бейеүҙәрен башҡарыусы арҙаҡлы шәхестәр менән таныштырыу (Рәшиҙә Туйсина, Риф Ғәбитов һ.б.).

Ҡобайырҙар менән таныштырыу. Башҡортостан һәм Рәсәй Федерацияһының гимндары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Уларҙы көйө аша таный белеү.

Классик һәм бөгөнгө заман композиторҙарының балалар өсөн яҙған әҫәрҙәре менән танышыу.Балаларҙы Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Дәүләт гимндары менән таныштырыу.

**Йырлау.** Балаларҙы тасуири итеп, тыныс тауыш менән, талғын, еңел, ре$_{\text{ү}}$ – до$_{\text{ә}}$ диапазонында йырларға өйрәтеү. Тынды музыкаль фразалар араһында һәм йырҙың башында дөрөҫ итеп алып, фразаның аҙағына тиклем тоторға өйрәтеү. Йырҙы үҙ-аллы башлау һәм тамамлау. Яңғыҙ һәм бергәләп йырлау.

**Йыр ижады.**Халыҡ йырҙарына оҡшатып, үҙ-аллы көйҙәр сығарырға; таныш йырҙарҙы, музыкаль пьесаларҙы һәм бейеү көйҙәрен файҙаланып, өлгө буйынса, йәки унан башҡа бирелгән темаға көйҙәр уйлап сығарырға өйрәтеү.

**Музыкаль-ритмик хәрәкәтләр.** Бейеү хәрәкәттәре күнекмәләрен, бейеүҙә хис-тойғоно сағылдырып, музыканың характерына тап килтереп, ритмик хәрәкәтләнеү күнекмәләрен үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

Көйҙөң характерына ярашлы итеп ритмлы хәрәкәттәр башҡарыу һәләтен нығытыу. Бейеү хәрәкәттәрен өйрәтеү (аҙымдарҙы алмашлап атлау, полька, галоп, үксә һуғыу, бармаҡ сиртеү, тыпырлау һ.б.) Балаларға ошо хәрәкәттәрҙән торған бейеүҙәр өйрәтеү.

Милли халыҡ бейеүҙәре (рус, башҡорт, татар, белорус, украин һ.б.) менән таныштырыу.

Бейеү-уйын ижадын үҫтереү; йырҙарҙы, әҙәби әҫәрҙәрҙе сәхнәләштергәндә төрлө образдарҙы зауыҡлы итеп башҡарыу күнекмәләрен формалаштырыу.

**Музыкаль-уйын һәм бейеү ижады.**

Музыкаль үҫеште тәьмин иткән эшмәкәрлектең аңлайышлы төрҙәрендә (оркестрҙа уйнау, йырлау, бейеү хәрәкәттәре һ.б.) балаларҙың ижади әүҙемлеген үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

Төрлө характерҙағы музыкаға ярашлы импровизациялар уйлап табырға өйрәтеү (саңғысы, конькиҙә шыуыусы, һыбайлы, балыҡсы, хәйләкәр бесәй, асыулы кәзә бәрәсе һ.б.)

Йырҙың эстәлеген сағылдырыусы хәрәкәттәр уйлап сығарырға, күҙ алдына килтергән предметтар менән төрлө образдар тыуҙырырға өйрәтеү.

Хәрәкәттәрҙә музыкаль образдарҙы сағылдырыу ысулдарын үҙ-аллы эҙләргә өйрәтеү.

Музыкаль һәләтте үҫтереү; әүҙемлек һәм үҙ-аллылыҡ күрһәтеүҙе хуплау.

**Балалар музыка уйын ҡоралдарында уйнау.** Төрлө музыка уйын ҡоралдары ярҙамында башҡарылған һәм оркестр өсөн эшкәртелгән музыкаль әҫәрҙәр менән таныштырыу.

Балаларҙы металлофонда, һыбыҙғыла, бәрмә музыка ҡоралдарында (барабан, шөңгөр (бубен), шалтырауыҡ), башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында (ҡумыҙ, ҡурай,

думбыра, һ.б.) рус халыҡ музыка ҡоралдарында (өсмөйөш, ағас ҡалаҡ, дөңгөр, һ.б.) уйнарға өйрәтеү.

Ансамблдә, йә оркестрҙа музыкаль әҫәрҙе уйнарға өйрәтеү.

**«ФИЗИК ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ**

## Сәләмәт тормош тураһында башланғыс төшөнсә биреү

Балаларҙың һаулығын нығытыуҙы һәм сәләмәт йәшәйеш күнекмәләрен үтәргә күнектереүҙе дауам итеү.

Хәрәкәтләнеүҙә ижадилыҡ, үҙ-аллылыҡ, әүҙемлек үҫтереү. Спортҡа ҡыҙыҡһыныу һәм һөйөү тәрбиәләү.

Медицина хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүе аҫтында һәр баланың шәхси үҙенсәлектәренә ҡарап, төрлө сыныҡтырыу саралары үткәреү.

Көн һайын 10-12 минутлыҡ иртәнге гимнастика үткәреү.

Дәрестәр араһында һәм психик энергия күберәк талап ителгән дәрестәрҙә 1-3 минутлыҡ физминуткалар үткәреү.

Тейешле шарттар булдырыу мөмкинлеге булған осраҡта йөҙөргә өйрәтеү.

Баланың үҫеш кимәленә тап килтереп, көн эсендә тейешле хәрәкәтләнеүҙе ойоштороу.

Айына бер тапҡыр 40-ар минутлыҡ физкультуранан күңел асыу, йылына ике тапҡыр (ҡыш, йәй) бер сәғәтлек физкультура байрамыүткәреү.

## Физик культура

Балаларҙың сәләмәтлеген нығытыуҙы, физик үҫешен камиллаштырыуҙы дауам итеү. Көн һуҙымында әүҙем хәрәкәт эшмәкәрлегенә өлгәшеү. Хәрәкәт итеүҙең бөтә төрҙәрен (атлап йөрөү, йүгереү, шыуышыу, үрмәләү, һикереү, туп ырғытыу, уны тотоп алыу, сәпкә бәреү һ.б.) камиллаштырыу.

Тирә-йүндә үҙ торошон билдәләп, хәрәкәтләнә, тигеҙлек һаҡлап, күнекмәләр башҡара белеү.

Сафта йөрөгәндә хәрәкәт итеү йүнәлешен үҙгәртергә, сафҡа төрлөсә яңынан теҙелергә өйрәтеү.

Физкультура күнегеүҙәренең бөтә төрҙәрен дә үҙ-аллы башҡарырға өйрәтеү.

Хәрәкәт итеүҙең төп төрҙәрен нығытыу маҡсатында һәр бала менән шәхси эш үткәреү. Йөҙөргә, ике тәгәрмәсле велосипедта йөрөргә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Еңел атлетика комплекстарын, йүгереү, атлау, һикереү, сәпкә бәреү кеүек төп хәрәкәт төрҙәрен киң ҡулланыу.

Физик тәрбиә сараларында халыҡ уйындарын ҡулланыу. Хәрәкәтле уйындарҙы көн тәртибенең икенсе яртыһында йышыраҡ үткәреү. Ата-әсәләр менән кәңәшләшеп, медицина хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүе аҫтында балалар организмын сыныҡтырыуҙа традицион булмаған алымдар ҡулланыу.

**Хәрәкәтле уйындар.** Балаларҙы төрлө хәрәкәтле уйындарҙы һайлай белергә өйрәтеү (ярышыу элементтары менән), ошо уйындар уларға психофизик яҡтан үҫешергә булышлык итергә тейештәр (йылдамлыҡ, көс, тиҙлек, сыҙамлыҡ, һығылмалыҡ).Хәрәкәттәрҙә үҙенең кәүҙә торошон, хәрәкәтләнеү ысулдарын аңлы рәүештә арауыҡта дөрөҫ башҡара белергә өйрәтеү.

Таныш булған уйындарҙы иптәштәре менән берлектә ойоштора белеү, үҙҙәренең һәм дуҫтарынын һөҙөмтәләрен баһалай белергә өйрәтеү. Яңы уйындар уйлап сығарырға, хәрәкәттәрҙе төрлөләндерә белеүҙе хуплау.

Спорт уйындарына, күнекмәләренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү (бура уйыны, бадминтон, баскетбол, өҫтәл теннисы, хоккей, футбол).

**Й)КМӘТКЕ Б!ЛЕК.БЕЛЕМ-ТӘРБИӘ БИРЕ! ЭШЕНДӘ ?АТНАШЫУСЫЛАР ТАРАФЫНАН №АЙЛАП АЛЫН;АН )Л)Ш №ӘМ МИЛЛИ-Т)БӘК !:ЕНСӘЛЕКТӘРЕН СА;ЫЛДЫР;АН МАТЕРИАЛДАР.**

«Баш7ортостан – тыу4ан илем» программа3ында белем бире1 й0км2тке3е биш белем бире1 0лк2л2ре: социаль – коммуникатив, танып – беле1, художестволы – эстетик, телм2р 32м физик 19ешк2 б1леп бирел2.

Шул у7 ва7ытта программаны8 белем бире1 бурыстары 1т2леше ойошторол4ан ш040лд2р эшм2к2рлеге сикт2ренд2 ген2 т1гел, 2 балалар 32м 0лк2нд2р эшм2к2рлегенд2, к0н т2ртибе барышында балалар 16 аллы эшм2к2рлеген д2 к16 у8ында тота.

**Социаль- коммуникатив 0лк2.**

Соиаль - коммуникатив 0лк2не8 нигеб6ен 32р бер й2ш этабында баланы8 ти9тер62ре 32м 0лк2нд2р мен2н 16 теленд2 32м т0рл0 эшм2к2рлект2р62 аралашыуын т2шкил ит2. Бала4а кешел2р мен2н т0рл0 эшм2к2рлект2р62 аралашыу6ы8 сомаль – психологик позицияларын 16л2штере1г2, гражданлы7 той4о3он, 16 4аил23ен2, тыу4ан республика3ына, илен2 30й01ен формалаштырыу4а 32м «мин» концепция3ы юлында уны9 16а8ын ки82йте1г2 яр6ам ит2.

Социаль – коммуникатив белем бире1 0лк23ене8 д0й0м ма7саты

Балалар 0лк2нд2р 32м ти9тер62ре мен2н ту4ан телд2 й2ш этабына хас бул4ан 16енс2лекле формала аралашыуын булдырыу.

Баланы8 16 к0с0н2 ышаныу, 0лк2нд2рг2 32м ти9тер62рен2 7арата 16 7арашын булдырыу 32м баш7алар6ы8 эске той4о3он а8лау, 16ене8 той4о кисрешт2ре мен2н урта7лаша 32м идара ит2 беле1ен формалаштырыу.

!6 16е8де хеб6м2тл2ндере16е8 б0т2 т0р62рен тайпылыш3ыб 1т21, был хеб6м2тт2 16аллылы7, эшс2нлек зарур ик2нлеген а8лау, й2ш21 32м эш урынын 32р са7 т2ртипт2 тотоу6ы 4262тк2 индере1. Х21еф3еблек 7а4и62л2рен к0нк1решт2, т2би42тт2, й2ш2йешт2 7улланыу, 16-16ен 3а7лау 7а4и62л2рен ны4ытыу.

Кешел2р6е8 социаль- сы4ышына, раса3ына, милл2тен2, й2шен2, ш2хси 16енс2лект2рен2 ихтирам 32м сабырлы7 мен2н 7арау, балалар ба7са3ы ойошма3ында 16ене8 хо7у7турын а8лау, т2ртип 7а4и62л2рен 7уллана беле1, телм2р62 элементвр аралашу

этикетын 7улланыу. Халы7 йолплпрын, 40р0ф-4262тт2рен, тарихын, м262ни2тен 0йр2не1г2 тел2к уфтыу, баш7а милл2тк2 толерантлы булыу, 16ен й2м4и2т а4за3ы итеп тойоу.

Баланы8 16а8 19ешен2 ниге6 булып тор4ан гражданлы7 той4о3о, тыу4ан илен2, т0й2ген2, телен2, 4аил23ен2 ихтирам, 30й01, 4орурланыу той4о3он т2рби2л21.

Халы7 уйындары 0с0н к2р2кле шарттар тыу6ырыу, 7а4и62 буйынса, к1м2кл2п уйнар4а ылы7тырыу. Ду9лы7, н2фисле, 16аллылы7, ижадилы7, 7ы6ы73ыеыусанлы7, 216емлек сифаттарын т2рби2л21.

**Танып-беле1 0лк23е**

Танып-беле1 0лк23е балар6а тыу4ан Баш7ортостанды8 тарихына, м262ни2тен2, йолаларына, архитектура3ына 32м т26и42тен2 7ы6ы83ыныу уятыу6ы 16 эсен2 ала. Баланы8 танып беле1-тикшерене1 эшм2к2рлегене8 й0км2тке3ен2 милли м262ни2т элементтарын индере1 милли 16а9ы ю4ары ким2лд2 бул4ан ш2хес 32м уны8 рухи м262ни2тен формалаштырыу4а яр6ам ит2.

Танып беле1 0лк23ене8 д0й0м ма7саттарына

Баланы уратып ал4ан м0хитк2, тыу4ан я7ты8 й2нле 32м й2н3е6 т26и42т к1ренешт1рен2, объекттарына а8лы 7араш формалаштырыу – тир2-й1нд2ге 13бер62р6е8 16енс2леген, сифатын 32м улар6ы8 16-ара б2йл2нешен эбл2не1-икшере1 т2жриб23е аша а8лау 32м д0й0мл2штере1 булдырыу.Тир2-й1нд2ге 2йбер62р кеше эшм2к2рлегене8 3060мт23е ик2нлеген, кеше хе6м2тен, к0нк2р2ш2ен е8ел2йте1се машиналар, транспорт т0р62ре барлы4ын т0ш0нд0р01. Й2нле 32м й2н3е6 т26и42тк2, кешел2р тормошона йыл ми6гелд2ре йо4онто я3ауын билд2л2рг2 0йр2те1.

Донъяла4ы 32р н2м2не8 – т26и42т, й2м4и2т, кешел2р6е8 16-ара аралашып й2ш21 шарттарыны8 бер-бере3е мен2н б2йлебулыуын, 32р й2н эй23ене8 й2ш21 м0хите барлы4ын а8латыу.

Тыу4ан ил тура3ында т0шнс2 булдырыу – ауыл, 7ала, баш 7ала, республика 32м уны8 урынлаш7ан урыны, архитектура3ы, и9т2лекле урандары, хужалы7 тарма7тары, м262ни 32м тарихи 7омарт7ылары, данлы7лы кешел2ре тура3ында м24л1м2т бире1. Баш7ортостан республика3ы 32м баш7а республикалар Р2с21 Федерация4ына берл2шк2н, улар6ы8 баш 7алалары32м д21л2т там4алары – флаг, герб, гимндары барлы4ын, унда т0рл0 милл2т халы7тары 40р0ф-4262тт2рен, к2с2б2н, м262ни2тен, телен 3а7лап ду9тарса й2ш21ен т0ш0нд0р01. Ер шарында т0рл0 д21л2тт2р, унда й2ш2г2н халы7тар, улар6ы8 ш040лд2ре тура3ында башлан4ыс т0ш0нс2 булдырыу.

**Телм2р 19тере1 0лк23е**

Балалар6ы8 телм2рен милли-т0б2к компоненттарын таянып, д21л2т 32м ту4ан теленд2 белем бире1, 2с2 теленд2 30йл21 7е123ен 32м аралашыу телм2рен 19тере1, т0рл0 жанр6а4ы художестволы 262би2т мен2н таныштырыу, баш7орт, рус 32м Баш7ортостан Республика3ында й2ш2г2н баш7а халы7ты8 292р62рен2, баш7орт халы7ауы6-тел ижадына –

2ки2тт2рен2, легендаларына, 2йтемд2рен2, м272лд2рен2, ауы6-тел 7омарт7ыларына 7ы6ы73ыныу уятыу6ы 16 эсен2 ала.

Телм2р 19тере1 0лк23ене8 д0й0м ма7саттары

Ту4ан тел 0нд2рен ишете1, асы7, т26и4и интонация мен2н2 2йте1. Баш7орт телене8 3у6ын7ыларын – ыш7ыулы, 7уш тартын7ылар6ы д0р09 2йте1г2 и4тибар бире1.

Т27дим ителг2н тема буйынса э6м2-э6леклк, тулы 30йл2мд2р мен2н 30йл21 32л2тен 62лдырыу. №0йл2мд2 эй2 мен2н х262р6е 32м 30йл2мде8 баш7а ки92кт2рен яраштырып 30йл2рг2, берлек 32м к1плек 3андарына 2йл2ндер2 белерг2 0йр2те1. Телм2р62 ябай 32м 7ушма 30йл2мд2р 7улланыу6ы система4а 3алыу.

Фонематик ишете1 32л2тен камиллаштырыу – билд2ле 0нг2 316 таба, ошо 0н бул4ан 3166е 30йл2мд2н айырып ала беле1 32м 31662 урынын билд2л21.

Монологик 32м диалогик телм2р6е 19тере1, 316 байлы4ын арттырыу 32м уны актив 30йл21 эшм2к2рлегенд2 7улланыу. Ту4ан телде м262ни 32м аралашыу сара3ы булара7 формалаштырыу. Баш7орт телен к0нд2лек й2ш2йешт2, й3м4и2т тормошонда, хе6м2т эшм2к2рлегенд2 16 аллы фай6алана беле1.

Кешел2р мен2н 3аулы7 3орашыу, хушлашыу, 16ене8 3орауын, тел2ген белдере1, р2хм2т 2йт2 беле1, аралаш7анда кешене8 исем-ш2рифен 2йтерг2 0йр2т216е дауам ите1.

Н2фис 262би2т 32м ауы6-тел жанр6ары мен2н таныштырыу, улар6ы айыра беле1. 292р62ге эпитет, са4ыштырыу ке1ек би62кт2рг2, ту4ан тел байлы4ына и4тибар ите1. 292р6е эстетик той4о мен2н 7абул ите1, й0км2ткеЗен2, ва7и4а4а, персонаждар 7ылы4ына 16ене8 ш2хси м0н2с262тен 2йт2 беле16е артабан 19тере1.

Телм2р 19тере1г2 яр6ам ите1се м0хит булдырыу - т0рк0мд2 китапхана м0й0ш0 ойоштороу, 09т2лм2 м24л1м1т алырлы7 т0рл0 7ы6ы7лы 2йбер62р урынлаштырыл4ан м0й0ш, тикшере1-эксперимент 1тк2ре1 м0й0ш0 ойошторoу.

**Художетсволы-эстетик 0лк2**

Художестволы-эстетик 0лк2 Баш7ортостан Республика4ыны8 милли м262ни2те мен2н берлект2 7арала 32м 16 алдына ошондай бурыстар 7уя:

- уратып ал4ан ысынбарлы77а, к1ренешт2рг2 Баш7ортостан хал7ыны8 с2н42т 292р62рен2 эстетик 7араш формалаштырыу

- балалар6ы Баш7ортостанды8 3ынлы, музыка, театр с2н42тен2, ауы6-тел ижадына й2леп ите1

- с2н42т жанр6ары, с2н42тте8 т0рл0 тарма4ында4ы тасуирлау саралары тура3ында4ы белемд2рен 19тере1.

№1р2тл21 эшм2к2рлегене8 д0й0м бурыстары

- балалар6а с2н42тк2 7арата 7ы6ы73ыныу уятыу, ижади зауы7ты 19тере1

- халы7 к0нк1реш с2н42те мен2н таныштырыу

- 3ынлы с2н42т т0р62ре мен2н таныштырыу.

Баш7ортостанда й2ш2г2н баш7а милл2т – татар, сыуаш, мордва, мари, рус халы7 би621-7улланма с2н42тене8 би62кт2рен таныу. Рус халы7 би62кт2ре – дымка, городец, хохлома, филимон, полхово-майдан, гжель мен2н таныштырыу.

Т0рл0 с2н42т эй2л2рене8 30н2ре т2ра3ында т0ш0нс2л2р бире1.

Балалар6а матурлы77а ынтылыусы хи-той4олар 19тере1се м0хит булдырыу.

Музыка буйынса белем бире1 эшм2к2рлегене8 д0й0м бурыстары

- баш7орт хал7ыны8 донъя ким2ленд2ге музыкаль мира9ы мен2н таныштырыу 32м м262ни2тен2, музыкаль с2н42тен2 ылы7тырыу ихтыяжын булдырыу

- балалар6ы тыныс, тал4ын йырлар4а, тынды фразалар ара3ында алыр4а, к0й60 д0р09 итеп баш7арыр4а, 0йр2нелг2н йыр6ар6ы я84ы6 32м к1м2кл2п йырлар4а 0йр2те1

- т0рл0 музыкаль уйындар, бейе162р, йыр6ар аша баланы8 музыаны тойоу 32л2тен 19тере1

- музыка 7оралдарында ябай 4ына к0й62р62е я84ы6 32м т0рк0мд2р62 уйнар4а 0йр2те1

- Баш7ортостан хал7ыны8 вокаль, инструменталь, оркестр музыка3ыны8 и8 я7шы 0лг0л2рен таныу

- Баш7ортостан халы7тары музыка3ына 7ы6ы73ыныу 19тере1.

**Физик 19еш 0лк23е**

Физик 19еш 0лк23ене8 башлан4ысы булып с2л2м2т тормош алып барыу6ы формалаштырыу, элементар 7а4и62л2р6е 32м нормалар6ы 1т21, физик сифаттар, т0п х2р2к2ттр2р, халы7 уйындары, спорт т0р62ре, х2р2к2тле уйындары тура3ында к16аллау6ы 19тере1 тора.

Физик 19еш 0лк23ене8 д0й0м ма7саты

Балалар6ы8 3аулы4ын ны4ытыу 32м с2л2м2т й2ш21 р21ешен формалаштырыу.

Баш7орт хал7ыны8 ш040л0нд4, 40р0ф-4262тт2р2енд2, тормошонда са4ыл4ан х2р2к2т к1некм2л2рен 16л2штере1.

Баш7орт халы7 уйындары, ауы6-тел ижады, н2фис 262би2те, с2н42т аша, балар6ы8 енси айырма3ын и92пк2 алып, к2р2кле сифаттар 19тере1.

Балалар6а х2р2к2тл2не1г2 тел2к, ынтылыш уятыууны8 аша организмды8 ны4ыныуын, матурайыуын, к0сл2не1ен тойор4а, 7ыуаныс кисерерг2 0йр2те1.

Баш7ортостанды8 к1ренекле спортсылары 32м спорт командалары мен2н таныштырыу.

Халы7 уйындарыны8 д2ртле й2ш2йеш, 32р я7лап йылдам 19еш сы4ана4ы, рухи т2рби2 алыу сара3ы, к0с-42йр2тте, та9ыллы7ты 19терг2н хе6м2т м2кт26е булыуын а8латыу.

## Развитие устной речи

При обучении русскому языку детей-дошкольников используются два вида речевой деятельности: аудирование (слушание с пониманием) и говорение. Связь между ними устанавливается путем подбора разнообразных упражнений с учетом речевых возможностей и интересов детей данной возрастной группы.

*Обучение аудированию* (слушанию с пониманием) предполагает выработку навыков восприятия на слух (с опорой на наглядность) содержания небольших связных высказываний монологического, диалогического характера. В процессе аудирования дошкольники знакомятся с элементами образцовой звучащей речи.

Программа определяет содержание обучения аудированию, впроцессе которого включаются образцы русской речи разных жанров -рассказов, сказок, стихов, загадок, считалок и т. п. Материал для аудирования озвучивается с голоса воспитателя, магнитофоннойзаписи (в чтении мужского, женского, детского голоса).

Понимание текста детьми выясняется постановкой вопросов к нему.

*Обучение говорению* осуществляется одновременно с аудированием. Задача обучения говорению - привитие дошкольникам первоначальных навыков устной диалогической и монологической речи наоснове воспринимаемых на слух образцовых текстов воспитателя.

В процессе обучения аудированию и говорению обращается особое внимание:

- на формирование звуковой культуры речи, т. е. приучение детей к восприятию звуковой стороны слышимой речи (своей и чужой), развитие слуховой памяти и адаптирование речевого аппарата к особенностям русского языка;
- на выработку общих речевых навыков с соблюдением темпа и ритма речи;
- на правильное произношение русских гласных звуков [а], [о], |у| [ы] и согласных звуков [ч'], [щ'], [ц] и на произношение слов сложных по своей звуковой структуре в соответствии с орфоэпическими нормами.

При работе **над словом** уточняется, обогащается и активизируется словарь детей. В программе предусматривается последовательность ввода слов: слов, обозначающих предметы, признаки по качеству, действий, признаков по действию, предлогов со значением места и направления и т. д.; проводится работа по приведению слов в **грамматически** верное сочетание с другими словами и ознакомлению со фразовыми средствами связи при составлении текстов.

При обучении детей-башкир русской разговорной речи необходимо опираться на родной язык в процессе объяснения речевых ситуаций, постановки органов речи при произношении звуков, звукосочетаний, слов, при предупреждении и преодолении интерферирующего (отрицательного) влияния родного языка, при переводе некоторых трудных слов. Однако нужно постепенно ограничивать говорение на родном языке и пользоваться им в исключительных случаях.

В старшей группе предусматривается усвоение детьми примерно 400 - 450 слов, в подготовительной к школе группе - 450-500 слов.

В процессе работы над предложением и связной устной речью вырабатываются речевые умения: отвечать на вопрос воспитателя; составлять предложения при пересказе знакомых сказок, рассказов; придумывать элементарные текстык сюжетным картинкам и иллюстрациям; случаям из жизни самих детей; пересказать стихи, считалки с соблюдением русской интонации.

## Структура программы

Программа для изучения русского языка детьми старшего дошкольного возраста рассчитана на 72 часа в каждой возрастной группе. Содержание программы состоит из 4-х блоков: "Природа и мы", "Я познаю себя", "Солнечная система",

“Человек и земля”. Блоки распадаются на темы, темы - на подтемы.

Особое место в программе уделяется национально-региональному содержанию обучения: знакомство с государственными символами Башкортостана и России, культурой русского и башкирского народов и т. д.

В приложении к программе дан перечень слов для активного усвоения.

Требования к умениям и навыкам дошкольника-выпускника

Выпускник научится:

1) произносить все звуки русского язык как изолированно, так и в составе слов;
2) применять около 900 слов в практической речи;
3) строить фразы и предложения с правильной интонацией и ударением;
4) различать род, число, падежи, предлоги ***в, на, с, к, над, под, за, из-за,из-под, между, около;*** уметь употреблять местоимение ***он, она, они;***применять глаголы настоящего и будущего времени по лицам, прошедшего-по родам и числам; употреблять формы родительного и винительного падежей существительных; согласовывать прилагательные с существительными в роде и числе; согласовывать числительные с существительными; правильно употреблять числительные; выражать принадлежность к определенному лицу, давая утвердительные и отрицательные ответы;
5) понимать русскую речь, давать элементарное описание предмета (явления, ситуации), указывая на существенные признаки;
6) рассказывать о себе, о семье, о друзьях, об играх и игрушках, о животных, о своей деятельности, о знакомых литературных произведениях;
7) знать культуру русского и башкирского народов через знакомство с безэквивалентными словами;
8) знать национальные символы Республики Башкортостан и Российской Федерации.

## ҠЫҪҠАСА ПРЕЗЕНТАЦИЯЛАУ

Программаның йөкмәткеһе

тәрбиә һәм аң-белемгә өйрәтеүҙе мәҙәнилек (культуросообразность) принцибына таяна: тәрбиә эше халыҡтың тарихы, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре,

йолалары, традициялары нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Аң-белемгә өйрәтеү барышында баланы кешелектең донъяуи рухи һәм әхлаҡи үҙҡиммәттәре менән таныштырыу, улар тураһында ябай ғына төшөнсәләр биреү, көндәлек йәшәйештә уларҙы күҙәтергә, яҡшыны насарҙан, матурлыҡты йәмһеҙлектән, дөрөҫлөктө алдаҡсылыҡтан һ.б. айырырға, уларға ҡарата үҙ фекерен билдәләп, асыҡлап, аңлата белергә күнектереү тора. Шулар нигеҙендә балала шәхси холоҡ-фиғел һыҙаттарын формалаштырыу ҡарала.

Программала мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн ойошторолған психологик һәм педагогик эштең йөкмәткеһе белем биреү өлкәләре буйынса («Социаль-коммуникатив үҫеш», «Тирә-йүнде танып-белеү үҫеше», «Телмәр үҫеше», «Художество-эстетик яҡтан үҫеш», «Физик үҫеш») бирелә. Һәр белем биреү өлкәһенең төп маҡсаты, бурыстары  һәм йөкмәткеһе балаларҙың йәш төркөмдәренә ярашлы тематик блоктарҙа күрһәтелә.

Баланы шәхес итеп үҫтереүгәпрограммала төп урын бирелә. Балала үҙ-үҙенә ышаныу, тормошҡа ҡарата әүҙем ҡарашлы булыу, тормош ҡыйынлыҡтарын еңел сисергә ынтылырға тырышыу, һәр нәмәгә ҡарата үҙ фекерле булыу һәм уны яҡлайбелеү һәләтен тәрбиәләү тора.

Программа йөкмәткеһендәтыуған илгә ҡарата һөйөү, уның үткәне, бөгөнгө ҡаҙаныштары менән ғорурланыу тойғолары тәрбиәләүгә, күп милләтле халыҡтар дуҫ булып йәшәгән, матур тәбиғәтле, донъяла танылған илдәр Рәсәй һәм Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәр ҙур урын бирелгән.

Программала кескәйҙәрҙе әхлаҡи һәм рухи яҡтан тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелә: ата-әсәләргә ҡарата һөйөү, яратыу тойғолары уятыу, ололарҙы хөрмәтләү, кескәйҙәргә ярҙамсыл булыу кеүек һыҙаттарҙы тәрбиәләү ҡарала.

Уҡыу, белем алыу – тормошта иң кәрәкле ҡиммәттәрҙең береһе икәнлеген төшөндөрөү аша программала балала аң-белемгә ҡарата ынтылыш тәрбиәләүгә, донъяны танып-белеүгә, йәшәү дәүерендә үҙенең шәхси үҫешен, профессионал кимәлен үҫтереүгә һәр саҡ теләк булыуына йүнәлеш бирелә.

Программаның төп йүнәлештәренең береһе булып баланың һаулығын һаҡлау һәм нығытыу эшен ойоштороу тора. Балаларға ябай ғына кимәлдә һаулыҡтың кеше өсөн ҙур байлыҡ булыуын, һаулыҡты һаҡлау өсөн дөрөҫ һәм хәүефһеҙ итеп йәшәргә өйрәнеү, файҙалы әҙәп ҡағиҙәләрен үҙләштереү, дөрөҫ туҡланыу, көн тәртибен тейешенсә ойоштороу һәм үтәү, физик яҡтан сыныҒыу, хәрәкәтләнеү кәрәклегентөшөндөрөү һәм программаға ярашлы уларҙы формалаштырыу күнекмәләренә өйрәтеү бурысы ҡуйыла.

Программаның **төп маҡсаты** булып кескәйҙәргә бала саҡ дәүерен ошо осорға хас булған рәүештә йәшәп үткәреү өсөн тейешле шарттар тыуҙырыуҙыкүҙ уҢында тота. Кешенең шәхес булараҡ формалашыуына бала саҡта нигеҙ һалына, ул балалыҡтан ҡыуаныс, шатлыҡ, илһам, дәрт алып, физик һәм психик яҡтан үҫергә, тирә-йүнде танып-белергә һәм аң-белем даирәһен үҫтерергә, кешеләр менән дөрөҫ мөнәсәбәттәр ҡорорға, йәшәйештә үҙ урынын таба белергә өйрәнә. Был маҡсаттар кескәйҙәр эшмәкәрлегенең төрлө төрҙәрендә: уйында, үҙ-ара аралашыуҙа һәм һөйләшеүҙә, хеҙмәттә, танып-белеүҙә-эҙләнеүҙә, эшмәкәрлектең продуктив

төрҙәрендә (художество-эстетик үҫештә, ҡоролмалар төҙөүҙә һ.б.), музыкала, нәфис әҙәбиәт менән танышыуҙа тормошҡа ашырыла.

Программаның маҡсаттарына ирешеү өсөн түбәндәге бурыстарҙы хәл итеү кәрәк:

- баланың һаулығын һаҡлауҙы, кескәйҙәрҙең бер-береһе һәм ололар менәнынығай мөнәсәбәттә булыуҙы һәм уларҙың төрлө яҡлап үҫешкимәлентәьмин итеүҙе ойоштороу;

- балаларҙы асыҡ күңелле, алсаҡ, ҡыҙыҡһыныусан, әүҙем, тырыш, эскерһеҙ итеп тәрбиәләү өсөн төркөмдәрҙә уларҙың бер-береһенә һәм ололарға ҡарата ихтирамлы һәм мөләйем ҡарашлы мөнәсәбәттә булыуын ойоштороу;

- тәрбиә һәм аң-белемгә өйрәтеү эшенеңһөҙөмтәһе нәтижәле булһын өсөн балалар эшмәкәрлеген төрлөләндереү һәм уларҙы берләштереп үткәреү;

- балалар баҡсаһында тәрбиә һәм аң-белем биреү процесын ижади рәүештә ойоштороу;

- тәрбиә һәм аң-белем биреүҙә дидактик материалдарҙың төрлөлөгө һәм уларҙы ҡулланыу ысулдары балаларҙың шәхси һәләтен асырға һәм ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндерергә ярҙам итеүҙе ойоштороу;

- баланың ижад емешен хөрмәт менән ҡабул итеү;

- ғаилә менән балалар баҡсаһы тәрбиә һәм аң-белем биреү эшендә бер үк талаптар ҡуйып, бергә эш итеү;

- балалар баҡсаһы һәм башланғыс мәктәп эшендә күсәгилешлекте һаҡлап эш итеү;

Программа эстәлеге ике өлөштән тора: беренсе өлөшөндә балалар мотлаҡ үҙләштерергә тейешле булған (60%) федераль кимәлдә тәҡдим ителгән һәм федераль реестрға ингән Төп мәктәпкәсә белем биреү өлгө программаһы материалдарына ярашлы алынған (Н.Е.Веракса, Т.С.Комарова, Э.М Дорофеева редакцияһындағы “Тыуғандан – мәктәпкә тиклем” программаһы, 2019 й.) йөкмәтке бирелә. Икенсе өлөшөндә (40%) белем-тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли-төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар бирелә. Һәр ике өлөштә бирелгән материалдар бер-береһенең йөкмәткеһен тулыландырып, асыҡлап, балаларға тирә-йүнде танып-белергә, улар нигеҙендә үҙ-аллы төрлө һығымталар яһарға һәм шул рәүешле уларҙың аҡыл-зиһен кимәлен үҫтерергә ярҙам итеүҙе күҙаллай. Был программалар: “Баш7ортостан - тыу4ан илем” м2кт2пк2с2 й2шт2ге балалар 0с0н Баш7ортостан Республика3ын 0йр2не1 программа3ы. (Ф.№. А6набаева, Г.Ш. 2лб2кова, 2.Р. Буранбаева, К.Ф. Мортаева), Парциальная программа обучения русской разговорной речи в башкирских детских дошкольных образовательных учреждениях (Давлетбаева Р. Г.,

Азнабаева Ф. Г.Каримова Я. С., Кагарманова Ф.), Парциальная программа Е.А.Дудко «Рисуй со мной».

**ҒАИЛӘ ҺӘМ БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ АРАҺЫНДАҒЫ ҮҘ-АРА БӘЙЛӘНЕШ**

Баланы шәхес булараҡ үҫтереү өсөн иң мөһим шарттарҙың береһе булып ғаилә һәм балалар баҡсаһы араһындағы үҙ-ара бәйләнештең нисек бер-береһенә ыңғай тәьҫир итеүе, йәки йоғонтоһо тора.

Төп маҡсат булып, балалар баҡсаһы педагогтары һәм ғаилә ағзалары араһында тығыҙ һәм нәтижәле үҙ-ара бәйләнеште формалаштырыуға кәрәкле шарттар булдырыу, ата-әсәләрҙең компетентлығын (бала тәрбиәләү буйынса килеп тыуған төрлө социаль-педагогик проблемаларҙы сисә белеү һәләтен) үҫтереү; ата-әсәләрҙең хоҡуҡтарын аңлауҙы һәм хөрмәтләүҙе тәьмин итеү тора.

Ата-әсәләрҙең һәм педагогтарҙың бер-береһен ғәйепләүҙе, бала тәрбиәләүҙә ҡулланылған алымдарҙы бергәләп кәңәшләшмәй эшләүҙебулдырмай, тулы хоҡуҡлы партнерҙар берҙәм эш итеүҙе ойоштороу кәрәк.

Балалар баҡсаһы һәм ғаилә араһындағы үҙ-ара бәйләнештең төп бурыстары:

- ғаиләлә һәм балалар баҡсаһында балалар тәрбиәләүҙә, уларҙы аң-белемгә өйрәтеүҙә, һәр төрлө үҫтереүсе эшмәкәрлек барышында килеп сыҡҡан һорауҙарға, педагогик ситуацияларға ҡарата ата-әсәләрҙең фекерен өйрәнеү;

- педагогтарҙы һәм ата-әсәләрҙе балалар баҡсаһы шарттарында һәм ғаиләлә тәрбиәләүҙең иң отошло тәжрибәләре менән таныштырыу, шулай уҡ тәрбиә һәм аң-белемгә өйрәтеү эшендә килеп тыуған ҡыйынлыҡтар тураһында мәғлүмәт биреү, уларҙы булдырмау юлдарын өйрәтеү;

- педагогтарҙы һәм ата-әсәләрҙе тәрбиәләү һәм аң-белемгә өйрәтеү процесының көнүҙәк мәсьәләләре менән системалы рәүештә таныштырып тороу, уларҙы тормошҡа ашырыуҙа балалар баҡсаһының һәм ғаиләнең мөмкинлектәре тураһында һөйләшеүҙәр үткәреп тороу;

- педагогтар һәм ата-әсәләр араһындағы бәйләнеште нығытыу һәм үҫтереү маҡсатында балалар баҡсаһында йөкмәткеһе һәм формаһы төрлө булған хеҙмәттәшлек итеү саралары һәм уларҙы ойоштороу шарттары булдырыу;

- районда (ҡалала, республикала) ойошторолған төрлө сараларға ата-әсәләрҙе йәлеп итеү һәм мәктәпкәсә белем биреү өлкәһендәге проблемалар, ҡаҙаныштар менән таныштырыу;

- баланың төрлө ынтылыштарына һәм ихтыяждарына ҡарата иғтибарлы мөнәсәбәт күрһәткән ата-әсәләрҙе дәртләндереү, хуплау, ошо ихтыяждарҙы ғаиләлә ҡәнәғәтләндереү өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыу.

**Ғаилә менән балалар баҡсаһы араһындағы бәйләнештең төп йүнәлештәре һәм формалары**

Балалар баҡсаһы ғаиләнең тәрбиәүи мөмкинлектәре менән таныш булһа, ә ғаиләлә үҙе балаһын ышанып тапшырған балалар баҡсаһы тураһында етерлек кимәлдә мәғлүмәттәр булған осраҡта, үҙ-ара бәйләнештең уңышлы булыуы мөмкин.

Бындай бәйләнеш бала үҫешендә бер-береһенә ярҙам итергә һәм дөйөм бурыстарҙы бергәләп тормошҡа ашырырға ярҙам итә.

Ике яҡтың да тәрбиә һәм бала үҫеше өлкәһендәге белем кимәлен камиллаштырыуға түбәндәге саралар ярҙам итә:

- анкеталар, иншалар, әңгәмәләр аша социаль-педагогик диагностика үткәреү;
- балаларҙың ғаиләһенә барыу, йәшәү шарттары менән танышыу;
- балалар баҡсаһында асыҡ иштектәр ойоштороу;
- төрлө йыйылыш-осрашыуҙар үткәреү.

**Бала тәрбиәләүҙә ҡатнашыусы ололарҙың үҙлөкһөҙ белем алыуын камиллаштырыу**

Хәҙерге замандың тиҙ үҙгәреүешарттарында, ата-әсәләр һәм педагогтар үҙҙәренең белемдәрен үҫтереү өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләргә тейеш.

Ата-әсәләрҙең белемен арттырыу программаларын түбәндәге принциптарға таянып төҙөү һәм тормошҡа ашырыу мөһим:

- маҡсатлылыҡ - ата-әсәләр белемен күтәреүҙең маҡсаттарын һәмөҫтөнлөклө бурыстарын билдәләү;
- адреслылыҡ - ата-әсәләрҙең белемгә булған ихтыяждарын иҫәпкә алыу;
- аңлайышлылыҡ — ата-әсәләрҙең программала ҡаралған уҡыу материалын үҙләштереү мөмкинлектәрен иҫәпкә алыу;
- индивидуалләштереү — ата-әсәләрҙең белемдәре һәм һәләттәрененңкимәленән сығып, уҡытыуҙың эстәлеген, алымдарын һәм программаның үҙләштерелеү темптарын үҙгәртеү;
- педагогтарҙың һәм ата-әсәләрҙең белемен камиллаштырыу программаларының эстәлегенә һәм уға төҙәтмәләр индереүгә ҡағылышлы ҡарарҙарҙы тәҡдим итеүҙә, тикшереүҙә һәм ҡабул итеүҙә бергә ҡатнашыуы.

Ата-әсәләрҙе уҡытыуҙың төп формаларына лекциялар, семинарҙар, мастер-кластар, тренингтар, проекттар, уйындар һ.б. инә.

**Педагогтарҙың, ата-әсәләрҙең, балаларҙың берҙәм эшмәкәрлеге**

«Педагогтар-ата-әсәләр-балалар» өсмөйөшөндә күп яҡлы уртаҡ эшмәкәрлектең төп маҡсаты булып баланың шәхси ынтылыштарын һәм ихтыяждарын ғына түгел, шулай уҡ ата-әсәләрҙең һәм педагогтарҙың да теләген ҡәнәғәтләндереү тора.

Дөйөм эштәр күп төрлө традицион һәм инновацион формаларҙа ойошторолорға мөмкин (акциялар, ассамблеялар, музыка һәм шиғриәт кисәләре, ғаилә менән мәҙәниәт һәм сәнғәт сараларында ҡатнашыу, ғаилә клубтары, һорау һәм яуап кисәләре,салондар, студиялар, байрамдар, саф һауала йөрөүҙәр, экскурсиялар, проект эшмәкәрлеге, ғаилә театры, һ.б.).